# Ағиҙел

Өфө,
май
2009

5 (1034)


ӘҘӘБИ-НӘФИС ӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ


Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республика ы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Роберт БАЙЫМОВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаçары),*
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ,
Фәнил ҠОҘАҠАЕВ,
Ноғман МУСИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире),*
Әмир ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип),*
Тамара Ғәниева, Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррирҙәре),*
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир),*
Харис Сәғитов *(баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса  урынбаçары)*,
Зилә Йәнбәкова *(корректор),*
Рәйсә Камалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар),*
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе),*
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар).*

Журнал Башҡортостан Республика ының Матбуғат  әм киң мәғлүмәт министрлығында
1992 йылдың 10 декабрендә теркәлде.
Таныҡлыҡ № 646.

---

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды  әм биттәргә  алынды.
Баçырға ҡул ҡуйылды 01.05. 2009. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70х100 1/16.
“Times” гарнитура ы.  Офсет ысулы менән баçылды.
Шартлы баçма табаҡ 15,6. Иçәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 5 370 экз.  атыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0056.09.

---

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакция ы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

---

Баçма Матбуғат  әм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль
агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке
Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

---

Башҡортостан Республика ының «Өфө полиграфкомбинаты»
дәүләт унитар предприятие ында баçылды.
(450001, Башҡортостан Республика ы,
Өфө ҡала ы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в ГУП РБ «Уфимский полиграфкомбинат»
(450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, пр.Октября, 2).

---

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р /с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

©«Ағиҙел», 2009 (5, 1034)

# БЫЛ АНДА:

*Башҡортостан яҙыусыларының дөйөм йыйылышынан*


**Рауил Бикбаев.** Уртаҡ хәстәрҙәр бергә туплай. ..........................................6
**Хәсән Назар**. Әҙәбиәтебеҙҙең йөрәге. ..........................................................10
**Сабир Шәрипов**. Быуындар бәйләнеше ныгын ын. .......................................15
**Миңлеғәли Нәҙерғолов.** Күпмелер алға барабыҙ шикелле... ......................20
**Рәдиф Тимершин**. Көлгән кеше — күркәм... ...............................................23
**Рәшит Сабит.** Ышаныс менән йәшәйек. ........................................................25
**Наил Ғәйетбай**. Пьеса йыйынтыҡтары юҡ! ..................................................28
**Факи а Туғыҙбаева.** Ик еҙ-сик еҙ күңел яҡтылығы. .............................32
**Владимир Денисов.** Бергәлеккә ни етә. ..........................................................36
**Айҙар Хөсәйенов.** Тәржемәләү үҙенсәлектәре. ...............................................38
**Фәнил Күзбәков**. Маҡсаттарыбыҙ изге әм бер үк! ........................................40
Башҡортостан Республика ы яҙыусыларының 2008 йыл йомғаҡтары буйынса дөйөм йыйылышы резолюция ы


ШИҒРИӘТ


**Мәүлит Ямалетдин.** "А , ул төндөң сағыу балҡыштары..." Шиғырҙар. ..........................................................................................42
**Рәшит Шәкүр.** Скрипка моңо. Хикәйәт. ..........................................................49
**Рамай Ҡа ир.** Ҡояш — усаҡ. Шиғырҙар. ........................................................57


СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР


**Ғәлим Хисамов**. А ура Мазда. Роман. Аҙағы. ................................................60
**Салауат Әбүзәр**. Ҡиәмәт. Хикәйә. .....................................................................100
**Замир Низаметдинов**. Утыҙ йыл уҙғас... Ҡайтауаз. Хикәйә. ..........................109


«АҒИҘЕЛ» КОНКУРСЫ

*«Күңелемдә — донъя сере»*


**Ринат Сөләйманов**. Яҙ. Шиғырҙар. .....................................................................116
**Гөлназ Мусина**. Нығ булырға саҡырыу. Шиғырҙар. .........................................118


БЕҘҘЕҢ ЮБИЛЯРҘАР


**Сәлимйән Ғүмәров**. Мәғарифҡа арналған ғүмер (*Ғалим Әхмәр Аҙнабаевҡа 75 йәш*). ..........................................................................119


БЕҘҘЕҢ КАЛЕНДАРЬ


**Таң ылыу Ҡарамыш**. Моңдоң йәне — мөхәббәт *(Рәмзилә Хисаметдинованың тыуыуына 60 йыл)*. .....................................122
**Рәүеф Ша иев**. Ижади ма ирлыҡ *(Күренекле ғалим, педагог, атаҡлы фольклорсы Марат Мин ажетдиновтың тыуыуына 75 йыл)* .....124
**Зәки Әлибаев**. Заман йырсы ы *(Мөслим Мараттың тыуыуына 100 йыл)* ...........................................................................................134


ӘҘӘБИ МИРАҪ


**Шәриф Бикҡол**. Ҡайтарал ам әгәр. Шиғырҙар. .................................136
**Ғәли Ибра имов**. Кинйә. Тарихи роман. III китап. Бүгәсәү батша анаты. Дауамы. ..........................................................139


ПУБЛИЦИСТИКА


**Фәйруша Хужин**. «Ватан өсөн, Сталин өсөн, алға!» Башы. ...................163


СӘНҒӘТ


**Клара Әсфәндиәрова**. «Рухы көслө халыҡ — еңеүсе». ............................173
**Тамара Ғәниева**. Ижад офоҡтары. ..............................................................183


МУЗЕЙҘАР – МӘҘӘНИӘТЕБЕҘ КӨҘГӨ Ө


**Фәнис Янышев**. Тауҙар ҙа уны ағына. ......................................................186


ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:


*Материалы собрания писателей Башкортостана*

**Р. Бикбаев.** Нас объединяют общие интересы; **Хасан Назар.** Сердцевина литературы; **С. Шарипов.** Пусть крепнет связь поколений; **М.Надергулов.** Идти вперед, оглядываясь назад...; **Р. Тимершин.** Кто смеется, тот красив; **Рашит Сабит.** Давайте жить с надеждой; **Наиль Гаитбай.** Нет сборников пьес!; **Ф. Тугузбаева.** Неисчерпаемы наши святочи; **В. Денисов.** Вместе мы – сила; **А. Хусаинов.** Требования переводу высокие; **Ф. Кузбеков.** Добрые помыслы – наша опора. Резолюция по итогам собрания 2009 года писателей Республики Башкортостан.

ПОЭЗИЯ

**Маулит Ямалетдин** *(стихи)*, **Рашит Шакур** *(сказание)*, **Рамай Кагир** *(стихи)*.

ПРОЗА

**Галим Хисамов.** Ахура Мазда (*роман). Окончание.*
**Салават Абузар.** Судный день *(рассказ).*
**Замир Низами.** Эхо *(рассказ).*

КОНКУРС "АГИДЕЛИ"

*В душе – тайна мира*

**Р. Сулейманов, Г. Мусина** *(стихи).*

НАШИ ЮБИЛЯРЫ

**С. Гумеров.** Судьба, посвященная просвещению *(ученому А. Азнабаеву 75 лет).*

НАШ КАЛЕНДАРЬ

**Т. Карамышева.** Душа поэзии – любовь *(60 лет со дня рождения Р. Хисаметдиновой).*
**Р. Шагиев.** Мастерство критика *(75 лет со дня рождения известного ученого, педагога, фольклориста М.Мингажетдинова).*
**З. Алибаев.** Певец современности *(100 лет со дня рождения Муслима Марата).*

ЛИТЕРАТУРНОЕ НАСЛЕДИЕ

**Шариф Биккул.** Если можно возвратить *(стихи).*
**Г. Ибрагимов. Кинзя.** Послы Пугачева *(исторический роман. III книга). Продолжение.*

ПУБЛИЦИСТИКА

**Ф. Хужин.** "За Родину, за Сталина – вперед!".

ИСКУССТВО

**К.Асфандиярова.** "Духовно сильный народ – победитель".
**Т. Ганиева.** Горизонты творчества.

МУЗЕИ – ЗЕРКАЛО КУЛЬТУРЫ

**Ф. Янышев.** И горы тоскуют по нему...

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА


---


**Телефондар:**

Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары әм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Шиғриәт әм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтер – 277-78-90 (факс)



● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.

● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай әм кире ҡайтарылмай.

● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күр әтеү мотлаҡ.

● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етеш еҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.

# Башҡортостан яҙыусыларының дөйөм йыйылышынан

*Башҡортостан Яҙыусылар союзының ойошторолоуына – 75 йыл. Республика әҙиптәренең ағымдағы йылдың 27 мартындағы дөйөм йыйылышы ла ошо юбилейҙы лайыҡлы билдәләү рухында үтте.*

*Унда Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе Рауил Бикбаев 2008 йылдың әҙәби йомғаҡтарына арналған доклад өйләне. Артабан ижади секциялар етәкселәре Х. Назар (шиғриәт), С. Шәрипов (проза), Н. Ғәйетбай (драматургия), В. Денисов (рус телле яҙыусылар берләшмә е), Р. Сабит (татар телле яҙыусылар берләшмә е), Ф. Туғыҙбаева (балалар әҙәбиәте), М. Нәҙерғолов (әҙәби тәнҡит), А. Хөсәйенов (тәржемәселәр төркөмө), Р. Тимершиндың (сатира әм юмор) отчеттары тыңланды. Фекер алышыуҙа и ә "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Ә. Әминев, Сибай яҙыусылар ойошма ының яуаплы сәркәтибе Х. Тапаҡов, Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте директоры З. Тимербулатов, "Бельские просторы" журналының баш мөхәррире Ю. Горюхин, Ш. Бабич исемендәге йәштәр премия ы лауреаты Л. Абдуллина үҙ алды. Мәртәбәле трибунанан күп милләтле әҙәбиәтебеҙ яулаған уңыштар барланды, кәмселектәр аналды, ғөмүмән, әҙәби процесты борсоған проблемалар күтәрелде, киләсәккә бурыстар асыҡланды.*

*Йыйылышта Башҡортостан Республика ы Хөкүмәтенең гуманитар әм социаль мәсьәләләр бүлеге мөдире Буранбай Күсәбаев сығыш я аны, Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү институты ректоры Фәнил Күзбәков тәбрик әйтте. Йыйын тарафынан 2008 йылдың әҙәби йомғаҡтары буйынса резолюция ҡабул ителде.*

*Вәғәҙә ителгәнсә, ҡай ы бер телмәрҙәр, нигеҙҙә, секциялар етәкселәренең отчеттары менән еҙҙе лә таныштырабыҙ, хөрмәтле журнал уҡыусылар.*

**Рауил БИКБАЕВ,**
Башкортостан Яҙыусылар союзы идара∞ы рәйесе

# Уртаҡ хәстәрҙәр бергә туплай

Хөрмәтле иптәштәр!

Беҙ бөгөн йылдың әҙәби йомғаҡтары тура ында фекер алышырға йыйылдыҡ.

Башҡортостандың бөгөнгө рухи тормошо әҙәби ваҡиғаларға бай. Март айында ғына ла бик йөкмәткеле кисәләр үтте. Бер йома Баязит Бикбайҙың 100 йыллығына арналған тантанала мәш үр классигыбыҙҙы иҫкә алып хәтеребеҙҙе яңырттыҡ, икенсе йомала Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең 100 йыллығы айҡанлы ойошторолған кисә әҙәбиәтебеҙҙең яҡты байрамына әйләнде. Шул уҡ көндәрҙә республикабыҙҙың төрлө тарафтарында ижади осрашыуҙар гөрләп барҙы. Мәҫәлән, Әбйәлил районының Ташбулат ауылында яҡташтары арҙаҡлы ғалим Зиннур Нурғәлинды, Туймазы төйәге Муса Сиражиҙы ихлас алҡышланы. Бөгөн мәш үр фольклорсы Әхмәт Сөләймәновты 70 йәше менән ҡотлаясаҡбыҙ. Сибай ҡала ы хакимиәте әм төбәк яҙыусылар ойошма ы тарафынан ентекле әҙерлек, ҙур программа менән үткәрелгән ижади осрашыуҙар уҡыусыларыбыҙҙың әҙәбиәтебеҙгә оло ихтирамын тағы ла нығыраҡ раҫлап ҡыуандырҙы, шағир-әҙип үҙенең яуаплылығы хаҡында ҡат-ҡат уйландырҙы.

Уҙған йылдағы әҙәби йомғаҡтар тура ындағы үҙемде быйылғы ваҡиғаларҙан башлауым теманан ситләшеү булмаҫ, тип уйлайым. Былтырғы шатлыҡ-борсолоуҙар быйыл да дауам итә, әҙәби күренештәр бер-бере е менән айырылғы ыҙ рәүештә үрелгән. Шундай бәйләнештән тыш эҙмә-эҙлекле үҫеш юҡ. Сибайҙағы шиғри осрашыуҙарҙың әр бере е ғүмерҙә онотолмаҫлыҡ байрам булып хәтерҙә аҡланасаҡ. Шулай ҙа бер ваҡиға тура ында айырым әйтеп үткем килә.

Башҡорт дәүләт университетының Сибай институтында студенттар әм уҡытыусылар беҙҙе майҙан тултырып ҡаршы алды. Уларҙың ихлас сәләмләүҙәренән уң ошо майҙанда үҙ әйткәнемдә мин бер нәмәгә бигерәк тә хайран ҡалдым. Был уҡыу йортона килгән әр кемде ике бөйөк шағир: бер яҡта – Шәйехзада Бабич, икенсе яҡта Рәми Ғарипов әйкәле ҡаршы ала.

Донъя буйлап байтаҡ йөрөлдө, нисәмә быуат тарихтары булған атаҡлы университеттар менән танышырға насип булды. Ләкин минең бер генә ҡалала ла юғары уҡыу йорто алдында бер юлы ике шағир әйкәленең ҡаршы алғанын күргәнем юҡ.

Сибай институты – күп яҡтан уникаль белем усағы ул. Ректор Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов үҙенең фекерҙәштәре менән бында ҡыҫҡа ваҡыт эсендә башҡалар өсөн үрнәк булырлыҡ әйбәт традициялар барлыҡҡа килтереп өлгөргән. Белем биреү менән бергә, иң мө име тәрбиә эштәренең үҙәктә булыуы, уҡытыу әм тәрбиә система ында халыҡсан нигеҙгә таяныу, йәш быуындың күңелендә боронғоларҙан килгән әҙәп ҡағиҙәләрен нығытыу әм үҫтереү – былар махсус өйләшеүҙе, был тәжрибәне өйрәнеүҙе әм киң файҙаланыуҙы талап итә.

Былар хаҡында уйлағанда әлеге күренеш күҙ алдымдан китмәй. Уҡырға килгән күпме йәштәрҙе Шәйехзада Бабич менән Рәми Ғариповтың аҡ әйкәлдәре ҡаршы ала. Киләсәккә юл ярыусы яңы быуындарға шағирҙар үҙҙәренең изге фатихаларын бирә.

Әҙәбиәттең төп вазифа ы, ауыр әм яуаплы миссия ы ла нәк ошоларҙан ғибәрәт түгелме уң?

Йәнә шуны ы хәтергә килә. Беҙҙә әҙип ҡаршы алған тағы ла бер юғары уҡыу

йорто бар бит әле. Мин алдында ҡа арман әҙиә Дәүләтшина әйкәле торған Бөрө дәүләт социаль-педагогик академия ын әйтәм. Башҡортостан Республика ында шағирҙарға әм яҙыусыларға, тимәк, әҙәбиәткә ҡарата бына ошондай оло ихтирам йәшәй икән, әҙиптәргә ошолай ышаныс әм өмөт менән ҡарайҙар икән, бындай мөнәсәбәт үҙе үк ижадтың бурыстары, үҙгә талапсанлыҡ әм яуаплылыҡ тура ында тағы ла нығыраҡ уйландыра.

Башҡорт әҙәбиәте әр саҡ ил хәлдәре, халыҡ яҙмышы тура ындағы борсолоу, бөгөнгө әм киләсәк хаҡында хәстәрлек менән йәшәне. Былар ис кенә лә яңғыра-уыҡлы үҙҙәр түгел. Тарихи үсеш юлының ҡай ы ғына дәүерен байҡа аң да, әр осорҙо борсоған үҙәк мәсьәләләрҙең әҙәбиәттәге сағылышын күрә ең, образлы үҙҙең туҡтау ыҙ хәрәкәттәге ваҡыттың үҙе менән бәхәсләшеү, уны художестволы ынландырып ҡалыу әләтенә инана ың. Әҙәбиәт еҙ заман — тарих төпкөлдәрендә мәңгелеккә эҙ еҙ юғалған заман ул.

уңғы егерме йылда халҡыбыҙ ҡатмарлы эҙләнеүҙәр әм тарихи ҡаҙаныштар юлын үтте. Башҡортостан Республика ы тигән сәйәси күренеш яңы йөкмәтке менән тулыланды. Яңы Башҡортостан өсөн фиҙакәр көрәш юлында яҙыусылар туранан-тура ҡатнашты. Ләкин был ваҡиғаларҙың, бары ынан да бигерәк замандың, әҙәби йылъяҙмала мәңгеләштерелеп ҡалыуы мө им.

Бына ошо образлы йылъяҙмаға тағы ла бер тере быуын — 2008 йылғы әҙәби күренештәр өҫтәлде.

Әҙәби йылъяҙманың был быуыны Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы Зәйнәб Биишеваның тыуған яҡтарында әҙибәнең 100 йыллығына арналған ғәйәт ил ам-лы, тәрән мәғәнәле осрашыуҙар менән башланып китте. Өфөлә, Нефтселәр ара-йында, Президент М.Ғ. Рәхимов сығыш я аған кисә шулай уҡ киң ҡолас әм күтәренкелек менән үтте.

Зәйнәб Биишеваның 100 йыллыҡ тантаналары әле 2007 йылдың аҙағында уҡ Нефтекамскиҙа башланды, республиканың төрлө тарафтарында дауам итте. Уҙған йыл Назар Нәжмиҙең, Әнғәм Атнабаевтың, Ғайса Хөсәйеновтың, Тимер Йосоповтың, Гөлфиә Юнысованың .б. юбилей кисәләре бер-бер артлы уҙғарылды. Ғайса Хөсәйенов үҙенең 80 йәшен Башҡортостандың халыҡ яҙыусы ы булып ҡаршы алды. Әбйәлил районында Шафиҡ Әминев-Тамъяниҙың 150 йыллығына арналған осрашыуҙар был бик үҙенсәлекле талантты беҙҙең замандаштарға тағы ла нығыраҡ яҡынайтты.

Юбилей кисәләренең, осрашыуҙарҙың күпселеге — байрам ғына түгел, әҙәбиәттең сағыу тантана ы, халыҡ ара ында үҙен тағы ла нығыраҡ раҫлауы ул. Уларҙың ә әмиәтен иң элек бына шул күҙлектән ба аларға тейешбеҙ. Яҙыусы үҙенең кәрәклеге, китаптың халыҡ йәшәйешендәге зарури рухи ихтыяжға әйләнеүе — юбилейҙар ваҡытында ижадсы бына ошо ҡаты ынауҙарға дусар ителә. Ваҡыт ынауын үткән әҫәрҙәр томдарға тупланып донъя күрә.

2008 йылда Зәйнәб Биишеваның, Назар Нәжмиҙең, Нәжиб Асанбаевтың, Әнғәм Атнабаевтың, Александр Филипповтың айланмаларының айырым томдары, Мөхәмәтша Буранғоловтың әҫәрҙәр йыйынтығы баҫылып сыҡты. Ирек Кинйәбулатовтың "Заман тауышы", Факи а Туғыҙбаеваның "Ваҡыт тамғалары" исемле китаптары уҙған әҙәби йылдың күренекле ваҡиғаларынан аналырға хаҡлы.

Махсус барлай башла аң, хәҙерге әҙәби процестың ни тиклем емешле икәнлеген тағы ла асығыраҡ күрә ең. Күҙ алдына килтерегеҙ: "Китап" нәшриәтендә былтыр проза, шиғриәт, балалар әҙәбиәте, публицистика әм әҙәбиәт ғилеме буйынса 113 йыйынтыҡ баҫылып сыҡкан. Журналдарҙа әм гәзиттәрҙә урын алған әҫәрҙәр — үҙҙәре оло донъя. "Ағиҙел" журналында бер йылда дүрт роман донъя күргән — башҡорт әҙәбиәтенең үҫеш юлында бындай хәлдең булғаны бармы икән?

Танылған прозаиктар менән бергә роман жанрына Рәлис Ураҙғолов, Флүр Ғәлимов ымаҡ йәшерәк быуын яҙыусыларҙың тотоноуы киләсәк үҫешкә өмөт әм ышанысты нығыта. Флүр Ғәлимовтың "Ватандаш" журналында баҫылған әм айырым китап булып сыҡҡан "Яңы башҡорт" исемле романы әҙәбиәтебеҙ өсөн өр-яңы теманы яҡтыртыуы менән ә әмиәтле булды.

Башҡортостандан тыш, яҙыусыларыбыҙ әм шағирҙарыбыҙҙың әҫәрҙәре Мәскәүҙә, Ҡазанда, Силәбелә, Ырымбурҙа сыҡты. Башҡорт театрының тамашалары хатта Ҡытайҙа алҡыштар яуланы. Башҡорт китабы Париждарға барып етте.

Тағы ла Зәйнәб Биишева исемендәге нәшриәткә – донъяла дәүләт ҡурсалауында башҡорт китабына юл асыусы берҙән-бер ойошмаға әйләнеп ҡайтам. Былтыр бында бөтә е 301 китап донъя күргән. Шуларҙың 290-ы дәүләт заказы буйынса баҫылған.

унғы ваҡытта туҡтау ыҙ зарланыу күптәрҙең ғәҙәтенә әйләнеп китте: "Тегене е етмәй, быны ы килешмәй" .б. Риза ыҙлыҡ белдерергә сәбәптәр тормошта әр ваҡыт етерлек, киләсәктә лә улар бөтмәйәсәк. Ләкин булғанына шөкөр итергә, ирешелгән ҡаҙаныштарыбыҙҙы аңлай, ба алай белергә лә кәрәк бит. Беҙҙең Башҡортостанда йыл айын өс йөҙләп китап сыға, шуларҙың йөҙҙән ашыуы – әҙәби әҫәрҙәр, республикала унғы дәүерҙә төрлө телдәрҙә әллә күпме яңы журналдар, гәзиттәр барлыҡҡа килде, тип өйлә әң, ҡалын-ҡалын антологияларыбыҙҙы, томдарҙы, яҙыусылар хаҡындағы ҙур белешмә баҫманы бүләк ит әң, Рәсәйҙәге күпселек республикаларҙа әм өлкәләрҙә ҡәләмдәштәребеҙҙең хайран ҡалыуҙарының сиктәре юҡ. Улар бит әҙәби китаптар ғына түгел, хатта мәктәп дәреслектәрен дә иркенләп сығара алмайынса ауыр иҡтисади шарттарҙа көн күрәләр. Ә беҙ ҡай ы саҡта булғандың ҡәҙерен белеп еткермәйбеҙ. Туҡтау ыҙ мыжырға әм таптырырға түгел, әлеге нәшриәтебеҙгә, журналдарыбыҙға әм гәзиттәребеҙгә мөмкин тиклем сифатлы әҫәрҙәр бирергә, яуаплылыҡ, талапсанлыҡ хаҡында нығыраҡ уйланырға ине. Журналда баҫылған романдарҙың йәки шиғырҙарҙың анынан бигерәк художество юғарылығы нығыраҡ ҡыуандыр ын, нәшриәттә етлекмәгән йыйынтыҡтарға юл бөтөнләй биклән ен ине. Ташландыҡ баҫыуҙарҙы сүп баҫҡан ымаҡ, матбуғат ҡарау ыҙға әйләнмә ен, уны сейле-бешле яҙмалар ырып алма ын ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, быларҙың күбе е әлегә хыял ғына булып ҡала.

Яҙыусыларыбыҙҙың китаптарын нәшер итеүҙә яңы серияларҙың булдырылыуы ҡыуандыра. Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын ҡаршылау алдынан Президент Указы буйынса бөгөн иҫән яугирҙарҙың әҫәрҙәрен сығарыуға махсус финанс бүленде. Ошо нигеҙҙә былтыр 17 авторҙың китабы баҫылып сыҡты. Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, төрлө юбилейҙарға бәйле баҫмалар донъя күрҙе. Арзанныраҡ хаҡҡа атып алырлыҡ "Халыҡ китабы" серия ы ойошторолдо. Былтыр ошо төркөмдән уҡыусылар Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесын ҡулға алды. "Аҡмулла эҙҙәре"нән серия ы ла Президент Указынан уң тыуҙы.

"Йәштәр тауышы" серия ының булдырылыуына йәштәр генә түгел, барыбыҙ ҙа өйөндөк. Йыл айын ун йәш авторҙың үҙ китабын ҡулына алыуы элекке замандарҙа бөтөнләй мөмкин түгел ине. Быйыл был башланғысҡа биш йыл тула – биш йылда йәштәрҙең илле китабы киң тормошҡа юл алған тигән үҙ. Илле автор, илле ижади яҙмыш – был бит үҙе оло донъя!

Шулай ҙа башта күпселек китаптары менән ныҡ ҡыуандырған был серия хәҙер ныҡ ҡына ағайта ла башланы. Нимә генә ти әң дә, йыл айын ун өмөтлө яңы исемде табыуы ауыр, беҙҙең өсөн хатта мөмкин түгел, тиер инем. Шуға ла "Йәштәр тауышы" тигәндә йыш ҡына исеме есеменә тап килеп бөтмәй. Мәҫәлән, былтырғы ун китаптың авторҙары ара ында Сибайҙан яңы егерме ен үткән Илгиз Ишбулатов ымаҡ бер нисә йәш автор ҙа, утыҙҙы күптән үткән, хатта ҡырҡҡа ет-

кәндәре лә бар. Әлбиттә, төп күр әткес – йәш талабы түгел, сифат талабы. Шулай ҙа серияның аталышын әм тәғәйенләнешен дә оноторға ярамай. Әгәр йыл айын йәштәрҙең ун китабын туплауы ауырлаша икән (бының шулай булыуы бер ҙә ғәжәп түгел), ул сағында был серияға ингән йыйынтыҡтарҙы йыл аша сығарыу хәйерлерәк тә булыр.

Китап өсөн иң кәрәкле е яҙыусының үҙ оҫталығы бул а ла, зауыҡ менән эшләнгән матур баҫманы ҡулға алыуы – үҙе бер кинәнес. Был яҡтан мөмкинлектәр хәҙер ныҡ артты, халыҡ-ара күргәҙмәләрҙә лайыҡлы урын алған уңыштарыбыҙ бар. Форма яғынан төрләндереү ҙә әйбәт. Мәҫәлән, ҙур портфелгә лә ыймаҫлыҡ фолианттар менән бергә уҫҡа ыйырлыҡ, кеҫәлә йөрөтөрлөк китаптар ҙа күренеп ҡала. Шундайҙарға 2008 йылда Хәсән Назарҙың "Ғүмер әм дәүер" тигән кескәй үлсәмдәге тос йыйынтығы өҫтәлде. Ғөмүмән, ошондай ыҡсым баҫмалар йышыраҡ сыҡ ын ине. Шиғыр китабы нәҡ бына ошолай булырға тейеш ымаҡ. Бәләкәй бул а ла, уға ҡай ы саҡта ҡалын-ҡалын томдарҙа булмаған йөкмәтке ыя.

Китаптың юғары дәүләт бүләктәрен яулауы – үҙе үк ҙур ба а. Был йә эттән дә 2008 йыл бик бәрәкәтле килде. Ирек Кинйәбулатов – Башҡортостан Республикаының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ына, Лариса Абдуллина Башҡортостан йәштәренең Шәйехзада Бабич исемендәге премия ына лайыҡ булды. Тағы ла бер яҡшы яңылыҡ: Башҡортостан Президенты тарафынан булдырылған Сергей Аксаков исемендәге халыҡ-ара премия лауреаттары исемлегенә, ни айәт, башҡорт яҙыусы ы Талха Ғиниәтуллин өҫтәлде. Башҡорт әҙәбиәтен Рәсәй күләмендә күр әтергә күп көс алған Станислав Куняевҡа ла былтыр ошо премия лайыҡлы бирелде.

Әҙәбиәттең эстетик юғарылығы унын үҙ ерлегендәге рухи тормошҡа йоғонто о менән дә, башҡа халыҡтарға барып етеү әләте менән дә билдәләнә, унғы осорҙа беҙҙең донъя менән бәйләнешебеҙ киңәйә төштө. Башҡорт әҙиптәренең үҙен Дағстан да, Ҡырғыҙстан да, Татарстан да, Рәсәйҙең ҡай ы бер өлкәләре лә ишетте. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, баҫма үҙебеҙ башҡа тарафтарға ирәгерәк етә.

Әҙәби бәйләнештәрҙе үҫтереүҙә төп көс, төп сара – тәржемә. СССР тарҡалғандан уң элекке бөйөк тәржемә мәктәбе ҡыйралып бөттө тиерлек. Ниндәй тырышлыҡтар менән көйләнгән изге эштәр селпәрәмә килде.

Ошондай тарҡалыш заманында ун йыл элек беҙҙә рус телендә "Бельские просторы" журналының сыға башлауы – үҙе бер мөғжизә. Был бәхет яҙыусыларға күктән төшмәне, республика етәкселегенең хәстәрлеге арҡа ында тыуҙы.

Ун йыл эсендә журнал әйбәт кенә традициялар тупланы. Уны ойоштороп алып китеүҙә тәүге баш мөхәррирҙең – шағир Юрий Андрияновтың эшмәкәрлеген оло хөрмәт менән хәтерләйбеҙ.

Былтыр Яҙыусылар союзының идара ултырышында "Бельские просторы" журналы хаҡында ентекле өйләшеү үткәрҙек. Был баҫманың уңышы бары ынан да бигерәк тәржемә эшенең торошона бәйләнгән. Сөнки журналды ойоштороуҙың төп маҡсаттарының бере е итеп башта уҡ башҡорт әҙәбиәтен рус теле аша күберәк уҡыусыларға еткереү бурысы ҡуйылғайны. "Истоки" гәзитенең тәғәйенләнеше лә ошоға ауаздаш. Тәржемәсе көстәрҙең етмәүе, тәжрибәлеләренең олоғайыуы әм ирәгәйеүе, йәштәрҙең аҙ килеүе мәсьәләне ныҡ ауырлаштыра.

Дөрөҫ, "Бельские просторы" журналы былтыр был йә эттән конкрет сараларға тотондо. Мәҫәлән, Рәйес Түләктең бер шиғырын тәржемә итеүгә конкурс үткәрҙе, өҙөмтәлә киләсәктә эшләй алырҙай йәш көстәр күренде.

Тәржемәселәр етмәгәндә русса баҫмаларҙы сығарыуҙың ни тиклем ҡатмарлы икәнлеген беҙ "Антология поэзии Башкортостана" тигән хеҙмәтте әҙерләгәндә ҡат-ҡат татығайныҡ. Былтыр Мәскәүҙә башҡорт әм рус телдәрендә "Из века в

век. Башкирская поэзия" тигән ҡалын антология баҫылып сыҡты. Был китапты төҙөгәндә бигерәк тә йәшерәк быуын шағирҙарының тәржемәләре булмауы бик ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырҙы.

Хөрмәтле ҡәләмдәштәр!

Яҙыусының төп вазифа ы – әҫәрҙәр ижад итеү. Әммә уның көндәлек тормошо халыҡ тормошонан айырылғы ыҙ. Уҡыусылар менән осрашыуҙар, районларҙа әм ҡалаларҙа әҙәбиәт көндәре уҙғарыу, уҡытыусыларҙың август кәңәшмәләрендә, шәжәрә байрамдарында, ҡоролтайҙарҙа ҡатнашыу, Яҙыусылар йортондағы әҙәби кесаҙналарҙа халыҡ менән даими осрашыуҙар, ижади секцияларҙа ҡулъяҙмалар тура ында фекер алышыуҙар, башҡа күп төрлө саралар – былар бары ы ла беҙҙең ижади ойошманың тормош ритмы, йәшәү рәүеше.

Уҙған йылдағы әҙәби мөхитебеҙҙе барлағанда уңыштар хаҡында ғына түгел, бурыстар тура ында ла ентекле үҙ булыр, тип өмөтләнәм. Әйтәйек, районларҙа әҙәбиәт көндәрен үткәреү бер ни тиклем үлпәнәйә төштө. Элекке йылдарҙа беҙ яҙыусылар ойошмалары булған региондарҙа йәш авторҙарҙың күсмә семинарҙарын бик уңышлы уҙғара торғайныҡ. Яңауылда, Стәрлетамаҡта, Күмертауҙа йәштәрҙең ҡулъяҙмаларын тикшереүҙе, аҙаҡ төрлө коллективтарҙа сығыш я ауҙарҙы күптәр иҫләй торғандыр. Был эштәрҙе яңынан йәнләндерергә кәрәк.

Ижад эше – үтә шәхсән хеҙмәт. Үҙең атҡара ы бурыстарҙы, яҙа ы әҫәрҙәреңде башҡа бер кемгә лә тапшыра алмай ың, хәлдәреңде еңеләйтер өсөн ярҙамға ла саҡыра алмай ың. Бары ын да тик бер яңғыҙың йырып сығырға тырыша ың.

Ләкин ҡәләмдәштәр тигән ныҡлы таяныс бар, туған әҙәбиәтебеҙ тигән уртаҡ байлығыбыҙ, изге хазинабыҙ, шул донъяла тыуған шатлыҡтарыбыҙ әм бөтмәҫ борсолоуҙарыбыҙ бар. Бына шулар беҙҙең яҙмыштарыбыҙҙы бергә туплай, ошо хәстәрҙәр бөгөн беҙҙе бында йыйҙы.

Оло йыйыныбыҙ мөбәрәк бул ын, беҙҙе ижадҡа нығыраҡ ил амландыр ын.

Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!

---

**Хәсән НАЗАР,**
Башкортостан Яҙыусылар союзының шиғриәт секцияѕы рәйесе

## Әҙәбиәтебеҙҙең йөрәге

Мәртәбәле был йыйын Яҙыусылар союзының, көткәнебеҙсә, ҙурлап билдәләнер 75 йыллығы алдынан үтә. Әҙәбиәт еҙ, йәғни яҙыусыларҙан башҡа, билдәле инде, Союз да булмаҫ ине. Ә инде әҙәбиәтебеҙҙең әсә е, улай ғына ла түгел, йөрәге – шиғриәт ул. Донъя, тормош, ғүмер – үҙе үк шиғриәт бит. Әҙәбиәт тап ана шулар хаҡындағы халыҡ йырынан, халыҡ шиғырынан башланған, быны сәсәндәр, Салауаттар, Аҡмуллалар ҡеүәтләгән.

Мәжит Ғафуриҙағы аяныслы тереклектә йәнде ыҙлатыу, Шәйехзада Бабичтағы азатлыҡ рухын ҡуҙғытыу, Мостай Кәримдәге дәүерҙе тыңлатыу, Назар Нәжмиҙәге ташты ла илатыу, Рәми Ғариповтағы милләтте уятыу, Рәшит Назаровтағы йәшенләп таң атыу, Рәйес Түләктәге ил-ҡәүем тип ут йотоу, бөгөнгө көндә Рауил Бикбаевтағы сәпкә мәргән атыу – былар бары ы ла шиғриәтебеҙ үрҙәрен билдәләй.

Классик традициялар шундай асылдарҙан барлыҡҡа килә, төп критерийҙарҙы аныҡлай. Донъя шиғриәтен дә дәүер заңына, зат-дәүер моңона, ижад ерлегенә

бәйле шундай уҡ асылдар  әм аҫыллыҡтар, иң мө име, шағир менән шәхес берлегенә өлгәшеүҙәр йәшәтә.

Барлауҙар, ба алауҙар ошо нигеҙҙән, ошо ҡараштарҙан алып барыл а, теүәлерәге, дөрөҫөрәге шул булыр, моғайын. Шундай уйҙар менән күҙ алып үтәйек йыллыҡ өлгәштәребеҙгә, өлөшкә төшкән көмөштәребеҙгә. Алтыны ла булыр, баҡыры ла, әлбиттә инде, күпләп табылыр.

Алтын тигәндән, затлы мәғдән приискы ын, унан да былай алтындарҙан ҡиммәт шиғри мираҫын ҡалдырған Дәрдмәндте хәтерләткән (бәлки, үҙен ул унын шәкерте тип тә иҫәпләмәйҙер) Мөхәммәт Закировтың яңы бер шиғыры иҫкә төшә:

*Көтмәгәндә ат башындай алтын*
*Тырма ына килеп тығылғас,*
*Ҡатлы-ҡатлы үгенеп, ағай уны*
*Йыраҡҡараҡ алып томорған.*

*Ҡайҙан бел ен алдарында донъя*
*Алтын төҫтәр менән балҡырҙы.*
*... Табыуҙары ан ат булма а ла,*
*Таныуҙары ҡиммәт  алтынды.*

Алтыны ғына бул ын, танылмай ҡалмаҫ. Бының өсөн, ихтимал, “халыҡ шағиры” исемен алыусыларға таянырға кәрәктер? Әммә, бер ҡара аң, саяраҡ  үҙле Салауат Рәхмәтулла әйткәнсә:

*Указлы шағирҙар арта,*
*Улар илдә ни ҡылған?*
*Указлы муллалар барҙа*
*Халыҡ иманлы булған!*

Ихтимал, терәк итеп өлкәнәйгән шағирҙарҙың бер-бер артлы сыға башлаған томдарын алырғалыр? Хәҙер, ысынлап та, томдар мания ы китте. Ләкин бында ла Назар Нәжмиҙең төртмәле юлдары ниҙелер иҫкәртә:

*Тора-бара ҡоҙоҡ ҡорой, тиҙәр,*
*ыуы уның эселмә ә әгәр.*
*Шиғырҙарын уның уҡыусы юҡ,*
*Ә томдары сығып тора мәгәр.*

 әр хәлдә, сыға тороуы хәйерле. Әҙәбиәт кәштәләрен буш тотоп булмай бит инде. Классиктарҙыҡы менән генә тултырыр инең, улар бик тә  анаулы ғына. Үткән быуаттың илленсе йылдарында Хәниф Кәрим, Ҡадир Даян, Мәҡсуд Сөндөклө, Әкрәм Вәли, Ғәйнан Әмири томдары ла шулай, шиғри продукцияны массаларға еткереп, үҙ осорона хеҙмәт итте. Шиғыр культура ын йәшәтеүҙә сифат ҡына түгел, күләм дә хәжәт шул. Әммә, төптән уйла аң, Аҡмулла менән Бабич томдар ыҙ ҙа халыҡ күңеленең түрендә йәшәй.

Ошо урында иҫкә төштө: шиғырҙарын яратып, үҙемә абаҡ алып тәржемә иткән, рухыма үтеп ингән Рәсүл Ғамзатов халыҡ шағиры тип тамғалауҙы  өй өнөп бөтмәй, халыҡтан сыҡмаған, халыҡҡа ҡаршы булған шағир бармы ни, ти торғайны. Нимә ти ә лә, уға килешә ине, сөнки ул – Рәсүл Ғамзатов. Ләкин барыбер есем менән исем бер бөтөнгә әйләнгәс, алтынды алтын ти ең инде, бында бөгөн иң элек лидерыбыҙ Рауил Бикбаевты күҙҙә тотам. Исемдәре, дәрәжәләре, вазифалары өсөн түгел, ә Рауил Бикбаев  булғаны өсөн. Егәрле, емешле етмеш йәшлек юбилейы йылында ғына ла бер нисә китап сығарып ҡаршылаған шағир ижадына, форсат ҡушҡанса, иркенерәк туҡталып үтеү урынлы булыр.

Беҙ барыбыҙ ҙа тиерлек ауыл балалары бит, беләбеҙ, эҫкерт алғанда оҫта кәбәнсе уны бар та ылын алып күкрәкләй, сәнғәтсәлеккә өлгәшә. Шуның ымаҡ, Рауил Бикбаев та ижади эҫкертен күкрәкләүгә күп көс алды. Унан ары ла күбәләрҙе айбарланып ала ы ла ала ы әле.

Ҡай ы бер “эйәрҙәш”тәре кеүек, импровизаторлыҡҡа йәки пафослы риторикаға алышыу хас түгел уға. Көйләп-сөйләп рифмалар туҡыған, осраҡлы әр кәйефте, әр уй-фекерҙе амаҡлап ултырған бөгөнгө квалификациялы Йәрми Сәйете лә, үҙ осороноң новаторы Ғәлимов Сәләмдең декларатив күсермә е лә түгел. Ватансыл ҡеүәт хас уға. Тәбиғи юғарылыҡ хас. Тимер Йосопов уны “ғәййәр Кинйәләрҙең ярсығы” ти. Тимәк, осмото ғынамы? Ярсығы түгел, вариҫы ул Кинйәләрҙең. Быны шағир йөрәгендә бер үк мәлдә тулап та, нисектер шул уҡ мәлдә тын ҡалып та ятҡан диңгеҙ образы аша Ҡәҙим Аралбай ҙа хәбәрләй.

Халыҡсанлыҡ, тормошсанлыҡ, оҫталыҡ. Былар — әҙәби ҡиммәттәрҙе ба алауҙа төп критерийҙар. Рауил Бикбаев әҫәрҙәре ошо талаптар юғарылығында яҙылған. Новаторлыҡ и ә уларҙағы заман заңы менән асыштар юллай (“Заман! Бирсе пульсыңды! Ниндәй яр ып тибә тамырың!”). Был ижадҡа шиғриәттең тажы лирика туплаған донъя кимәлендәге тәжрибәнең төп сифаттары хас: монументаллек (“ ыу аным — ыуҙар бирегеҙ!” ише поэмалар”); трагизм (“Сал бөркөт хикәйәте”); гуманизм (“Йүкәләрҙән ығылып бал тама, йүкәләрҙән ығылып бал тамғанда нисек ҡулың барыр балтаға?!”); оптимизм (“Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, булырбыҙ!”); мөхәббәт моңо (ул тотош ғүмере буйы урғылышлы); ерлеклелек, миллилек (“Күк көмбәҙе — башҡорт тирмә е”, “Эш бүлмәм — Башҡортостаным, өҫтәлем — Урал ташы”); фекер ҡеүәте (кинәйәле образлылыҡ, пародоксаль йәки афористик юлдар, фәлсәфәүи тапҡырлыҡтар әҫәрҙәрҙән айырып та алғы ыҙ, әйтеп, анап та бөткө өҙ). Ил ғәменә сорналған сәсәнлек тә, бөркөт саңҡыуындай пафос та, публицистик ялҡын да (“Халҡыма хат”), ер йәмдәренә сәждә ҡылыр күңел нескәлеге лә — бары ы ла бар. Ә инде бихисап ассоциациялар — зирәк зи ен ынйылары ул.

Рауил Бикбаевтың ижади эшмәкәреге, шәхес юғарылығы — башҡорттоң кемлеген әм кимәлен донъя алдында раҫларлыҡ күренештәрҙең бере е ул. Милләттең рухи көсөн, киләсәген әҙәбиәтебеҙ үрҙәре бына шулай сағылдыра. Беҙ барыбыҙ ҙа шуға хеҙмәт итергә бурыслыбыҙ.

Арҙаҡлы, оло шағирҙарыбыҙ Кәтибә Кинйәбулатованың, Абдулхаҡ Игебаевтың, Марат Кәримовтың, зауыҡлы хис-тойғолар, уй-кисерештәр нағышы менән күңелдәрҙе яулаған Әнисә Та ированың, уҙаманыбыҙ Мәүлит Ямалетдиндың, Ғәлим Дәүләди менән Рауил Шаммастың, Муса Сиражиҙың,

*— Эй, Хоҙайым, ниңә ҡатын-ҡыҙҙың*
*Ахмаҡтарын ергә тараттың?*
*— Аҡыллы ын ир-ат ҡәҙерләмәй,*
*Ахмаҡтарын, әйҙә, ярат ын, —*

тип тура үҙлелектә алдырған Риф Мифтаховтың, тарих менән заман, мөхит менән шәхес мөнәсәбәттәрен асырғанышлы сәм менән сағылдырған Тамара Ғәниеваның, мәғрифәттә шағир, шиғриәттә мәғрифәтсе Рәшит Шәкүрҙең, күкрәгендә эйәрле ат ятҡан Салауат Әбүзәрҙең, тормошсан, тәбиғи улышлы Фәниә Чанышеваның, “бәхет — яҙыуҙа, унан да былай, шул мәлдәге ҡанатланыуҙа” тигән Нәжибә Әминеваның, ҡобайыр телендә, әммә бөгөнгөсә рухты асып ижад иткән Ай ылыу Ғарифуллинаның, Йомабикә Ильясова, Зөбәржәт Йәнбирҙина, Гүзәл Ситдиҡова, Тәнзилә Дәүләтбирҙина, Миңлегөл Хисамова, Зө рә Ҡотлогилдина, Фәндидә Харрасова, Гүзәл Ғәлиеваларҙың, Тойғон, Хисмәтулла Юлдашев, Фәнил Күзбәков, Риф Әхмәҙиев, Рәмил Йәнбәк, Сафуан Әлибай, Әхмәҙин Әфтәх, Әсхәл Әхмәт-Хужа, Тимер Ниәтшин, Рәдиф Тимершиндарҙың, Мөхәммәт Илба-

ев, Риф Дауыт, Бәхтейәр Хәлитов, Дамир Шәрәфетдинов, Гөлназ Ҡотоева, Лариса Абдуллина, Гөлгизәр Фәйзи, Әлфиә Әсәҙуллина, Лилиә  аҡмар, Зөфәр Вәлит, Мәрйәм Күсмәева, Сәсәниәләрҙең артылыштары  әр бере енең үҙенсә рух илсе е икәнен күр әтә. Рәхәтләнеп әйтеп сыҡтым исемдәрҙе. Шәжәрәнең ҡәҙере лә исемдәрҙә бит. Шөкөр, шиғриәтебеҙ шәжәрә е ярлы түгел.

Рух илселәре, тинем. Рух йәшә ә, ил йәшәр. Беҙҙең барлығыбыҙҙың, ижадыбыҙҙың ҡиммәте лә шунда түгелме ни? Иң элек тап шул билдәләй  шағирҙың бөйөклөгөн дә, көйөклөгөн дә.

Шиғриәтте, хатта йыллыҡ хәл-әхүәлдәрҙе лә бер юлы ғына айҡап-байҡап сығыу мөмкин түгел. Әммә әле айырым әйтеләсәк исемдәргә, китаптарға, әҫәрҙәргә махсус туҡталып үтәсәкмен.

Былтыр Ирек Кинйәбулатовҡа “Замана тауышы” тигән  әлмәк йыйынтығы өсөн Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы бирелде. Йәше менән дә, эше менән дә ил ағалары ҡорона ингән Ирек Кинйәбулатов – милләттең, телдең ижади, рухи потенциалын асыусы шағирҙарыбыҙҙың бере е, Тимер Йосопов, Ҡәҙим Аралбай кеүек үк, берәгәйле е. Әҫәрҙәрен уҡып, шундай  ығымта я ала:  әр заманда ла әҙәбиәттә, бигерәк тә шиғриәттә, төп ҡиммәттәрҙе кешене күтәреүсе, шәхесте  күр әтеүсе, ергә ерektereүсе ижад билдәләй. Ирек Кинйәбулатовтың поэмалары, Башҡортостандың ырыҫын, бурысын тотҡан әллә күпме шәхестәргә арнауҙары, көнөбөҙгә ауаздаш  әм а әңдәш шиғырҙары, мөхәббәт лирика ы – тап шул төп юлдағы үҙенсәлектәр.

Нимәлә  уң был үҙенсәлек? Иң тәүҙә – тормошсанлыҡ ул. Дөйөм, абстракт түгел, ә ә әмиәтле, аныҡ хәл-ваҡиғаға, конкрет шәхескә бәйле сифат. Арнауҙарында, гүйә, – беҙҙең заман геройҙарының галерея ы. Был и ә шағирҙың үҙ яҙмышынан, шәхсән ҡарашынан айырылғы ыҙ. Тимәк, автобиографизм менән дә характерлы. Заман тема ы шулай хәл ҡылына. Бының өсөн, әлбиттә, гражданлыҡ позиция ы талап ителә.  уңғы йылдарҙа беҙҙә гражданлыҡ лирика ы  үлпәнәйә барыуын, интим тойғоларҙың ғына күпсетелеүен әйт әк, Кинйәбулатов ижадының ба а ы тағы ла ҡалҡыулана. Бөгөн мохтаж булған  үҙҙе бөгөн әйтергә – тынғы ыҙ тәбиғәтле ҡәләмдәшебеҙ ошо стихияла, ошо яуаплылыҡта эш итә.

 уңғы араларҙа, байлығыбыҙҙы арттырып, Факи а Туғыҙбаеваның “Ваҡыт тамғалары”, Гөлфиә Юнисованың “Ғүмер юлы”, Таң ылыу Ҡарамышеваның “Донъя – дарья”, Гөлнур Яҡупованың “Әҙәм вә  ауа”, Тамара Искәндәриәнең “Көн менән төн  сиге” тигән, үҙенсә бер йомғаҡлау төҫөндә төҙөлгән китаптары сығыуын ҡыуаныс менән әйтеп үтәм. Был шағирәләр быуатты быуатҡа ялғаған төп көстәрҙән  анала, шулай булып ҡала ла.

Яңы йыйынтыҡтар ара ында Нияз Сәлимовтың “Ураҡ өҫтө”, Инсур Артурҙың “Яра ыҙ  ағыш” тигәндәре лә, “Йәштәр тауышы” серия ындағы күстәнәстәр ҙә бар. Улар матбуғатта иғтибар ыҙ ҡалманы.

Ғазаплы ла, ләззәтле лә ижад юлына үҙ  уҡмаҡтарын  алған яңы быуынға – Рита Фәтҡуллина, Рамаҙан Ҡолмөхәмәтов, Земфира Аҡбутина, Айгиз  Юлдашбаев, Фәниә Ғәбиҙуллина, Рафаэль Хафизов, Зилә Ғәлләмова, Фәнил Бүләков, Урания Вахитова, Зиниә Байназарова, Ринат Сөләймәнов, Айгиз Сафин  әм уларҙың бүтән тиңдәштәренә өмөттәр бағлайбыҙ. Бары ы ла  тиерлек шиғриәт секция ының фатиха ын алған.

Был быуын хаҡында  үҙ йөрөткәндә, ирек еҙҙән, йәшә ен ауыл, тимен. Сөнки ҡалала  андуғастар  айрамай. Шағирҙар асылда ауылдан сыға. Шуға ла ауылды күтәреү йә әтенән дәүләтебеҙ тырышлыҡтарын күреү шатлыҡлы.

Шиғриәтебеҙҙә үҙе бер юғарылыҡты тотҡан Факи а Туғыҙбаеваның ижады, яңы китабы хаҡында “Башҡортостан” гәзитендә мәҡәләм сыҡҡайны инде. Был юлы олуғ шәхесебеҙ академик Ғайса Хөсәйеновтың  үҙҙәрен килтереп үтеү ниәтем. “Туған халҡым тип йән атып тороуҙарыңды күп шиғырҙарың раҫлап то-

ра, – ти ул. – "Мин халҡыма ғына хаж ҡыламын" тигән үҙҙәренә лә ҡушылам. "Минең илем" шиғырында Михаил Лермонтовтан килгән мотивтарҙың аман үрелмәгәнен дә аңлайым. инең йөрәгеңдә Байрондар, Салауаттар, Бабичтар рухы ятҡанын да тойоп торам. Үҙең дә бит:

*Минең оран яңы оран түгел,*
*Ул бит Салауаттың ораны,*
*Ул Бабичтың илгә уңғы үҙе,*
*Ул бит Вәлидиҙең фарманы, –*

тип раҫлай ың. Шәйехзада Бабич: "Ап-аҡ алтын йырҙарымды йырлайым халҡым өсөн, алтын илем өсөн," – тигәндәй, ин дә бит илеңә, туған халҡыңа арналған йырҙарыңды, алтын йыуғандай, йөрәгең аша өҙөп сығара ың".

Ғалимыбыҙ ба алама ынан сығып та тағы бер әйтергә ҡала: алтын табыла ла, таныла ла ул.

Яңы поэмаларҙан бигерәк тә бере ен – Гөлнур Яҡупованың "Әҙәм вә ауа" тигән әҫәрен әйтеп үтеү мотлаҡ. Хәтер әм рух тыуҙырған сәнғәтле шиғриәт ул. Әлмисаҡтан килгән риүәйәткә, мөхәббәт утын тоҡандырған донъяуи тәү башланғысҡа, бөгөнгө халәткә, автор шәхсиәте әм хиссиәтенә бәйле рәүештә, этюдтарҙы бер бөтөнгә әүерелтеп, зауыҡ әм нәфислек менән ҡойоп ҡуйылған был шиғри шәмдәл. Унан айырып алып цитата килтерәм ти әң, аҡ ыҙ ҡағылып ҡуймағайың. Башҡорт шиғриәтендә мөхәббәт хаҡындағы былдай үҙе лирик, үҙе тарихлы, үҙе фәлсәфәүи әҫәрҙе бүтәнсә эҙләп табыуы ҡыйыныраҡтыр. Поэманың экспрессив типтағы яңыса бер миҫалы булырлыҡ ул. Уны уҡып, Шопен прелюдияларын тыңлағандай булдым.

"Көн менән төн сиге". Был йыйынтыҡ Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте тарафынан: "... тәрән психологизм менән уғарылған. Донъя, изгелек менән яуызлыҡ, тарих, ундағы шәхестәр хаҡында уйланыуҙар менән тулы," – тип тәҡдим ителә. Тамара Искәндәриә үҙ уҡыусы ы менән бар ихласлығын, зи ен ҡеүә ен, аҡыл әм күңел көсөн алып рухи хазиналарын уртаҡлаша. Йәнеңде, гүйә, гармонияға сорнай. Был – интеллектуаль шиғриәт. Шағирә – донъя менән выждан ара ында. Ың ырламай ҙа, сурытмай ҙа, сафсатаға, вәғәзгә лә бирелмәй. Был шиғри мөхиткә зыялы аң менән инеү зарур.

Шиғриәтебеҙҙең шулай үҫеүе исемдәрен "обойма"ла күрергә күнеккәндәрҙән генә түгел, ә төрлө-төрлө шағирҙарҙан, бер үк ваҡытта йәштәштәрҙән ҡот әм ут алыуы бик тә өйөнөслө.

*Башҡорттоң шағиры –*
*Сәйәсмән.*
*Ила и серҙәрҙе асыусы,*
*Рухиәт терәген нығытыр*
*Бағана булып ул баҫыусы.*
*Тормошта шиғырға урын юҡ,*
*Шиғриәт балҡышы өҫтәрәк.*
*Юғары тойғолар илсе е –*
*Шағирға*
*Сәйәси*
*Көс кәрәк!*

Тамара Искәндәриәнең был үҙҙәренә ҡушылмау мөмкин түгел. Төтөн өҙ дөрләп, донъяны йылы әм яҡты итеүселәр рәтендә шағирәбеҙ.

Шиғриәтебеҙ тура ында, яңы күренештәр хаҡында әле әйтелгәндәр, моғайын, алтын табыуҙы әм таныуҙы, ә, бәлки, үлән өҫтөндәге ысыҡта сағылған ҡояшты хәтерләтер. Ләкин ҡояштың үҙе түгел. Ул – әҫәрҙәрҙә, йөрәктәрҙә. Белер, таныр, ба алар, рухты яҡтыртыр өсөн шағирҙарҙың уҡыусы менән күңелгә-күңел осра-

шыуы, әҫәрҙәрҙе бирелеп уҡыуы фарыз. Шөкөр, беҙҙә бындай уҡыусылар ҡатламына ҡытлыҡ юҡ, тип уйлайым. Халҡыбыҙ,– ғөмүмән, шиғри тәбиғәтле халыҡ бит. Юҡҡа ғынамы ни ҡайҙа ла, ҡасан да әҙәби күрешеүҙәр үҙе бер байрамға әйләнә.

Тәнҡит ҡайҙа, теләктәр, тәҡдимдәр ҡайҙа, тиеүселәр булыр. Быны әр кемдең үҙ ихтыярына ҡалдырайыҡ. Ғөмүмән, әр ижадсының эсендә тәнҡитсе ултырырға тейеш. Иң тәүҙә – үҙенә ҡарата. Икенсе яҡтан, тәнҡит менән генә юҡты бар итеп тә, шыйтыҡ ҡайынды тәлгәшләтеп тә, тәпәш имәнде бейегәйтеп тә булмай.

Теләктәр изге. әр кемдең үҙ мәйеле, үҙ кимәле. Ғүмерҙәр ҙә маҡсатлы. Бойомға аш ын маҡсаттар.

әр хәлдә, Яҙыусылар союзының 75 йыллығы тантана ын башҡорт шиғриәте ырамлы аҙымдар, баҙыҡ ҡаҙаныштар менән ҡаршылай. Алда ла шулай булырына иманыбыҙ камил. Шиғриәт ул әҙәбиәтебеҙҙең йөрәге икән, халҡыбыҙ, заманыбыҙ, идеалдарыбыҙ менән ил амланып, ил улышын, йөрәк тауышын мең ғәләмгә аман- аман ишеттерә торор.

Уңыштар еҙгә, ҡәҙерле ҡәләмдәштәр!

**~~Сабир ШӘРИПОВ~~,**
Башкортостан Яҙыусылар союзының
проза секция∞ы рәйесе

## Быуындар бәйләнеше нығын∞ын

Хөрмәтле ағай-эне! Докладҡа ингән ваҡыт арауығы әллә ни оҙон түгел, шуға үҙемде мөмкин тиклем ҡыҫҡараҡ тотмаҡсымын. Бөтә енән элек ҡәнәғәтләнеү менән билдәләге килә: прозабыҙ дарья ында уңғы осор боҙҙар аҡтарылыуы, йәғни әҙәби күренеш булырҙай ваҡиғалар күҙәтелмә ә лә, ниндәйҙер дәрәжәлә туңаҙыу боҙҙоң ҡуҙғала биреүен дә тоҫмалламау мөмкин түгел. Был фекер күләм тәңгәленә лә, сифат юҫығына ла берҙәй ҡағыла кеүек.

Күләм тигәнем шунан ғибәрәт: элекке йылдарға сағыштырғанда, проза китаптары хәҙер күберәк сыға, ваҡытлы матбуғат та сәсмә әҫәрҙәрҙе урап үтмәй, хатта үҙнәшер ысулы менән донъя күргән ижад емештәре ишәйә. Иң мө име, проза майҙанына яңы исем-шәрифтәрҙең, айырыуса аҙмы-күпме йәш быуын авторҙарының өҫтәлеүе ҡыуандыра.

Бер аҙ алғараҡ китеп бул а ла, былтыр-быйыл китап кәштә енән дә, уҡыусыларҙың күңел кәштә енән дә лайыҡлы урын алған баҫмалар: романдар, повестар, хикәйәләр .б. бер нисә шәлкемен телгә алыу зарур. Бына улар: «Ҡанлы бәхет» (Суфиян Поварисов), «Вәғәҙә — иман» (Хәбир Хәмитов) «Әлфирә» (Ринат Камал), «Аслыҡ» (Рәлис Ураҙғолов), «Дүртенсе өҫтәл» (Марс Әхмәтшин), «Ғишыҡ тотоу – ут йотоу» (Риф Мифтахов), «Алтын сылбыр» (Нажиә Игеҙйәнова), «Яңы башҡорт» (Флүр Ғәлимов), « үнмәй ҙә, үрелмәй ҙә» (Түләк Ғирфанов), «Дөрөҫ үҙ» (Рәсүл Сәғитов) «Айыусы бабай хәтирәләре» (Исмәғил Ғимранов), «Командир балалары» (Артур Иҙелбаев), «Ҡариҙел – алҡын дарья» (Рәйес Риянов), «Әсәйгә бүләк» (Иҙрис Ноғоманов), «Юйылмаҫ эҙ» (Илдар Аҡъюлов), «Ҡабаттан ғашиҡ булыу» (Ринат Сөләймәнов), «Тормош шау сәскәлә» (Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллина), «Суҡ муйыл» (Нурислам Шәйхулов)... Хәйҙәр Тапаҡов ваҡытлы матбуғатта өлгөрлөк күр әтә. Ыңғайҙан Булат Рафиҡов, Динис Бүләков, Ибра им Ғиззәтуллинға арналған иҫтәлектәр томдарын оло кинәнес менән барлап үтке килә.

Тулы булмаған исемлекте БДУ-ның “шоңҡар”сы ы Фәйез Харрасовтың «Төн» тигән ҡараңғыраҡ исемле, мәгәр яҡты, ағышлы хикәйәләрҙән, новеллаларҙан, нәҫерҙәрҙән ғибәрәт йыйынтығы менән ослайыҡ әм ун туғыҙ йәшлек Әбйәлил егетенә ихлас өйөнсөләйек. Әлегә «Йәштәр тауышы» серия ында баҫылған тәүге китабында “О!” хәрефе – донъяға оҡланыу, тормошҡа өйөү билдә е – йыш ҡулланыла. Әйтәгүр, йәшлек ауазы, тимәк, бәхеттән хисләнеү, романтика сатҡы ы улар. Бейеүсегә үҙ әйтмәгеҙ, бейей-бейей оҫтара, тигәндәй, ҡустыбыҙҙы сетерекле йәшәү ҡанундары “бәй!”, “аб-ба!” кеүек етдирәк ымлыҡтарҙы ла файҙаланыуға этәрер. Быны ы, иманым камил, алдағы өмөттә.

Сифат тигәндән, иң әүәл тематикабыҙҙың бер ни тиклем киңәйә, проза жанрының үҙе үк төрләнә барыуына иғтибарығыҙҙы йүнәлтке килә. Йы ат Солтановтың «Коммунист» повесы, мәҫәлән, ошоғаса Башҡорт автономия ы өсөн ҡанлы көрәштең урыҡ- урыҡ, идеологик ҡыҫаларҙан артыҡ ситкә тайшанмайыраҡ яҙылған сәхифәләренән үҙенең объективлығы, үткерлеге менән отошло. Роберт Байымовтың «Каруан килә Бағдадтан» романы менән барса йәмәғәтселекте күптән ҡыҙыҡ ындырған тарихи әм мөҡәддәс ваҡиғаға – Әхмәт ибн Фаҙландың атаҡлы сәйәхәтенә мөрәжәғәт итеүе лә хуплап ҡаршы алынды. Ошо көндәрҙә алтмышына аяҡ баҫҡан Ғәлим Хисамов и ә, ҡәләмен ныҡлы сарлап, этномәҙәниәт ҡатламдарын тағы ла тәрәнерәк “быраулмаҡсы” – “Ағиҙел”дә унын “А ура Мазда” романы донъя күрә. Фараз юҫығында, ләкин ярай ы тәүәккәл, ышандырғыс, асыштарға әм мәғлүмәткә бай әҫәр. Ике романдың да художестволы әм тарихи фекеребеҙҙең әлмәкләнеүенә, милли үҙаңыбыҙҙың тоталҡа ын нығытыуға хеҙмәт итәсәгенә шик юҡ. Бир ен Хоҙай!

Йыл күренеше булырҙай, хая ыҙ тәьҫир итеү ҡеүә енә эйә әҫәрҙәр ара ында үрҙә “Яңы башҡорт” менән “Аслыҡ” телгә алынғайны. Башҡорт бизнесына арналған роман буйынса былтыр көҙ “Башҡортостан” гәзите хатта «түңәрәк өҫтәл» дә ойошторҙо. Мәслихәт! Флүр Ғәлимов, унда әйтелгәнсә, тан ыҡ темаға, тормошобоҙға ҡапылыраҡ килеп ингән социаль-психологик күренештәрҙе драматик призма аша үрәтләүгә өлгәшкән. Өҫтәүенә, милләт, менталитетыбыҙ хаҡында уйланыуҙар ҙа уҡыусыны йәлеп итә. “Баҡти әң, эшҡыуарҙарға байлыҡ күктән төшмәй икән дә, улар уны йоҡо оҙ төндәре, бер туҡтау ыҙ эҙләнеүҙәре, эше менән яулай икән! Был — эшҡыуарлыҡ! Уны ис кенә лә хөкүмәттең аҡса ын урлап, бер ай эсендә мультмиллионер булған «түрәлекле дүрәктәр әм блатлы бизнесмендар» менән бутарға ярамай. Бөгөнгө урта әм кесе бизнес өлкә ендәге эшҡыуарҙар аҡса ын хәләл көсө менән таба. Был – ҙур эш. Шуға күрә, сауҙагәрлек — беҙҙең халыҡтың шөғөлө түгел, эшҡыуарлыҡ – кеше алдау, тигән кеүек иҫкелек сүплегендә серегән фекерҙәрҙе, баҙарҙа хатта әбейҙәр ҙә өйләмәҫ үҙҙәрҙе андарыбыҙҙан алып ташлау мө им. Флүр Ғәлимовтың китабы быны үҙ миҫалында иҫбатлай. Эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләүселәргә был китап белешмә генә түгел, ә төшөнкөлөккә бирелер мәлдә таяныс, этәргес көс» – бына «түңәрәк өҫтәл»дең ығымта ы. Килешергә лә, килешмәҫкә лә мөмкин. Бигерәк тә «белешмә» тигән ба а менән. Был төшөнсә үҙе үк романдың ба а ын төшөрә түгелме?

«Аслыҡ»ҡа ҡарата и ә, ошондайыраҡ фекерҙәрҙән тыш, авторҙың быға са тыйылған майҙанға тәүәккәл генә талпыныуын әм әҫәрҙең аҙағын көтөргә хаҡлы икәнебеҙҙе билдәләйек. Оҙаҡҡа уҙма ын ине иптәш, сөнки аянысла үткәнебеҙ ниндәйҙер кимәлдә, бәғзе пессимистар юрағанса, томанлы киләсәгебеҙгә ауаздаш булмаҡсы. Шулай итеп, маҡтаулы өлкән быуын әҙиптәренә заманса үҙе, күҙгә күренеп, үҙ фәлсәфә е менән эйәргән сағыштырмаса йәш ике әҙиптең диапазондары киңәйә, асыҡлана бара. Әгәр ҙә инде үрәтләү сараларының да баҙыҡлығына, ижадтарында юғары художестволылыҡҡа, үҙҙәренә генә хас тел-стиль манера-

ына ныҡышмалыраҡ ынтыл алар, уларҙың ижад офоҡтары балҡыуыраҡ, ҡабарынҡыраҡ буласағына шик юҡ. Хәйер, был теләк күптәребеҙгә ҡағыла.

Ошо йә әттән БДУ доценты Зәки Әлибаевтың да ынамыштары "улым, иңә әйтәм, киленем, ин тыңла" кеүегерәк кинәйәле әм урынлы. Уның «Аслыҡ»ҡа ҡарата "Башҡортостан" гәзитендәге түбәндәге тәнҡите — дөйөм прозабыҙҙың бәкәленә уҡҡан проблема ул: «Персонаж диалогтарында, ҡай ы бер эпизодтарҙа публицистик стиль өҫтөнлөк итә. Автор заман проблемаларын герой телмәрҙәрендә туранан-тура ҡулланып, дәүер улышын боҙоп ебәргән осраҡтар бар. Тағы ла жанрға хас эпиклыҡ әм полифоник сюжет «Аслыҡ»та бер яҡлы ғына хәл ителгән. Автор күберәк бер ауыл эсендәге ваҡиғаларҙы ентекле тасуирлай, ә йәмғиәт бәйләнештәре (сәнәғәт, сәнғәт, халыҡ-ара хәл, хоҡуҡиәт тип аңларға кәрәктер – *ред.)* күҙ уңынан ысҡындырылған. Роман уйланмышын тыуҙырған шәхес әм йәмғиәт ҡаршылыҡтары эпик яҫылыҡта үҫтерел ә, характерҙар сағыу, күп төрлө булыр ине. Яҙыусы ҡай ы бер эпизодтарҙа натуралистик үрәтләүгә күсеп китә, был и ә художестволылыҡ кимәлен кәметә». Бындай етеш еҙлектәр, үкенескә күрә, уңғы йылдарҙа яралған байтаҡ романдарға әм повестарға хас күренеш.

«Йәшлек» гәзитендә хикәйә жанры буйынса ике йыл барған республика конкурсы хаҡында. Эйе, мәш үр яҙыусы Рәшит Солтангәрәев исемендәге әҙәби ярыш ярай ы сәмле әм йәнле барҙы, халыҡ та апаруҡ ҡыҙыҡ ынды. Сөнки фә емле әҫәрҙәр байтаҡ баҫылды, ғибрәтле яҙмыштарға бигерәк тә ҙур иғтибар бүленде. әр ваҡыттағыса, был конкурста ла ауыл тема ы өҫтөнлөк итте. Әммә етеш еҙлектәр ҙә юҡ түгел. Әйтәйек, ҡай ы бер авторҙарға сәйнәп ҡаптырыу хас. Башҡорт теле — диалекттарға ифрат мулҡыу тел, шуға күрә бәғзе хикәйәселәрҙең үҙ өйләшендә генә ҡулланылған үҙҙәрҙе ҡыҫтырып яҙыуын тәбиғи күренеш тип ба аланыҡ. Бының менән әҙәби лексикабыҙ байый ғына. Яңыса алым, яңы фекер донъя ы, ҡалыплашмаған форма йә композиция тәҡдим итеү аҙыраҡ булды ымаҡ. Йәнә трагик ноталар өҫтөнлөк иткәндәй, яҡтылыҡ аша ла бихисап проблемаларҙы сағылдырырға мөмкин. Мәгәр исемдәре бигүк таныш булмаған авторҙарҙың тормош дөрөҫлөгөн үҙенсәлекле итеп сәнғәт әҫәренә әйләндерергә тырышыуы шатландырҙы. Ҡыҙғаныс, исемдәре билдәле хикәйәселәр әүҙемерәк ҡатнашманы, ҡатнашҡандары әллә ни бейек артылыштарға менә алманы. Донъяның бер балҡыу йә ғәжәби сәхифә ен оҫта тасуирлау әр кемдең ҡулынан килмәй. Шуға күрә хикәйәләрҙең бер-бере енә оҡшауы, ҡасандыр уҡылған әҫәрҙәргә тартым булыуы аңлашыла ла кеүек. Әммә, конкурс маҡсатына тулы ынса өлгәште, тип өҙә уғырға мөмкин. Донъя күргән 55 хикәйәнең ярты ы, ни ти әң дә, талапсан жюри тарафынан ысын проза емеше тип табылды әм ун автор лауреат исемен яуланы. Исем-шәрифтәре матбуғатта, телевидениела иғлан ителде – ҡабатлап тороу кәрәкмәҫ. Шул ғына: егермеләп хикәйәне айырым китап итеп нәшерләү зарур, был авторҙарҙы артабан дәртләндереүгә булышлыҡ итәсәк.

Бындай конкурстарҙың киләсәктә лә уҙғарылыуы ихтимал. Тик ойоштороусылар үҙҙәре төҙөгән положениены теүәл үтәргә тейеш. Эйе, шарттарға ярашлы, бәйгелә күләме бер табаҡтан да артмаған хикәйәләр ҡараласағы иҫкәртелгәйне лә бит, ғәмәлдә ике табаҡтан да ашҡан байтаҡ әҫәрҙәр донъя күрҙе. Әллә ни зыян юҡ, шулай ҙа бушаҡ, мәҡәләгә лә, үрәтләмәгә лә тартым әйберҙәрҙең баҫылыуы бер аҙ эсте бошора биреп ҡуйҙы. "Йәшлек" булғас, күберәк йәшерәк авторҙарға "йәшел ут" асыу ҙа зыян итмәҫ ине.

2008 йылдың ЮНЕСКО тарафынан Мәхмүт Ҡашғари йылы тип иғлан ителеүе айҡанлы, Евразия Яҙыусылар берләшмә е халыҡ-ара хикәйәләр конкурсы иғлан иткәйне. Абруйлы бәйгене үҙебеҙҙең регионда ойоштороуға "Ағиҙел"журналы

редакция ы ла байтаҡ көс алды.

өйөнөскә күрә, сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт — өс ай эсендә Башҡортостанда йәшәгән дәғүәселәрҙән башҡорт, урыҫ, татар телдәрендә утыҙға яҡын хикәйә алынды. Авторҙары — төрлө йәштәге (18 — 71), төрлө өнәр кешеләре: әҙиптәр, матбуғат хеҙмәткәрҙәре, инженер, китапханасы, хатта табип та бар. Тема йә әтенән сикләү юҡ ине.

Ҡульяҙмалар ентекле ба аланды әм псевдонимдар асыҡланды. Хәлбүки, жюри Башҡортостан ерлегендә Рәсәй ысынбарлығын нәфис үрәтләгән, милли рух, хис-пафос менән уғарылған, уҡымлы тел-стиль саралары менән туҡылған юғары художестволы әҫәрҙәргә өҫтөнлөк бирергә тырышты. әм уңышлы әҫәрҙәр М. Ҡашғари исемендәге конкурс эмблема ы менән журналда сыға тора. Шулай итеп, ике конкурстың да байтаҡ лауреаттары залда, арабыҙҙа ултыра, форсаттан файҙаланып, тәбрикләйек үҙҙәрен. Беҙҙә беренсе урын яулаған ҡәләмдәшебеҙ Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллинаның “Төшлөктәге төш” хикәйә е халыҡ-ара кимәлдә дүртенсе приз алған әм Евразия рамкаларында нәшер ителәсәк йыйынтыҡта төрөксә, инглизсә баҫыласаҡ. Был үҙе үк — башҡорт хикәйә енең мөмкинлектәре әм планка ы бейеклектәре хаҡында асыҡ өйләүсе факт.

Өндәшмәүең – мең алтын да бит, мәгәр яҙыу культура ына ҡағылышлы бер-ике кәлимә менән уртаҡлашырға ниәт. Мәғлүм ки, компьютер, интернет заманында йәшәйбеҙ, күптәребеҙ, бигерәк тә өфөләр, электрон версияны ла йылдам үҙләштерә, ҡәҙимгесә ҡәләм-ручка менән ижад итеүселәр, шул иҫәптән үҙем дә, етерлек әлегә. өҙөмтәлә байтаҡ дуҫтар, бигерәк тә ауыл яҡтарынан, йә ябай ҡульяҙма, йә бер генә данала ҡәҙимге машинкала баҫылған, йә әллә нисәмә компьютерҙа йыйылған әҫәр тәҡдим итә. Дискета ын таптырҙыни әң, ҡулдарын йәйәләр... Мәҫәлән, Стәрлетамаҡтан Ишғәле ағай Нурғәлиевтың “Ҡарабаш турғай” тигән автобиографик яҙмаларына юлыҡҡайныҡ та, аман донъяға күр әтеү уҙыла. Автор халыҡсан, ябай тел менән үҫмер күҙлегенән оло донъяға баға, үҙ яҙмышын ауыл, ил яҙмышына үреп, аналитик, контраслы бияуҙарҙа үрәтләүгә өлгәшкән. Иң мө име, ветерандың фекер ҡеүә е ҡеүәтле, үрәтләү кимәле киң, әлмәк...

Ваҡ мәсьәлә тип ҡарамайыҡ яҙыу культура ына. Сөнки шул арҡала теге йәки был әҫәрҙе ҡабат-ҡабат баҫыу, күҙҙән үткәреү мәшәҡәттәре өҫтәлә, секция ағзаларынан уҡытыу (уны ы — үҙе бер бәлә!) әм секция ултырышына ҡуйыу оҙаҡҡа уҙыла, иң мө име, матбуғатҡа әҙерләү, йәғни редакторлау ауырлаша.

Ғәҙәттә, секциябыҙ быдай мәртәбәле йыйынға өр-яңы әҫәр тикшереп, әҫәрләнеп ултырыша торғайны. Үрҙәге телгә алынған сәбәптәр арҡа ында Радик Әхмәтовтың (Кушнаренко ауылы) әлегә шартлы исемле “Ике яҙмыш” романын елкеп-тылҡып өлгөрмәнек. Яҡын айҙарҙа быны ы бойомға ашыр. Элекке йыйылышҡа Иҙрис Ноғомановтың “ аҡмарбаш” тарихи хроника ын нигеҙҙә, ҡабатлап әйтәм, нигеҙҙә хуплап кергәйнек. Дәлилле замечаниелар өҫтөндә автор еңел-елперәк эшләне. Әҫәрҙең наборын я атып, Ноғман Мусиндан рецензиялауын үтендек. Тыңланы ағайыбыҙ, ентекле анализ бирҙе. Тик халыҡ яҙыусы ының кәңәштеләктәре буйынса ла Иҙрис туған тау аҡтарыуға өлгәшмәне. Мин ҡәләмдәштең ижадын, айырыуса натуралист яҙмаларын, юғары ба алайым, хатта “Урыҫтың Песковы, башҡорттоң Иҙрисе бар!” тигәнем булыр, тик дуҫыбыҙ... әллә үҙенә артыҡ ышана, әллә донъя вә вазифа мәшәҡәттәренә нык сумған, ниңәлер ил өйәрлек рухы менән уғарылған романын тейешле кимәлгә еткереүгә ыуыныбыраҡ ҡараған кеүек.

Тағы бер хикмәтле генә күренеш күҙәтелә уңғы йылдарҙа. Ул да бул а — ҙурыраҡ сәсмә әҫәрҙәрҙе өлөшләп-өләмләп тәҡдим итеү. Миҫалға Зөбәржәт Йәнбирҙинаның «Көҫәпәй» исемле ен килтереү урынлы. Романдың тәүге өлөшө биш йыл

элек «Ағиҙел»дә донъя күргән. Былтыр автор романдың урта өлөшөн алды өҫтәлгә, кәнисен киләсәктә көтөгөҙ, тине. Бер ҡатлыланып, яҙыусы та ылын балыҡсы кәсебенә сағыштырҙым да уйынлы-ысынлы әйтеп алдым шунда: “Кеше, былтыр – балыҡтың башын, быйыл ыртын ҡаптырҙым, килә е йылда ҡойроғон тотам, тимәй ҙә ә!?” еҙ нисек уйлай ығыҙҙыр, минеңсә, мөмкинлек бар икән, әҙәби ижад емешен дә өлгөргәс, бешеп еткәс, бөтөн килеш “ауыҙ итеү” фарыз ымаҡ. Был – тәҡдим дә, тәнҡит тә түгел, ынамыш ҡына, быға ҡолаҡ алырға ла, алмаҫҡа ла мөмкин. Хәтерегеҙҙәме, ошондай трибунанан элгәре бер үк әҙәби сәсмәүерҙең редакциянан редакцияға осоп-ҡунып йөрөүе, өҙөк-йыртыҡтарының матбуғатҡа сығыуына шик-шөб ә белдерелгәйне? Хәҙер и ә ошо фәтеүә еҙ күренеш ныҡ ирәгәйҙе, тимәк, кәрәк икән, дәғүәләргә ҡолаҡ ҡарпайта beләбеҙ, тимәксемен. Әле Гөлнур Яҡупованың “Ҡыҙ бала” тигән романы уҡылыу өҫтөндә. Баҡ аң, әҙибә «Ҡатындар» тигән трилогия ын ослап, дөйөм стилистикаын камиллаштырыу менән мәшғүл икән. Дәртенә дарман!

Болғансыҡ дәүер шауҡымы микән, бәлки, йөрәк ҡушыуынандыр, уңғы съездан аҙаҡ әҙәби процеста документаль прозаға, тарихи хроникаға, мемуарҙарға иғтибар көсәйә төшкәндәй. Бүтән әйбәт өлгөләр ҙә етерлек. Нәжиб Асанбаев, Суфиян Поварисов, Ғайса Хөсәйенов, Рауил Бикбаев, Мансаф Ғиләжев, Рәүеф Насиров, Сәлимйән Бәҙретдинов, Мәхмүт Хужин китаптары нәҡ әлеге фекергә ҡеүәт. Яҙыусыларыбыҙ архивтарҙа эҙләнә, халыҡтың хәтер андығында ҡаҙына, интуристарса йөрәк еп, ете диңгеҙ аръяғына юллана, елкенеүҙәрен заманға аҙымдаш вә ауаздаш сүрәттә ижадҡа егергә ынтыла. Зөфәр Толомғужин, миҫалға, нисәмә йылдар инде райондан районға, ауылдан ауылға йөкмәнеп йөрөп, спонсорҙар ярҙамында “Шәжәрәләрҙә – халыҡ тәрбиә е” тигән ваҡытлы, бик кәрәкле, үкенескә ҡаршы, ни бары өс йөҙ генә дана ҡалын китап сығарҙы. Унда бик ҡыҙыҡлы, бик тә тан ыҡ асыш-табыштарға, башҡорт ырыу-нәҫелдәренең, зат-араларының иҫ киткес киң әм тәрән сатырланыуына, боронғолоғона, ҡабатланмаҫ этнографик ғөрөф-ғәҙәттәренә, йолаларына юлыға ың. Ҡыҫҡа ы, йылы кабинеттарҙан сығышмаған бәғзе тарихсылар әм фольклорсылар көнләшерлек шөғөлөн ағай, рухлы аҡ аҡалдар әм ағинәйҙәр гүргә инеп бөтмәҫ борон, типтер, туҡтатмаҫҡа уйлай. Изге сәфәрендә аяҡтары талмауын теләйек. үҙ ыңғайында тәҡдим: бер нисә китап авторын Яҙыусылар союзына ҡабул итеү ҙә йөҙөбөҙҙө ҡыҙартмаясаҡ.

Туристарса, тигәйнек.... Ошо юҫыҡта Камил Зиганшиндың сәйәхәтнамәләре ҡараштарҙы киңәйтерлек, зи ендәрҙе арбарлыҡ. Африка, Аргентина, Тибет, Непал, Берләшкән Ғәрәп Әмирәттәре... Ана, ниндәй ил-ҡитғаларҙы байҡаған ҡәләмдәшебеҙ. Яҙмаларында автор күктәргә олғашҡан тауҙарға менә, крокодилдар, бегемоттарға йәнәш йөҙә, арыҫландарҙы фото-видеоға төшөрә, иң мө име, урындағы халыҡтарҙың этномәҙәниәтен ҡылыҡ ырлай. Әлбиттә, Башҡортостан улы, Рәсәй вәкиле күҙлегенән.

Яңыраҡ публицист Мәхмүт Хужин секция ағзаларына күләме дүрт табаҡлыҡ ҡына, әммә йөкмәтке е хәтәр әлмәк папка тотторҙо. Әҫәрен «повесть-эссе», “эссе” тип кенә атарға мөмкин, сөнки авторҙың публицистик ҡоласы, шәхсән позиция ы ярылып ята унда. Пацифистик повесть, повесть-уйланыу, повесть-иҫкәртеү... Мәғлүмәткә ғәжәп бай. Геройҙар байтаҡ, мәгәр улар иҫтә ҡала, үрәүерәк бул а ла, сюжет ебе лә өҙөлмәй. Автор ҡыҫҡа, тос телмәр, мәргән стиль, тормошсан фә ем менән алдыра.

...Йәнтөйәге йыльяҙма ын автор ил-донъя тарихына бәйләп кәүҙәләндергән сәйәси-ижтимағи абзацтар, гүйә, шаңҡытҡыс кинокадрҙар ымаҡ тәьҫир итә. Матбуғат биттәренән әммәбеҙгә уҡырға насип итә күр ен. «Яңғыҙ сағыл» – исеме лә серле, уйсан.

Йәшерене-батырыны юҡ: секцияға оло өйләшеү ойоштороролоҡ ҡулъяҙмалар ирәгерәк ҡуйыла хәҙер. уңғы ында Нияз Алсынбаевтың повестарына фатиха бирелде, ултырышта бер ыңғайҙан оҫталыҡ мәсьәләләре күтәрелде.

Бындай ултырыштар күберәк уҙғарыл ын ине лә бит... Бер йә ике генә көнлөк проза семинарын уҙғарыу ҙа ҡағыҙҙағы план булып ҡына йөрөй, ә унда өлкән быуын әҙиптәре менән өмөтлө ҡәләмдәштәрҙең осрашыуын, башҡорт проза ының традицион мәктәбен тергеҙергә ниәтләйбеҙ. Тик ҡасан? Ҡайҙа? Был тәңгәлдә идараның ярҙамына мохтажбыҙ.

Ҡай ы бер төбәк ойошмаларында ағза аналған йәш әм башлап яҙыусыларҙың, үҙҙәренең коллективында ынау үтмәйсә, Союзға инергә рекомендация орап йә нәшриәткә тапшырыласаҡ ҡульяҙма ына протокол юллап сейле-бешле әйберҙәрен беҙҙең секцияға ҡуйырға йөрөүҙәре теңкәгә тейә. Был йәм еҙ хәлде төбәк яҙыусылар ойошмалары, тәүойошма сәркәтиптәре иҫтән сығарма ын ине, тим.

Нисек кенә булма ын, прозабыҙ дарья ы тынмай, йәйрәп ағыуын белә. ис шик еҙ, уға тематик киңәйеү, интеллектуаллекте күтәреү, яңы геройҙар эҙләү, образдар галерея ын байытыу, стилистик камиллашыу, йәштәр иҫәбенә сәсмәүер оҫталарын ишәйтеү ҙә фарыз. Заман үҙе шуны талап итә. Ә бөгөнгө йәшәйешебеҙ асылын «АИФ»-ҡа биргән уңғы интервью ында 85 йәшлек Юрий Бондарев тәрән борсолоу менән былайыраҡ тоҫмалланы: “Рәсәйҙә доллар батшалыҡ итә... Ҡыҫҡа ғына, донъя ваҡыты менән иҫәплә әң — секундлыҡ ҡына ғүмерендә кешеләрҙең байырға ынтылышы — иҫәрлек ул... Илде бары тик үҙ генә ҡотҡарасаҡ”. Эйе, ул үҙҙе, ҡулдан килгәнсә, беҙ ҙә әйтергә бурыслыбыҙ.

**Миңлеғәли НӘҘЕРҒОЛОВ,**
Башкортостан Яҙыусылар союзының әҙәбиәт ғилеме ∞әм әҙәби тәнкит секция∞ы рәйесе

## Күпмелер алға барабыҙ шикелле...

Әгәр әҙәби ижад күңел, рух шөғөлө, хис-тойғо сағылышы бул а, ошо ижад тура ындағы яҙмалар: әҙәби-ғилми күҙәтеү, рецензиялар, тәнҡит мәҡәләләре талап ителгәнлек, заруриәт емештәре булып тора. Был яҙмалар өҫтөндә эшләүгә әр кем атлығып бармай, сөнки уларҙан авторға әллә ни мәртәбә өҫтәлмәй, баҫыла ҡал а — гонорары ла самалы ғына түләнә, тура ын ярып әйт ә — үҙенә ҡаршы дошмандарҙы күбәйтә. Ни ти әң дә, беҙҙә әр ҡәләм эйә е үҙен ҡабатланмаҫ ижадсы, бөйөк яҙыусы итеп хис итергә күнеккән. Бына шуға ла ысын мәғәнә ендәге тәнҡит мәҡәләләренең ирәк күренеш булыуына ис тә аптырарға ярамай.

Беҙҙең секция “Әҙәбиәт ғилеме әм әҙәби тәнҡит секция ы” тип атала. Был атамалағы “әҙәбиәт ғилеме” тигән үҙбәйләнеш, ғөмүмән, әҙәбиәткә ҡағылышлы тикшереүҙәрҙе күҙ уңында тотмай, әлбиттә. Фәҡәт хәҙерге, ағымдағы әҙәбиәттә барған үҫеш-үҙгәрештәр, ижади табыштар, юғалтыуҙар, жанр, стиль, тематика, йөкмәтке, форма, үрәтләү саралары, ижади алымдар әм башҡаларға ҡағылышлы мәҡәләләр, сығыштар ғына ҡарай уға.

Уҙған 2008 йылда әҙәбиәт ғилеме әм әҙәби тәнҡиттең торошо нисегерәк булған уң? Ошо орауға яуап эҙләп, республикабыҙҙың төп баҫмалары булған “Ағиҙел” журналын, “Башҡортостан” әм “Ҡыҙыл таң” гәзиттәрен ҡайтанан күҙаллап сығырға тура килде. Әлбиттә, был тематика “Йәшлек”, “Өмөт” кеүек йәштәр ваҡыт-

лы матбуғатында ла яҡтыртылды әм яҡтыртыла килә. Әммә мө имерәк мәсьәләләр, күренеш булырҙай әҫәрҙәр тура ындағы мәҡәләләр күберәк “ололар” матбуғатына сығарылыуын иҫтә тотоп, беҙ үрҙә телгә алынған журнал әм гәзиттәр менән генә сикләндек.

2008 йылда “Ағиҙел” журналы биттәрендә “Әҙәби тәнҡит” рубрика ы аҫтында 14 мәҡәлә донъя күргән. Шуларҙың 4- е әҙәбиәт ғилеме мәсьәләләренә арнал а, ҡалғандары әҙәби тәнҡит, рецензия, айырым әҙиптең ижадына байҡау, күҙәтеү рәүешендә яҙылған.

Тәүге төр мәҡәләләр ара ынан Зәйтүнә Шәрипованың “Художестволы әҫәрҙәрҙә әҙәби алынмаларҙың функция ы” әм Земфира Та ированың “Башҡорт мемуаристика ында шәжәрәләр” исемле хеҙмәттәре иғтибарҙы йәлеп итә. Әгәр Зәйтүнә Шәрипова әҙәби алынмаларҙы, йәғни төрлө сығанаҡтарҙан, документтарҙан, шәжәрәләрҙән әм хәтирәләрҙән цитаталарҙы яҙыусылар үҙ әҫәрҙәрендә элек әм хәҙер нисек ҡулланыуын, алынмаларҙың әҫәрҙең художестволы ҡиммәтен күтәреүгә нисек булышлыҡ итеүен яҡтырт а, Земфира Та ирова Борис Хәйретдиновтың “Ете лә генә ырыу, бере е – Бөрйән” тигән тарихи романы менән таныштыра әм унда әҫәрҙе ойоштороуҙа шәжәрә тексы ниндәй роль уйнауын күр әтә. Земфира Та ированың Рауил Бикбаев шиғриәтендәге эпистоляр формалар тура - ындағы мәҡәлә ен дә шағир ижадына яңыса ҡараш үрнәге тип ҡабул итергә була.

Әҙәби тәнҡит кәштә енә алынған мәҡәләләрҙең бары ын да ысын тәнҡит мәҡәлә е тип әйтеп булмай. Күпселеге уларҙың юбилей йәки бүтән уңай менән яҙыусы ижадына дөйөм байҡауҙан әм мәҙхиә йырлауҙан ғибәрәт. Шулар фонында ағымдағы әҙәбиәткә арнап яҙылған бер нисә мәҡәләне айырым билдәләп үтә е килә.

Үткән йылдарҙағыса, заман проза ына төплө күҙәтеү менән Гөлфирә Гәрәева сығыш я аған. “Ҡәләм осонда кеше әм уның йәшәйеше” тигән мәҡәлә ендә ул, Рауил Шаммас, Гөлсирә Ғайсарова-Ғиззәтуллина, Рәшит Сабит, Ризван Хажиев әҫәрҙәренә туҡталып, бөгөнгө прозалағы ҡай ы бер ынтылыштар тура ында үҙ алып бара әм ошо авторҙарҙың яңы әҫәрҙәренә төрлө яҡлы анализ я ай. уңғы йылдарҙа әҙәби тәнҡит өлкә ендә ҡыйыу-ҡыйыу мәҡәләләре менән танылыу алған Фәнил Күзбәков та “Ҡылдарҙа заман заңымы?” тигән бик мәғәнәле ораু ҡуйып, 2007-лә “Ағиҙел” биттәрендә донъя күргән шиғри шәлкемдәрҙе күҙаллап сығамм әр авторға, уның әҫәрҙәренә ҡарата үҙ фекерен, теләген, кәңәштәрен әйтә. Бында, әлбиттә, авторҙарҙың күп булыуы, тәнҡитсенең бары ы тура ында ла үҙ әйтергә ынтылыуы мәҡәләне бер аҙ тәҫ өҙләтә төшкән, ҡай ы бер әҫәрҙәрҙе атап, анап сығыуға ғына килтергән. Йәғни Фәнил Тимерйән улы үҙенең элекке, үткән йылдарҙағы принциптарынан бер ни тиклем ситләшкән, тәнҡитен йомшарта төшкән, тиергә мөмкин.

Үҙенең сираттағы тәнҡит мәҡәлә е менән Әнғәм ағай Хәбиров та бик сағыу сығыш я аған. Уның “Ебәктән дә нескә күңелем ҡылы...” тигән мәҡәлә ендә бығаса әҙәби күҙәтеүҙәрҙә әллә ни иғтибар ителмәгән Мөхәммәт Закиров шиғриәтенә байҡау я ала әм, автор үҙе әйтмешләй, “күҙенә кереп бармаған” ошо шағирҙың ижад манера ы, алымдары, үҙенсәлекле табыштары бик йәтеш итеп асып алына. Салауат Әбүзәровтың “Утлы шағир” мәҡәлә е лә бик отошло, хисле итеп яҙылған. Бында арабыҙҙан бик иртә киткән талантлы ҡәләм эйә е Рәйес Түләктең “Мең дә икенсе кис...” тигән шиғри йыйынтығы тура ында үҙ бара әм ундағы “Каса”, “Тулҡын йышлығы” әҫәрҙәре, “Яҙыуҙар” шиғри циклы, “Яныу” поэма ының көслө, хосусиәтле яҡтары асып алына. Фәрзәнә Аҡбулатованың “Тормоштағы тыныш билдәләре” мәҡәлә е и ә үҙенең бөтөнләй яңы стилдә, яңы формала яҙылыуы менән арбай. Риф Тойғондоң “Туҡталҡа” повесын уҡығандан уң тыуған уй-фекерҙәрен ул тәү ҡарашҡа хатта сәйерерәк яңғыраған “Ике нөктә”, “Өндәү

билдә е", " орау билдә е", "Өтөр", "Нөктә", "Күп нөктә" тигән бүлексәләрҙә еткерә. Әҙәби ижадта ғына түгел, шул ижад тура ындағы яҙмаларҙа ла тапалған, инде ялҡытып бөткән ҡалыптарҙан баш тартып, яңы форма, яңы алымдар ҡулланыуҙы ҡайғыртыу беҙгә күптән кәрәк. Улар уҡыусыны ла ҡыҙыҡ ындыра, иғтибарҙы тартып тора.

2008 йылда "Башҡортостан" гәзите әҙәби тәнҡит материалдарына мул урын биргән. Ноғман Мусин, Тамара Ғәниева, Салауат Әбүзәров, Таңсулпан Ғарипова, Рим Исхаҡов, Рафаэль Аҙнағолов, Лариса Абдуллина, Ғиниәт Ҡунафин, Дамир Шәрәфетдинов, Әлиә Йәноҙаҡова, Зәки Әлибаев әм башҡа ҡәләмдәштәребеҙ төрлө темаға мәҡәләләр менән сығыш я аған. Ноғман ағай Мусиндың "Хикәйәнең йәне – оҫталыҡта" тигән мәҡәлә е оло тәжрибәле әҙиптең йәшерәк быуын хикәйәселәренең әҫәрҙәренә күҙәтеү я ауы менән ҡыҙыҡлы. Ул Сабир Шәриповтың "Ҡыйпылсыҡ" әм Салауат Әбүзәрҙең "Ләхет еҙ ҡәбер" хикәйәләренә туҡталып, авторҙарҙың сюжетты оҫта ойоштора белеүен, образлы үрәтләү саралары менән урынлы эш итеүен, халыҡтың йәнле өйләш элементтарын йәтеш ҡулланыуын билдәләй. Шул уҡ ваҡытта уңғы йылдарҙа республика баҫмаларында йөҙәрләгән хикәйә донъя күреп тә, уларҙың күпселегендә жанр талап иткән фекер сослоғо, композицион йыйнаҡлыҡ, тематик яҡтан табыш булырҙай, кеше тигән исемде күтәрмәкләрҙәй сағыу образдар юҡ кимәлендә булыуы борсой әҙипте. Ошо йә әттән Ноғман ағай Зөлфирә Ҡаҙаҡбаеваның "Таж үргән ҡыҙ", "Күбәләк", "Рәйлә киҙеүе" хикәйәләрен, конкрет етеш еҙлектәрен күр әтеп, тәнҡит итә.

Салауат Әбүзәрҙең "Серле "сир" мәҡәлә ендә лә тәнҡит ярай ы уҡ көслө. Автор, гәзит редакция ына килгән шиғырҙарға күҙәтеү я ап, ебәрелгән әҫәрҙәрҙең ысын шиғыр булып етмәүен әм быны сәбәптәре нимәлә икәнен бик урынлы, йәтеш итеп аңлатып бирә, кәңәштәрен әйтә. Тамара Ғәниеваның "Яҡты күңелле шағир" тигән мәҡәлә е шиғри күңелле драматург Флорид Бүләков ижадына арналған. Автор шағирҙарға хас көслө хис-тойғо менән драматургтың пьесалары әм башҡортса тәүге телесериалдың сценарийы булған "Ай ҡыҙы" әҫәренә байҡау я ай әм уй-фекерҙәрен әйтә. "Донъяны "мөхәббәт ҡотҡарыр" мәҡәлә ендә и ә Тамара Ғәниева Флорид Бүләковтың " өйөү сәғәтен көткәндә" пьеса ына Борис Манжиев режиссура ында ҡуйылған спектаклде ҡарағандан уңғы уй-кисерештәре менән уртаҡлаша. Флорид Бүләков пьесаларына ҡуйылған спектаклдәр тура ында Әлиә Йәноҙаҡова ла фекерҙәрен әйтә. "Үлем әм йәшәйеш тема ына диптих" мәҡәлә ендә ул "Эх, күгәрсенкәйҙәрем!..", " өйә еңме, өймәй еңме?.." спектаклдәренең диптих булып, бере е икенсе енең дауамы булған әҫәрҙәр икәнлеген асып бирә әм уларға анализ я ай. Лариса Абдуллинаның "Уйландырыр шағир ижады" мәҡәлә е лә сәхнә әҫәренә арналған. Унда Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәре буйынса Таңсулпан Бабичева сәхнәләштергән "Донъяның ярҙары икәү" спектакле тура ында үҙ бара, әм уны ҡарағанда алған тәьҫораттар бирелгән.

Әҙәби бит даими сығарыла кил ә лә, 2008 йылда "Ҡыҙыл таң" гәзитендә тәнҡит мәҡәләләре сағыштырмаса әҙерәк. Бында Суфиян Поварисов, Нәжиб Асанбаев, Салауат Рәхмәтулла, Хәсән Назар, Фәрит Фәткуллин, Фәниә Ғәбиҙуллина, Марсель Ҡотлоғәлләмов, Татарстан әҙиптәре Роберт Миңнуллин, Харрас Әйүп әм башҡалар сығыш я аған. Шулар ара ынан Салауат Рәхмәтулланың "Йыр сәнғәтендәге "комбайндар" әм "бульдозерҙар" тура ында" тигән мәҡәлә е ҡыҙыҡлы. Унда автор Рәмил Сурағол, Фәнис Яруллин, Радик Хәкимйән кеүек ҡәләмдәштәрҙең йыр текстарында рифма-ритмик теүәл еҙлекте, мәғәнә еҙ, урын ыҙ үҙҙәр ҡулланылыуын, айырым йырсылырҙың халыҡ йырҙарын боҙоп, үҙҙәренән үҙҙәр, хатта куплеттар өҫтәп йырлауын ҡаты тәнҡитләй. Хәсән Назарҙ-

ың “Яңы быуаттың етенсе артылышында” мәҡәлә ендә лә тәнҡит ярай ы уҡ киҫкен ҡуйылған. “Шиғриәтебеҙ бөгөн бына шундай, иртәгә нисек булыр?” тигән орау ҡуйып, автор 2007-лә баҫылған шиғри әҫәрҙәрҙе күҙаллай әм уларға ҡарата үҙенең уй-хистәрен, тәнҡит үҙҙәрен, кәңәштәрен әйтә, уңғы йылдарҙа шиғырҙың, шағирҙың абруйы төшә, юғала барыуына хәүефләнеүен белдерә.

үҙҙе йомғаҡлап, шуны әйтергә була: 2007 йыл менән сағыштырғанда, 2008 йылда әҙәби тәнҡит беҙҙә бер аҙ йәнләнә төштө, әҙәбиәттең бар төрҙәре буйынса ла, бигерәк тә шиғриәт әм проза буйынса, тос йөкмәткеле, ағын аҡ, ҡара ын ҡара тип әйткән үткер мәҡәләләр донъя күрҙе. Әммә улар авторҙарҙы күккә сөйөп маҡтаған мәҙехнамәләр ара ында юғалып ҡала әм үтә лә ирәк.

**Рәдиф ТИМЕРШИН,**
Башҡортостан Яҙыусылар союзының
сатира ∞әм юмор секция∞ы рәйесе

## Көлгән кеше – күркәм...

Миңә үҙҙе, ғәҙәттә, иң уңынан тиерлек бирәләр. Мин быға күнегеп бөттөм инде. Шулай булырға тейеш, тип ҡабул итәм. Гәзит-журналдарҙа ла бит әскелтем-сөскөлтөм яҙмаларға, йәғни сатира-юморға иң аҙаҡтан ғына урын бирелә. Ни өсөн? Мин бының хикмәтен үҙемсә былай аңлайым. Беҙ бөтәбеҙ ҙә беләбеҙ: асылда әҫәрҙәр уңғы үҙҙәрҙе әйтер өсөн яҙыла. Тимәк, автор әйтергә теләгән иң мө им әм иң кәрәкле фекерҙәр аҙаҡҡа ҡалдырыла. Тимәк, сатира әм юмор секция ы рәйесенә аҙаҡтан үҙ бирелеү бары тик бер генә нәмәне аңлата: бөтә әҙәби жанрҙар ара ында бөгөн беҙҙең өсөн иң мө име — сатира әм юмор!..

иҙеп торам: был үҙҙәрҙе шаярыу тип ҡабул иттегеҙ, әлбиттә. Әммә, нисек кенә ғәжәп булма ын, был шаярыуҙа бер ни ҡәҙәр хаҡлыҡ та бар. Бер ни ҡәҙәр генәме икән?

Әгәр ҙә беҙ тирә-йүнгә, мөхитебеҙгә, йәмғиәтебеҙгә хатта текләп түгел, өҫтәнмөҫтән генә күҙ ал аҡ та, уңғы ике тиҫтә йыл эсендә хасил булған, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ис тә ҡыуандырмаған үҙгәрештәрҙе күрербеҙ. Үҙәк матбуғат, радио, телевидение, кино хеҙмәткәрҙәре, бөтә донъя үрмәксе ауы — интернет тырышлығы, системаның алышыныуы өҙөмтә ендә күпме ыңғай кешелек сифаттары ғәйеп булды! Хатта "кешелеклелек" тигән изге төшөнсә лә ниндәйҙер ят, кәрәк еҙ, биҙҙергән сифат булараҡ ҡабул ителә башланы! Ә бит "кешелеклелек" — беҙҙе башҡа төр йән эйәләренән ыңғай яҡҡа айырып тороусы төп сифаттарҙың бере е лә ба а!

Быуаттар буйы тупланған рухи ҡиммәттәребеҙҙең аллы ғына өлөшө хәбәр еҙ юғалды! Йәмғиәтебеҙҙә быға тиклем күрелмәгән, ишетелмәгән, хатта аташыулы төшкә лә инмәгән, йомшартып әйткәндә, тиҫкәре күренештәр пәйҙә булды... Хатта беҙ үҙебеҙ, йәғни яҙыусылар,– ҡасандыр үҙәк урамдарҙа ҡосаҡлашып йөрөгән, көн айын төрлө редакцияларҙа, башҡа урындарҙа осрашып, хәл белешеп, ижади әңгәмәләр ҡорған, бәхәсләшкән, бер-беребеҙгә кәңәштәр биргән кешеләр – үҙара аралашмай башланыҡ тиерлек... Шулай итеп, йәмғиәтебеҙҙә, ошо йәмғиәтте хасил иткән кешеләр күңелендә әкренләп гүзәл сифаттарҙың ҡороған әм кәкре күренештәрҙең сәскә ата башлауы осоронда сатира-юмор жанрының кәрәклеген әм мө имлеген үҙенән-үҙе ыҙыҡ өҫтөнә алырға тура килә. Сөнки йәмғиәттәге әм кешеләрҙәге бөтә тиҫкәре күренештәр әм насар сифаттар — тап сатира-юмор жанры объекты бит. Быны беҙҙең үткер, йор телле бөгөнгө әҙиптәребеҙ яҡшы аңлай;

улар үҙ заманында уҡыусылар күңеленә еңеп ҡалған байтаҡ үткер әҫәрҙәр ижад иткән Сәғит Агиш, Сәләх Кулибай, Тимер Арыҫлан, Рәйес Ғабдрахманов, Ғариф Ғүмәр, Агиш Ғирфанов, Фәйзи Ғүмәров, Зөлфәр Хисмәтуллин, Сулпан Иманғолов, Михаил Воловиктарҙың традицияларын уңышлы дауам итә. Был ярай ы уҡ ҙур исемлекте килтереүемдең сәбәбе шунда: беҙҙә сатира-юмор жанры бер ҡасан да үгәй етелмәне; ул әр саҡ кәрәкле әм үтемле булды. Сатириктарҙың төп баҫмаы " әнәк" журналының дәүләт ярҙамы менән инде ик ән йылдан ашыу сығып килеүе —асыҡ миҫал. Күп төбәктәрҙә, хатта Мәскәүҙең үҙендә лә, бындай журналдар күптән "аяҡ уҙҙы". Ә беҙҙә ул башҡорт әм рус телдәрендә аман сығып килә. Әйткәндәй, күп кенә сатириктарыбыҙҙы сыныҡтырып, өңгө-ҡәләмдәрен үткерләп, уҡыусыларға киң билдәле итеп яу ҡырына көрәшкә оҙатҡан баҫма ла " әнәк" журналы бит. Ә яу ҡырының нимәнән ғибәрәт икәнлеген баштараҡ әйттем шикелле.

Беҙҙең сатириктарыбыҙ үткән йыл ең ыҙғанып эшләне, ҡәләмдәрен тағы ла үткерерәк сарлай төштө, тип әйтергә тулы нигеҙ бар. Уҡыусыларға киң билдәле лирик әм сатирик, шиғриәттә лә, прозала ла берҙәй үк уңышлы ижад итеүсе Риф Мифтахов "Ғишыҡ тотоу – ут йотоу" исемле китап сығарҙы. Бында байтаҡ ҡына ҡыҙыҡлы, фә емле әм көлкөлө хикәйәләр ингән. Был әҙип ғүмер уҡмағы оҙонайған айын аман йәшәрә бара, ил амланыбыраҡ ижад итә.

Йәнә шундай әҙиптәребеҙҙең бере е — Мансаф Ғиләжев. Йылдар үткән айын ул да сәмләнеберәк, тырышыбыраҡ, емешлерәк эшләй ымаҡ. Үткән йыл, юбилейы айҡанлы, уның күләмле әҫәрҙәрҙән торған ҡалын ғына китабы донъя күрҙе. Әммә уның хыялы — ғүмер буйы тип әйтерлек яҙылған сатирик әм юмористик хикәйәләрен бер ҡыйыҡ аҫтында күреү. "Әмәле табыла" тип исемләнгән был йыйынтыҡ әлегә ҡулъяҙма хәлендә. Башҡортостан "Китап" нәшриәте уны сығарыу әмәлен табыр, тигән өмөт бар. Әйткәндәй, беҙҙең нәшриәт сатириктарға ыңғай ҡараштa, төрлө зауыҡлы уҡыусыларҙың, шул иҫәптән күңелле жанр яратыусыларҙың, рухи ихтыяждарын иҫәпкә алып эш итергә ынтыла... Бынан тыш, Мансаф ағай республикабыҙ матбуғатында кескәй күләмле, әммә үткер проблемалы әҫәрҙәре менән әленән-әле үҙен иҫкә төшөрөп тора.

Сөләймән Латипов – шулай уҡ шаҡтай танылған ҡәләм оҫта ы. "Мөхәббәт роза ы" пьеса ы буйынса ҡуйылған спектакль хатта Алтай крайы сәхнәләрендә лә күр әтелә. Туҡайҙың "Шүрәле" әкиәтенә нигеҙләнеп яҙған сатирик комедия ы Салауат башҡорт дәүләт драма театрында уйнала. Тамашасылар яратып ҡарай, тиҙәр. Был тынғы ыҙ әҙип ике йыл буйы Башҡортостан телевидение ында "Кәмит" исемле тапшырыуҙар ойоштороп алып барҙы. "Ҡыҙыл таң" гәзитендә, " әнәк" журналында, башҡа баҫмаларҙа хикәйә-фельетондары даими баҫыла килә.

Иң билдәле сатириктарыбыҙҙың бере е — Марсель Сәлимов. Былтыр уның Ҡазанда "Мәңгелек мөхәббәт" тигән йыйынтығы донъя күрҙе. Бында, лириканан тыш, күңел күтәргес шаян шиғырҙар, пародия әм эпиграммалар шаҡтай күп. Яңыраҡ ҡына уның йәнә бер китабын Башҡортостан "Китап" нәшриәте баҫып сығарҙы. Китапҡа Сергей Михалков үҙе баш үҙ яҙған. Был ҡалын бер томлыҡ рус телендә, ул "Белым по черному" тип атала. Марсель Сәлимовтың иң әйбәт әҫәрҙәре тупланған унда. Рәсәй уҡыусыларына был автор "Литературная газета", "Литературная Россия", "Советский писатель", "Наш современник" кеүек баҫмалар аша киң билдәле. Ул шулай уҡ юмористарҙың халыҡ-ара премия ы лауреаты, хикәйәләре донъяның байтаҡ телдәренә тәржемә ителгән.

Былтырғы йыл Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримов өсөн дә емешле булды: айланма әҫәрҙәренең икенсе томы уҡыусылар ҡулына килеп

юлыҡты. Көлкөлө жанр өйөүселәр өсөн ысын мәғәнә ендә ҙур күстәнәс булды был китап, сөнки унда бары тик сатирик әм юмористик әҫәрҙәр генә тупланған. Унының шиғыр-хикәйәләрендә әр саҡ актуаль, мө им, бөгөнгө көн ҡаҙығына уға торған проблемалар күтәрелә. Марат Кәримов та ҡартайған айын йәшәрә барыусы әҙиптәребеҙ иҫәбендә.

Шуны ы ҡыуаныслы: былтыр сатира-юмор жанрында әүҙем ижад иткән әҙиптәребеҙҙең исемлеге шаҡтай күләмле: Рәлиф Кинйәбаев, Кәбир Аҡбашев, Рәшит Фазлыев, Закир Әкбәров, Әхәт Ниғмәтуллин, Ғәли Ғатауллин, Камил Фазлый, Рамазан Шәғәлиев, Хәмит Ирғәлин... Был билдәле исемдәр эргә енә " әнәк"тең актив авторҙары, әләтле ҡәләм эйәләре Венер Исхаҡов, Марат Әминев, Фәнүз Хәбибуллин, Зәки Сөләймәнов, Дим Ғиззәтуллин, Назим Ғайсин, Юнир Салауатовтарҙы ла йәнәшә ҡуй аҡ, кәмселектәр менән көрәшеүсе күп анлы уғышсан төркөм барлыҡҡа килә. Уларҙың ҡоралы и ә үтә үҙенсәлекле: өткөс сатира әм ескә юмор.

Аҙаҡтан шуны әйтке килә: көлә белеү — кешене башҡа йән эйәләренән айырмалы иткән йәнә бер хикмәтле сифат ул. Тимәк, башта уҡ әйтеүемсә, тормоштоң көҙгө ө тип иҫәпләнгән әҙәбиәттә көлкө жанры ла бик кәрәк, әм был жанрҙа эшләүселәрҙең зарурлығы үҙенән-үҙе аңлашылалыр.

Көлгән кеше тиҙ ҡартаймай, тиҙәр. Унан уң, шуны ы ла бар: көлкө – кешеләрҙе яҡынайта, уларҙың ҡайғы ын еңеләйтә, хатта дуҫлаштыра. әр хәлдә, минең әле көлә-көлә уғышҡан кешеләрҙе күргәнем юҡ. Көлгән кеше яуыз булмай торған. Көлгән кеше әр саҡ күркәм күренә!

**Рәшит САБИТ,**
Башҡортостан Яҙыусылар союзының
татар телле әҙиптәр берләшмә∞е рәйесе

## Ышаныс менән йәшәйек

уңғы йылдарҙа унлап йәш кешенең китаптары донъя күрҙе. Улар — Илдус Фазлетдинов, Ләйсән Яҡупова, Индира Муллаянова, Дилбәр Булатова, Аида Хәйретдинова, Ғабдулла Вафин, Айҙар Басиров, Айҙар Зәкиев. Былар – беҙҙең әҙәбиәттә шаҡтай тернәкләнгән йәштәребеҙ. Уларҙың ғөмүми темалары – йәшлек, мөхәббәт, тормошто өйөү... әр ҡай ы ының тәүге китаптары ҡыуандыра. Үткән йылдың көҙөндә генә Индира Муллаянованың шиғри ҡулъяҙма ын тикшергәйнек. Инде быйыл китабын ҡулға алдыҡ. Секция ултырышы ваҡытында уҡ унын үҙенә хас стиле, үҙенсәлекле фекерләүе беҙҙе арбағайны. Был йә эттән Марат Кәримов, Суфиян Сафуанов, Лилиә Сәғиҙуллина, Мөнир Вафиндар, ошо ыңғай яҡтарын билдәләү менән бергә, ҡай ы бер теләктәрен дә белдергәйнеләр. Шул теләктәрҙе берләштереп, Марат Кәримов йәш шағирәгә былайыраҡ әйткәйне: "Күберәк үҙ күңел даирәндә ҡаҙына ың. Донъяны киңерәк, төрлө төҫтәре, ҡатлаулы яҡтары менән күрергә тырыш".

Был кәңәште Индира, әлбиттә, ҡабул итте әм үҙенең тематика ын киңәйтергә, ижтимағи темалар менән үҙ ижадын байытырға вәғәҙәләне. Киләсәктә беҙ быны күрербеҙ, тип уйлайым. Әлеге «Йән йәрем» йыйынтығы шиғыр өйөүселәр, айырыуса йәштәр, яратып уҡырлыҡ.

Йәш прозаиктарҙан Дилбәр Булатова менән Айҙар Зәкиев ижадтары бик ҡы-

ҙыҡлы. Сюжеттары яңы, мауыҡтырғыс, өйләмдәре теүәл әм тапҡыр. Уларҙы өлгөргән яҙыусылар тип иҫәпләргә мөмкин.

Балтастан Аида Хәйретдинованың да хикәйәләр китабы былтыр донъя күрҙе. Китап сыҡҡансы беҙ был автор менән ике тапҡыр осраштыҡ. Тәүге семинар-ултырышта уның әҙәбиәттә ҡабатланған темалар менән эш итеүе иҫкә алынған ине. Ул был кәмселекте яңы хикәйәләрендә төҙәтергә тырышты. Айырыуса “ уңғы көн” хикәйә е был йә әттән уңышлы булды. Ауыл ҡарсығының зирәк, кешелекле, бер ни тиклем күрәҙәләге лә булған бай әм психологик яҡтан тәрән образын тыуҙырҙы.

Ғабдулла Вафиндың “Алдау көнө ғәләмәте” тигән тәүге китабы беҙҙе ҡыуандырҙы. Авторҙың бер кемдекенә лә оҡшамаған үҙ стиле, күпселек хикәйәләренең ярым фантастик характерҙа булыуы уҡыусыны йәлеп итә. Уларҙың көлкөлө, йыш ҡына сатирик характерҙа булыуы, нигеҙендә етди фекер, идея ятыуы мауыҡтыра. Секция ултырышында беҙ уға хас ошо стилде, йөкмәтке үҙенсәлеген юғалтмаҫҡа, үҫтерә барырға кәңәш иттек.

Айҙар Басиров та — әләтле автор. Уның “Имтихан” тигән китабы был хаҡта асыҡ өйләй. Юмор-сатира уға ла хас. Ләкин әлегә Айҙарҙың ижадында художестволылыҡ етешмәй, журналистика теле үҙен ныҡ иҙҙерә. Шулай ҙа тематика ының актуаллеге етеш еҙлектәрен бер аҙ аҡлай, әҫәрҙәре ҡыҙыҡ ынып уҡыла.

Йәштәр ижады беҙҙә иғтибар үҙәгендә тора. Был — тәбиғи хәл. Шуға ла улар ижадына нығыраҡ туҡталып киттем. Күрә егеҙ, әҙәбиәт майҙанына ныҡ баҫып күпме йәштәр килә! Төклө аяҡтары менән!..

Күптән түгел “Китап” нәшриәтендә “Күңел көҙгөләре” тигән бик матур китап сыҡты. Беҙ нәшриәт мөхәррире Динә Мырҙаҡаева менән берлектә Яҙыусылар союзы бина ында был китаптың презентация ын үткәрҙек. Башҡорт дәүләт университетының күп кенә студенттары, уларҙың уҡытыусылары, яҙыусылар, шағирҙар йыйылды. әр хәлдә, залыбыҙ тулы булды. “Күңел көҙгөләре” китабына 7 авторҙың әҫәрҙәре кергән. Улар тура ында өйләшеү фә емле әм етди булды. Китапҡа юғары ба а бирелде.

Мин ошо китаптан ике генә авторға туҡталып китмәксе булам. Былар — Бәләбәйҙән Зәйфә Сәлихова, Борайҙан Фәнзәлиә Мәснәүиева.

Зәйфәне күптәрегеҙ яҡшы беләүҙ. “Ил ам шишмәләре”н ойоштороусыларҙың бере е ул. Ул төҙөгән, республика йәштәренең бик күп шиғырҙары тупланған “Йәйғор” — “Радуга” — “Салауат күпере” тип өс исем менән аталған йыйынтыҡты ла уҡығанығыҙ барҙыр. Хаҡлы рәүештә әлеге “Күңел көҙгөләре” тигән китап Зәйфә Сәлихова шиғырҙары менән асылған. “Таң сыңы” тип атала уның йыйынтығы. Унда ингән шиғырҙар хисле, төҙөк, образлы. Автор күптән өйрәнеү осорон үткән, инде шағирә булараҡ өлгөргән. Уға киләсәктә лә уңыштар теләргә ҡала.

Фәнзәлиәнең “Әсе алма тәме” тигән йыйынтығына байтаҡ хикәйәләре әм “Бейек тауҙар илендә” тигән повесы кергән. Уның әҫәрҙәренең ил ам менән яҙылғанлығы иҙелеп тора. Конфликты артыҡ ҡырҡыу, ҡатлаулы булма а ла, әҫәрҙәрен яратып уҡый ың, художестволы үрәтләү саралары көслө, образдарға тәрән психологизм хас. Әммә Фәнзәлиәлә бер ҡәҙәр тел проблема ы бар. Был тәңгәлдә уға етдиерәк эшләргә кәңәш ителде.

Минең замандаш шағирҙар ҙа тик ятманы. Үткән йылғы йыйылыштан уң Салауат Рәхмәтулла, Рәдиф Тимершин, Марис Нәзиров, Нәжибә Әминева, Фәрит Суфияров, Кәүсәриә Шафиҡова, Дилә Булгакова, Фәндидә Харрасовалар матур-матур шиғри шәлкемдәрен, поэмаларын, ҡай ылары йыйынтыҡтарын сығарҙы. Мәҫәлән, Кәүсәриә Шафиҡованың “Йәнемдә — тормош шауы” тигән шиғырҙар, хикәйәләр йыйынтығы донъя күрҙе.

Был китабы уға 60 йәш тулыу уңайы менән сыҡты. Миңә шағирәнең юбилей

кисә ендә ҡатнашырға тура килде. Яңауыл район-ҡала хакимиәте уны бик ҙурлап, кисәне райондың мәҙәниәт арайында үткәрҙе. Ауырыу хәлендә лә Кәүсәриә күңелен төшөрмәй, ижади тормош менән янып йәшәй. Уға уңыштар теләйек, дуҫтар!

Үткән йыл Ғәли Ғатауллинға 60 йәш тулды. Ошо уңай менән уның “Ете ят йәр” тигән китабы донъя күрҙе. Был китапҡа ике повесть, байтаҡ хикәйәләр, нәҫерҙәр, юмористик-сатирик әҫәрҙәр кергән. Ҡыҫҡа ы, бай йөкмәткеле китап. Ғәли ошо китабы менән яҙыусылар ҡорона ныҡлап аяҡ баҫты, юбилейында әйтелгәнсә, киләсәктә тағын да ҡеүәтлерәк әҫәрҙәре менән уҡыусыларыбыҙҙы шатландырыр әле.

Күмертау ҡала ында Зәкир Әҡбәров, Нефтекамала Эдуард Әғзәмов, Ҡариҙелдә Рәйес Риянов, Өфөлә Радик Хәкимйән актив ижад иттеләр. Уларҙың хеҙмәттәре китаптары аша ла, матбуғат аша ла уҡыусыларға килеп етә торҙо. Эдуард Әғзәмовтың “Ҡыҙыл таң” да баҫылған “Имгәк” тигән повесы, ишетеүемсә, уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡ ыныу тыуҙырған.

Инде ветерандар йәшенә ингән Башҡортостандың халыҡ шағиры Марат Кәримов, беҙҙең күренекле ғалимыбыҙ Суфиян Сафуанов, прозаик Мансаф Ғиләжев, шағир-прозаик Рәсих Ханнанов, Рауил Шаммас, Рәшит Фазлыевтарҙың ижади эштәрен күҙәтеп барҙыҡ, әҙәбиәтебеҙгә арыу-талыу ыҙ хеҙмәт итеүҙәренә ҡыуандыҡ.

Марат Кәримов үҙенең айланма әҫәрҙәрен сығарыу эше менән мәшғүл булды. Беҙ бының өсөн сик еҙ ғорурланабыҙ. Ул – Яҙыусылар союзының иң актив ағзаларының бере е, беҙҙең берләшмәнең таянысы.

Рәсих Ханнанов та ижад эшенән туҡтап торғаны юҡ. Робағийҙары, мәҫәлдәре, рус телендә новеллалары айырым-айырым китаптар булып донъя күрҙе. Рим Хәсәнов Мәскәүҙә – уның үҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы, Тәлғәт Шәрипов Өфөлә шулай уҡ уның йырҙарын аудио дискыларҙа донъяға сығарҙы. Рәсих ағайға ла иҫәнлек, сабырлыҡ, ижади уңыштар теләйбеҙ.

Мансаф Ғиләжевты беҙ документаль әҫәрҙәр яҙыу оҫта ы булараҡ беләбеҙ. Үткән йыл йәнә бер документаль повесть тамамланы.

Рауил Шаммас үткән йыл “Толпар” журналында – “Йәшәү уты”, “Ҡыҙыл таң” гәзитендә “Йән юлдашым” тигән поэмаларын, Рәшит Фазлыев юмор-сатиранан торған шиғырҙар китабын баҫтырҙы.

Беҙҙең хөрмәтле ветерандарыбыҙ Әхәт Ниғмәтуллин, Суфиян Поварисов, Азат Мағазовтар ҙа яңы әҫәрҙәр өҫтөндә эшләй. Әхәт Ниғмәтуллин “Мөхәббәтем – аҡҡош күле” тигән ҙур поэманы айырым китап итеп сығарҙы. Мөхәббәт, ғүмер, йәшәү тура ында уйланыуҙар, ҡыуаныстар, көйөнөстәр сағыла унда. Үткән йыл ул патриот шағир Фәтих Кәримдең быға ҡәҙәр аҙ өйрәнелгән уғыш осоро поэзия ы тура ында ҙур ғына хеҙмәт яҙҙы. Был хеҙмәтенең ҙур өлөшө “Ҡыҙыл таң” гәзитенең 5 анында баҫылып сыҡты. Фәтих Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуға ҙур бүләк булды ул.

Мин үткән йыл Тәтешле районы Күрҙем ауылында йәшәүсе Ҡа им Әүхәтовтан хат алдым. Ул ғүмере буйы шиғриәт өлкә ендә эшләп, Яҙыусылар союзына керә алмауына, уны анға уҡмауҙарына үкенес белдергән, антологияға ла керетелмәгән икән. Уның үткән йыл “Ерем йыры” тигән дүртенсе шиғырҙар йыйынтығы донъя күрҙе. Мин тынысландырып яуап яҙҙым, әлбиттә. Шуны әйтә е килә: Союзды йәшәртәбеҙ тип, таяҡты гел бер яҡҡа ғына бөкмәйек әле. Беҙҙең өсөн Союзыбыҙҙа ҡарттар торамы, йәш кешеләрме – барыбер, тик лайыҡлылар бул ын.

Ә бына икенсе бер затты – Зөлфәт Ша базов тигән кешене, бишенсе йыл идарала эшләп, бер тапҡыр ҙа күргәнем юҡ. Взностарын түләйме ул, юҡмы –

белмәйем. Әгәр взнос та түләмә ә, ул кешенең Союзда тороуынан ни файҙа?..

Ауыр заманда йәшә әк тә, хәлебеҙ иларлыҡ түгел. Яҙыусылар союзы ла, Хөкүмәтебеҙ ҙә, нәшриәт тә беҙҙең хаҡта даими хәстәрлек күрә. Дөрөҫ, күптәребеҙ китаптарын теләгәнсә сығара алмай. Мөмкинлектәр әлегә шул сама. Быны аңлайбыҙ, күреп торабыҙ. 90-сы йылдарҙа йылына 3-4 кенә татар китабы баҫыла ине. Инде тиҫтәгә етте. Әгәр бер ҡыйыҡ аҫтында 7 авторҙың йыйынтыҡтарын иҫәплә әк, үткән йыл бөтә е 16 авторҙың ҡулъяҙма ы донъя күргән. Иншалла, донъя матур ғына бар а, был андар ҙа артта тороп ҡалыр әле. Шуға ышанайыҡ.

**Наил ҒӘЙЕТБАЙ,**
Башкортостан Яҙыусылар союзының
драматургия секция∞ы рәйесе

## Пьеса йыйынтыктары юк!

Драматургия секция ы аша үткән пьесалар ике төргә бүленә. Тәүгеләре — башлап ижад итеүселәрҙең әҫәрҙәре, икенселәре – Яҙыусылар берлеге ағзаларының – прозаиктарҙың әм шағирҙарҙың емештәре. Пьеса яҙырға тәүләп тотонғандарҙың әҫәрҙәре әле “сибек”, шуға секцияла тикшерерлек түгел. Уларҙы мин үҙем генә уҡыйым да авторға фекеремде әйтәм, әҫәрен төҙәтеү әм яҡшыртыу өсөн нимәләр эшләргә кәрәклеген аңлатырға тырышам. Әгәр килешмәйҙәр икән (ә уларҙың күбе е минең менән риза түгел), уларҙы театрҙарға, режиссерҙарға оҙатам. Шул сәбәпле йыш ҡына театр етәкселәренән үпкә үҙе ишетергә тура килә.

Драматургия секция ында, нигеҙҙә, яҙыусы булып өлгөргән әҙиптәрҙең әҫәрҙәрен тикшерәбеҙ.

Ошо йә эттән Талҡаҫ күле янында үткәрелгән сираттағы драматургия семинарында ҙур эш башҡарылды. 2008 йылдың 10 июленән 20 июленәсә ойошторолған был семинарға (әйткәндәй, 14-се тапҡыр) 14 яҙыусы саҡырылды. Унда уңғы йылдарҙа ижад ителгән әм иғтибарға лайыҡ булған бөтә пьесалар әм уларҙың авторҙары ҡатнашты.

Йәш драматургтарға ярҙам күр әтеү йөҙөнән, театрҙарыбыҙҙың алты баш режиссеры ла саҡырылды. Улар бөтә пьесалар менән дә танышып, бик файҙалы әм кәрәкле кәңәштәрен әйтте, был беҙҙең авторҙарға үҙ әҫәрҙәре өҫтөндә артабан эшләгәндә ҙур ярҙам булыр, тигән өмөттәбеҙ.

Традиция буйынса, уҡытыусылар итеп абруйлы, өҫтәмә рәүештә ҡунаҡтар ҙа саҡырылды: Мәскәүҙән билдәле сәнғәт белгесе Валентина Борисовна Федорова менән донъя кимәлендә танылған драматург, “Урал” журналының баш мөхәррире, үҙ театрын ойошторған әм унда менеджер ҙа, баш режиссер ҙа булып эшләгән, Европаның бөтә илдәрендә, шулай уҡ күп кенә Азия әм Америка сәхнәләрендә ҡуйылған 100-ҙән ашыу пьеса авторы Николай Коляда семинар эшендә ҡатнашып, беҙҙе ҡыуандырҙы.

Коляда ике көн буйына “Пьеса нисек яҙыла?” тигән темаға лекция уҡыны, өс семинаристың пьесалары менән танышты, кәңәштәрен әйтте, шулай уҡ бик ҡыҙыҡлы лаборатор эштәр ойошторҙо. Уның мәғәнә е шунан ғибәрәт ине: семинаристар төн эсендә тәҡдим ителгән ситуацияға ҡыҫҡа ғына пьеса яҙырға тейеш. Иртәгә енә Коляда ул эштәрҙең әр бере енә ба а бирҙе, етеш еҙлектәрен, әйбәт яҡтарын күр әтте. Был алым бөтә енә лә оҡшаны. Әйткәндәй, шул ҡыҫҡа пьесаларҙың бер нисә е “Тамаша” журналының быйылғы 1-се анында донъя күрҙе.

Семинар барышында 14 пьеса тикшерелде. Мин семинарға килгән әм пьеса яҙырға йөрьәт иткән бар яҙыусыларға рәхмәтлемен. Сөнки уларҙы ошо өлкәләге ижадҡа драматургияның, тимәк, башҡорт әҙәбиәтенең киләсәген уйлау, борсолоу этәргән, тип уйлайым.

үҙ ҙә юҡ, семинарҙа ҡатнашҡан бар яҙыусылар ҙа талантлы, юҡҡамы ни улар – бер нисә китап авторы, Башҡортостан әм Рәсәй Яҙыусылар берлеге ағза ы.

Улай а ниңә уң уларҙың әҫәрҙәре ошоғаса театр сәхнәләрен яулай алмай? Быға драматургияның бик ҡатмарлы жанр булыуы сәбәпле, тип уйлайым. Семинарҙа ҡатнашыусыларҙың ошо өлкәлә саҡ ҡына белемдәре етешмәй, саҡ ҡына тырышлыҡ әм түҙемлек аҡ ай.

Мин хәҙер шул әҫәрҙәрҙең ыңғай әм кире яҡтарына ҡыҫҡаса ғына туҡталып китмәксемен.

Эпик әҫәргә хас киңлек менән ваҡиғалар теҙә әм уйлана билдәле прозаик Сабир Шәрипов “Ҡолонташ” исемле драма ында. Илебеҙҙәге экологияның ҡот осҡос хәлгә килеүе өсөн авторҙың бөтә йөрәге менән әрнегәне иҙелеп тора. Ысынлап та, урмандарҙы рәхим еҙ рәүештә ҡырыу, йылға-күлдәребеҙҙе ҡоротоу, тауҙарыбыҙҙы емереү бара бит. Әҫәрҙең идея ын асыу өсөн бик ҡыҙыҡлы алым табылған: ҡомаҡтар ҙа, аттар ҙа, ҡоштар ҙа кешесә өйләшә әм әҙәм балаларының ҡай ы бер ҡылыҡтарына аптырай, аңларға тырыша. Шул уҡ ваҡытта әҫәр пьесаға ҡарағанда повесҡа, хатта романға тартымыраҡ. Авторға әҫәрҙең конфликтын көсәйтеү, характерҙарҙы баҙығыраҡ итеү хаҡында уйларға кәрәк.

Владимир Жеребцов әйбәт пьеса ы менән ҡыуандырҙы. “Фатирға индерегеҙ” тигән әҫәре авторҙың сюжет әм ваҡиғалар ҡороуҙа, конфликт ойоштороуҙа, характерҙар тыуҙырыуҙа оҫтара барыуын күр әтә. Был пьеса беҙ телевизорҙа йыш күргән шоу тапшырыуҙары тура ында, тиергә була. Бер өлкәнең үҙәк гәзите ҡыҙыҡ өсөн әйбәт кенә ғаиләнең көндәлек тормошо хаҡында көн дә яҙып-күр әтеп торорға була әм уны таратыуға килтерә. Әҫәрҙә бөгөнгө ғаиләләрҙең драма ы, кешеләрҙең яңғыҙлығы, бер-бере енә кәрәкмәгәнлеге, вайым ыҙлығы бик ышандырырлыҡ итеп күр әтелгән. Семинарҙа ҡатнашыусылар, был әҫәр сәхнәгә ҡуйырлыҡ, тигән ба а бирҙе.

Йәш яҙыусы Нәфисә Тулыбаева әйбәт кенә пьеса яҙған. Проза менән шиғриәттән айырмалы рәүештә, драматургияла мөхәббәттең “яралыуын” күр әтеүе бик ауыр. Нәфисә ошоно тормошҡа ашыра алған. Мелодраматик был әҫәрҙә күңелгә үтеп инерлек, тулҡынландырғыс урындар бик күп, авторҙың драматик сәхнәләрҙе ҡора белеүе күренә. Фәҡәт пьесаның кульминацион өлөшө бер аҙ уҙыла төшкән, был трагизмды йомшарта, етмә ә, финалда әҙерләнмәгән ваҡиғалар, монологтар артығыраҡ.

Лариса Абдуллинаның “Утыҙ туғыҙ” тигән пьеса ындағы ваҡиғалар таныш, беҙҙең күҙ алдында үткән кеүек, сөнки ул шағир тура ында, шағирҙың йәмғиәттәге урыны, кәрәклеге әм принципиаллеге хаҡында. Әммә Лариса сюжетты оҫта итеп бороп ебәрә бел ә лә, сәхнә әҫәрендәге әр көтөлмәгән ваҡиғаны ла ипләп кенә алдан әҙерләргә кәрәклеген уйлап еткермәгән.

Айҙар Хөсәйеновтың драма ын Николай Коляда үҙе маҡтаны, хәҙер әҫәр Екатеринбург ҡала ы үткәргән пьесалар конкурсының финал өлөшөнә эләккән. Драма фәлсәфәүи, ул аҡыллы монологтар, тормош хаҡында уйланыуҙар менән уғарылған, унда хатта мистика ла бар. Әммә семинарҙа ҡатнашыусылар фекеренсә, әҫәрҙә драматургияның ҡай ы бер ҡанундарын инҡар итеү иҙелә, йәғни хәбәр өйләү күберәк, конфликт сибегерәк.

Радик Өмөтҡужиндың әҫәре ике уғыш ветераны, ике характер, тормошҡа ҡапма-ҡаршы ике ҡараш тура ында. Был пьесаның шул яғы оҡшаны: әҫәр башында

ыңғай кеүек күренгән геройҙар аҙаҡҡараҡ бик үк әйбәт әҙәмдәр булып сыҡмай, ә тәү ҡарауға кире ымаҡ кешеләрҙең, кире енсә, финалға табан әйбәт сифаттары асыла. әм был үҙгәрештәр алдан әҙерләнгән, шуға ышандыра. Әммә Радик пьеса-ының икенсе өлөшөн ашығыбыраҡ яҙғанмы, әллә яңы ваҡиғалар уйлап табырға дарманы етмәгәнме, әҫәр яҙылып бөтмәгән кеүек тойғо ҡалдыра.

Әминә Яхинаның пьеса ы бөтә яҡтан камил тиерлек. Сюжет йылдам ғына үҫешә, диалогтар күп үҙлелек менән ялҡытмай, әҫәрҙең кульминация ы ла, фә ем-ле финалы ла бар. Фәҡәт драманың икенсе планы юҡ кимәлендә, шуға бөтә е лә өҫтә, аңлайышлы, ерәйеп күҙгә күренеп тора, шуға уҡыусыға уйланырлыҡ урын юҡ тиерлек.

Сөләймән Латиповтың “Сип-сип, себештәрем” мелодрама ына ҡарата ла ошо үҙҙәрҙе әйтергә була.

Драматург шуны белергә тейеш: пьесала ике ыҙыҡ, ике хәрәкәт, ике конфликт булырға бурыслы – эске әм тышҡы. Тамашасы әр саҡ сюжеттың эске үҫеше ар-тынан ҡыҙыҡ ынып күҙәтә, актерҙарға ла образдарҙың тышҡы хәрәкәтенә ҡара-ғанда эске кисерештәрен уйнау ҡыҙыҡлы. Йәш драматургтарға быны әр саҡ иҫтә тоторға кәрәк.

Тәнзилә Дәүләтбирҙина семинарҙа тикшереүгә “Юғалған журнал” тигән пьеса-ын ҡуйҙы. Әҫәрҙең сюжеты мауыҡтырғыс, шуға ҙур ҡыҙыҡ ыныу менән уҡыла. Әммә образдарҙың холоҡтары бер генә яғы менән күр әтелгәнгә (йәғни бер ҡатлы булғанға), уларҙың алда ни эшләре, тимәк, әҫәрҙең ҡай ы яҡҡа барыры йәки бо-ролоро алдан иҙелеп тора. Йәш драматургҡа ҡатмарлыраҡ, ҡапма-ҡаршылыҡлы-раҡ образдар тыуҙырырға ынтылырға кәрәк. Ул саҡта әҫәренең йөкмәтке е лә тәрәнерәк, киңерәк, тимәк, күләмлерәк булыр ине.

Яңыраҡ М. Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында Тән-зиләнең “Минең ғаиләм” исемле драма ының премьера ы булды. Әҫәр мелодра-матик планда яҙылған, күңелгә үтеп инә. Юҡҡамы ни премьера мәлендә күп кенә тамашасыларҙың күҙҙәре йәшкә сыланды.

Режиссер спектаклде сәхнә алдындағы ҡыҙыҡлы күренештәр менән, артҡы шар-шауҙағы компьютерҙағы сайт картиналары менән байытҡан. ис шик еҙ, был спек-такль – йәш драматург менән йәш режиссерҙың табышы. Әммә Тәнзиләнең был әҫәренә ҡарата ла үрҙәге пьеса ына ҡарата әйтелгәндәрҙе ҡабатларға була.

Сығышымдың башында мин, пьеса яҙыусыларҙың ике төрө була, тигәйнем. Әммә уларҙың өсөнсө ө лә бар. Былары инде – олпат драматургтар, улар әҫәрен секцияға килтереп тормайҙар, ҡулъяҙмаларын тотоп, тура театрға табан атлайҙар. Был дөрөҫтөр ҙә. Сөнки әҫәрең менән театр ҡыҙыҡ ына икән, ниңә уны секцияла тикшертеп торорға? Хәйер, был хаҡта минең үҙ фекерем бар. Секция – ижади ла-боратория ул, әҫәреңде унда тикшертеү авторға ис тә зыян итмәй, тик файҙа ғы-на килтерә.

2008 йылда секцияға ҡуйылмайынса сәхнәгә күтәрелгән пьесалар икәү булды: Рәлиф Кинйәбаевтың Өфө “Нур” татар дәүләт театрында “Гүргә инер сер ине - 2” спектакле ҡуйылды әм Нәжиб Асанбаевтың Салауат башҡорт драма театрында “Ете ҡыҙ” әҫәре сәхнәләштерелде. Флорид Бүләковтың да бер нисә әҫәренә рам-па утын күрергә насип булды, әммә, улар авторҙың элекке пьесалары булғанға, был хаҡта хәбәр ҡуйыртып тормайым, ә Рәлиф Кинйәбаев менән Нәжиб Асанба-евтың әҫәрҙәре тура ында бер-ике үҙ әйтмәксемен.

“Гүргә инер сер ине - 2” пьеса ы (әйткәндәй, ул да семинарҙа тикшерелде әм ыңғай ба а алды), аңлауығыҙса, ошо уҡ исемле әҫәрҙең дауамы булып тора.

Драмала бөгөнгө замандың актуаль проблемаларының бере е күтәрелә: аҡсаға

бөтә нәмәне, шул иҫәптән мөхәббәтте лә атып алып буламы? Оҫта ҡоролған ваҡиғалар сылбыры  әм финал сәхнә е менән автор үҙе үк был  орауға кире яуап бирә — бар әҙәмдәр ҙә кешелеклелек менән әҙәпте юғалтмаған әле. Пьесала баҙыҡ характерҙар хәрәкәт итә, сюжет ҡыҙыҡтырырлыҡ итеп ҡоролған, конфликт көслө  әм үҫешә бара — шуға беҙ Рәлиф Кинйәбаевты сираттағы уңышы менән ҡотлай алабыҙ.

Ошондай уҡ ситуацияны “Ете ҡыҙ” пьеса ында ла тап итәбеҙ.  уғыш йылдарында бер театрҙың актрисалары (актерҙар бары ы ла  уғышҡа киткән) астан үлер хәлгә етә.  әм бер актриса әхирәттәрен, шул иҫәптән үҙ театрын ҡотҡарыу өсөн... яратмаған кеше менән йәшәргә риза була. Сөнки теге әҙәм быларға ризыҡ бирә ала. Пьеса тормошта булған ваҡиғаларға таянып яҙылған, шуға тулҡынландыра ла, тетрәндерә лә.

Эйе, олпат драматургыбыҙ Нәжиб Асанбаев, оло йәштә булыуына ҡарамаҫтан, үҙенең ижади уңыштары менән даими ҡыуандыра. 2008 йылда, әйтеп үткән спектаклдән башҡа, шул уҡ Салауат башҡорт драма театрында уның “Зәйтүнгөл” пьеса ы сәхнәләштерелде, ә Өфө “Нур” татар дәүләт театрында “ ыу юлы” комедия ы ҡуйылды.

 уңғы әҫәрҙә ололар  әм йәштәр, ҡала  әм ауыл, мөхәббәт  әм хәйләкәрлек кеүек мәңгелек проблемалар заманса  әм изге күңел рәүешендә хәл ителгән. 88 йәшлек Нәжиб Асанбаев ижади әүҙемлеге менән генә түгел, йәмғиәт эштәре менән дә өлгө булырлыҡ. Ул — Президент Советы ағза ы, шул уҡ ваҡытта йыш ҡына “Башҡортостан”, “Ҡыҙыл таң” гәзиттәрендә актуаль темаларға публицистик сығыштары менән ҡыуандыра. Бөтә яҙыусыларға ошолай эшләргә ине лә...

Сығышымдың аҙағында драма әҫәрҙәрен баҫтырыу проблема ына ҡағылып китергә теләйем.

“Тамаша” журналының баш мөхәррире булараҡ та,  халыҡ театрҙарының “Алтын тирмә” фестиваленең жюри ағза ы рәүешендә лә миңә осрашыуҙар  әм спектаклдәр ҡарау өсөн республикабыҙҙың ҡала-районларына йыш юлланырға тура килә.  әм ҡайҙа ғына бул ам да, бөтә ерҙә, минең драма секция ы етәксе е икәнлегемде белгәс, бер  орау менән ҡаҡшаталар: “Заманса яңы пьесалар ҡайҙа? Ниңә пьеса йыйынтыҡтары юҡ? Ни өсөн журналдар пьеса баҫмай?” Быңдай  орауҙар юҡтан тыумай.

Республикабыҙҙың меңәрләгән мәктәптәренең  әр бере ендә драма түңәрәктәре эшләй. Уларға пьесалар кәрәк. Унан башҡа Башҡортостанда “халыҡ театры” тигән юғары исемгә лайыҡ булған 84 ололар коллективы бар. Ә илленән ашыу драма түңәрәге был исемде алыу өсөн көрәшә. Ошо  андарҙың артында ни ятҡанын аңлағыҙ! Йөҙәрләгән ябай кешеләр театр сәнғәтенә ғашиҡ булып, сәхнәлә үҙ  әләтен күр әтергә ынтыла бит!  әм улар, сүллектә  ыу эҙләгән юлсы кеүек  ыу ап, яңы, заманса пьеса эҙләй. Ә улар — юҡ! Дөрөҫө, пьесалар бар, ә халыҡҡа еткергән йыйынтыҡтар, журналдар юҡ.

Пьесаларға мәктәптәрҙәге драма түңәрәктәренең мохтажлығын ҡәнәғәтләндереү ниәтендә, беҙ Мәғариф министрлығы менән берлектә балалар өсөн пьесалар йыйынтығы әҙерләнек. Ул, Алла бир ә, 2010 йылда донъя күрәсәк, күләме — 10 табаҡ. Ләкин был аҙ, үтә аҙ!

Ун йыллап элек “Китап” нәшриәтенең темпланында “Драматургия” тигән айырым бүлек була торғайны,  әм унда йылына ике-өс пьесалар йыйынтығы сығарыу планлаштырыла ине. Хәҙер был бүлекте “Проза”ға ҡуштылар  әм, өҙөмтәлә, 2009 йылда Башҡортостан “Китап” нәшриәте бер генә драматургтың йыйынтығын баҫтырырға ниәтләгән: ул — Нәжиб Асанбаевтың 5-се томы. Ул да бул а әҙиптең публицистик мәҡәләләренән торасаҡ.

Шуға күрә яҙыусыларҙың ошо йыйылышы ҡарарына “Журналдарыбыҙға аратирә бул а ла пьесалар баҫырға, З. Биишева исемендәге “Китап” нәшриәтенә йылына өс-дүрт сәхнә әҫәрҙәре йыйынтығы сығарырға тәҡдим итергә” тигән пункт индерергә кәрәк.

**Факи∞а ТУҒЫҘБАЕВА,**
Башкортостан Яҙыусылар союзының
балалар әҙәбиәте секция∞ы рәйесе

## Ик∞еҙ-сик∞еҙ күңел яктылығы

Тормошобоҙ көнләп кенә түгел, сәғәтләп үҙгәрә. Иртәгә ни көткәнен әйтеп тә булмай. Ләкин беҙ, яҙыусылар, киләсәктә Тыуған илебеҙ йәш быуындың ышаныслы ҡулдарында буласағына инанып йәшәргә тейешбеҙ, тип уйлайым.

Республикабыҙҙа йәш граждaнинды тәрбиәләү, ғаиләне, әсәлек әм балалыҡты аҡлау әм яҡлау, мәғариф әм мәҙәниәт, спорт, сәнғәтте үҫтереү буйынса бик күп маҡсатлы программалар эшләп килә. Улар үҙ өҙөмтәләрен бирмәй ҡалмай, әлбиттә.

Мәктәптәрҙә әм балалар баҡсаларында башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеү, уҡыу-уҡытыу планында төбәк компоненты булыуы әр милләттең йәш быуынында милли рух тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнаны. Шул программаларға ярашлы, бик күп дәреслектәр, энциклопедиялар, үҙлектәр, өҫтәмә уҡыу китаптары баҫылып сыҡты. Әйтер ең, йәншишмәнән тере ыу уртланыҡ, балаларҙың ғына түгел, үҙебеҙҙең дә донъяға күҙебеҙ асылып ҡалды. Туған телдәр буйынса уҙғарылған республика олимпиадалары, конкурстары, йәш шағирҙар әм сәсәндәр бәйгеләре шулай уҡ үҙ өҙөмтәләрен бирә. «Йәншишмә» гәзитендә, «Аманат», «Аҡбуҙат» журналдарында балаларҙың тәүге әҫәрҙәре баҫылып сығып тора. Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуының 450 йыллығын билдәләгәндә, йәш ҡәләм тибрәтеүселәрҙең әҫәрҙәренән хатта айырым китап, Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәте тырышлығы арҡа ында, донъя күрҙе. Мәктәптәрҙә әҙәби түңәрәктәр йәнләнде. Шулар ара ынан Красноусол башҡорт гимназия ын, Асҡын башҡорт гимназия ын, Белорет башҡорт гимназия ын әм башҡа бик күп мәктәптәрҙең уҡыусылар ижадына бик иғтибарлы булыуын әйтеп китергә мөмкин.

Үкенескә ҡаршы, Мәскәү чиновниктары тарафынан киләсәктә төбәк компонентынан тыуған яҡ тарихы, география ы әм башҡа предметтар алынып ташланыу әм туған телде өйрәнеүгә бүленгән сәғәттәрҙең ҡыҫҡарыу ҡурҡынысы янай. Беҙ был хаҡта яҙыусыларҙың фекерен йәмәғәтселеккә еткерергә бурыслыбыҙ.

Бөгөнгө йәш үҫмерҙәр, балалар, хатта сабыйҙар ҙа бынан ун йыл элек булған йәш быуындан ҡырҡа айырыла. Уларҙы интернет селтәре, уйын автоматтары сорнап алған, алкоголь әм наркотик, фәхишәлек донъя ын күреп үҫә, ҡай ылары шул донъяға мауығып китә. Бөтә Рәсәй буйынса суицид арта. Үҙ-үҙенә ҡул алыуға барып етмәгән хәлдә лә, табиптар «психосоматик» тип йөрөткән ауырыу балалар ара ында киң таралған, йәғни йәш быуындың төрлө стресҡа ҡаршы тороу көсө кәмей, ул шәхес булараҡ үҫмәй, кире енсә, йәмғиәттәге кире күренештәр ныҡ тәьҫир иткәнлектән, үҙ-үҙен яҡларлыҡ әм аҡларлыҡ көсө кәмей, башҡортса әйт әк, рухи ауырыуҙарға дусар була. Бына шунда ҡояшлы, киләсәккә әм үҙ-

үҙенә ышаныс тыуҙырған әҫәрҙәребеҙ йәш быуын күңелен яҡтыртып ебәрергә тейеш тә инде. Республикабыҙҙың балалар матбуғаты нәҡ ошо йүнәлештә эшләй. «Йәншишмә» гәзите, «Аманат», «Аҡбуҙат», «Әллүки» журналдары – үҙҙәре үк матурлыҡ донъя ы. Уларҙың тиражы йылдан-йыл бер кимәлдә ҡалыуы ла ошоға дәлил. Мәҫәлән, «Аҡбуҙат» 18 мең, «Аманат» 14 меңдән ашыу, «Әллүки» 6 меңдән ашыу, «Йәншишмә» гәзите 6 меңдән ашыу тираж менән донъя күрә. Бөтә ен бергә йый аң, ҙур ғына ан килеп сыға. Балалар матбуғатының яҙыусылар тормошонда ә әмиәте ба алап бөткө өҙ. Балалар медицина ында әкиәт терапия ы, ҡурсаҡ терапия ы, арт-терапия, йәғни ынлы сәнғәт терапия ы, комикстар терапия ы тигән тармаҡтар бар. Улар бөтә е лә – балаға күңел дауалары, шәхес тәрбиәләү дауалары. Беҙҙең балалар матбуғаты ҡыҙыҡлы әҫәрҙәр, ынлы сәнғәт ярҙамында донъяла яҡшылыҡтан, изгелектән, мәрхәмәттән ҙурыраҡ көс булмауын кескәйҙәргә лә, йәш үҫмерҙәргә лә еткереп тора ла инде. уңғы йылдарҙа Гөлфиә Юнысова, Гүзәл Ситдиҡова, Рәсимә Ураҡсина, Фәрзәнә Аҡбулатова, Рәмзәнә Әбүталипова, Илдус Тимерханов, Рәшиҙә Шәмсетдинова, Нияз Сәлимов, Фәрзәнә Ғөбәйҙуллина, Миңлегөл Хисамова, Зө рә Ҡотлогилдина, Сәрүәр Сурина, Салауат Кәрим, Рәшит Низамов, Фәнис Янышев, Рамаҙҙан Шәғәлиев, Марс Әхмәтшин, Гөлнур Яҡупова, Лариса Абдуллина, Әлфиә Әсәҙуллина, Гөлнара Мостафина, Тәскирә Даянова, Сәрүәр Ғәләүетдинов, Нажиә Игеҙйәнова, Гөлсирә Шафиҡова, Зөлфиә Кускилдина, Фәйрүзә Фәтҡуллина әм башҡаларҙың ҡояшлы әҫәрҙәре балалар матбуғатында йыш донъя күрҙе. Мәктәптәр әм балалар баҡса ына бик кәрәкле әкиәт-хикәйә, инсценировка, шиғри әкиәттәр әм шиғырҙар ижад итте улар. Кәрәк ә, әйҙә, ҡурсаҡ терапия ын, комикстар терапия ын әм башҡа терапияларҙы ла файҙалан. Бәләкәстәрҙең донъяға ҡарашын формалаштырыуҙа ла ҙур ә әмиәткә эйә был әҫәрҙәр.

Алтын ерҙә ятмай, ти. Беҙ ҙур әҙиптәребеҙҙең элегерәк яҙылған әҫәрҙәрен дә файҙаланабыҙ. Мостай Кәрим, Булат Рафиҡов, Рәшит Солтангәрәев, Фәүзиә Рәхимғолова ваҡыт үтеү менән иҫкермәй торған китаптар яҙып ҡалдырҙы кескәйҙәр өсөн. Абдулхаҡ Игебаев, Сафуан Әлибай, Ай ылыу Йәғәфәрова, Әнисә Та ирова, Кәтибә Кинйәбулатова, Муса Ғәли, Шәриф Бикҡол – уларҙың китаптарын да йыш ҡулға алабыҙ, «Аҡбуҙат»та, мәҫәлән, яңынан баҫтырып сығарабыҙ.

Май айында «Аҡбуҙат» журналының башланғысы булған, «Ағиҙел» журналында «Бәпембә» тип исемләнеп сығарылған журналдың тәүге аны донъя күреүгә 20 йыл тулды. «Ағиҙел» журналының элекке баш мөхәррире, күренекле яҙыусы Булат Рафиҡовты беҙ ҙур рәхмәт тойғо о менән иҫкә алабыҙ. «Аҡбуҙат» ҡына түгел, «Шоңҡар» журналы ла «Ағиҙел»дә Булат Рафиҡовтың тырышлығы менән ҡанатланды бит.

Март айында үҙенең 85 йыллығын билдәләгән «Аманат» (элекке «Пионер») журналының «Тиҫтерҙәрең ижады» рубрика ында уҡыусы балаларҙың шиғырҙары, хикәйәләре, әкиәттәре ай айын донъя күреп тора. Журнал йыл айын әүҙем хеҙмәттәшлек иткән уҡыусыларға «Йәш хәбәрсе» танытма ы тапшырып килә, балалар әҫәрҙәре өсөн журналдың Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге йыллыҡ премия ы булдырылған.

2008 йылда «Аманат» биттәрендә Рәлис Ураҙғоловтың «Алпамыша эҙенән» повесы, Хәлил өйөндөковтың «Шайтан уба ы», Гөлнур Яҡупованың «Йофар», Гөлшат Саматованың «Себеш көткәндә», Венер Исхаҡовтың «Урман дауа ы», «Шәжәрәнде бел», Резеда Күзбәкованың «Ике... биш», Ай ылыу Йәғәфәрованың «Берғанат», Мөҙәрис Багаевтың «Ҡара аҡал уландары» хикәйәләре, Наил Ғәйетбайҙың «Салауат алты йәшендә» пьеса ы, Марс Әхмәтшиндың « уҡыр сысҡан» әкиәте, Рауил Бикбаевтың, Тамара Искәндәриәнең, Ирек Кинйәбулатовтың, Әсхәл Әхмәт-Хужаның, Гөлфиә Юнысованың, Абдулхаҡ Игебаевтың, Венер

Йәнбәковтың шиғырҙары донъя күрҙе. «Йәншишмә» гәзите йәштәрҙең ижадына иғтибарлы. Г. Бүләкбаева, В. Исхаҡов, БДУ студенттары Ф. Бүләкбаев, З.Багишаеваның ҡәләмдәре өмөтлө.

Йәш үҫмерҙәр әм балалар матбуғаты ҡыҙыҡлы повестар әм пьесаларға мохтажлыҡ кисерә. Улар өсөн бигерәк тә документаль әҫәрҙәр ҙур ә әмиәткә эйә. Шул йә әттән Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың «Рәми» китабының башҡорт әм рус телдәрендә донъя күреүе ҙур ваҡиға булды.

Белеүебеҙсә, шағирә әм йәмәғәт эшмәкәре Гүзәл Ситдиҡова йәш быуынға рухи тәрбиә биреү өлкә ендә мө им эштәр башҡара. Унын динебеҙ тура ындағы абаҡтарын китап итеп баҫтырыу – бик кәрәкле эш.

Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтендә донъя күргән китаптарҙың күбе е йәш үҫмерҙәргә арналған. Шулар ара ында оло үҙ оҫта ы Фәрит Иҫәнғоловтың « алам эшләпә» китабы художестволылыҡ яғынан айырылып тора. Яҙыусының повесть әм хикәйәләре күптән яҙыл а ла, бөгөн дә заманса яңғыраш ала.

« алам эшләпә» повесында мәктәп йәшендәге үҫмерҙәрҙең тормошо яҡтыртыла. Хатип менән Хәйҙәр исемле малайҙар көҙгө ынауға ҡала. Бере е – математика, икенсе е – рус теленән. Ваҡиғалар ошо хәл-әхүәл тирә ендә ойоша. Яңы уҡытыусы Ғүмәров менән танышыу күл буйында балыҡ ҡармаҡлағанда була. Хатип алам эшләпә кейгән егет менән тупаҫ өйләшә. Тәненә, йәненә лә күләгә е төшә көҙгө ынау касафатының. Уйға ҡала, борсолдора, ялҡаулыҡты еңеп, ҡулдарына дәреслек тоттора. Малайҙарҙың ошолай үҙгәреүендә алам эшләпәле яңы уҡытыусының роле ба алап бөткө өҙ.

«Урман ситендәге имәндәр» повесында яҙыусы уғыш осоро балаларының өлкәндәр менән бер рәттән бөтә ауырлыҡтарҙы бергә кисереп, көрәшеп, еңеп сығыуы хаҡында бәйән итә.

Китаптағы хикәйәләр ҙә яҙыусының ығылмалы халыҡсан теле өҙөмтә ендә йотлоғоп уҡыла, авторҙың ма ирлығы хайран итә.

Әмир Гәрәевтың «Йылмайыу – ис кемдең дә эсен тишмәҫ» китабында яуызлыҡтан бигерәк изгелек йышыраҡ тантана итеүе менән күңелгә хуш килә.

Иҙрис Ноғомановтың «Әсәйгә бүләк» исемле хикәйәләр йыйынтығында үҙенсәлекле бала саҡ хәтирәләре, үҫмерҙәр өсөн ҡыҙыҡлы әм фә емле хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнгән әҫәрҙәр тупланған. Улар образлылығы, үҙенсәлекле стиле менән айырылып тора. Ябай ғына күренештәр хис-тойғоларҙы ҡуҙғатып, тормош мәғәнә е тура ында уйланырға мәжбүр итә.

Хәлил өйөндөкөв «Сыйырсыҡ оя ы» китабында матур тәбиғәт ҡосағында ултырған ауылдарҙың бере ендә олата ы менән өләсә е тәрбиә ендә үҫеп килгән Ислам исемле малайҙың мауыҡтырғыс мажараларына сәйәхәткә алып китә.

Башҡортостандың халыҡ артисы Рауил Ғәлин, төп эшенән тыш, әҙәби ижад менән дә шөғөлләнә. «Дүрткүҙ» исемле йыйынтыҡта авторҙың бала саҡ хәтирәләре, ҡыҙыҡлы, мажаралы хикәйә-тормош күренештәре менән бер рәттән рус теленән тәржемәләнгән пьесалар, әкиәт-пьесалар ҙа урын алған.

Сәлмән Яҡуповтың «Алҡалы гөл» шиғырҙар, хикәйәләр йыйынтығы үҫмерҙәр донъя ын ҡыҙыҡлы үрәтләй. Китап үҙ-ара мөнәсәбәт, кешелеклелек сифаттарын нескә тойомлап ижад ителгән әҫәрҙәре менән ҡиммәтле.

«Аҡҡоштар» хикәйәләр йыйынтығының Бөйөк Ватан уғышы инвалиды, уғыш ауырлыҡтарын үҙ елкә ендә татып белгән яҙыусы Зиннәт Ғәлимов ҡәләме менән яҙылғанлығы иҙелеп тора. «Аҡҡоштар» хикәйә ендә Әлшәйҙәге балалар йортонда булған хәл-ваҡиғалар тасуирлана. З.Ғәлимов әҫәрҙәренең геройҙары–беҙҙең замандың донъяға төрлө ҡараштағы, ләкин әр бере е лә Тыуған илен, ата-әсә ен, халҡын, тыуған ерен яратҡан кешеләре.

«Вәғәҙә–иман» повесында Хәбир Хәмитов Юрматы ырыуының яҙмышын бәйән итә.

Фәрхәт Ҡунафиндың « ыналған дуҫ» тип аталған дүрт шиғри әкиәт әм хикәйәләрҙән торған ыҡсым ғына йыйынтығына авторҙың быға са бер ҡайҙа ла баҫылмаған әм ҡай ы бер элек донъя күргән әҫәрҙәре туплаған. Мауыҡтырғыс сюжетҡа ҡоролған әкиәттәрендә яҡшылыҡ менән яманлыҡ, хаҡ менән нахаҡ көрәше сағыла, ғәҙеллектең тантана ы үрәтләнә, күңелде үҫтерә. Хикәйәләрҙә үҫмер малайҙарҙың төрлө хәлдәргә тарыуы ҡыҙыҡлы үрәтләнә.

Миләүшә Ғәйфуллинаның «Өй йыйыштырыусы машина» тип исемләнгән шиғыр әм хикәйәләр йыйынтығын Хаят Йәрмөхәмәтова сағыу итеп биҙәгән. Шиғыр, хикәйәләрҙә кескәйҙәрҙең тормошонан ҡыҙыҡлы әм фә емле хәл-ваҡиғалар үрәтләнә.

Кәтибә Кинйәбулатованың «Ҡолонсаҡ», Закир Зиннәтуллиндың «Ватан әм ил тура ында белек» китаптары шулай уҡ иғтибарға лайыҡ. Оло йәштәге әҙибәнең, ҡәләменә ял бирмәй, аман балалар яратып уҡырлыҡ шиғырҙар ижад итеүе оҡландыра. Закир Зиннәтуллиндың «Ватан әм ил тура ында белек» дастаны халҡыбыҙҙың боронғо мифология ына нигеҙләнгән. Шиғри әҫәр булараҡ та бик үҙенсәлекле: ул авторҙың художество йә әтенән эҙләнеүҙәренә ҡоролған, Көнсығыш әм башҡорт халҡының героик эпос традицияларына тоғро ҡалып, Закир Зиннәтуллин үҙенә генә хас стиль тапҡан.

Шағирҙар Әсхәл Әхмәт-Хужа менән Фәүзиә Юлдашбаеваның шиғри китаптары башҡорт теленең үҙенсәлектәрен, ығылмалыҡтарын кескәйҙәр күңеленә шиғри рәүештә еткереүе менән ә әмиәтле.

Кәрим Булаттың «Мин тағараҡ я аным» исемле башҡорт әм рус телдәрендә донъя күргән йыйынтығы – шулай уҡ башҡорт телен өйрәнеүсе кескәйҙәргә ҙур бүләк.

2008 йылда балалар өсөн китаптар, әр йылдағыса, татар телендә лә баҫылып сыҡты.

Күмертауҙан әҙибә Нәсимә Йосопова бер нисә йыл элек балаларҙы «Еләктән ҡайтҡандағы мажаралар» тигән шиғырҙар, әкиәттәр, хикәйәләр йыйынтығы менән өйөндөргәйне. Әле йәш быуынға « аумы, Зәңгәркүк!» тигән китабын тәҡдим итте. Нәсимә Йосопова үҙенең әҫәрҙәрендә Башҡортостаныбыҙҙың гүзәл тәбиғәтенә, мәғрур тауҙарына, урман-ҡырҙарына, йылға-күлдәренә оҡланырға, шул күркәмлеккә ҡарата мәрхәмәтле булырға өндәй. Ысынлап та, авторҙың геройҙары – балалар әм үҫмерҙәр – тирә-яҡ мөхитте аҡлауға ихлас тырышлыҡ а-ла, шул ваҡыт төрлө мажаралы хәлдәргә лә юлыға.

Камил Аҫҡаровтың «Киләсәк иртә ендә» тип аталған китабына «Батырлыҡ ҡото» әкиәте әм «Мәүлиҙәнең сере» хикәйәте индерелгән.

Ҡариҙелдән За ит Мурсиевтың « андуғас бүләге» йыйынтығына тупланған хикәйәләре әм әкиәттәре донъяға фәлсәфәүи ҡарашы, тәбиғәткә аҡсыл, аяулы мөнәсәбәте, сафлыҡҡа, камиллыҡҡа, матурлыҡҡа өндәүе менән фә емле. Автор күп осраҡта әҙер сиселеште тәҡдим итмәй, ә уҡыусыларҙы уйланырға, фекер йөрөтөргә саҡыра, күңелдәргә ғәм ала.

XX быуатта ижад иткән талантлы шағир, арабыҙҙан иртә киткән Әфғән Ғиззәтовтың «Иң ҡыҙыҡ нәмә» тигән китабына индерелгән әр әҫәре мауыҡтырғыс йөкмәтке е, ижади асышы менән айырылып тора.

Борайҙан уҡытыусы, «Мәғариф» өҫтөнлөклө милли программа ы сиктәрендә Рәсәй Федерация ы Президенты гранты эйә е Фатима Ғилметдинованың шиғырҙары балалар психология ын тәрән асып бирә белеүе, тәрбиәүи ә әмиәте менән отошло.

Аллаға шөкөр, Зәйнәб Биишева исемендәге «Китап» нәшриәтенең балалар әм йәш үҫмерҙәр бүлеге сығарған китаптарҙан тыш, республикабыҙҙың Мәғариф министрлығы «Мәктәп китапхана ы» серия ында ла классиктарыбыҙҙың китаптарын бүләк итеп тора.

үҙемде бөтәбеҙ өсөн дә ҡыуаныслы яңылыҡ менән тамамлайым: ғүмерен балалар әҙәбиәтенә бағышлаған Факил Мырҙаҡаевҡа «Яҙмыш фалы — йәшлектә», «Тынғы ыҙ малай» китаптары өсөн Президентыбыҙ М.Ғ.Рәхимовтың Указы менән әҙиә Дәүләтшина исемендәге дәүләт премия ы бирелде. Ҡәләмдәшебеҙҙе ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ!

**Владимир ДЕНИСОВ,**
Башҡортостан Яҙыусылар союзының
рус секция∞ы рәйесе

## Бергәлеккә ни етә

Уҙған йылда БР Яҙыусылар со~~юзының рус әм~~ рус телле яҙыусылар берләшмә е ете осрашыу үткәрҙе. Дөйөм алғанда, был ан эсенә Яҙыусылар союзы ағзалары әм башлыса йәштәрҙән торған ижади активтың ултырыштары инә. Ике тапҡыр секцияның киңәйтелгән ултырышы уҙҙы. Ике мәртәбә йәш яҙыусылар менән рәсми булмаған осрашыуҙа күрештек — улар өлкәнерәк быуын яҙыусыларын үҙҙәренең ижады менән таныштырҙы.

Секцияла Николай Краснощеков, Алексей Смирнов, Римма Романова, Рөстәм Ғәлиев шиғырҙары, Спартак Басиров, Наталья Голованова, Юлия Емельянова проза ы, Рөстәм Вахитовтың публицистик әҫәрҙәре тикшерелде. Әйткәндәй, Рөстәм Вахитовтың ҡульяҙма ы лайыҡлы ба а алды әм «Йәштәр тауышы» серия ында айырым китап булып баҫтырылыуға тәҡдим ителде. Ҡайтанан ҡарап сығыу шарты менән Спартак Басиров проза ын да ташҡа баҫтырыу мөмкинлеге тура ында үҙ ҡуҙғатылды. Ҡалған авторҙар, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, республика матбуғатында сығыш я арлыҡ етди кимәлгә етмәгән әле. Балалар өсөн яҙған авторҙарҙың ижади түңәрәген көсөн дә, ваҡытын да йәлләмәй алып барған Николай Грахов емешле эшләне.

Ярай ы уҡ тулы составта яңыраҡ «Бельские просторы» журналы эшмәкәрлеген тикшереү әм тәржемә торошона бәйле проблемалар тура ында өйләштек. Ошо мәсьәлә буйынса Союз ағзаларының да, йәш әҙәбиәтселәрҙең дә фекере тыңланды.

Журналдың баш мөхәррире Юрий Горюхин үҙ позиция ын белдерҙе, башҡа сығыш я аусылар ҙа үҙ ҡарашын уртаға алды. өҙөмтәлә Яҙыусылар союзына резолюция тапшырылды: «Бельские просторы» журналы, дөйөм алғанда, үҙ Уставына ярашлы, бурыстарын уңышлы башҡара, шулай ҙа редакция коллективы тәржемә әйберҙәрен баҫтырыуҙы ойоштоғанда ярҙамға мохтаж. Ошо маҡсаттан сығып, йыйылыш фекеренсә, «Бельские просторы» баҫма ына яҡшы әҫәрҙәрҙе тәржемәгә айлап алыу өсөн «Ағиҙел» журналы менән берлектә махсус коллегия булдырырға кәрәктер. Шулай уҡ был коллегияға Яҙыусылар союзы, «Китап» нәшриәте вәкилдәре лә ҡушылырға тейеш, тип өҫтәгем килә. Дөйөм мәнфәғәт бергә эшләүҙе талап итә. Бергә-бергә тәржемәселәрҙе әм «подстрочник» я аусыларҙы ҡыҙыҡ ындыра алырлыҡ сараларҙы нисек тә эҙләргә, табырға кәрәк. Сөнки республикабыҙҙа урыҫ телендәге әҙәбиәтебеҙҙең төп бөлә е — журналда сыҡҡан публикацияларҙың, китаптарҙың, бигерәк тә тәржемәләрҙең сифаты.

Тәржемә, тинек... Уларҙың художество кимәле, эйе, бик түбән. Журнал тарафынан яңыраҡ ҡына үткәрелгән конкурс үҙҙәремде тулы ынса ҡеүәтләй: Өфө әҙиптәре, хатта финалға сыҡҡандары ла, үкенескә ҡаршы, Рәйес Түләктең шиғы-

рын юғары кимәлдә тәржемә итә алманы. Үҙенең сығышында Рауил Төхвәт улы Бикбаев Советтар Союзы емерелеү менән совет тәржемә мәктәбенең дә юҡҡа сығыуы тура ында әйткәйне. Бәлки, мәктәп юҡҡа сыҡҡандыр ҙа, ә кешеләре уң ҡалғандыр бит. Әйтәгүр, совет осоронда ла күп кенә тәржемәләр Маршак, Козловский, Гребнев әм башҡа киң билдәле тәржемәселәр таянған критерийҙарға тап килмәгән. Ҡулыма осраҡлы рәүештә Рәми Ғариповтың Әҙәбиәт институтында яҙған курс эше эләккәйне. Унда шағир-студент башҡорт авторҙарының Мәскәүҙә әм республиканың үҙендә тәржемәләнгән әҫәрҙәрен анализлаған әм уларҙың түбән кимәлдә булыуын, кем кемде «ауҙарыу»ын айырыуы ауыр икәнлеген билдәләгән. Тәржемә ителгән авторҙарҙың әҫәрҙәре бер үк, тәржемәселәр ҙә ниндәйҙер уртаҡул, фәҡир тел менән эш итә... Был ситуация бөгөн дә шулай: тәжрибәле тәржемәселәр, бушҡа эшләргә теләмәйенсә, «эштән ситкә тайпылды», ә йәштәрҙең әле быуыны нығынып етмәгән, о оло етешмәй. Шунлыҡтан йәштәр менән шөғөлләнергә, уларҙы үҫтерергә, тәржемә сәнғәтенә өйрәтергә кәрәк. Был эште өлкәндәр башҡармай кем башҡар ын? «Бельские просторы» журналы алып барған тәржемә конкурсы был юҫыҡта ыңғай йоғонто я ар ине.

Журналда әм башҡа баҫмаларҙа сыҡҡан публикациялар хаҡында бер нисә үҙ. Бөгөн әҙәбиәтебеҙгә тормош менән түгел, ә интернет менән тәрбиәләнгән йәштәр ағымы ҡушыла бара. Уларҙың әҫәрҙәре нурланып тор а ла, ниндәйҙер тәбиғи булмаған, икенсел яҡтылыҡ ирпә шул. Йәштәр үҙҙәренсә ярай ы тәүәккәл – үҙнәшер ысулы менән китаптарын сығара, ҡай ы берҙә яҙмаларын гәзит-журналдарҙа баҫтыра, интернетҡа урынлаштыра. Әҙәби быуындар ара ында ла өҙәклөк барлыҡҡа килде: әгәр ҙә урта быуын әҙиптәре – Николай Грахов, Камил Зиганшин, Әмир Әминев, Леонид Соколов .б. (үҙемде лә ошо исемлеккә индерәм) идея, донъяны ҡабул итеү йә әтенән өлкән быуын яҙыусыларына (Александр Филиппов, Роберт Паль, Геннадий Баннов .б.) яҡыныраҡ бул а, Игорь Фролов, Юрий Горюхин, Светлана Чураева кеүек йәшкә кесерәктәр эстетик яҡтан үҙҙәренән тағы ла йәшерәк дуҫтарына яҡыныраҡ тора. Бер-беребеҙ ара ында барлыҡҡа килгән тәрән упҡындарҙы бөтөрөргә ине. Был тәңгәлдә беҙҙең рус әм рус телләләр берләшмә е үҙ ярҙамын күр әтә ала, тип уйлайым. Ләкин ойошманың да үҙ проблемалары байтаҡ. Беҙ Яҙыусылар союзы менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә, уның эргә ендә түгел, уның эсендә булырға тейешбеҙ. Рус әҙиптәре, бигерәк тә йәштәр, үҙҙәрен ҙур әҙәби ғаиләнең ағза ы итеп той он ине. Беҙҙә и ә әле быңдай күренеш юҡ. Интернеттан күсерелгән эстетик ҡарашлы әр төрлө әҙәби ойошмалар үҙ алдына ғына эшләп килә. Улар авангардистик ағым менән мауыға, яҙғандарын постмодернизм тип атай. Йәштәр ижадында тормош виртуаль ысынбарлыҡ, рефлекслаусы геройҙар тарафынан ситкә тибәрелә. Көслө хистәр, ысын фекерҙәр, сағыу образдар юҡҡа сыға бара. Ысын герой ҙа, ысын идея ла юҡ. Хәлбүки, уңғы ы Рәсәй власында ла күҙәтелмәй. Бөгөн көн яҡты ында шәм менән бөтә милләттәрҙе, синыфтарҙы, халыҡты бергә туплаҙай «милли идея»ны эҙләйҙәр ҙә бит... Ә уны эҙләргә кәрәкмәй, совет заманында булды бит. Тигеҙлек әм ғәҙеллек нигеҙендәге халыҡтар дуҫлығы – бына беҙҙең маяҡ.

Ҡабатлайым: быуындарҙы әм милләттәрҙе көндәлек хеҙмәт барышында берләштереү фарыз. Ойошма билеттарын әҙерләп, әүҙем ағзаларға таратырға, йәштәрҙе уҡыусылары менән осрашыуҙарға саҡырырға мөмкин. Исма ам, ғәҙәти кешеләрҙең ниндәй уйҙар менән, нисек йәшәүен белерҙәр ине. Авангардистик тәжрибә халыҡты әллә ни ҡыҙыҡ ындырмай ул... Эйе, бәғзе мәлдәрҙә Яҙыусылар союзына совет осоро практика ына әйләнеп ҡайтыу, элекке файҙалы алымдарҙы ҡулланыу ҡамасауламаясаҡ.

**Айҙар ХӨСӘЙЕНОВ,**
Башкортостан Яҙыусылар союзының
тәржемә секция∞ы етәксе∞е

## Тәржемәләү үҙенсәлектәре

Былтыр Өфөгә килгән Мәскәү шағиры әм тәржемәсе Сергей Гловюк илебеҙҙең баш ҡала ында башҡорт шиғриәте антология ын уларҙың аҡса ына нәшер итергә тәҡдим әйткәйне, әм ул китап донъя күрҙе!

Беҙҙең заманда ошо үҙе бер мөғжизә түгелме? Донъяла идеаль нәмә булмай, моғайын, был антологияла ла етеш еҙлектәр табырға мөмкиндер. Ләкин мин совет осоронда ла Мәскәүҙә башҡорт антологиялары сыҡҡанын хәтерләмәйем. Шуға был эште тәбриклəргә генә кәрәк. Тәржемәләрҙе йыйыу әм улар өҫтөндә эшләү барышында шул асыҡланды: оригиналды әм уның тәржемә ен йәнәш ҡуйып нәшер иткәндә, беренсе планға ике шарт сыға: эквилинеарлыҡ — йәғни, юлдар аны тап килеүе әм эквиритмлыҡ — шиғырҙың үлсәме әм ритмы тап килеүе. Шул сәбәпле ҡай ы бер әҫәрҙәр Мәскәү антология ына инмәй ҡалды. Был йә әттән нәшерселәрҙең ҡарашы ҡәтғи ине.

Ситтәр данына йоғонорға кәрәкме ни, тигән орау тыуыуы ихтимал. Ләкин мин бер кескәй генә серҙе асып үтмәксемен. Хәйер, ул әллә ни сер ҙә түгел. Иң тәүҙә Мәскәү әфәнделәре абхаз шиғриәте антология ын нәшер итергә ниәтләгән. Әммә бының өсөн шиғырҙарҙы әм уларҙың яҡшы тәржемәләрен йыйып ала алмағандар. Беҙҙә и ә был әллә ни ауыр мәсьәлә булманы. Союз идара ы рәйесе Рауил Төхфәт улы Бикбаев әм уның элекке урынбаҫары Азамат Юлдашбаевтың тырышлығы менән китап ҡыҫҡа ваҡыт эсендә тупланып өлгөрҙө. Ләкин бындай эшкә нигеҙ бынан егерме йыл элек, Союз Мәскәүгә бер төркөм тәржемәселәрҙе уҡырға ебәргән, Союзда тәржемә секция ы ойошторолған ваҡытта уҡ алынғайны. Ошо йылдар эсендә эш туҡтаманы әм шаҡтай тәржемәләр база ы йыйылды.

Мөғжизәләр шағирҙарҙа ғына бөтмәне әле. Мәскәүҙә алты томлыҡ «Рәсәй халыҡтарының хәҙерге әҙәбиәте» тигән дә антология донъя күрҙе. Унда Әмир Эминев, Роберт Байымов, Азамат Юлдашбаевтың проза әҫәрҙәре индерелде. Әйткәндәй, уларҙан уң прозаик Мөнир Ҡунафин иң яҡшы хикәйәләргә Шукшин исемендәге Рәсәй конкурсында ҡатнашты әм уның йомғаҡтары буйынса сыҡҡан йыйынтыҡ авторҙары иҫәбенә инде. Уның хикәйә ен руссаға Дамир Шәрәфетдинов тәржемә иткән, тимәк, был уңышта уның да өлөшө бар. Шулай булғас, башҡорт әҙәбиәтен тәржемә итеү әм пропагандалауҙың мәғәнә ен ярай ы асыҡ тоҫмалларға мөмкин.

Шул тиклем байлыҡ йыйылып бушҡа тик ятма ын өсөн, беҙ, хәҙерге алдынғы технологияларҙы файҙаланып, интернетта Рәсәй халыҡтары телдәренән тәржемәләр сайты астыҡ. Унда, аңлауығыҙса, иң күп урынды башҡорт әҙәбиәте биләй. Бында ла мөғжизәләр дауам итә әле. Сөнки был сайтты асыу әм интернетта урынлаштырыу өсөн аҡсаны (асыҡлап китәм: миңә түгел, ә эшләүселәргә) Арыҫлан исемле егет түләне. Ул Сибайҙа йәшәй, мин хатта уның фамилия ын да белмәйем, мәгәр тап бына ул башҡорт әҙәбиәте өсөн тырышты ла инде.

Хәҙер теләгән кеше www. husainov.com сайтына инеп, рус теленә тәржемәләр менән таныша ала. Уҡыйҙар ҙа. Быны тикшереп ҡарау еңел, сөнки махсус счетчик тора. Уға ҡарағанда, сайтҡа көнөнә утыҙ-ҡырҡ кеше инә, айына туғыҙ йөҙ — меңләп кеше йыйыла. Рәсәйҙән генә түгел, АҠШ, Англия, Франция, Израилдан да керәләр.

Бына шуға ла мин, Башҡортостанда юғары кимәлдәге тәржемәселәр бар, тигән фекерҙәмен.

Әммә был өлкәлә лә проблемалар юҡ түгел. Беренсе е — теоретик проблема. Тәржемә ниндәй булырға тейеш — теүәлме, әллә ижадимы, тигән орау йыш тыуа. Өҫтәүенә, теүәл тәржемә өсөн ике телде лә яҡшы белергә кәрәк, ә ижади тәржемә өсөн ул мотлаҡ түгел, юлнамә (подстрочник) етә, тигән ҡараш та йәшәй.

Әйҙәгеҙ, үҙлеккә мөрәжәғәт итеп ҡарайыҡ. Унда былай тиелгән: “Теүәл тәржемә — оригиналдың йөкмәтке енең планын семантик йә эттән мөмкин тиклем тулы әм дөрөҫ биреүсе тәржемә”.

Ижади тәржемәлә и ә оригиналдың йөкмәтке енең предмет-логик яғы сағыштырмаса ғына бәйән ителә, ә жанр-стиль нормаларынан әм телде ҡулланыу йә этенән шаҡтай ситкә тайпылыуҙар күҙәтелә.

Руссаға әйләндергәндә, теүәл тәржемә автор тарафынан яҙылғанды икенсе телгә үҙмә- үҙ күсереү була, унда ижади бер ни ҙә юҡ. Ана шул үҙмә- үҙ тәржемәгә ижади тәржемә ҡаршы ҡуйыла — унда тәржемәсе әҫәрҙең рухын бирергә тырыша. Ләкин, беренсенән, телде белмәйенсә, авторҙың нисек йәшәүен, ижад итеүен аңламайынса ин нисек әҫәрҙең рухын бирә ала ың? Беҙҙә бит, мәҫәлән, аҙым айын ошондай күренешкә юлыға ың: шиғырҙы ҡатын кеше яҙған, ә тәржемәнән, ғәфү итегеҙ, ирҙәр тыны килә. Был тәржемә түгел, көсәнеү була түгелме?

Тәржемә башҡорт шиғырын ҡайҙалыр Рязань тирә ендә йәшәгән урыҫ шағиры яҙған ымаҡ күренергә тейеш түгел. Мостай Кәрим, минең бер тәржемәмде ҡарап ултырғас, бынау үҙҙе алып ташла — ул минеке түгел, тип әйткәйне. Тәржемә авторҙы сағылдырырға тейеш, ә тәржемәсене түгел. Ни тиклем автор үҙенсәлеклерәк, тәржемә лә үҙенсәлеклерәк булырға тейеш. Шуның өсөн дә бер ниндәй ҙә ижади тәржемә юҡ ул, ә әҙәби тәржемә генә бар. Ә уның билдәләмә е былай: “Әҙәби тәржемә барышында бер телдә яҙылған әҙәби әҫәр икенсе телдә тергеҙелә». Тимәк, тәржемәсе тергеҙергә бурыслы, ә үҙ белдегенә үҙгәртеп ултырырға тейеш түгел.

Тағы бер мәсьәлә — ул, әлбиттә, тәржемәүи әҫәрҙәрҙең халыҡ массалары тарафынан ҡабул ителеүе. Эйе, бай көнбайыш илдәрендә махсус тәржемә институттары бар. Унда ултырған кешеләр тәржемә менән генә шөғөлләнмәй, улар шул әҫәрҙәрҙе нәшриәттәргә әм матбуғатҡа тәҡдим итеү менән дә шөғөлләнә. Бының ни тиклем ихтирамға лайыҡ, ауыр әм ҡатмарлы эш икәнен улар аңлай.

Шуның өсөн “Бельские просторы” журналы ойошторған тәржемә конкурсы ҙур ҡыҙыҡ ыныу менән ҡабул ителде. Улар был эште артабан да дауам итер, тип өмөтләнәм.

Беҙ әле кризис шарттарында йәшәйбеҙ. Әгәр ҙә республика матбуғаты беҙгә йөҙ бор а, бик күпте эшләй алырбыҙ, тип ышанам. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, рус телле матбуғат тәржемәләрҙе баҫтырмай. Был – бик насар күренеш, сөнки шағирҙар халыҡ менән аралашыуҙан мәхрүм.

Гәзиттәрҙә тәржемә әҫәрҙәрен айына бер йә ике тапҡыр бул а ла мотлаҡ баҫтырыу тура ында Матбуғат идаралығына ғына мөрәжәғәт итеп булмаймы?

**Фәнил КҮЗБӘКОВ**,
Башҡортостан Мәғарифты үҫтереү
институты ректоры

## Максаттарыбыҙ изге һәм бер үк!

Мин, әлбиттә, был йорттоң етәксе е булараҡ, шундай мәртәбәле шәхестәрҙең бына ошонда ултырҙаш булыуына, еҙҙе ҡабул итә алыуыма ҡыуаныс тойғо о кисерәм.

Ғөмүмән, уҡытыусылар менән әҙиптәрҙең тығыҙ аралашыуы тәбиғи: улар тәү сиратта киләсәк өсөн эшләй, маҡсаттары бер, изге, ике е лә мөғжизәгә ышана,

бөгөнгө яралғыла киләсәкте күрә, бураҙнаға төшкән орлоҡта шаулап ултырыр баҫыуҙы күҙаллай. Шәхсән миңә был өлкәләрҙе бәйләү насип булды, ике е лә берҙәй яҡын. Уҡытыусы иртәгәгә ижад итәсәк әҙиптәрҙе формалаштыра, матурлыҡты аңларға өйрәтеп, әҙәбиәткә өйөү тәрбиәләй. Быларҙың бөтә ен дә шул уҡ әҙәбиәтте файҙаланып башҡара.

Көндәлек эштәрҙә лә беҙ ҡулға-ҡул тотоношоп йәшәйбеҙ: әҙиптәрҙе уҡытыусылар менән осрашыуҙарға саҡырабыҙ, беҙгә килгән уҡытыусыларҙы әҙәби кисәләргә йөрөтәбеҙ. Яңы сыҡҡан китаптарҙың исем туйҙары ла була. Бөгөнгө ҡатмарлы заманда бына ошондай берҙәмлек беҙҙең өсөн айырата мө им. Беҙгә халыҡты, милләтебеҙҙе бергә тупларға кәрәк. Беҙгә телебеҙҙе аҡлап алып ҡалыу буйынса ныҡышмалы, эҙмә-эҙлекле, әлегесә ҡулға-ҡул тотоношоп эшләр кәрәк. Беҙ әҙәбиәтебеҙҙе, тимәк, рухиәтебеҙҙе аҡларға, нығытырға, артабан үҫтерергә тейешбеҙ. Бөгөнгө өйләшеү ошо йүнәлештә барыр, бигерәк тә Яҙыусылар союзының юбилейы алдынан кәрәкле сараларҙың бере е булыр! Ҡәләмдәштәр, өйләшеүебеҙ эшлекле бул ын, өҙөмтәле бул ын, артабанғы ижад өсөн стимул хеҙмәтен үтә ен.

Уңыштар теләйем!

## Башҡортостан Республика∞ы яҙыусыларының 2008 йыл йомғаҡтары буйынса дөйөм йыйылышы резолюция∞ы

Уҙған йыл йомғаҡтарын ҡарап, дөйөм йыйылыш, 2008 йылда Башҡортостан яҙыусылары тарафынан уҡыусылар ҙур ҡыҙыҡ ыныу менән ҡабул иткән байтаҡ юғары художестволы әҫәрҙәр ижад ителгән, тип билдәләй. Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә башҡорт авторҙарының йөҙҙән ашыу художестволы, публицистик, документаль китаптары сыҡҡан. «Ағиҙел», «Ватандаш», «Башҡортостан ҡыҙы», «Шоңҡар», «Аманат», «Толпар», «Тамаша», «Аҡбуҙат» әҙәби әм ижтимағи-сәйәси журналдары яҙыусыларҙың яңы әҫәрҙәрен даими баҫтырған.

2008 йылда шиғриәт, проза, балалар әҙәбиәте ижади секциялары, татар яҙыусылары берләшмә е уңышлы эшләне. Уларҙа башлап яҙыусыларҙың яңы әҫәрҙәренә ба алар бирелде, төрлө жанрҙар буйынса тәжрибә уртаҡлашыуҙар ойошторолдо.

Яҙыусылар союзы идара ы тарафынан республика райондарында әм ҡалаларында яҙыусыларҙың уҡыусылар менән осрашыуҙары ойошторолдо, үҙ оҫталарының юбилей кисәләре үткәрелде.

Башҡортостан яҙыусылары шулай уҡ барлыҡ күмәк халыҡ сараларында, иң беренсе сиратта «Салауат йыйыны» байрамында, абантуйҙарҙа, район-ҡалаларҙа әм Рәсәй Федерация ы буйынса уҙған мәҙәниәт көндәрендә әүҙем ҡатнашты.

Шул уҡ ваҡытта ижади союздың әм уның филиалдарының эшендә байтаҡ ҡатмарлыҡтар әм етеш еҙлектәр бар. Урындағы ойошмаларҙың ҡай ы берҙәре (Стәрлетамаҡ, Сибай, Учалы, Күмертау әм Яңауыл) йәмәғәт эше менән етерлек шөғөлләнмәй, йыш ҡына башлап яҙыусыларҙың ҡулъяҙмаларын тикшергәндә талаптар кәметелә. Яҙыусыларҙың әм шағирҙарҙың телевидение аша сығыштары, милли әҙәбиәт үҫеше тура ында тапшырыуҙар, «Шиғриәт минуттары», «Әҙәби осрашыуҙар» ирәк күренешкә әйләнде . б.

Яҙыусыларҙың әм шағирҙарҙың ижади кисәләре (юбилей кисәләренән тыш), Өфө әм башҡа ҡалалар вуздарында «Тәңкә ҡарҙар», «Яҙғы моңдар» кеүек студент йәштәр өсөн шиғриәт кисәләре аҙ үткәрелә.

Башҡорт әҙәбиәте жанрҙары буйынса ижади секцияларҙың, татар әм рус

әҙәбиәте берләшмәләренең 2008 йылдағы эшмәкәрлектәре буйынса сығыштарҙы тыңлағас, Башҡортостан яҙыусыларының дөйөм йыйылышы ҡарар итә:

1. *Башҡорт шиғриәте, проза ы, драматургия ы, балалар әҙәбиәте, сатира әм юмор, әҙәби тәнҡит, тәржемә секциялары, татар әм рус яҙыусылары берләшмәләре етәкселәренең сығыштарын хупларға;*

2. *Уҡыусыларҙы йәнле әҙәби процесс менән таныштырыу маҡсатында сығыштарҙы «Ағиҙел» әм «Бельские просторы» журналдарында, «Истоки» гәзитендә баҫтырырға;*

3. *«Башҡортостан» телерадиокомпания ына айына бер тапҡыр яҙыусыларҙың әм шағирҙарҙың тематик сығыштарын ойоштороуҙы юллап мөрәжәғәт итергә;*

4. *Стәрлетамаҡ, Сибай, Учалы, Күмертау, Яңауыл ойошмаларының юғары кимәлдәге әҫәрҙәр тыуҙырыу буйынса эшмәкәрлеген әүҙемләштереүгә ирешергә;*

5. *Ижади секцияларҙың, бигерәк тә филиалдарҙа, ҡулъяҙмаларҙы тикшергәндә талапсанлығын арттырырға;*

6. *БР Яҙыусылар союзы ойошторолоуға 75 йыл тулыу айҡанлы республика район-ҡалаларында Башҡорт әҙәбиәте көндәрен үткәреү тәжрибә ен терегеҙергә;*

7. *Йәштәрҙең ижади инициативаларын яҡлау йылы йә этенән түбәндәгеләрҙе айырыуса мө им тип иҫәпләргә:*

а) *ижтимағи-сәйәси әм әҙәби-нәфис журналдар тарафынан бөгөнгө йәштәр тура ында иң яҡшы әҫәрҙәргә конкурстар ойоштороу;*

б) *республика матбуғатында сығыштарын әүҙемләштереү, Яҙыусылар союзында үткән "Әҙәби кесаҙна"ларҙың тематика ын төрләндереү аша йәш яҙыусылар менән эште йәнләндереү;*

в) *республика вуздарында әм гимназияларындағы әҙәби түңәрәктәрҙең эшен Яҙыусылар союзы ҡурсаулығына алып, уларға әр йә эттән ярҙам күр әтеү;*

г) *БР Яҙыусылар союзы янында Йәш яҙыусылар берләшмә е ойоштороп, ижади берләшмә тура ында положение эшләп, уны сираттағы идара ултырышында ҡарау.*



**Мәүлит**
**ЯМАЛЕТДИН**

# “А , УЛ ТӨНДӨҢ САҒЫУ БАЛҠЫШТАРЫ...”

## Зәйнулла ишан нәсихәттәре

*Хикмәт менән  үҙ ҡуҙғата ишанығыҙ,*
*Ишандың әйткәненә ышанығыҙ.*
*Сағәҙәткә ирешергә теләгеҙ,*
*Күк  йөҙөндәй  таҙа  бул ын  выжданығыҙ.*

*Йылҡының да ала ы бар, ҡола ы бар,*
*Халыҡтарҙың дине башҡа, Алла ы бер.*
*Ошо хаҡта ҡат-ҡат әйтә Ҡөрьән-Кәрим,*
*Ул тәфсирҙе ишетәлер ҡолағы бар.*

*Хоҙай берәү – Уға күңел баҫыу кәрәк,*
*Хаҡ Аллаға йөрәктәрҙе асыу кәрәк.*
*Раббының мәрхәмәтен алам ти әң,*
*Был донъяла  ҡом оҙлоҡтан  ҡасыу  кәрәк.*

*Мәғишәттең хәшәрәте – ғәйбәт, яла,*
*Ғәйбәтсене  ис  өймәмен, тигән Алла.*
*Яла яғып, әҙәм башын юйыусыны*
*Ҡатыларҙан-ҡаты яза көтә алда.*

*Ерҙә тик бер таяныс бар, исеме – иман.*
*Шун ыҙ  еҙҙең тормошоғоҙ булмаҫ  аман.*
*Әгәр ҙә ки саф иманды артҡа ташлап,*
*Ялғанға табын ағыҙ – ҡоно яман!*

*Мәүлит Ямалетдин 1947 йылда Учалы районының А ылай ауылында тыуған. Өфө музыка-педагогия училище ын, БДУ-ны, Мәскәүҙәге Юғары әҙәби курстарҙы тамамлай. Музыка уҡыта, матбуғат баҫмаларында эшләй. Учалы яҙыусылар ойошма ының етәксе е була.*

*Хикмәт менән үҙ ҡуҙғата ишанығыҙ,*
*Ишандың әйткәненә ышанығыҙ.*
*Сәғәҙәткә ирешергә телә әгеҙ,*
*Тәүбә итеп, боҙоҡлоктан бушанығыҙ.*

***

*Карьера тип, ҡан дошманға*
*Ҡул бирә торған заман;*
*Ялағайға донья шәйен*
*Мул бирә торған заман.*

*Быялаға күҙ ҡамашып,*
*Алтынды күрмәҫ заман;*
*Алтынға тиң ир-егеттәр*
*Ҡатарға кермәҫ заман.*

*Тик алтын әр ваҡыт алтын*
*Булған. Булыр артабан.*
*Быяла ҡомдан я ала –*
*Иҫеңдә тот, уҙаман!*

## аҡмар ағыр

*Рәйес Түләк!*
*Ниндәй хаҡтар түләп*
*Ҡайтарайыҡ яҡты донъяға?..*
*Хәйер, ҡайтмаҫ инең – ыласындар*
*Ике ҡунмай бер үк ҡаяға.*
*аҡмарға баҡ: уның ярҙарын да*
*Ике тапҡыр йыумай бер үк ыу.*
*Илле йәшеңде лә күрмәйенсә*
*Юғалтыуы ине яман ыу.*
*Донъя фани. Ғүмер сикле. Әммә*
*Унда түгел эштең асылы –*
*Мәңге үнмәҫ дан ҡалдырып китә*
*Ата бала ының аҫылы.*

*Алда әле инең шиғырҙарҙың*
*ыймаҫ көнө ҡалын томдарға.*
*аҡмар ағыр, үлем еҙлек серен*
*Төшөндөрә алмай ҡомдарға.*

***

*Көнәй-көнәй * замандарҙы*
*Үткәрҙек төнәй-төнәй.*
*Йоҡонан ырыҫ ҡаса, тип*
*Әйтмәнең ниңә, ҡәртнәй?!*

---

**Көнәй-көнәй — борон-борон.*

*Көнө йылдай ваҡыттарҙы*
*Йәшәнек көйләй-көйләй.*
*Йыр бәхеткә иш түгел, тип*
*Әйтмәнең ниңә, инәй?!*

*Баҡыйға китеп барабыҙ*
*Әкиәт өйләй- өйләй.*
*Ни ҡалдырҙығыҙ беҙгә, тип*
*Салғыйҙан тарта тәнәй.*

## Бер шағирға

*Табаҡ-табаҡ шиғри китаптарың,*
*Том артынан сыға томдарың.*
*Күпме ҡағыҙ әрәм! Бушалағайым*
*Елгә оса илдең умдары.*

*Шиғырҙарың бала-саға уйнар*
*Башаҡ ыҙ уҡ – теймәй сәптәргә,*
*үҙ ынйы ын иңә рух-дарьянан*
*Сүпләргә лә әле сүпләргә.*

*Сүпләп бөткәс, "иң-иң"дәрен айлап,*
*Фекер ептәренә теҙергә;*
*Кешеләрҙең күңеленә уны*
*Моң епсә е менән тегергә.*

*Ышанма аң, тыңла: Буранбайҙың*
*Моң-зар тулы кескәй хатынан*
*Ҡарттар илағанға тетрәнгән ил*
*Арына алмай аман а ынан.*

## Хыял

*Ваҡыт машина ы бул а ине,*
*Үҙе менән мине ал а ине.*
*Тәҙрә артындағы ысынбарлыҡ*
*Офоҡ аръяғында ҡал а ине.*

*Ваҡыт машина ы бул а ине,*
*Бала саҡҡа сәфәр ҡыл а ине.*
*Мөҙҙәт менән киңлек аймылышып,*
*Барлыҡ үлсәмдәрҙе юй а ине.*

*Тыуған төйәк күкрәп ят а ине,*
*Танып, бауырына баҫ а ине.*
*Атам менән әсәм, өйҙән сығып:*
*"Ҡайт, балам!" – тип ҡулын уҙ а ине.*

*Ауылға йәм, шатлыҡ тул а ине,*
*Унда дуҫтар көтөп тор а ине.*
*Бала саҡтың ал ыу болоттары*
*Баш осонан йөҙөп уҙ а ине.*

*Бере е, арбап, уйға ал а ине,*
*Үҙе менән мине ал а ине.*
*Тәҙрә артындағы ысынбарлыҡ*
*Ҡулғына ын болғап ҡал а ине.*

## Шаңдау

*Бәғзе берәү теле менән ҡуша*
*Динен атҡан саҡта, көнөм, тип,*
*Илкәйем, тип иләҫләнде күңел,*
*Телгеләнде йәнем, телем, тип.*

*Тыуған илем әгәр йәйә бул а,*
*Атам-әсәм теле – осҡор уҡ.*
*Ян ыҙ уҡтан файҙа булмағандай,*
*Уҡ ыҙ йәйәнән дә толка юҡ.*

*Әлмисаҡтан бында милләтемдең*
*Барыр ере, батыр күлдәре;*
*Урал таштарына еңгән хатта*
*Башҡорт моңо, башҡорт телмәре.*

*Илкәйем, тип иләҫлән ә күңел,*
*Телгелән ә йәнем, телем, тип,*
*Урал ҡая ынан шаңдау килә:*
*"Илдән, телдән яҙыу – үлем!.." – тип.*

## Боронғо хәтирә

*Тукта, ылыу!*
*Ҡайҙа күрҙем ине?*
*Ул ни быуат ине?*
*Ҡай ы саҡ?..*
*Хәтеремә төштө:*
*Алтын Урҙа.*
*Мин хан инем, ә ин – кәнизәк.*

*ине миңә бүләк иткәйнеләр,*
*Иҫемдә, бер ҡаты яуҙан уң;*
*Дошман ҡәлғә енең диуарҙары*
*Аяк аҫтарыма ауған уң.*

*А , ул төндөң сағыу балҡыштары –*
*Хис күкрәүе, шә үәт йәшене!..*

*Бөтә донъя үлде.*
*Беҙҙең өсөн*
*Бары ғишыҡ ҡына йәшәне.*

*Ул төндә мин Алтын Урҙа түгел,*
*Ҡулда тоттом, гүйә, Йы анды;*
*Ғәфү иттем барлыҡ хыянатты,*
*Ярлыҡаным әммә дошманды.*
*Шул ила и уй-тойғолар менән*
*Ҡуйыныңда инең ойоном,*
*уңынан таң атты.*
*Беҙ уяндыҡ,*
*ин – ханбикә, ә мин ҡол инем…*

## *Аҡмулла*

*Аҡмулланың күңеле аҡтан, әйткән үҙе йыраҡтан.*
*Якты ыны – күҙ алдынан, моңо китмәй ҡолаҡтан.*

*Якты ыны – күҙ алдынан, моңо китмәй ҡолаҡтан,*
*Әйтер ең дә, ыуҙар эсәм сафтарҙан-саф болаҡтан.*

*Әйтер ең дә, ыуҙар эсәм сафтарҙан-саф болаҡтан,*
*Рух бермә-бер күтәрелә, эс таҙара боҙоҡтан.*

*Рух бермә-бер күтәрелә, эс таҙара боҙоҡтан.*
*Серле бер ҡыуаныс булып йыр ағыла офоҡтан.*

*Серле бер ҡыуаныс булып йыр ағыла офоҡтан,*
*Аҡ күңелле Аҡмулланың ыны балҡый йыраҡтан.*

### РОБАҒИҘАР

***

*Тышҡа сыҡ аң – аҙым айын ығы-зығы,*
*Өйгә ҡайт аң—йәнә ҡатын, бала-саға.*
*Ҡартлыҡ етә. Тыныс…*
*Баҡ аң, теге ваҡыт*
*Булған икән ғүмерҙәрҙең алтын сағы.*

***

*"Мин – башҡорт!" – тип өрән алдың.Вәт, мәрәкә!*
*Йәнә е лә, Колумб – астың Америка.*
*Милләтеңде данлар өсөн уға лайыҡ*
*Ижад кәрәк, түгел быңдай истерика.*

***

*Иҙеүсегә ҡалған көнөң – ҡара төнөң,*
*Үҙ тиреңде тунап алыр, туҙ а туның.*
*Яу ораны булып уға ишетелер*
*Хатта инең "Уф!" тип кенә әйткән өнөң.*

***

*Ҡайғыларҙан ҡурҡма, туған, бәхеттән ҡурҡ.*
*А -зар тоғро: килә иңә бер түгел, ҡырҡ.*
*Ә бәхеткә ни ышаныс? –*
*Ғүмереңдә*
*Бер килә лә, китмәгә – бар, ҡайтмаға – юҡ.*

***

*әр юлбашсы вәғәҙәләй гарантия.*
*Төп закон да: " ине аҡлап торам", – тиә.*
*Ә ағута: "Хоҡуҡ даулап, арлы-бирле*
*үҙ ҡуҙғат аң, ауыҙыңды йырам!" – тиә.*

***

*Ҡайҙа ҡалды бурҙың бүрке янған саҡтар;*
*Заң бурҙайы бурбайҙарҙан алған саҡтар;*
*Гарантия, хоҡуҡ тигән ый-хөрмәттәр*
*Аҡма а ла, ирәк- аяҡ тамған саҡтар?*

***

*Әллә ниңә ис яратмай аҡса мине –*
*Тормай, ташлап ҡаса хатта уҡыр тине.*
*Ә мин уға инәлмәйем!*
*Кемдер бер саҡ:*
*" өймәгәнгә өйкәлмәйҙәр, улым", – тине.*

***

*Магнит.*
*Уға арылыусан сүп, ҡый-ғыпыр.*
*Ысҡынмай ул – кәрәк елкет, кәрәк ыпыр.*
*Ҙур тимергә магнит үҙе тартылғанда,*
*Сүпте көтә әпкәләйгә яҙған тәҡдир.*

***

*Елгә ҡаршы төкөрөүҙән ниндәй файҙа? –*
*Беҙ бит Ерҙә көн итәбеҙ, түгел Айҙа.*
*Ә уң, Айҙа ел дә иҫмәй, дауыл да юҡ,*
*Тигән үҙҙе кем ишеткән? Дәлил ҡайҙа?*

***

*Тел тигәндән, минең дә бар фаразым:*
*Тел бирмәктән ил бирмәккә – бер аҙым.*
*Сәсәндәрҙең телен элек батшалар*
*Юҡҡа ғына киҫмәгән ул, братым.*

***

*Азия ҙур. Азияла ҡыҙҙар матур.*
*Изге уйҙан унда ожмах нуры балҡыр.*
*Әгәр бул а күңелеңдә яуыз ниәт,*
*Бишектәге бала ы ла уктан атыр.*

***

*Ай аҫтында иң татлы шәй дан түгелме?*
*Дан тигәндең игеҙәге шан түгелме?*
*Төптәнерәк уйлап баҡ аң, ике е лә*
*Аң-зи енде томалаған саң түгелме?*

***

*Алтын йәки көмөш күкәй алған кеүек,*
*Бар донъяға шау күтәрҙе сыбар тауыҡ.*
*Был йәүкәнән кемгә файҙа? айыҫканға! –*
*Күр: ояла ятып ҡалды ҡоро ҡабыҡ.*

***

*Бирешмәгеҙ: был донъялар – ынау ғына,*
*Юҡҡа-барға көйөп, йәнде ҡыйнау ғына;*
*Үҙеңдә юҡ сифаттарҙы, бар, имеш, тип,*
*Ә булғанын, юҡ, имеш, тип уйнау ғына.*

***

*әр бер ғашиҡ өйгәненә:"Яратам, – ти. –*
*ин телә әң, ҡышын былбыл айратам", – ти.*
*Тормош көлә: "Башҡа-башҡа еп инегеҙ,*
*Икегеҙҙе бер йомғаҡҡа сиратам", – ти.*

***

*Иң ысыны был донъяла – тәүге өйөү,*
*Уның үнмәҫ ялҡынында яныпп-көйөү.*
*Ҡалғандары аҙаҡ: юҡҡа үпкәләшеү,*
*Айырылышыу хөкөмөнән ярты үлеү.*

***

*Халыҡ әйтә, мин ишетәм, ҡәләм яҙа:*
*"Эш өйгәндең, йыума а ла, ҡулы таҙа.*
*Кеше хаҡын ейгәндәрҙең бысраҡ ҡулы*
*ис таҙармаҫ, хушбуй менән йыу алар ҙа".*

***

*Сетерек еҙ булған саҡта беҙҙең ара,*
*Ваҡыт менән мин дә ҡорҙом моназара.*
*Был бәхәстә кемдең өҫтөн сыҡҡанлығын*
*Аңлар өсөн уға баҡ та миңә ҡара.*



**Рәшит**
**ШӘКҮР**

# СКРИПКА МОҢО

ХИКӘЙӘТ

*Күренекле кинорежиссер,*
*Башҡортостан Республика ының*
*Салауат Юлаев исемендәге дәүләт*
*премия ы лауреаты Әмир Әбдразаҡов*
*иҫтәлегенә*

ыҙҙырт әле, дуҫым, скрипкаңды,
Скрипканың ҡылы тылсымлы.
Шул ҡылдарҙа моңдар уҙа- уҙа,
өйләп бир ин фәкәт ысынды.

Иҫкә ал ин йәшлек таңдарыңды,
Тук буйҙарын, Соран буйҙарын;
Сорандарҙың ҡарлы бурандарын,
Байрамдарын, абан туйҙарын.

өйлә йәнә ошо ҡулыңдағы
Затлы скрипкаңдың ҡисса ын.
Ил хәтере тарихтарҙа ҡал ын,
Онотолоп елгә осма ын.

Онотмайык ауыр яу йылдарын,
Яу йылдары – йөрәк хәтере.
Ул хәтерҙең сиреге лә, бәлки,
Бөтмәгәндер әле әйтелеп.

Тук буйында, алыҫ бер ауылда
Еңеү яулап ҡайтҡан ҡарт яугир.

---

*Рәшит Шәкүр — ғалим әм шағир. Бик күп әҙәби әм ғилми китаптар авторы. Филология фәндәре докторы, профессор.*

*Дүрт йыл буйы оҙон яу юлдарын*
*Арыу-талыу белмәй уҙған ир.*

*Ғәжәп бер табышҡа юлыҡҡан ул*
*Барып етер саҡта Берлинға:*
*Еңеү көнөнән уң бер арала*
*Тап булған, ти, алдат бер өйгә.*

*Скрипка моңо ишетелә эстән,*
*Сыңрай-сыңрай киске ауала.*
*Асыҡ тәҙрәләрҙән – о, ни ғәжәп!–*
*“Сыңрау торна” көйө тарала.*

*Үҙ-үҙенә ышанмайса,*
*Тора алдат ҡапҡа алдында.*
*Нәк ошо уҡ көйҙө күпме тапҡыр*
*Тыңланы ул тыуған яғында.*

*Тора биргәс бер аҙ хискә сумып,*
*Тыңлай биргәс шулай таң ҡалып,*
*Ҡыңғырауҙың бауын тартып, алдат*
*Асып кермәк булды ҡапҡаны.*

*Эстә шул саҡ тымды тылсымлы моң,*
*Әкрен генә ишек асылды.*
*Ап-аҡ сәсле бер ҡарт килеп сыҡты,*
*Әкрен баҫып әр бер аҙымды.*

*Осраштылар ынсыл ҡараштары*
*Ҡара-ҡаршы ике тарафтың.*
*Аңлай алмайынса торҙо алдат*
*Уға текләп торған ҡарашты.*

*Көтмәгәндә шулай тап булды ул*
*Скрипкасы немец ҡартына.*
*“Битте! Битте!” – тиеп алдатты ҡарт*
*Алып керҙе үҙе артынан.*

*Күреп тора: урыҫ алдаты был,*
*Тик шулай ҙа урыҫ түгел дә.*
*Ниндәйендер бер ыҙаты менән*
*Яҡын ымаҡ та ул күңелгә.*

*“Ты откуда, солдат?” Был үҙҙәргә*
*Тертләп китте йорттоң ҡунағы.*
*“Кем уң скрипкала башҡорт көйөн*
*Әле яңы ғына уйнаны?”*

*“Я из Оренбуржья”, – тигән булды,*
*Аптырағас, табып яуабын.*

*Хәйер, ҡайҙан бел ен инде немец*
*Ул Ырымбур тигән даланы?*

*Ә улай а, “Сыңрау торна” көйө*
*Нисек килеп кергән был өйгә?*
*Кемдән отоп алған уны был ҡарт,*
*Кем өйрәткән уға был көйҙө?*

*Скрипка ы, ана, ҡул осонда,*
*Ҡарамаҡка ябай, ҡәҙимге.*
*Башҡорт  алдатына моң ҡоралы*
*Шуның менән дә ул ҡәҙерле.*

*“Ырымбурҙан, ти ең инде,  алдат…*
*О, Ырымбур, Тәңре дала ы…”*
*Шулай тиеп тамам аптыратты*
*Немец ҡарты башҡорт бала ын.*

*Үҙе и ә, танығандай булып,*
*Текләберәк торҙо  алдатка.*
*“Минең ғүмер юлым, – тине немец, –*
*Башланды бит ана шул яҡта…”*

*Ниҙәр генә күрмәй  алдат башы,*
*Ниҙәр белмәй, ниҙәр кисермәй.*
*Әммә былдай осрашыуҙы уның*
*Күргәне юҡ хатта төшөндә.*

*Ә етмә ә немец, яҡын килеп:*
*“ ин башҡортмо? – тисе туп-тура. –*
*Башҡортто бит, күҙҙәренә ҡарап,*
*Әллә ҡайҙан танып мин торам”.*

*Шул  үҙҙәре менән таң ҡалдырып,*
* алдатты ул түргә уҙғарҙы.*
*Тынып торҙо, йыйып алған  ымаҡ*
*Алыҫтарҙа яткан уйҙарын.*

*Аҙаҡ дауам итте талғын ғына,*
*Нур йүгерҙе моң оу йөҙөнә.*
* алдат и ә түҙеп  тыңлай бирҙе,*
* үҙ бөтмәҫен белеп тиҙ генә…*

*“Беҙҙең атай-олатайҙар унда,*
*Тулып аҡкан Туҡтың буйында,*
*Башҡорттан ер алып, әүәле бит*
*Утар-утар булып ултырған.*

*Мин бына шул ерҙә тыуып үҫкән*
*Ырымбурҙың башҡорт алманы.*

*Үкенескә, элек тә бит, энем,*
*Донъяларҙы уғыш ялманы.*

*Рәсәй ул сак, үрәпсегән аттай,*
*Үрә баҫты, аңын юғалтты.*
*Гүйә, ер ярылды ҡап уртаға,*
*Ҡайҙа аҡ, тип, ҡайҙа хаҡлыҡ, тип.*

*Мин дә шул мәл оҡшап ҡалғанмындыр*
*Дала өҫтөндәге ҡамғаҡҡа…*
*Нисек кенә ағын ам да, инде*
*Ҡабат юл төшмәне ул яҡҡа.*

*Әммә ғүмер буйы күңелемдә*
*Йөрөтәм мин дала улышын,*
*Сал ҡылғандар моңон ишеткәндәй*
*Яңғыраған ҡурай тауышын.*

*Ә бына был скрипка миндә –*
*Башҡорт ҡорҙашымдың бүләге.*
*Шуның ҡылдарында, әйтер ең дә,*
*Тибеп тора башҡорт йөрәге”.*

*“Ә кем уң ул инең башҡорт дуҫың,*
*Ҡәҙерле ул иңә ни өсөн?*
*Нисек яҡын алдың ин үҙеңә*
*Башҡорт донъя ының уй-хисен?*

*Ҡайҙан бында “Сыңрау торна” көйө –*
*Ул бит ҡото сәхрә даланың.*
*Әле генә мин бит тәҙрә аша*
*Нәҡ шул оҙон көйҙө тыңланым”.*

*“Йә, улай а”, – тиеп алман ҡарты*
*Скрипканы алды ҡулына.*
*Ила и көй тағы сыңлап китте,*
*Бүлмә тулды башҡорт моңона.*

*Ул уйнаны. Йән тетрәткес был моң*
*Ғаләм киңлектәрен ураны.*
*Скрипка ҡылдарында донъя үҙе*
*Берсә сеңләп, берсә йырланы.*

*“Тор-ройҡ, тор-ройҡ”! Сыңрау торналар*
*Осоп үтте, гүйә, ауанан.*
*Гүйә, сәләм биреп китте улар,*
*Осоп килеп алыҫ даланан.*

*Яугир күңелендә оло байрам,*
*Оло шатлык итте тантана.*

*Инде йөҙәтмәне ҡарт алманды,*
*ораУҙарын биреп ҡайтанан.*

*Әммә хужа үҙе бәйән итте*
*Башҡорт дуҫы Ильяс хаҡында…*
*“ әр йәй айын көтөү көттө Ильяс*
*Туҡ буйында йәшлек таңында.*

*Күрше немец утарында уны*
*Яраттылар, яҡын күрҙеләр.*
*Хатта өлкәндәр ҙә, хөрмәт итеп,*
*Ҡулын ҡыҫып, сәләм бирҙеләр.*

*Оҫта ине Ильяс, ай- ай, оҫта!*
*Ма ир ине төрлө өнәргә.*
*Ул дан алған бер ба адир ине*
*Туҡ әм Соран тигән ерҙәрҙә.*

*Ат яратыр ине. Ат өҫтөндә*
*Осор ине осар ҡош кеүек.*
*Бер уйла аң, булғандыр ҙа, тимен,*
*Йөрәккәйе уның ҡуш кеүек.*

*Хәйер, башҡорт өсөн ғәжәпме ни*
*Атта йөрөү, атта елеүҙәр,*
*Сәхрәләрҙә оҙон көндәр буйы*
*Оҙон көйҙәр көйләп йөрөүҙәр.*

*Әммә Ильяс йыры… О, мөғжизә!*
*Йән тетрәткес ул моң, ул тауыш…*
*Алла ының ҡөҙрәттәре менән*
*Тәрәндәрҙән килгән моң- ағыш…*

*Ә уң скрипка ал а ҡулдарына*
*Йә даланың ҡып-ҡыу ҡурайын,*
*Ильяс, әйтер ең дә, о, ни хикмәт,*
*Сиртер ине ғаләм ҡылдарын.*

*Беҙ төнгөгә сыҡҡан саҡта шулай*
*Ильяс дуҫтың йыр-моң телендә*
*Яңы донъя асылғандай булды,*
*Мосолмандың Ҡәҙер төнөндәй.*

*Ул донъяның сыңлы бер тылсымы –*
*Сыңрап оҫкан сыңрау торналар.*
*Әлдә ерҙә шундай тылсымдар бар,*
*Сал далала шундай моңдар бар.*

*Дала моңо йөрәгемә еңгән,*
*Иш иткәнмен уны йәнемә.*

*Дала моңо миңә – донъя моңо,*
*Шуны тоймаусылар йәл миңә.*

*Ғаләм моңон, ғаләм гармония ын*
*Той а әгәр беҙҙең иблистәр,*
*Баш алмаҫтар ине яуызлыкҡа,*
*Баш етмәҫлек быңдай хирескә.”*

*Төн урта ы. Ал әләмдәр алда*
*Ал төҫ биреп тора Берлинға.*
*Ғәжәп был әңгәмә дауам итә*
*Берлин ситендәге бер өйҙә.*

*“Ә был скрипка минең өсөн, –*
*Тине алман, – тере талисман.*
*Ул – иҫтәлек миңә сал даланан,*
*Ул – иҫтәлек дуҫым Ильястан”.*

*Немец ҡарты тамам әсир итте*
*Еңеү яулап килгән яугирҙы,*
*Нескә хистәр тулҡынына алды*
*Яу юлдарын үткән дәү ирҙе.*

*Әйтте алдат: “Мин дә хәтерләйем*
*Скрипкасы Ильяс сәсәнде,*
*Сыңрау торналарҙың көйөн тыңлап,*
*Туҡ ыуҙарын эсеп үҫкәнмен”.*

*Ҡарттың күҙҙәренә йәш төйөлдө,*
*Хатта бер аҙ үҙ еҙ ҡалды ул;*
*үҙ еҙ генә, йәнә аҡлыҡ менән*
*Скрипканы ҡулға алды ул.*

*“Был ҡоралдың, – тине, – серен хәҙер*
*Сисергә лә ваҡыт еткәндер.*
*Уның тауышының бар сафлығы*
*еҙҙең телдән, еҙҙең ерҙәндер.*

*Туҡ буйында үҫкән алмағастан*
*Эшләгән бит уны оҫта ы.*
*Дала тирәгенән я алған бит*
*Хатта уның бынау ҡумта ы.*

*Шундай уйға киләм: был донъяла*
*Осрашыуҙар булмай осраҡлы.*
*Дала ниндәй мәрхәмәтле бул а,*
*Мин даланы өйҙөм шул саҡлы.*

*Тәңрең ине миңә ебәргәндер*
*Бер илсе е итеп халҡыңдың.*
*Шуға ла ин имен ҡалған ыңдыр,*
*Үтеп сығып утты, ялҡынды.*

*Аңлайым мин инең миссияңды,*
*ин – еңеүсе илдең алдаты.*
*ине унда күптән көтәләрҙер,*
*ағынып көтәләрҙер йән атып.*

*Ҡайт ын, әйҙә, скрипка үҙ еренә,*
*Моңдар ҡайт ын Туҡҡа, Соранға,*
*Үҙ еренә мәңге тоғро бул ын*
*Шул ила и илдә тыуғандар.*

*Далаңа ин ошо дала ҡотон*
*Тейеш еңдер алып ҡайтырға.*
*Ҡарт көнөмдә мин аманат итеп*
*иңә, алдат, уны тапшырам…”*

*…Яу юлдарын үтеп, еңеү яулап*
*Ҡайтып төшкән алдат ауылға.*
*Изге ҡомартҡыны ул ҡәҙерләп*
*Алып ҡайтҡан тыуған яғына.*

*Ошо мәлдән затлы скрипканың*
*Башланалыр яңы ҡисса ы.*
*Тарихтарҙа еңеп сыҡкан шулай*
*Кеше күңелендәге инсафлыҡ.*

***

*Скрипканың даны тиҙ арала*
*Таралғайны яҡын-алыҫҡа,*
*Уны күрер өсөн генә хатта*
*Күптәр килде алыҫ тарафтан.*

*Бына бер мәл Соран буйҙарынан,*
*Етмеш саҡрым ерҙе бер итеп,*
*Зәңгәр күҙле үҫмер килеп керҙе,*
*Ялан аяҡ оҙон юл үтеп.*

*Зәңгәр күҙле үҫмер сәхрәләрҙә*
*Бер хыялбай булып тыуған ул,*
*Йәй буйына ауыл малын көтөп,*
*Скрипкалыҡ бол да йыйған ул.*

*Яуҙан ҡайтҡан изге ҡомартҡыны*
*Ул аҡ ҡына алды ҡулына,*
*ыҙып ҡына ыҙып башланы ул*
*“Сыңрау торна” көйөн тын ғына.*

*Өй эсенә тулды был серле моң,*
*Тибрәтте моң йөрәк ҡылдарын,*
*Күҙ алдынан үтте ҡарт алдаттың*
*Яу юлдары, фронт юлдары.*

*“Бына кем ул далабыҙҙың ҡотон*
*Килер быуындарға илтеүсе,*
*Үҙ алдына оло маҡсат ҡуйып,*
*Хыялдағын ысын итеүсе…”*

*Шулай уйлай алдат, ә үҙенең*
*Күҙҙәренә йәштәр төйөлә…*
*Мәңге ғашиҡ башҡорт йөрәккәйе*
*Сыңрау торналарҙың көйөнә.*

*Ошо изге торна тауыштары*
*Ҡурсалаған беҙҙе, яу кил ә;*
*Ерҙән, күктән, ыуҙарынан башҡорт*
*Көс әм ғәйрәт алған, дау кил ә.*

*Илгенә ен өйөүҙәре уның*
*Ерҙән алып күккә ашҡандыр,*
*өйөү хисе уның ауыр саҡта*
*Йөрәк яраларын баҫҡандыр.*

*“Уйна, улым, уйна! – тине алдат.*
*– Скрипканы иңә тапшырам.*
*Сыңрау торналарын аҡлап, яҡлап*
*Йәшә ә ил, йәшәр Тук-Соран…”*

***

*Уйнат, дуҫым, скрипкаңды,*
*Ул бит – иңә яугир бүләге.*
*Илдең унда асмандарға ашҡан*
*Уй-хыялы, яҡты теләге.*

*Ошо скрипкаңда уйнап, ин бит*
*Сыҡтың оло тормош юлына.*
*Өфө тауҙарына үрләгәндә*
*Скрипкаң булды ҡулыңда.*

*Скрипка моңо әр саҡ әйҙәп торҙо*
*Бейектәрҙән тағы бейеккә.*
*Ал-ял белмәйенсә алға барҙың,*
*Далалағы алғыр кейектәй.*

*Тор-ройҡ, тор-ройҡ торна тауыштары*
*Сал ҡылғанлы дала күгендә.*
*Дәүерҙәрҙе, гүйә, дәүерҙәргә*
*Тоташтырып улар теҙелгән.*

*ыҙҙырт әле, дуҫым, шул моңдарҙы,*
*Илебеҙҙең ҡото ул моңдар.*
*Ерҙә, күктә, ауаларҙа әр саҡ*
*Ҡоштар моңо сыңрап тор ондар!*



**Рамай**
**ҠА ИР**

## Ҡояш – усаҡ

*Уңда – сысҡандар ҡыштырлай,*
*улда – йылан ыҫылдай.*
*Ҡосағыма инсе, тиеп*
*Күк томандар бышылдай.*
*Ҡояш әле тау артында –*
*Емелдәй таңғы йондоҙ.*
*Ул – әйтер ең, усаҡтағы*
*үнеп барған уңғы ҡуҙ.*
*Ел генә өрөп ебәр ен –*
*Ҡабынып китер усаҡ.*
*Ана, ҡояш килеп сыҡты,*
*Нурҙары ҡосаҡ-ҡосаҡ.*
*Уф, ялҡындың эҫелеге –*
*Ҡыҙҙыра көн буйына.*
*Көйәнтә аҫып, болоттар*
*Ашыҡты күл буйына.*
*Силәкләп ямғыр ҡойҙолар*
*Дөрләп янған усаҡҡа.*
*үнде усаҡ. үрелеүе –*
*Беләм, түгел оҙаҡҡа.*
*Көл аҫтында таңды көтөп*
*Уйнайҙыр тере ҡуҙҙар.*
*... Ҡояш ҡабат тау артында,*
*Күктә баҙлай йондоҙҙар!*

*Рамай Ҡа ир Учалы районының Өргөн ауылында йәшәй. Яҙыусылар союзы ағза ы.*

## Дауыл

Күк күкрәтеп йәшен йәшнәй,
Гүйә, өжүм башланды.
Дауыл-маршал болоттарға
Тәүге булып ташланды.
Дауыл – сая, алдаттарын
Бейетә үҙ усында.
Командир булмышын тоям
Мин уның тауышында.

Саф-саф булып теҙелешкән
Күпме алдат ағастар.
Уларҙың әр бере ендә,
Беләм, йәшәү дәрте бар!
Ярат алар ҙа тормошта
Йәшәп, күкрәк кирергә.
Улар – алдат, ис бер шик еҙ
Әҙер утҡа инергә.
Ана, күрсе, йәшен атҡан
Күпме ҡарағайҙарҙы –
Беҙ уғышта юғалтҡандай
Атай, олатайҙарҙы.

Дауыл – ҡыйыу, ҡыуа торғас,
Болоттар бөттө ҡасып.
Үҙе аман тынмай әле –
Ғәйрәте тора ташып.
Дауыл-маршал атакаға
Күтәрә үҙ ғәскәрен.
… Юғалтыуҙарын иҫәпләп
Йолкколайҙыр сәстәрен…

## Көр өнәлер күктәр…

Ул болоттар уғылғанда –
Күктә йәшен йәшнәй.
Кемдер яна оло килеш,
Берәү яна йәшләй.
Аҙаҡ йәмле көндәр тыуа,
Нурҙар сәсә ҡояш.
Ҡояш – үҙе шундай тыныс,
Үҙе – шундай йыуаш.
Ул йылмай а, болоттар ҙа
Дуҫлашалар кеүек.
Дауылдарҙы тау артына
Оҙаталар кеүек.

*Беҙ, кешеләр, уғылғанда*
*Көр өнәлер күктәр.*
*Сабыр булайыҡсы, зин ар,*
*Ауыр көндәр үтәр.*
*Йәшен йәшнәтер дауылдар –*
*Үҙебеҙҙән сыға.*
*Утлы үҙҙәр кешеләрҙе*
*Аяғынан йыға.*
*Ике йөҙлө, ти әләр ҙә,*
*Кеше – сабыр, йыуаш.*
*… Уны дауыл, йәшендәрҙән*
*аҡлай күрсе, ҡояш!*

## Әжәл-киллер

*Әжәл – киллер: кешеләрҙе*
*Берәм-берәм ағалай.*
*Яңғыҙ ҡалған юлсыларҙы*
*Бүре булып ҡамалай.*

*Ауырыу булып тәнгә инә,*
*Батыра, ала утҡа.*
*Әжәлдәрҙән дарыу юҡ, тип*
*Әйтмәгәндәрҙер юҡҡа.*

*Әжәл-киллер этләшергә*
*Ҡырҡ төрлө юл таба.*
*Ғәжәп хәл бит: күпме кеше*
*Үҙ-үҙенә ҡул ала.*

*Ул киллерҙы кем яллаған?*
*Шуны уйлап баш ватам.*
*иҙәм, мине аңдып йөрөй,*
*Арттан ҡалмай бер тотам.*

*Шул киллерҙы юҡ итерлек*
*Кәрәк кеше ялларға!*
*әйбәтләп өйләшкәнде лә*
*Теләмәй ул аңларға!*

*Әжәл-киллер минут айын,*
*Үтәп ҡанлы эштәрен,*
*Ҡараңғы мөйөш артында*
*Ыржайталыр тештәрен.*

Ғәлим
ХИСАМОВ

# А УРА МАЗДА

## РОМАН*

14

Ғалимдар төйәгендә Заратустра менән Лиәне Факи йылмайып ҡаршыланы:
— уғыш инең эшең түгел ул. Ҡайғырма, бында бергәләп ғаләмде өйрәнербеҙ. Был иңә килешә. Өҫтәүенә, уны ин беләең. Беҙҙең арала ғаләмдә булып ҡайтҡан берҙән-бер кеше лә ин, — тип ебәрҙе.

Йондоҙ анау эше бик ҡыҙыҡ булып сыҡты. Заратустра тәүҙә күк йөҙөндә ҡайы йондоҙҙоң ҡайҙа урынлашҡанын өйрәнә башланы. Төндә әллә ниҙә бер башын сөйөп йондоҙ ҡараған саҡта уларҙы кеше бөтөнләй тиерлек иғтибарламай ҙа икән. Бына — Етегән, тегендә — Тимерҡаҙыҡ, оҙон булып уҙылып урынлашҡан вағыраҡ йондоҙҙар Ҡош юлында ята, анауында Кесе Етегән яна. Бына шул ине Заратустраның белгән йондоҙлоҡтары. Ә улар бик күп, әр бере енең үҙ хәрәкәт юлы, үҙенең ҡалҡыу, байыу ваҡыты, сағыу әм үрән яныу сағы бар икән.

Ғаләмде өйрәнеү ҡорамалдары менән ҡуша Факи күкте күҙләү уңайлы бул ын өсөн ятыр урын да я атҡан икән. Төнө буйы башыңды сайҡайтып баҫып йә ултырып ҡара, иртәгә енә муйыныңды ҡуҙғалта ла алмаҫ ың. Шуға ятып йондоҙ анар урындар эшләнгән. Уларҙың да тәғәйен ере бар. Йондоҙ нуры ҡорамдағы таштың билдәле бер урыны аша кешенең күҙенә төшә. Тик шул рәүештән генә йондоҙҙоң хәрәкәтен билдәләргә кәрәк. Өҫтәүенә, йондоҙҙоң шул юл киҫәген күпме ваҡытта үтеүен үлсәп була икән дә ба а. Быға са Заратустра ла, ул аралашып йәшәгән малбағарҙар ҙа көндөң әм төндөң оҙонлоғон ҡояштың ҡалҡыуы әм байыуы, күктең иң бейек нөктә енә күтәрелеүе йә офоҡтан тышау, теҙген, арҡалыҡ, дилбегә буйы күтәрелеүе менән үлсәй торғайнылар. Ә ғалимдарҙың үҙ үлсәүе бар, имеш.

— Бик ябай ғына беҙҙең үлсәү, — тип йылмая-көлә өйләп күр әтте уны Факи. — Сара ыҙҙың көнөнән сығарҙыҡ инде. Төндә йә болот көндө — Ҡояш күренмәгән саҡта ваҡытты ҡай ылайтып та билдәләй алмағандан башҡа килде был сара. Ҙур ғына ауыт — йылҡының баш тире енән я алған күнәк алдыҡ, шуға ыу тултырҙыҡ та иң аҫтын нәҙек кенә энә менән тиштек. ыуҙың ағып бөтөү берәмеген сәғәт тинек. Ҡояш ҡалҡҡандан алып көн, төн уҙып, яңынан ҡалҡҡан-

*Аҙағы. Башы 4-се анда.*

ғаса 24 ауыт ыу аҡты — 24 сәғәт үтте булды. Ошо араны беҙ беренсе үлсәм итеп алдыҡ әм уның исемен тәү үлсәм, йәғни тәүлек тинек. Аңлашылыуынса, бер тәүлек 24 сәғәттән тора.

Әммә 1 сәғәт ыу ағып бөткәнсе әллә күпме эш эшләргә була, Ҡояш тирәләй Ер байтаҡ ара үтеп өлгөрә. Сәғәтте бәләкәйерәк арауыҡҡа бүлгәндә уңайлы булыр, тинек тә бөйәткә бүлергә самаланыҡ.

— Бөйәт — мал эсәгенән я алған бәләкәй ауытмы? — Заратустра асыҡлап китеү кәрәк тип тапты.

— Эйе, — Факи баш ҡаҡты. — Ҡай ы берәүҙәр мөйәт тип тә әйтә.

— Шунан?

— Шунан ни сәғәттәге ыуҙы мөйәт менән оҫтоҡ: 60 мөйәт сыҡты. Шуға күрә бер сәғәттә 60 мөйәт анайбыҙ.

— Ә ваҡ уаҡыт тигәнегеҙ ни белдерә?

— Был ни уаҡлау-бүлгеләү була инде. Тәүлекте – 24 сәғәткә, 1 сәғәтте 60 мөйәткә уаҡланыҡ, бүтәнсә әйт әң, ыуаттыҡ. Уаҡ иттек. Шулайтып уаҡыт килеп сыҡты. Уаҡыт артынан уаҡыт үтә, сәғәт була, сәғәт артынан сәғәт уҙа – тәүлек була. Әммә бөтә е лә: тәүлек тә, сәғәт тә уаҡытҡа бүленә.

— Ҡыҙыҡ, бик хикмәтле ин өйләгәндәр, Факи! — Заратустра эске кисерешен тышҡа сығармай түҙмәне.

— Әле ин беҙ өйрәнгәндең бик аҙын ғына ишеттең, бары ын да бел әң, әллә ни рәүешле маҡтар ың, — тип көлдө ғалим.

Заратустраға ғалимдар менән бергә йәшәү әм эшләү оҡшаны. Улар ине аңлай, ин уларҙы төшөнә ең. Йондоҙҙар ғына түгел, ер күренештәре тура ында ла ҡай саҡ ҡыҙып-ҡыҙып бәхәсләшеп, ауыр үҙ әйтешеүгә тиклем барып еткән саҡтары була. Әммә был бик ирәк хәл. Унда ла ҡыҙыу баштарҙы Факи ыуытып ала. Сара-ын күп белә ул.

... Бер көндө ғалимдар менән Заратустра ара ында бәхәс ҡупты. Тегеләр тәүҙә инәлеп тигәндәй Заратустранан утты аҡлау әм дөрләтеү тура ында өйләтте. Быларҙың тауышында я алмалыҡ иҙеп, Заратустра тәүҙә өйләмәҫкә иткәйне, шунан бик ныҡышҡас:

— Үҙегеҙ белә егеҙ: ут – йылытыусы ут та, яҡтылыҡ биреүсе ут та, иркәләүсе ут та А ура Мазда ҡөҙрәтендә, — тип башланы. Ләкин уны бүлдерҙеләр:

— Ә яндырыусы, көйҙөрөүсе ут? Янғын да уттан үсешә бит.

— Эйе, яман ут та бар. Әммә быны ы Мазданың уты түгел, Ахримандыҡы. Уның шайтандары А ураның пәйғәмбәре ут йәне Аша Ва ишта ынына инеп, кешеләрҙән ут ҡабыҙҙыра әм уны янғынға әүерелдерә. Был кешеләр А ура Маздаға ышанма ын, утты ҡәҙер-хөрмәтләмә ен өсөн эшләй. Ут булма а, мәңге ҡараңғылыҡ тыуасаҡ бит. Ҡараңғылыҡ инде – А ура Майнью донъя ы. Ул кешеләрҙе уҡырайтып, ҡолаҡтарына ҡурғаш ҡойоп, йәндәрен урып ала. Ә ни тере, ни үле түгел тәндәре дөм-ҡараңғыла өйәктәрен шалтыратып, ни эшләгәндәрен дә белмәй, этешә-төртөшә йөрөп ята. Мәңге-мәңге шулай булыр ине, Мазда быға ирек бирмәй. Ахриман көсәйә башлау менән, Аша Ва ишта килеп етә лә йәнгә рәхәт, тәнгә сихәт ут бөркә. Донъя яҡтыра, ауа йылына.

— ине лә пәйғәмбәр тиҙәр бит, ин дә ағас ыҙ, ҡуҙ ыҙ ут сығара ала ыңмы?

— Мин бит Аша Ва ишта түгел.

— Тимәк, ин өйләгәндәр ҙә буш үҙ, ҡулыңдан бер ни ҙә килмәй.

Шул саҡ Факи Тайрандың асыулы тауышы яңғыраны:

— Телеңде тый. Ҡунаҡты рәнйетергә ни хаҡың бар инең?!

— Тыйман, — тине Заратустра йомшаҡ ҡына. Ә үҙенең күҙҙәренән зә әр оҫҡондар ибелде. Күренеп тора: Заратустра яр ыуын саҡ баҫа. — Тыйма. Кешенең

күңелендә шик бар икән, уны тышҡа сығар ын, эстә аҡлама ын. Эстәге шик, яман шешкә әүерелеп, кешене золом юлына баҫтырырға мөмкин. Ә тышҡа сыҡкан шеште А ура Мазданың уты бына ошолай яндыра... — Заратустра йәйенке ике ҡулын яйлап бер-бере енә яҡынайтты ла устарын үҙ-ара уға яҙып, уға яҙып алды, әм ҡуш ус эсендә күгелйем генә ут барлыҡҡа килде. Заратустра утты ҡоро үлән абағына ҡабыҙҙы әм, шунда ятҡан ағас киҫәген алып, уны көйрәтте лә әлеге кешенең ҡулына тотторҙо.

— Бына ул А ура Мазданың изге уты, күңелеңдәге шик-шөб әләреңде яндыр - ын, Ахриман ҡотҡо она урын ҡалдырма ын. Мазданың дуҫы, тоғро йән бул, кеше, — тине Заратустра әм урынынан тороп ауыл яғына атланы.

Нисек ҡабынды ут? Ниндәй ҡөҙрәт менән уның ҡулынан ялҡын сыҡты — быны Заратустра үҙе лә аңлай алманы. Үҙенең хаҡ икәнлеген кеше иҫбатларға бикбик телә ә, йән көсө мөғжизәләр я ай, тиҙәр. Күрә ең, шул көс ярҙамға килде. Утты ағасҡа тоҡандырып, тегеңә тотторюуы булды — үҙенең хәлдән тайыуын тойҙо Заратустра. Аяҡтарын көскә өйрәп өйгә барып етте лә ишекте асты әм иҙәнгә ҡоланы. Ҡото осҡан Лиә өҫтөнә эйелде.

— Ни булды? Ни булды? — тип хәленә инергә тырышты, әммә Заратустра ис үҙ өндәшмәне. Әллә ниҙә бер генә уҡкан ҡан тамырҙарына ҡарап, иренең тере икәнлеген аңланы Лиә әм өйрәкләп йоҡо урынына күсереп алды.

Ярты көндән ашыу иҫ еҙ кеүек йоҡланы Заратустра. Шунан ғына күҙен асты, әммә тиҙ генә торманы. Ҡарашы менән тирә-яҡты байҡап ятты ла, ҡапыл тороп, Факиҙы эҙләп китте. Факи ҙа Заратустра ымаҡ йоҡоға талғайны. Ул да әле генә уянып, йыуынып, төнгөлөккә ҡорам янына китер өсөн тамаҡ туйҙырып ултыра ине. Әйҙүкләп ҡаршыланы Заратустраны. Быны ы инәлтмәне, ризыҡлы ашъяулыҡ янына терәлде.

— Факи, — тип үҙ башланы ул. — Беҙҙекеләр яуҙа еңелгән.

— Ҡайҙан белә ең? Сапҡын килдеме әллә?

— Юҡ. Алама хәбәр менән сапҡын йөрөмәҫ.

— Эйе. Ундайҙарҙың башын киҫәләр... Ҡайҙан уң?

— А ура Мазда үҙе белгертте.

— Нисек?

— Йоҡлаған сағымда. Тәүҙә офоҡ аръяғынан ул үҙе беҙҙең янға осоп сыҡты, әммә туҡтаны, әм күк йөҙөн болот ҡапланы. Шунда аҡ Шә реуар тәүҙә ҡылысын болғап уң яҡҡа сапты. Әммә, күп тә үтмәне, ҡылысын ташланы ла атын яйлатып ҡына ирегә ҡайырҙы.

— Ни аңлатты улар иңә?

— А ура тәүҙә беҙҙекеләргә еңеү бирергә иткәйне, әммә кире уйланы. Үҙ ағай-эне енә ҡаршы уғышҡа сыҡҡан ханды яҡламаҫҡа булды, күрә ең. Бөйөк Сәмреғош изге ҡанаты аҫтына алманы, бөттө инде. Күптәнге сардар Шә реуарҙың ҡылысын ташлап китеүе шуны асыҡ күр әтте.

Факи оҙаҡ ултырҙы өндәшмәйенсә. Шунан ғына:

— Заратустра, мин инән үтенеп орайым, — тип ялбарҙы. — Был турала бер кемгә лә өйләмәй тор. Алама хәбәр тиҙ йөрөй. Хәҙер тегендә илтеп еткерерҙәр. — Факи Арҡаил урынлашҡан тарафҡа ымланы. — Былай ҙа ине саҡ түҙеп торалар. Еңелеү ысын бул а, үҙенде ғәйепләрҙәр ҙә тураҡлар ҙа ташларҙар. Шуға күрә төшөң төш кенә булып ҡал ын, ҡатыныңа ла әйтмә. Утыҙ ике теш ара ынан сыҡкан утыҙ ике ҡолаҡҡа етә...

Кәңәште тотто Заратустра, телен тыйҙы. Әммә бының кәрәге лә ҡалмағайны инде. Аҙна үттеме-юҡмы, яуға күтәрелгән кешеләрҙең ҡай ы берҙәре ҡайтты. Ғалимдар ауылынан да ике кеше киткәйне. Шуларҙың бере е төндә ҡайтып

төшкән. Ни яңылыҡтар килтергәнен Факи ҙа, Заратустра ла бик белгеләре килде, әммә тыйылдылар. Өйөнә лә барманылар, саҡыртманылар ҙа тегене. Кисәге яугир ғалимдар ауылында ҡорамды төҙөүҙә эшләгәйне. Йәғни ул Факиҙың ҡул аҫтындағы кеше ине. Шуға Факи уны саҡыртып ал а ла мөмкин, тик ғалим быны эшләмәне. Кеше үлемесле уғыштан ҡайтҡан, өйөндә тор он аҙ ғына, тип уйланы.

Унығ түҙем еҙлеген иҙгән кеүек, төш ауғасыраҡ яугир үҙе килде. Факи уның сәләмен алды, киләсәге яҡшы булыуын теләне. Яугир төп үҙенә кҫкәнсе, Заратустраны саҡырҙы. Теге ингәс:

— Әйҙә, ултыр, бына йәнә бер уғышсы ҡайтҡан, — тине.

— Ә икенсе е кем? — Яугир ауылдан икәү генә китеүҙәрен, ә ҡайтыусы үҙе генә икәнде белә ине.

— Бына бит, — Факи Заратустраға ымланы.

— Миңә төп алышта ҡатнашырға тура килмәне лә инде, — Заратустра ғәйепле төҫ менән башын эйҙе.

— Яу юлын йөрөнөң бит, шуға әйтәм. инең юлың нисек булды уң? — Факи өсөнсө әңгәмәсегә боролдо.

— Минең юл ауыр ҙа, хәүефле лә булды – бүтән яугирҙарҙыҡы ымаҡ.

— Шунан.

— Шунан ни, беҙҙе аттылар! — Яугир шаҡ ҡатырғыс хәбәр алды.

— аттылар? Кемдәр?

— Ҡорттар.

— Булмаҫ.

— Валла и.

— Йә, тәртипләп өйлә.

— Тәртипләп тип ни, былай ҙа рәттән теҙергә ултырам... аҡмар йылға ы Яйыҡҡа ҡойған ерҙән өҫтәрәк беҙ ҙур ыуҙы кистек. Яйыҡ ярына алдан барған яугирҙар ал, кәшмәк я ап ҡуйғайны. Шулар менән аръяҡҡа сыҡтыҡ. Башҡорттар аты менән ҡуша йөҙөп йөрөнө. Әлдә ыу йылы ине. Теге ярҙа алдарҙы бәйләп ҡуйҙыҡ. Кәрәге тейер әле тип. Аҙаҡтан кәрәкте.

— Шунан?

— Яйыҡты кистек, сиреү-сиреү булып урынлаштыҡ, инде дошманды көтәбеҙ. Тик яткансы уғыш уйындарын киренән уйнайбыҙ. Бер көн кис йоҡларға яттыҡ, ҡаршы яҡта ис кем юҡ. Иртән тороп ҡара аҡ, күҙебеҙгә ышанмай торҙоҡ: ялан тулы халыҡ. Тәүҙә йылға яҡлап аҙ ғына иneләр ымаҡ, яҡынлаша башлағас, быларҙың бихисап икәнен күрҙек. Уғаса беҙ ҙә сафтарға баҫып өлгөрҙөк. Яу майҙанына алдан килеп ятыу бушҡа булмағайны. әр кем үҙ урынын белә.

уғыш тәртибе буйынса, алыш өсөн уртаға ике батыр сыҡты. Теге яҡтан мө абәт кәүҙәле берәү баҫты. Беҙҙеке лә шунан ҡайтыш түгел. Элекке яуҙарҙа батыр булып гел башҡорт сыға торғайны, тиҙәр. Ә был юлы ҡортто ебәрҙеләр. Алпан-толпан баҫып барҙы был. Яланғас тәне ялтырап тора, күрә ең, зәйтүн майы өрткән. Бер ҡулында ҡылыс, икенсе ендә ҡалҡан, билбауына хәнйәр тағылған.

Инде былар бер-бере енә ташлана тип көтөп торабыҙ. Ике батыр ҙа ҡылысҡа ҡылыс бәрә, ҡалҡан менән ҡаҡлығып, хәнйәр елтәй е урынға, ҡоралға тотонмайынса уҡ, ҡосаҡлашты ла ҡуйҙылар. Быны көтмәгән ике саф та аптырауҙан шыпшым булып ҡалды, ҡатта безелдәп себен осҡаны ла ишетелде.

Урталағы икәү бере е икенсе ен шул ҡәҙәр ағынышҡан дуҫтар ымаҡ сикәләрен сикәгә лә терәште, әм беҙҙең яҡтан сыҡҡан батыр ғәскәргә боролоп ҡысҡырҙы:

— Ҡорттар! Ташлағыҙ уғышты! Ҡаршыбыҙҙа туғандарыбыҙ тора! Бынан утыҙ йыл әүәл, Туран ханы ыйҙырмай йөҙәткәс, яҡшы тормош эҙләп Яйыҡ түбәненә киткәйне улар. Шулар бит ҡаршығыҙҙа. Улар беҙҙе үҙҙәренә алырға килгән. у-

ғышмайбыҙ. Ҡайтығыҙ! еҙгә берәү ҙә теймәҫ!

Быларҙан йыраҡ түгел яу арба ында баҫып торған Албашҡорт өрәнләп ебәрҙе:

— Ялған! Туған түгел, дошман улар! Беҙҙең еребеҙҙе баҫып алырға килгәндәр! Атығыҙ хыянатсыны!

Албашҡорт үҙе янындағы ат ҡыуыусынан дилбегә менән ҡамсыны ыпыра тартып алды ла аттарға ыҙырҙы. Тегеләр үрәпсеп торҙо ла алға атылды, өс ат бер юлы урталағы ике батыр өҫтөнә йүнәлде. Быны көтмәгән беҙҙең яҡ ҡорт баҙап ҡалды. Әммә теге яҡтан сыҡҡан батыр, ҡылысын күтәреп, яу арба ына ҡаршы уҡталды. уғышҡа өйрәтелгән аттар өркмәне, кеше өҫтөнә туп-тура сабыуын белде. Батыр ҡылысын ике ҡуллап тотто ла ажғырып килгән атҡа елтәне. уғыу шул тиклем көслө булды – ситке аттың башы ярылып китте. Әммә кеше үҙе тайпылып өлгөрмәне, ат аяғы, шунан тәгәрмәс аҫтында ҡалды. Сабылған ат гөрҫләп ауҙы әм арбаны үҙ яғына тартып алды. Ҡалған ике ат та тәгәрәп китте, арба ла сәсрәне. Албашҡорт менән дилбегәсе арба аҫтында ҡалды.

Был хәл шул тиклем тиҙ, күҙ асып йомғандай ғына арала булды. Ике ғәскәр яу яланындағы был күренештән аптыраны ла ҡалды. Иң алдан Туран батыры менән Албашҡорттоҡо кеүек үк арбала торған ҡаршы яҡ сардары иҫенә килде. Былар арба аҫтында ҡалғандарға ярҙамға ташланды. Иң алдан Албашҡортто ҡотҡарып алдылар. Уғаса булмай, ике яҡтан да яугирҙар уртаға эркелеште. Албашҡорт иҫеҙ, әммә иҫән ине. Бер нисә башҡорт уны септәгә алып ситкә сығара алды. Ә яугирҙар, уғыша ы урынға, ҡосаҡлашып күрешә, бер-бере ен сәләмләй башланы.

уғышҡа тип килгән ике яҡ ханы ла, әле күргәндәренән аптырап шаңҡығандай, бер төрлө лә хәрәкәт белдермәне. Иң алдан килгән хан иҫен йыйҙы. Үҙ-ара буталып бөткән ғәскәрҙе тынысландыра була, хан дөмбөрөн уғырға тотондолар. Меңәрләгән кеше бер юлы шым булды. Яу арба ы өҫтөнә мөнбәр кеүек нәмә ҡуйылған, шуға менеп баҫты хан. Кәүҙәгә беҙҙең ымаҡ ҡына, әммә йөҙө ҡоңғорторaҡ. аҡал-мыйығын йәтеш кенә итеп ҡайсылағандар, башына аҡтан ҡолаҡсын кейгән. Беҙҙең кейемебеҙҙең күбе е тире бит, ә быларҙыҡы сепрәк. Күрә ең, тире аҙ, туҡыма күптер.

— Ярар-ярар, фәлсәфәләнмә, тиҙерәк өйлә, — тип ашыҡтырҙы яугирҙы Факи.

— Мин ханға яҡын уҡ тора инем, шуға күргәнемде әйтәйем тимен.

— Йә, ни тине хан?

Хандың әйткән үҙен Факи ҙа, Заратустра ла аҙаҡтан тағы ишеттеләр. Бүтән яугирҙар ғына түгел, башҡорттар ауыҙынан да ҡайта-ҡайта тыңланылар. Әлбиттә, төрлө ө төрлөсәрәк өйләне. Бере е ҡыҫҡа ғына итеп, икенсе е үҙенән өҫтәп, оҙонайтып ебәргеләне. Шул саҡта Заратустра кеше тура ында, унын эстәлеге хаҡында йәнә уйланғайны. Кеше тыумыштан тигеҙ яратыл а ла, тора-бара үҙгәрә шул. Үҙенең зи ене, белеме, тәжрибә е, маҡсаты, йәшәү мәғәнә ен аңлауы — әммә е кешенең үҙәген барлыҡҡа килтерә әм улар бер-бере енән ныҡ ҡына айырыла. Хандың үҙен ҡабатлауҙа ла шул уҡ хәл күренә: уны әр кем үҙенә кәрәгенсә ҡыҫҡа йә оҙон итеп теҙә, ҡатта мәғәнә ен дә бороп ебәрә.

Төрлө ауыҙҙан ишеткән әммә хәбәрҙе лә ҡабатлап тормаҫтан, бында Факи ауылы яугирының әйткәнен генә килтерәбеҙ. Ул, ғалимдар ара ында йәшәп, улар менән аралашып, лөғәт рәтен дә белеп алғанғалыр, моғайын, хандың үҙен дә боҙмайынса, тулы килеш еткерҙе, буғай, әңгәмәселәренә.

— Хандан алыҫ булмағас, яҡшы ишеттем үҙҙәрен, — тип дауам итте.

”Дәү Хоҙайыбыҙ А ура Мазда әр кешене лә ирекле итеп, тиң итеп, үҙенә яраҡлы итеп бар я аған. Тик шуға ғына беҙ А ура Мазда менән өйләшә, унан кәңәш о-рай алабыҙ. А ура Мазда беҙҙең әр беребеҙҙе белә әм әр кешене хөрмәт итә. Әгәр беҙ, кешеләр, Мазда ымаҡ киң күңеллелеккә ынтыл аҡ, беребеҙ ҙә ҡалған кеше-

нең, ә бүтәндәр бер кешенең иркен ҡыҫа, быуа алмаҫ.

Бынан утыҙ йылға яҡын элек беҙ бер ғаилә булып, бер дәүләттә йәшәнек. Тормошобоҙ төрлөсә ине. Күңелле сағыбыҙ ҙа, ҡайғылы мәлебеҙ ҙә булды. Әммә беҙ йорт ҡорҙоҡ, мәғдән сығарҙыҡ, мал баҡтыҡ, бала үҫтерҙек, илебеҙҙе аҡланыҡ. Беҙ бер кемдең дә еренә, байлығына ым ынманыҡ, бүтәндәрҙе талау өсөн яу сапманыҡ. Кире енсә, беҙгә башҡалар өжүм итте. Уларҙы беҙ кире ҡаҡлыҡтырҙыҡ. Ҡалаларыбыҙ, ауылдарыбыҙ күбәйҙе, халҡыбыҙ ишәйҙе. Кешенең артыуы аҙыҡ-түлек, кейем- алым ҡытлығына килтерҙе. Беҙҙең дәүләттә лә юҡтан ғына ыҙғыш сыға башланы. Хәҙер ул саҡта кем хаҡлы, кем нахаҡ булғанын тикшермәйбеҙ. Әммә ошо хәл беҙҙе, яңы ерҙәр эҙләргә, тораҡты киңәйтергә, тигән ҡарарға этәрҙе, әм беҙ Урал донъя ының Иран өлөшө Яйыҡ буйлап түбәнләнек әм яңынан-яңы, матурҙан-матур ерҙәр таба барҙыҡ. Уралдың тәбиғәте ҡырыҫ, әммә ул — беҙҙең тыуған ер. Хәҙер беҙ тыуған ерҙән бик алыҫтабыҙ. Уралды ағынып йырлайбыҙ, йыш иҫкә алабыҙ. Унын иҫтәлеге итеп Ур ҡала ын нигеҙләнек. Унда йылы, унда ҡыш булмай, ҡар төшмәй, ыу туңмай. Емеш-еләк тә күп. Беҙ — эшләп өйрәнгән халыҡ, унда ла тик тормайбыҙ, Уралда төҙөгән ҡалаларыбыҙ тәжрибә енән сығып, Урҙы алабыҙ. Унын урамдары уҡ кеүек тура, майҙандары киң, ҡап уртала – хан арайы.

Әммә ул яҡта беҙ яңғыҙ түгел. Бик көслө әм боронғо дәүләттәр Вавилон, Рим, Мысыр бар. Улар әле беҙгә яҫҡынмай, сөнки беҙҙең талап алырҙай байлығыбыҙ юҡ кимәлендә. Ләкин беҙ эшләйбеҙ, оҙаҡламай бүтәндәрҙең күҙе ҡыҙырлыҡ нәмәләребеҙ барлыҡҡа киләсәк. Шул саҡта беҙгә уғыш асасаҡтарын белеп торабыҙ. Ә беҙҙең көсөбөҙ аҙ, халҡыбыҙ күп түгел.

Шуға ҡайттыҡ илгә. еҙ йәшәгән ергә, ҡала-ауылдарға дәғүә итергә, бүлешергә йә таларға түгел, туғандарыбыҙҙан ярҙам орарға ҡайттыҡ. Беҙҙең килеүҙе, моғайын, еҙгә тап шулай еткергәндәрҙер. Яман ниәт менән килә Иран ханы, тигән егеҙҙер. Ана ниндәй көслө ғәскәр менән сыҡтығыҙ бит ҡаршыға! оҡланып бөтә алмайым мин еҙгә. Элекке Туран боронғоса берҙәм, көслө әм ғәйрәтле. Башында унын – олуғ хан, илендә — ҡаған, күңелендә — раған менән рабаға, беләгендә — башҡорт!" — Хан маҡтау үҙҙәрен дә йәлләмәне.

— Туҡта-туҡта, ин ханға ба а бирмә, — тип тыйҙы яугирҙы Факи. — Ни ишеткән ең, шуны ғына өйлә.

— Йә, ярар, — яугир ризалашты.

"Беҙ еҙҙән туғандарығыҙға кеше биреүегеҙҙе орап килдек. Ә ғәскәр теҙеүебеҙҙең мәғәнә е — кире ҡайтҡан саҡта сит-яттарҙың өжүменән аҡланыу өсөн.

Туғаным минең, Туран ханы Бәксәсән, инән үтенеп орайым: ырыуҙарыңды бүлеп бир бер аҙ. Ҡорттарҙы бир әң, мин күп рәхмәттәр яуҙырыр инем. Элек күсенеүселәр ара ында ла ҡорттар күпселек булды, улар әле лә туғандарын саҡыра килде. Мәғдәнселәр, ташсылар, малбағарҙар ҙа кәрәк беҙгә. Тик башҡорттарҙы орамайым. Башҡорттарҙың Туран иленең йөҙөк ҡашы икәнен беләм. Ҡашы ҡуп а, йөҙөк тә эшкинмәй. Шуға башҡорт тура ында ауыҙымды асмайым."

– Шунан хан арба ынан төштө, беҙҙең хандың ҡаршы ына атлап барҙы ла тегенең арба ы ҡашында теҙләнеп башын эйҙе.

Хан ынлы хандың кеселекле баш эйеүен күргәс, минең күңел йомшарып китте, күҙгә йәш тығылды. Ҡара ам, минең тирәләге бүтән кешеләр ҙә мыш-мыш танауын тарта.

— Шунан ни эшләне хандар?

— Беҙҙеке арбанан төштө әм ҡапыл ҡынынан ҡылысын урып алды. Хәҙер был алыҫтан килгән ханды дөмөктөрә икән, тип ҡотом осто. Әммә "эйелгән башты ҡылыс сапмаҫ" тигәнде онотҡанмын. Бәксәсән хан ҡылысын ике ҡуллап тотто ла

ергә ҡаҙаны. Быны күргән ике яу шатлығынан ҡысҡырышырға тотондо. Үҙегеҙ белә егеҙ, ҡылысты ергә ҡаҙау — уғыш бөттө тигәнде аңлата. Беҙҙең хан Иран ханын ҡулынан тотоп аяғына баҫтырҙы әм ҡосаҡлап алды. Кешеләрҙең шундағы ҡыуаныуын, бер-бере ен ҡосаҡлап илауын күр әгеҙ еҙ! Күпме йылдар буйы күрешмәгән туғандар осрашты бит.

Яугирҙы тыңлаған ирҙәрҙең дә күҙҙәре йәшкәҙәне. Шуға ҡарап та яу яланындағы шатлыҡты аңларға була ине.

— Ни тине уң Бәксәсән хан? — Был юлы Заратустра ашыҡтырҙы.

— Ике хан, ҡулдарын бер-бере енең яурынына алған көйө, яу арба ына күтәрелде. Беҙҙең хан буш ҡулын елккәйне, хан дөмбөрө ер елкетеп дөбөрләргә тотондо. Майҙан тынды.

— Туғаным минең, Иран ханы Вишпасты, Уралҡайыңа рәхим ит. Йәнең теләгән хәтлек ҡунағым булыр ың. — Шунан тирә-яғын байҡаны ла Туран ханы: — ин дөрөҫ әйттең, – тине, — кеше күңеле, йәғни йәне тыумыштан азат, әм ул тәне менән ҡуша ғүмере буйы ирекк ә ынтыла. Бына ин, Вишпасты хан, кеше о-раның, ә уға саҡлы, әр кемде А ура Мазда ирекле итеп яратҡан, тинең. Йәғни кемдер инең менән йыраҡ Иранға китергә телә ә, минең тыйыуға ҡарамаҫтан, барыбер китәсәк, тигәнде әйттең. үҙең дөрөҫ, кешене сынйырлап ҡына ултыртып ҡуйма аң, башҡаса ирек еҙләүе ҡыйын. Шуға күрә мин, хан бул ам да, кешеләрҙең теләгенә ҡаршы төшә алмайым. Дөрөҫөрәге, мин берәүҙе лә тыймаясаҡмын. әр кем үҙе ғаилә ендә, ауылында, ҡала ында, ырыу ҡоронда ҡарар сығар ын әм шул ҡарар буйынса эш ит ен.

Ошолай тине Туран ханы, әм ҡара ғәскәр таратылды.

Заратустра менән Факиға өйләгән яугир оҙаҡ телмәрҙән арып китте, шикелле, күҙҙәрен йомоп, шымып ҡалды. Әммә уға онотолоп ултырырға ирек бирмәнеләр.

— Иран ғәскәре ни эшләне? — ти алды Факи.

— Ирандыҡымы? Ә-ә! Әйтергә лә онотоп торам, Туран ханы Иран ғәскәрен илгә саҡырып: “Туғандарығыҙҙы күрегеҙ. Улар булма а, еҙгә тән биргән ыу менән тауҙарҙы күрегеҙ, ауа ын улағыҙ,” — тигәйне, Иран ханы ни эшләптер ҡырҡа ҡаршы сыҡты. “Юҡ. Алыҫтан килгән ғәскәр ошонда ҡала. Туран ерҙәренә инмәйенсә Яйыҡ яғалап ошо урында торасаҡ, — тине. — Туран туғандарыбыҙға ауырлыҡ килтереүҙән тыйыласаҡбыҙ беҙ. Ырыуҙаштарыбыҙҙың холҡон беләбеҙ. Ҡунаҡсылдар улар. Ҡунағы хаҡына уңғы ебенә тиклем бирәсәк. Әммә беҙ ҙә итәғәтле булырға тейеш. Ошо тиклем ғәскәр илгә кереп тул а, уны ашатыр өсөн генә лә ана күпме мал кәрәк,” — тип баш тартты Иран ханы. Әммә беҙҙең Туран ханы йылмайып өҫтәне: “Мәйелең, Вишпасты хан, ғәскәреңде бында ҡалдырып, үҙең, ханшаң менән бергәләп, минең ҡунағым булыуҙан тыйылмаҫ ың, мо-ғайын.” “Ризамын, оло рәхмәт менән ризамын,” — тине Иран ханы. Аҙаҡтан ишеттек: беҙҙең хан алыҫтан килгән ғәскәр уға рәхмәтле бул ын, уның аулығын теләп Шә реуарға ғибәҙәт ҡыл ын өсөн ике көтөү ыйыр малы, өс көтөү кәзә- арыҡ ебәргән. Был тиклем ниғмәт Иран ғәскәренә бик килешкәндер.

— Моғайын, — Факи яугирҙы ҡеүәтләне. Заратустра, артабан ни булғанын тиҙерәк белге е килеп:

— Шунан-шунан, — тип ашыҡтырҙы.

— Шунан ни, беҙ илгә таралыштыҡ, ирандар ҡалды. Ҡайтышып бөтөүөбеҙ яңы ғына. Йәйәүләп күпме ер килдек! Ирәмәлгә тиклем. Ә Ирәндек ыртына, уның аръяғына ҡайтыусыларға ни ғорлом атлай ы бар әле. Туран менән Иран хандары яҡшы юртаҡтарҙа Арҡаилгә елдерҙе. Туҙан туҙҙырып эргәбеҙҙән уҙҙылар. Баҡырҙан ҡойолған тәгәрмәсле арбалар ел ыҙғыртып китте.

— Ярар, — тип туҡтатты яугирҙы Факи. — Хандар тура ында  үҙ йөрөтмә. Улар ҙа  инең кеүек йәйәү атламаҫ бит инде.

— Юҡ-юҡ, Хоҙайым  аҡла ын. Мин ханға  үҙ тейҙерерҙән түгел. Хандың арба - ына  оҡланғандан әйтәм.  игеҙ аҡбуҙ егелгән ап-аҡ бер арба, унын артынан  игеҙ ҡара- оро атлы ҡара арба елеп бар ын әле. Уларҙың алдынан  айт- айтлап шундай уҡ күк аттарҙа үҙебеҙҙең башҡорттар, артынан ҡара-көрән аттарҙа Иран башҡорттары килә.  оҡланып ҡарап торҙоҡ. Шуны әйтәм дә мин, — тип аҡланды яугир.

— Шулай тиген.

үҙ тамамланғанын аңғартып, Факи урынынан ҡуҙғалды. Заратустра менән яугир ҙа торҙо.

— Мин китәйем инде, — тине яугир.

— Бар, рәхмәт хәбәрең өсөн. Тик беҙгә  өйләгән кеүек итеп бер кемгә лә  үҙ еткермә ҡабат. Ҡайтарҙылар, ҡайттыҡ, тиең дә ҡуй. Телең ҡыҫҡа бул а, ғүмерең оҙон булыр.

— Тыңлайым, ғалим. — Яугир кеселекле баш эйеп сығып китте. Факи менән Заратустра икәү ҡалдылар. Факи байтаҡ ҡына тәҙрәгә ҡарап торҙо. Шунан Заратустраға боролдо.

— Ни эшләп Вишпасты хан ғәскәрен боронғо илгә ебәрергә теләмәне икән? Шул турала уйлайым мин, — тип серен систе.

— Хан ҡайҙа ла хан булып ҡала, — Заратустра ла күңелен асты, — хатта туғаны менән күрешкәндә лә ул уйлағанын әйтеп бөтөрмәй. Йыш ҡына кире ен  өйләй. Беҙҙең Туран ханы Иран ғәскәрен ҡунаҡҡа саҡырғанда яугирҙар боронғо нәҫелнәсептәренә таралдыни ә, уларҙы кире йыйып алыуҙың  бик ауыр, хатта мөмкин булмаҫын белә тороп әйткән бит. Татлы ризыҡ, зәм-зәм  ыуы, ҡымыҙ, әсе бал тәғәмләгән яугир, ғәҙәттә, ғәскәрилеген онота. Тамағы туҡ, күңеле күтәренке булғас, күҙе ҡыҙға ҡыҙыға. Уны ы ла табыла торған. Шунан яугирҙы кире сафҡа күтәреп ҡара әле! Башҡорттарҙы йыйып алыуы ҡыйын булмаҫ, ә ҡорттарҙы? Быны ы инде – бәлә. Ә ҡараларға кире ҡорал тоттороу — ғәҙәттән тыш ауыр. Туран ханы шуны белә тороп саҡырманы микән ғәскәрҙе ҡунаҡҡа? Ни ти əң дә, ике хан бит. Бере е икенсе енең үҙенән өҫтөн булыуын теләйме ни? Ирандар Турандан сиреү алдыни ә, Вишпасты хандың көсө ныҡ артасағын  әм уның йоғонто о сик - еҙ күбәйәсәген күрмәйме ни Туран ханы? Күрә. Шуға уйында — бер, телендә — икенселер, тимен.

— Ә Вишпасты хан бының уйына  төшөнгәндер, ти еңме?

— Шулай килеп сыға инде, Туран ханы Вишпасты менән ризалашмағас.

— Эйе. — Факи Заратустра менән килеште. — Ә хандарҙың бер-бере енә ҡунаҡҡа йөрөшөүе – борондан килгән йола. Вишпасты Туран ханына туғаным тиеп ҡунаҡҡа бара, ә үҙе  аҡҡа яугирҙарын ала. Ҡара-көрән аттарҙа арттан  ыбайлы башҡорттар сапты, ти ҙә ә. Улары — ирандар.

— Шулай. Артабан ни булырын көтәйек.

— Эшебеҙҙе эшләйек. Яу сабыу, сәйәсәт беҙҙең эш түгел. Беҙҙең эш зәмдә түгел, асманда.

Әммә артабанғы ваҡиғалар уларҙы кире ергә ҡайтарҙы.

## 15

Бер нисә көн үтеүгә, атын аҡмайылға төшөрөп, Факи ауылына хандан башҡорт килде.

– Заратустра тигән кеше бындамы? – тип  ораны ул ғалимдан.

– Эйе.

– Унының менән ине хан үҙ ҡашына саҡыра. Тиҙ барып етергә бойорҙолар.

– Мөмкин ҡәҙәр шәп атларбыҙ. – Ҡушҡанды үтәргә әҙерлеген аңғартты Факи.

– еҙгә арба килер. Мин “әҙерләнеп торорға” тигәнде еткерергә алдан саптым.

– Ярар, әҙер торорбоҙ.

Тик әҙер булмай сыҡты улар. Хандың ылауы килгәс, өҫтәмә фарман беленде: Заратустра менән Факиға ҡатындарын да алып барырға ҡушылған. Ирҙәр бер-бере енә ораулы ҡараш ташлауҙан уҙа алманы. Ҡатындарын хан ниңә саҡыртҡанын белеүсе, әлбиттә, әлегә юҡ. Лиә менән Факи ҡатыны юлға әҙерләнгәнсе арыу уҡ ваҡыт уҙҙы. Арый ҡатыны йыуынмай, хуш еҫле майҙарын өртмәйсә юлға сыға алмай. Яугир ҡатыны булып походҡа йөрөгәндә нисек етте кейен әң дә була, ә хан ынлы хан ҡаршы ына саҡырылған ир ҡатыны әр яҡлап үҙен тейешле кимәлдә тоторға бурыслы. Был – йола. Йоланан берәү ҙә уҙа алмай. Шуға күрә Заратустра менән Факи ҙа, уларҙы алырға килгән ылау башы ла ҡатындарҙың кейенеп- я анғанын түҙем генә көттө. Ни айәт, Факиҙың ваҡыт үлсәгесендә өс ауыт ыу ағып бөткәс, йәғни өс сәғәт үткәс, ирҙәре лә оҡланып ҡарар сүрәткә ингән ҡатындар арбаға ултырҙы. Шул арала ял итеп өлгөргән аттар дилбегәсенең ыҙғырып ебәреүенән ҡыҙыу ынтылды.

Арҡаил уларҙы тиҙ генә ҡабул итмәне. Юлға ҡуйылған ҡорттар ҡарауылы елеп килгән ылау атының башынан алды. Ҡапыл туҡтаған ыңғайға тәгәрмәс әм ат тояҡтары аҫтынан туҙан болото күтәрелде.

– Ни булды? Ниңә юлды быуа ың? Күреп тора ың, был – хан ылауы! – тип өрәнләне ылау башы.

ағауыл ҡорт ҡала юлына ымланы. Унан бик күп кеше ағыла ине. Төркөм башы – тауға илтеүсе юлда, икенсе осо – ҡала ҡапҡа ында. Дөрөҫөрәге, осо түгел, унан сығыусылар арта бара. Юлаусылар аңланы: кемделер ерләйҙәр. Күрә ең, бик ҙур кеше булған мәрхүм. Хан үҙе түгелме икән әле? Кеше ағымының башында Рабаға үҙе килә. Өҫтөнә, көн эҫе булыуына ҡарамаҫтан, көләпәрә е кейелгән, итәге ергә өйрәлгән оҙон сәкмәндә, ҡулында сынйырға аҫылған ут ауыты. ауыт сайҡалған ыңғайға төтәй. Изге ут – А ураның күмере алынған уға. Рабаға артынан рағандар теҙелгән. Уларҙан уң мәйет алынған табутты күтәреүселәр атлай. Ана, баштарын эйгән ике хан – Туран менән Иран хандары. Яндарында – ҡатындары, балалары. Быларҙан уң башҡорттар бара. Өҫтәрендә – яу кейеме, баштарында – тире бүрек. уғышҡа сыҡҡан былар, тиер инең, ҡулдарында ҡорал юҡ, алда байраҡ елберҙәмәй. Дөмбөр тауышы йәнде үртәй. Йыш-йыш уғылып тора ла тын ҡала ул, шунан бер генә дыңҡ итә лә йәнә тына, бер аҙҙан тағы дөмбөрләп ала.

– Кемде ерләйҙәр? – тип ораны Заратустра ағауыл ҡорттан.

– Албашҡортто.

Заратустра ла, Факи ҙа ни булғанына төшөндө. Иран менән Туран яуы башланырға ғына торғанда Албашҡорт ҡаты йәрәхәтләнде, тигәйне бит теге яугир. Күрә ең, яралары үлемесле булған.

Заратустра арбанан төштө лә, ис бер үҙ өндәшмәҫтән, ҡырҡа баҫып, ерләүселәргә табан атланы әм улар ара ына ҡушылды. Бүтәндәр, унын артынан барырға ҡыймайынса, арбала ултырып ҡалды.

Албашҡортто ерләү оҙаҡ булды, әм әр эше урын-еренә еткереп башҡарылды. Тау башына ҡәбер ҡаҙылғайны. Ул тәрән дүрт мөйөшлө соҡорҙан ғибәрәт. Ҡәбер янында, ҡоро утынды өйәп, ут дөрләтергә әҙерләп ҡуйғандар. Утын өйөмөн ярым ай рәүешендә тирәләп балалар баҫҡан. Ҡаланан килгән халыҡ ағымының башы, тау түбә енә күтәрелгәс, туҡтаны. Ә ҡалған яғы аман тау битенә күтәрелеүен белде. Алдан килеүселәр ҡәбер янына торғас, артабанғылар, көнсығышына ҡаршы атлап, буш ергә туҡтай торҙо. Әйтер ең, таҫма түңәрәк тауға урала бара. Кеше ағымы ил ҡалғас, ҡулына ут тотҡан Рабаға баяғы ағым йүнәлешендә, йәғни көнбай-

ыштан көнсығышҡа табан атлап, утын өйөмөн урап сыкты. Факи Тайран Ерҙең Ҡояш тирәләй шул йүнәлештә йөрөүен өйләгәйне Заратустраға. Күрә ең, ошо хәрәкәтте ҡабатлай ерләүселәр ҙә.

Утын өйөмөн урап сыҡҡас, Рабаға тап көньяҡ тапҡырында туҡтаны ла ергә сүкәйҙе. улаҡай ҡулындағы ҡоро үлән усламын ут ауыты өҫтөнә алды, аҡрын ғына өрөргә тотондо. ауытта саҡ ҡына быҫҡып янған ут ҡоро- арыға үрләне әм сытырлап ялпылданы. Рабағаның яурыны аша ынтылып утты күҙәткән раған уң ҡулын елтәне, унан күҙен алмаған баяғы балалар ҡапыл сыр-р итеп йырлап ебәрҙе, әйтер ең, улар ут тауышын ҡабатлай. Ут аламдан утынға күсте әм оҙон ялҡынланып шатырлап янырға тотондо. Албашҡорт менән хушлашырға килгән бар кеше лә ҡулдарын юғары сөйҙө әм, күктәге ҡояшҡа бағып, балаларҙың йырын күтәреп алды. Йыр дә шәтле гөр өлдәү булып тирә-йүнгә яңғыраны. Шул саҡта болот артынан ҡояш күренде. Ялтлап торған " ары апай" тау битен, ундағы кешеләрҙе нурға ҡойондорҙо.

Йыр тауышы ҡапыл өҙөлдө, әм тирә-яҡ тып-тын булып ҡалды. Ошо мәлдә табутты ҡәбергә төшөрөп, ер иҙәнгә алдылар. Дөрләп янған усаҡ эҫе енән ситкәрәк тайпылған Рабаға:

– Мәрхүмгә теге донъяла тәғәмләнергә ризыҡ ҡуйығыҙ!– тине.

Ап-аҡ кейенгән дүрт ҡыҙ, ҡәбер янына килеп, аҫта торған кешеләргә көршәктәр бирҙе. Улар ултыртылғас, ҡәберҙән баяғы кешеләр икереп сыкты әм Рабағаның сәкмәне итәгенә ҡулын өрттө лә ситкә китеп баҫты. Рабағаның тауышы яңғыраны:

– Бөйөк А ура, беҙҙең туғаныбыҙ Албашҡорттың йәнен ете күк аръяғындағы асманға тотҡарлыҡ ыҙ үткәр. Ерҙә ул тик изгелек ҡылды. Яуызлығы бул а ла, яман уйҙан түгел ине. Ожмах ишеген киң асып инер йән йәшәне Албашҡортта. Үҙенә тиң әм бөйөк ит уны! – тине лә эйелеп бер ус тупраҡ алды әм ҡәбер эсенә ташланы. Рабағанан уң шул йоланы – рағандар, уларҙан уң хандар, башҡорттар, ҡорттар, бүтәндәр ҡабатланы. Баяғы халыҡ теҙмә е яңынан хәрәкәткә килде, тик кире яҡҡа үтелә барҙы. Рабаға менән рағандар ғына тау түбә ендә ҡалды, бүтәндәр, ҡәбергә услам тупраҡ ташлағас, тау итәгенә төшөп теҙелә торҙо. уңғы кеше тупраҡ ырғытҡас, йәнә Рабағаның тауышы яңғыраны.

– Албашҡорт зәмдә менеп йөрөгән юрға ын килтерегеҙ! Асманға ул аҡбуҙына ултырып ос он!

Ат килтерҙеләр. Заратустра таныны уны. Яу юлында осрашҡанда ошо ат Албашҡорт баҫҡан арбаға төпкә егелгәйне. Ҡәбер янында торған аттың ал әм арт аяҡтарын тышанылар ҙа, оҙон арҡан менән бер тышауға бәйләп, икенсе ен кире яҡҡа салып алдылар. Арҡандың осон тарткайнылар, аяғында баҫып тора алмаған ат ҡәбергә ҡоланы. Шунда уҡ уның өҫтөнә күп итеп тупраҡ иштеләр. Ат " ә" тигәнсе ер аҫтында ҡалды. Атты терелəй күмеүҙең мәғәнә е бар: аттың йәненә ҡуша йәбешеп осорға тейеш асманға Албашҡорттоң йәне. Кеше үлгәс тә, йән алыҫҡа китмәй, мәйет өҫтөндә өс көн йөрөгәнде белә инде арыйҙар.

Атты ҡаплаған ер ҡатламы ҡыбырлауҙан тынғас, йәнә өндәште Рабаға:

– Мәңгелекте хасил иткән урау-урау мөгөҙөндә күккә лә, ергә лә юл табыуы йәтеш бул ын өсөн Албашҡортҡа ҡуйҙар алығыҙ!

Тау түбә енә аҡ йөнлө арыҡ тәкәләре килтерҙеләр, аяҡтарын бәйләп, муйындарын салдылар ҙа ҡәбергә алдылар, яндарына көршәктәр менән эсемлек ултырттылар. Шунан бары ы ла ер менән күмелде. Тау түбә ендә ҡара уба барлыҡҡа килде. Ошо эштәр тамамланыу менән, тау өҫтөндә яңғыҙы ҡалған Рабаға ике ҡулын күккә сөйҙө. Унан күҙ яҙлыҡтырмай күҙәтеп торған тау итәгендәге барса кешеләр ҡулдарын күтәрҙе.

– Бөйөк хоҙайыбыҙ А ура Мазда! – тип ҡысҡырып өндәште Рабаға.
– А ура Мазда! – тип ҡабатланы кешеләр.
– А ура Мазда! – тип өрәнләне Рабаға.
– А ура Мазда! – тип өндәште халыҡ.
Ошо рәүешле ете ҡат ҡабатланды.
– Албашҡорт туғаныбыҙҙың йәне ете ҡат күк аръяғына китте. Үҙендең тоғро иптәшең итеп ал уны.
– Ал уны!
 уңғы күмәк мөрәжәғәт тыныу менән, әле генә шым торған кешеләр ҡымжый башланы. Тау түбә е менән кешеләр ара ындағы бушлыҡҡа баяғы балалар, улар янына бер төркөм башҡорт теҙелде. Былар янынараҡ килгән Рабағаның тауышы йәнә иғтибарҙы үҙенә тартты:
– Албашҡорт йәне! Беләбеҙ, ете күк аръяғына аштың. А урабыҙ янында бәхетле булыр ың. ин әле беҙҙе ишетә ең, уны ын да беләбеҙ. Ҡапыл ғына өҙөлөшә алмай ың бит беҙҙән. Ә хәҙер ин яратҡан йырҙарҙы йырлап, бәйгеләрҙә уйнап, үҙеңде рухландырабыҙ, А ураның тап үҙенә етеүеңә беҙҙең шатлығыбыҙҙы белдерәбеҙ.
Балалар йыр башланы, уларға янындағы башҡорттар ҡушылды. Был йырҙы әммә кеше белә. Шуға оҙаҡламай тау битендәге бар кеше лә уны күтәреп алды:

*Аямаған йәнен, түккән ҡанын,*
*ис бирмәгән башҡорт Уралын.*

Йыр тыныу менән, саҡ тыйып торған менгеләренә атланған утыҙлап ыбайлы әлеге түңәрәк тауҙы әйләнеп сабышырға тотондо. Бере е алға сыға, икенсе е ҡала, өсөнсө ө ике ен дә уҙып китә... Тау аҫтындағы бәйгене өҫтәнерәк ҡарау бигерәк йәнле ине. Түңәрәк буйлап елгән аттарҙы туҡтау ыҙ күҙәтеп булма а ла, барыбер бер мәлдә улар әр кешенең күҙ алдынан уҙып китә. Аттар күренә башлау менән, халыҡ өрәнләргә тотона әм тик күҙҙән юғалыу менән генә тына. Бәйгеселәр көнбайыштан көнсығышҡа табан саба. Күрә ең, уларға ошолай уңайлы.
Бәйге, моғайын, – былдағы кешеләрҙең иң яратҡан уйыныhыр. Сабыш аттар түңәрәк тауҙы ун тапҡыр урап сығыу менән, байтаҡ тамашасы иң алдан ыҙыҡҡа еткән атлыға уҡталды. ыбайлының аттан икереүе булды, аяғы ергә тейер-теймәҫ күтәреп тә алдылар, күккә сөйөргә лә тотондолар. Шунан өс раған дүрт аяҡлап ҡаршылашҡан арыҡ тәкә ен өҫтөрәп тиерлек килтереп, еңеүсе ыбайлының алдына баҫтырҙы.
– Мөгөҙөнә бар ғаләм ыйған тәкә иңә, ҡот, бәрәкәт, көтөү-көтөү мал килтерен ул. Тәкәне көтөүгә ҡуш, малға алмаш, ат, әммә уйып ашай күрмә. Ғаләм бик ҙур, тамағыңдан үтмәҫ, ә, кире енсә, үҙеңде йотор.
Бәйге тамамланыу менән, тау түбәненең тигеҙерәк урынында көрәш башланды. Арыраҡ – өңгө өңөлдөрөү, шул тирәлә ҡылыс уйыны ҡыҙҙы. өңгөнө иң алыҫҡа елтәп түңәрәккә тигеҙеү оҫталыҡ анал а, көрәш иң-иң көслөнө еңгән батыр табылғанса барҙы. Ҡылыс уйынын бер-бере енә ҡаршы түгел, ә ергә ҡаҙалған сыбыҡтың осон атта сабып барышлай өҙгәнсе ҡыйыу буйынса ойоштorҙолар.
Был уйындар Албашҡорт йәнен күккә оҙатыу айҡанлы үткәрелгәнгә күрә, йырбейеү аҙ булды, күбе енсә хәрби тормош ма ирлығына барҙы. Ат тотоп эйәрләүҙә лә ярыштылар бөгөн. Заратустраның уны күргәне юҡ ине, шуға ҡыҙыҡ ынып ҡарап торҙо. Быны ы түбәндәгесә үткәрелә. Аттарҙы тышап ебәрәләр ҙә ярышта ҡатнашасаҡ башҡорттарҙың әр ҡай ы ына ниндәй ат тәғәйен икәнлеген әйтәләр. Уҙышҡа ишара я ау менән, ҡулына йүгән тотҡан, эйәр күтәргән төркөм аттарға табан йүгерә. Атты тоторға, тышауын сисергә, өҫтөнә эйәр алырға, менеп атланырға, шунан саф өсөн билдәләнгән ыҙыҡҡа барып баҫырға кәрәк. Әлбиттә, бары ы

ла берҙәй етеҙ башҡара алмай быны. Аттар ярышыусыларға өйрәнмәгән бит. Бере е тоттормай, икенсе е тибешмәк була, өсөнсө ө сығынсылай... Сафҡа барып баҫҡансы арыу уҡ ваҡыт үтте.

Иң ҡыҙыҡ уйын анап, Туран менән Иран хандары уҡ сойорғотоу ярышын ҡараны. Иң алдан уҡсылар алыҫлыҡҡа атыуҙа ярышты. Шунан мәргәнлеккә күстеләр.Тәүҙә ағасҡа бәйләнгән сәпкә аттылар. Уға тейҙерә алыусылар күккә сөйөлгән йомғаҡҡа атты. Улар ара ынан еңеүсе уҡсылар ағас ботағына епкә тағып эленгән балдаҡҡа атып көс ынашты. уңғы шартты үтәй алыусы юҡ аман. Бығаса ярышта ҡатнашмаған берәү килеп сығып, хандан рөхсәт ораны. Тегенең сибек кенә күҙә енә ҡараны ла Туран ханы, Вишпасты ханға боролоп, ауыҙының сите менән генә йылмайҙы. Ана ниндәй башҡорттар мәрәй алманы, ә ин нимәгә эшкинер ең, ти ине ҡарашы. Әммә рөхсәт итте. Теге ҡулындағы янға уҡ алды ла йүнле-башлы тоҫҡамай ҙа атып ебәрҙе. Балдаҡ эленгән тапҡырында ергә төштө. Тамашасылар:

– Балдаҡҡа түгел, епкә тейҙерҙе!

– Епте бәке менән киҫкән кеүек ҡырҡа атты!

Берәү әллә ҡайҙа осҡан уҡты эҙләп килтерҙе.

– Уҡтың башағы айырсалы булған. Шуға епте өҙгән инде! – тип яр алды.

Туран ханы уҡсының яурынынан ҡаҡты.

– инән дә мәргән юҡ. Килтерегеҙ уға тәкәне! – тип әмерләне.

Иран ханы Вишпасты ла ситтә ҡалманы. Уҡсыны ҡосаҡлап алып, сикә ен сикәгә терәне.

– Ындай оҫталыҡты күргәнем ирәк, рәхмәт. Әйҙә минең менән Иранға. Янымда ғына йөрөр өң, – тине.

Теге:

– Мин бит – башҡорт. Ун башым, йөҙ башым, албашҡортом, ханым бар. Улар бойор а ла, үтәмәй ҡырталашыр инем. Мин – ғаиләлә, ғаилә – ырыуҙа, ырыу илдә йәшәй. Илде ташлап кем кит ен?

– Асыҡ үҙең өсөн рәхмәт, – тигән булды Вишпасты хан, ә үҙенең йөҙөнә ҡараңғылыҡ ятты.

Быны шәйләп ҡалған Туран ханы:

– Ни булды, туғаным? – тип ҡыҙыҡ ынды.

Теге асылманы.

– Былай ғына, – тиеү менән сикләнде.

– Ярар, етте. Әйҙә, ҡалаға ҡайтайыҡ. – Хан ҡунағын әйҙәне.

Халыҡ әкренләп таралышты. Заратустра юлдаштары эргә енә ырыҡты. Улар аман арба янында инеләр.

– Ни эшләйбеҙ? – Заратустра ым менән ораны Факиҙан.

– Әйҙәгеҙ, ултырығыҙ, – ти алды ылау башы. – Мин еҙҙе тәғәйен ергә илтеп ҡуйырға тейешмен.

Ҡыштыр-ҡыштыр арба ҡаланың төп ҡапҡа ы янында туҡтаны, арбанан төшөрөп, ылау башы быларҙы артабан йәйәүләтте. Күп барырға ла тура килмәне, ян яҡлап аҡсылар баҫҡан ишек төбөнә еттеләр. Ул арала ишек асылып, йомошсо сыҡты. Ылау башы кемдәрҙе әпкилеүен әйтте лә, былар менән хушлашып, үҙ юлынан атланы. Баяғы йомошсо күп тә тормай кире сыҡты.

– Хандар Албашҡортто ерләгәндән уң сәй эсә. Аҙыраҡ сабыр итегеҙ.

Көттөләр. Арыу уҡ ваҡыт үткәс, баяғы кеше йәнә күренде.

– Тайран, Факи Тайран. Ин.

– Ә беҙ?

– еҙгә фарман юҡ. Көтөгөҙ, йыраҡтан саҡыртҡас, моғайын, ҡабул итерҙәр.

Факи эскә бер үҙе инде. Уны төптәге бер нисә бүлмә аша киң генә торлаҡка әйҙәнеләр. Иҙәнгә йылы кейеҙ түшәлгән, стеналарҙа – келәмдәр, ҙур бер тәҙрәнән яҡты төшә. Бүлмә таныш Факиға. Слюда йыйып, тәҙрә уйымдарына үҙе быяла ҡуйышҡайны. Хан бүлмә е был. Йомшаҡ мендәрҙәргә ике кеше терәлгән. Аҡрын ғына ниҙер өйләшәләр. Факи ҡысҡырып сәләм бирҙе. Тегеләр, сәләмде ала ы урынға, үҙгә төшөп китте.

– Ана, ғалим Факи үҙе килде, – тине бере е. Туран ханылыр, тип уйлап ҡуйҙы Факи.

– Ул әйт ен.

– Нимәне әйтәйем, хан ғәли йәнәптәре?

– Бына Вишпасты хан ҡыҙыҡ ына... Әйткәндәй, ин Вишпасты ханды белмәй - еңдер әле.

– Ишетә беләм.

– Улай а, бынан ары күреп таныр ың. Беҙҙең туғаныбыҙ. Бынан бик йыраҡта Иран дәүләтен төҙөй ул. Беҙгә, боронғо төйәгенә, ярҙам орап килгән.

– Бик хуп. Кеше донъяуи хәлдәрҙә иң алдан туғанына, шунан дуҫына таяна.

– Ә ин ғалимлыҡ даны ныҡ таралған Факи була ыңмы? – Вишпасты, аяғүрә тороп, быың янына ыңғайланы.

– Эйе, мине ғалим тиҙәр. Дөрөҫмөлөр-юҡмылыр – белмәйем. Күк есемдәрен, йондоҙҙарҙы өйрәнәбеҙ беҙ күбе енсә.

– Башҡа төр орауҙарға ла яуап эҙләй егеҙ бит. – Туран ханы үҙгә ҡатнашты.

– Эйе, кәрәк мәлендә бер генә ораuҙы ла урап үтмәйбеҙ.

– Әйт әле, ғалим, – Вишпасты баяғы үҙгә кире ҡайтты. – Йән эйәләренең төрлө ө бар. Ҙуры, бәләкәйе, көҙле е, көҙ еҙе, аяҡлы ы, өйрәлеүсе е, осҡаны, осмағаны, ыуҙа йәшәгәне, ҡорола көн иткәне...

– Эйе, Заратустра исемле туғаныбыҙ тереклекте биш төркөмгә бүлә.

– Ниңә бишкә?

– Тәнендә ут йөрөтөүенә ҡарап иҫәпләй.

– Бәлки... Ә минең ораuым бүтән. Йән эйәләренең бөтә енә лә тоҙ кәрәкме?

– Эйе, әммә йәндең дә тәненә тоҙ кәрәк. Бере енә – күп, икенсе енә – аҙыраҡ. Әммә бер мәхлүк тә тоҙ оҙ йәшәй алмай.

– Ә тоҙҙо ҡайҙан ала?

– Төрлө йәнлек төрлөсә тоҙлана. Үлән ашай торғаны – үләндән. Сөнки үләндең ҡай ы бере е татыр ерҙә үҫә әм тоҙҙо үҙенә ендерә. Үлән ашамаған йәнлек, әйтәйек, юлбарыҫ, бүре, еләү ен кеүектәр үлән менән туҡланған кейекте тотоп ашай. Уларҙың итендә лә тоҙ бар, йыртҡысҡа шул етә. Ҡоштар ҙа үлән әм үләк ә менән туҡланыусыға айырыла. Балыҡтың балығы йә ыу ылымығы менән туйына, йә бере е икенсе ен тотоп йота. Суртан кеүектәр, мәҫәлән.

– Кеше ни эшләргә тейеш уң?

– Кеше ни тегене ен дә, быны ын да ашай инде. Үләндә лә, иттә лә тоҙ бар.

– Әммә тоҙ оҙға ҡарағанда тоҙло икмәк яҡшыраҡ бит. Үҙегеҙ ҙә тоҙҙо ситтән бул а ла ташып ашай ығыҙ.

– Әллә Иранда тоҙ юҡмы?

– Тап өҫтөнә баҫтың, ғалим.

– Баянан бирле ни эшләп уратып-сурыта икән, тием. Йәнлектәрҙең нисек тоҙланғанын былай ҙа белә бит инде, ни эшләп минән төпсөнә икән, ти әм, үҙҙең тоҙо ана ҡайҙа ятҡан икән.

– Эйе-эйе, Факи. Иранда бындағы ымаҡ тоҙ сығып ятҡан урын юҡ. Бәлки, барҙыр, беҙ тапманыҡ. Шуға тоҙ оҙ бик ауыр. Тоҙ күленә каруан ебәрәбеҙ ҙә бит. Тик бик алыҫ.

– Кешегә кәрәк тоҙло ни бар уң унда?

– Диңгеҙ. Беҙҙең Ирандың бер өлөшө ҙур диңгеҙгә сыға. иңә, диңгеҙҙе күрмәгән кешегә, уны күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Диңгеҙ – ул офоҡтан офоҡҡаса йәйрәп ятҡан дарья. Әммә уны эсеп булмай. Ул ныҡ тоҙло. Диңгеҙ ыуын эскән кеше ыу ап яфалана, эсәген тоҙ ҡырҡа. Бына ошондай тоҙ бар унда.

– Диңгеҙ ыуында аш бешереп булмаймы ни?

– Булмай. Ул ныҡ асы. Йылға ыуы менән ҡуш аң, мөмкин. Тик диңгеҙҙән уны күпме ташымаҡ кәрәк илдең әр кеше енә ет ен өсөн.

– Бәлки, уны киптерергәлер?

– Диңгеҙҙе киптерә еңме?

– Юҡ, ыуын. Соҡорораҡ урын ҡаҙып тора ың да диңгеҙҙе йырып индерә ең, соҡор тулғас, кире быуа ың. Эҫе көндәрҙә ыу кибеп бөтә, ә тоҙо ҡала.

– Эйе. инең үҙендә мәғәнә бар. Төндә диңгеҙ ыуы артып, иртән кәмеп тә тора. Кәмегәндә ярҙа ҡалған күләүектәр кипкәс, ташта, тупраҡта ағарып ҡалған тоҙҙо малдың ялап йөрөгәнен күргәнем бар.

– Әгәр ин әйткән соҡорға тоҙҙо йыя торған үҫемлек тә сәс әң, уны йыйыуы ла уңайлы булыуы бар.

– Рәхмәт, ғалим. Яҡшы фекер әйттең.

– Файҙа ын күрегеҙ.

– Күрегеҙ, тимә. Күрәйек, тиген.

– Диңгеҙ ыуын киптергән ерҙә мин була алмайым бит.

– Ала ың. Мин ине Иранға саҡырам. Шуға ҡатыныңды ла килтерттек, бергә китергә тип.

Факи баянан бирле быларҙы тыңлап шым ғына ултырған Туран ханына боролдо. Хан ниҙер әйтергә иткәйне, шул саҡ хеҙмәтсе инде лә ҡолағына ниҙер шыбырланы.

– Әйҙә, ҡунағым. Беҙҙе саҡыралар, – тип Иран ханына өндәште. – Ә ин бар, Факи Тайран, Арҡаилдә йөрөп тор. Беҙ ине табырбыҙ.

Факи йорттан сыҡты ла үҙен көтөп тороусылар янына килде. Юлдаштары ырып алды. Эстә ни булғанын тиҙерәк белгеләре килә ине.

Факи хандар менән өйләшкәнен өҙәк-йыртыҡ ҡына ҡабатланы ла хан тәкдимен әйтте.

– Шунда әпкитер өсөн икегеҙҙе лә саҡырттыҡ, тиме? – Ҡатын төпсөндө.

– Эйе, Иранға.

– ин ни тинең?

– Әйтмәнем.

– Беҙҙең хан ебәрәме уң ине? Эшенде үҙе ҡарап, орашып тора.

– Өндәшмәне әле. Ебәрәлер инде, саҡыртҡас.

– Иранда йылы, беҙ белмәгән, беҙ күрмәгән емеш-еләк күп, ти, – ҡатын ишеткәнен үтте.

– Унда йомортҡаны тауыҡ баҫып та тормай, себеш сыға, ти, – Факи ҡатынын әләкләне.

Шул арала бер башҡорт, Заратустраның еңенән тартып, ситкә әйҙәне. Юлдаштарынан айырылғас:

– Күҙ бәйләнер алдынан ҡала майҙанындағы үҙәк бағана янына бар. Шунда бер кеше менән күрешер ең, – тине лә китеп барҙы.

Байтаҡ ваҡыт үтте, быларҙы кире хандар янына саҡырыусы булманы. Ни эшләргә лә белмәй торалар ине, ишектән берәү сыҡты.

– Кем була бында Факи Тайран?

– Мин.

– Хандар бөгөн бушамай, көтмәгеҙ. Ҡунаҡ өйөнә барып йоҡлағыҙ. Йомошсо юл күр әтер, иртәгә иртәнсәк килер егеҙ.

Йомошсо тигәне өлкән генә кеше икән. Аяҡтарын йыш-йыш баҫып алдан төштө. “Хан йомошона былай йөрө ә, килештерә икән, – тип уйланы Заратустра. – Кәрәк еренә ул барып еткәнсе, ярты көн уҙыр”. Әммә яңылышҡан икән, үҙҙәре йомошсо артынан саҡ өлгөрә килделәр ҙә бер ишеккә инделәр. Ҙур ғына ике бүлмә. Ике ендә лә ике бар.

– Быны ы – ҡатындар урыны, быны ы – ирҙәргә. Йыуынғыс тегендә, – тип күр әтте лә сығып китте йомошсо.

Ҡалыусылар бүлмәләрҙе барлап сыҡты. Ятыр урында яҫтыҡ-түшәк тигән нәмә күренмәне.

– әр кем үҙ сәкмәнен аҫтына ла, өҫтөнә лә, баш аҫтына ла ала икән, – тине Факи. – Ә йыуынғысты яҡшы эшләгәндәр. Таҙа ыу ҡомғанда, йыуынты ыу аҫҡа ағып китә. Күрә ең, ер аҫтынан тотонолған ыу улағы ҡаҙғандар.

Заратустраның быларға бик иҫе китмәне. Башында бер орау ҡайнаны: нисек кенә юлдаштарынан айырылырға ла теге кеше менән иҙҙермәй генә осрашып килергә? Өҫтәүенә, хәҙер урамға ҡарауыл сыға. Ҡалала йәшәмәгән барлыҡ кешене лә ҡыуып ебәрәләр. Ҡунаҡ өйөнән сыҡтымы, Заратустраны ла шул уҡ яҙмыш көтәсәк. Юлдаштары йыуынып, ризыҡланырға әҙерләнә башлағас, Заратустра Лиәгә шыбырланы:

– Мин хәҙер киләм. Ҡала үҙәгенә генә барып әйләнәм.

Лиә төпсөнөп торманы. Заратустра Арҡаил майҙанына сыҡҡас, ҡояш офоҡ артына инеп йәшеренде. Шуны ғына көткән ҡарауыл дөмбөрөн уғырға ла тотондо. Кис етеүенә ишара ине был, йәғни ҡала халҡы йоҡларға ятырға, килеүселәр сығып китергә тейеш. Заратустра ҡайҙа баҫырға белмәй өтәләнеп тора ине, баяғы башҡорт йәнә еҙенән тартты.

– Әйҙә...

Хан йортонан йыраҡ та түгел бер ишекте асты.

– Ин.

Эскә үт ә, яҡшы кейемдә берәү ултыра. Инеүсене күреү менән аяғүрә торҙо был, әйтер ең, оло кешене ҡаршылай. Сәләмләштеләр.

– ин Заратустра була ыңмы?

– Эйе. Ә ин кем?

– Мин Иран иленең ханы Вишпасты.

Заратустра тыйнаҡ ҡына баш эйҙе.

– Мин бында илебеҙгә кешеләр алып ҡайтырға тип килдем. ине лә саҡырам. Тик уғаса тәнеңде ҡарайыҡ әле. Мин кешенең аулығын тикшереп ҡарап алам. Алыҫ юл үтергә кәрәк. Шуға сәләмәт кешеләр кәрәк. Сисен, тигәнгә рәнйемә, йәме.

Заратустра өсөн кинәнесе юҡ был эштең, әммә мәшәҡәте лә күп түгел. Теге саҡта Албашҡортҡа тәнен күр әткәйне инде, был да ҡара ын... Хан ынлы хан орап торғас, нисек ҡарыша ың. Заратустра тиҙ генә сисенде, теге ентекләп күҙҙән үткәрҙе быны. Соңҡа ындағы миңгә баҫып алды, башындағы сал өлтөгөн тартып ҡараны. Быларҙы ысынмы-бушмы тиме икән? Шунан:

– Кейен, өшөп киткән еңдер, – тип ашыҡтырҙы, үҙе төпкө әм тышҡы ишектәргә алан-йолан ҡаранды, ҡулындағы шәмдәлде стеналағы беркетмәгә тыҡты.

– Заратустра, минең менән Иранға китер инеңме?

– Әллә, уйлаған нәмәм түгел. Унда ни эшләрмен икән?

– Йәшәр ең. Ҡала, ауылдар төҙөрбөҙ. Унда йылы, ҡыш булмай тиерлек...

– Бәлмәйем әле...

– өйләш, Факи менән кәңәшләш. Мин икегеҙҙе лә алып китер инем. Иртәгә яуап бирер егеҙ.

– Ярар.

Заратустра үҙ юлына китте, хан ҡалды. Ҡунаҡ өйөнә йүгереп тигәндәй саҡ инеп өлгөрҙө, ҡарауыл ҡулына эләгә яҙҙы. Юлдаштары уны көтә ине. Ҡайҙа йөрөнөң? ораў ҡараштарына яҙылғайны. Заратустра дөрөҫөн өйләп бирҙе. Унының үҙе бөткәс, бары ы ла шым булды. Тынлыҡты Факи боҙҙо.

– Шунан, ни уйлай ың уң?

– Белмәйем. Мин ни өсөн саҡырғанын да белмәйем. инең туралағы үҙ аңлашыла. ин – ғалим. Ғилем бар ерҙә лә кәрәк. Ғалим бар ерҙә донъя алға тиҙерәк бара. Ә мин уға нимәгә? Ғалим да, яугир ҙа түгелмен.

– Ниңә ғалим булмай, ти, ин дә бик күпте беләһең, – Лиагова яҡлашты ирен. – Кәм енеп ултырма.

Факи шарҡылдап көлөп ебәрҙе, ҡатыны йылмайып ҡуйҙы.

– Ирҙәр бәләкәй бала ымаҡ, Лиагова, ваҡытында йыуатып, арҡа ынан өйөп ебәрмә әң, иларға торалар.

Көлөшөп алғас, күңелдәре еңеләйеп ҡалды.

– Йоҡлайыҡ бөгөнгә, – тине Факи. – Иртәгә тиклем аҡыл йыяйыҡ. Йондоҙ анамай үткәрә торған былдай төн миңә ирәк эләгә...

Әммә йоҡо тиҙ генә килмәне. Ике бүлмәгә айырымлашҡан ике ир менән ике ҡатын Иран ханы тәкдимен төрлөсә тикшерҙе. Шуға таң алдынан ғына серемгә киттеләр ҙә, яҡтырыу менән тороп, йыуынып, тамаҡ ялғап алыуға, кисәге йомошсо килеп тә етте.

– Факи әм Заратустра, еҙҙе хандар саҡырта.

Барҙылар. үҙ ҡыҫҡа булыр: эйе йә юҡ. Ҡатындар ишек төбөндә ҡалды. Әммә улар байтаҡ көтөп ташланы.

Юлаусылар бүлмәгә ингәндә, хандар ни тура ындалыр аҡрын ғына өйләшә ине. үҙ өҙөлөү, күрә ең, артыҡ хафа булмағандыр, инеүселәргә уҡранманылар.

– Бәксәсән хан, ҡунағыңа ҡуйған ораўға яуап бирергә рөхсәт ит, – тип башланы Факи.

– Үҙең беләһең, йорт хужаныҡы бул а ла, унда ҡунаҡ бар саҡта унының үҙе – үҙ. Рәхим ит.

– Вишпасты хан, мине йыраҡтағы Иранға саҡырыуыңа рәхмәт. Әммә миңә Туранда ҡалырға кәрәк. Сөнки Ирәмәлдә беҙ таштан йондоҙҙар күҙәтеү ҡала ы төҙөнөк, беҙ бында күп яңылыҡтар уйлап сығарҙыҡ, әле байтаҡ эш билдәләп ҡуйғанбыҙ. Ошоларҙы ташлап, миңә ғалимлыҡ шарттары тыуҙырған илде ҡалдырып кит әм, дөрөҫ булмаҫ ине. еҙ Туранға килеп торор оғоҙ, Бәксәсән хан рөхсәт ит ә, үҙегеҙҙең кешеләрҙе өйрәнсеккә ебәрер егеҙ. Шулайтып ғалимлыҡ менән бүлешербеҙ.

Факи өйләй башлағанда Вишпасты хандың йөҙө балҡып, йылмайып тора ине. Ғалимдың үҙе бөтөүгә ул ҡарайҙы, әйтер ең, ҡояшты болот ҡапланы, ирендәре ҡымтылды.

– Зартуш ни әйтер уң? – тине ул, тешен ҡыҫып.

– Ғәфү ит, хан. Мин дә Факи Тайран кеүек яуап бирәм. А ура Мазданың миңә ҡушҡанын тормошҡа ашырыр өсөн бик күп көс түгергә әм уны бындағы арыйҙар ара ында эшләргә кәрәк. Яҙған бул а, Иранға уңғараҡ барырмын. Иран арыйҙарына ла А ураның үҙен өйләп аңлатыу бурысы тора.

– Улар үҙҙәре аңлатыр! – Заратустраның үҙе Вишпастыны шартлар сиккә еткерҙе. – Туғандарығыҙға ярҙам ҡулы уҙыу – арыйҙа борондан килгән йола икәнде онотҡан ың икән. Хан, имеш...

Әләкләүҙең мәғәнә ен Вишпастынан башҡа берәү ҙә белмәй ине. Шуға “хан, имеш”кә әллә ни иғтибар итмәнеләр. Хандың яр ыуы арҡа ында әйтелгән яңылыш үҙҙер, тип кенә уйланылар. Ғәмәлдә улай түгел ине. Вишпасты быны Заратустраға әйтмәҫкә бурыслы бул а ла, үҙ ысҡынды. Асыу аҡылды томалай, тиҙәр бит әле. Шуның ымаҡ ине хандың да хәле. Вишпасты әйткәндең асылы кисә кис Заратустраны сисендереп ҡарауҙа ине. Заратустраның хан мө өрөн күрҙе лә инде ул шунда. Ә мө өрҙөң барлығын уға Албашҡорт әйтеп ҡалдырғайны. Был донъяла бер нәмә лә, бер эш тә яңылыш йә мәғәнә еҙ эшләнмәй. Күрә ең, Албашҡорттоң Заратустра тура ында өйләре лә шулай билдәләнгән булғандыр.

...Яу яланына барышлай Албашҡорт Заратустраны сисендереп ҡарап, уның тап үҙе эҙләгән кеше икәнен белгәйне бит. Тик был турала ул бүтән берәүгә лә, Заратустраның үҙенә лә әйтмәгәйне. Әммә яу майҙанында ҡаты йәрәхәтләнгәс, илгә ҡайтарылып, Арҡаилдә йә үлем, йә шәбәйеү көтөп ятҡан саҡта, уның хәлен белергә Вишпасты хан ингәйне. Әлбиттә, был турала хан Туран иленең башы Бәксәсәнгә иҫкәртте. Яу майҙанында үҙен батыр итеп таныҡкан Албашҡортто күреп өйләшке е килгәнен әйтте. Тегене е ҡаршы төшмәне. Арый йола ы буйынса, ҡунаҡтың үҙен үтәргә кәрәк.

Вишпасты килеп инеү менән, Албашҡорт ятҡан бүлмәлә берәү ҙә ҡалманы. Ирен ҡарап туҡтау ыҙ янынан китмәгән ҡатыны ла сыҡты. Хәле ауыр ине Албашҡорттоң. Вишпастының сәләмен керпек ҡағып ҡына алды ла байтаҡ ваҡыт күҙҙәрен йомоп ятты. Шунан хәл еҙ генә тауыш менән:

– Хан, миңә эйеленкерә, – тине.

Тегене е яҡынланы. Албашҡорт шыбырланы:

– Миндә бер сер бар. Уны үҙем менән теге донъяға алып китергә ярамай. Кемгә өйләргә белмәй ята инем, әлдә ин индең. Үҙебеҙҙең ханға өйлә әм, ярамаҫ, эште боҙоп ҡуйыр, тием. Ни минең урынға яңы албашҡорт юҡ. – Ауырыу бер аҙ үҙ еҙ ятты. Әллә инде хәл йыйҙы, әллә инде әйтергә теләгәнен тағы бер уйланы. Шунан дауам итте: – үҙ Заратустра тура ында. Ул үҙен А ура Мазда Хоҙайының ерҙәге вәкиле тип атай. Бәлки, шулайҙыр ҙа. Әммә ул – хан бала ы. Был турала үҙе лә белмәй. Мин иңә хәҙер Заратустраның нәҫел ебен анап сығам. Был турала ин үҙең дә белә ең, әммә мин йәнә бер барлап, ине иҫкәртергә бурыслымын. Заратустраның ата ы – Пурушасна. инең ике туған ағайың. Заратустраны тәрбиәләп үҫтергән көтөүсе лә шул уҡ исемле ине, урыны йәннәтә бул ын, беҙҙең ҡаты ҡуллы Рабаға үлтертте уны. Пурушаснаның ата ы – Падирагтарасап, уныҡы – Уругадхасап, уныҡы – Хаечадасап, уныҡы – Ареджадхаршин, уныҡы – Харухар, уныҡы – Спитама, уныҡы – Ваэдишат, уныҡы – Ниязим, уныҡы – Әйрик, уныҡы – Дурасроб, уныҡы – Мәнушсихр, уныҡы – Аръя, уныҡы – Фәридун, уныҡы – Атвай. Атвай – Йомаштың игеҙенсе быуын нәҫеле. Йомаш инде – Ғәүмәрәттең улы. еҙҙең нәҫел, тимәк, туранан-тура ер йөҙөндәге тәүге кешегә барып тоташа. Шуға күрә уларҙың әр бере ен аҡларға бурыслы ығыҙ.

Шунан Албашҡорт Заратустраның көтөүсе улы рәүешендә үҫеүе әм ундағы хан мө өрө тура ында әйтте. Күп өйләүҙән хәлдән тайып йәнә өндәшә алмай ятҡандан уң, өҫтәй алды:

– Мин ине киҫәтергә тейешмен: Заратустраны аҡла, уны бында ҡалдырма. Туран ханы уның кемлеген белеп ҡал а, йәшәтмәҫ. Ул бит, үҙе хан нәҫеле бул а ла, хандың ағa ының улының улы. Йәғни, тура тамыр түгел. Пурушасна үҙе уғышта үлгәс, уның урынына ҡалырға тейеш балалары ла бөттө... Заратустра шуларҙан берҙән-бер... Мин серҙе тапшырҙым, инде үл әм дә була. – Вишпасты Албашҡорттың ҡулын тотоп ултыра ине. улҡ- улҡ килгән ҡан тамыры көслө итеп типте лә тынды. Хан яугирҙар етәксе енең күҙен йомдорҙо.

Ошонан уң Иран ханы Заратустра менән Факиҙы эҙләткәйне лә инде. Туран

ханынан Заратустраның бер үҙен генә ора а, шик тыуыр тип, ғалимды ла ебәреүен үтенде. Хәҙер килеп Заратустра менән Факи ике е лә Иранға китеүҙән баш тартып тора. Шуға яр ый Вишпасты.

Иран ханын ошондай хәлдә күреү Туран ханы Бәксәсәнде ң күңеленә май булып ятты. “Кемде телә әң, шуны алып кит Иранға,” – тип әйткәйне лә ул әйтеүен, әммә күп халыҡтың Туранды ташлап китеү ихтималлығы күңелен ҡыра ине. Ошо хәл була ҡал а, уны – ханды халҡы яратмай йә и ә хандың үҙ иленә көсө етмәй, тигәнде аңлатасаҡ. Теге көндө уҡ атыр батыр Ирандан баш тартты, бөгөн Факи менән Заратустра Вишпастының үҙен йыҡты. Шуға эстән генә өйөнөп бөтә алманы Бәксәсән. Шатлығын йәшерә алмайынса өндәште:

– әр кемде лә А ура Мазда иреклe итеп яратҡан. Күңелдәренә ни яҡын, шуны айла ындар, тинек. Ғалимдар йыраҡҡа китеүҙән баш тарта икән, ни хәл итә ең, уларҙың ихтыяры. Ҡыҫташма, Вишпасты хан. Ә еҙ барығыҙ, үҙ эшегеҙ менән булығыҙ, – тип Факи менән Заратустраға фатиха ын бирҙе.

– Мәйелегеҙ, – тине Вишпасты ла. – Беҙ күрешербеҙ әле, тигән өмөттә ҡалам.

Ғалимдар сығып китте. Әммә Вишпасты өсөн күңел еҙ хәл бының менән генә бөтмәне. Кире енсә, был башы ғына булған икән. Уға ашығырға, кире борола алырға кәрәк ине. Яйыҡ яғалап ятҡан ғәскәре оҙаҡ тик тор а, хөртәйә башлаясағы көн кеүек асыҡ бит. Ғәскәр өсөн иң насары – нимәлер көтөп хәрәкәт еҙ ятыу. уғышмай йә күсенмәй икән, эш еҙлектән кешеләр үҙҙәрен ҡайҙа ҡуйырға белмәй башлай, ҡәнәғәт еҙлек көсәйә, тәртип йомшара. Хатта ғәскәрҙең яйлап тарҡалыу ҡурҡынысы тыуа. Шуға ғәскәргә оҙон ял бирергә ярамағанын әр сардар белә. Был, әлбиттә, Вишпасты ханға ла билдәле ине. Берҙән, ул ғәскәре өсөн хафалан а, икенсенән, Ирандағы хәлдәр ҙә хәүефләндерҙе. Үҙе юҡта батшалығында әллә нимәләр булып бөтөүе бар бит.

Дөрөҫөн әйткәндә, Вишпасты тәүҙә Туранға уғыш менән килергә уйлағайны. Шуға ҙур ғәскәр алып сыҡҡайны бит. Юлда килә торғас, тәүҙә үҙ маҡсатына тыныс юл менән өлгәшеп ҡарарға кәрәк, тигән фекерҙә нығынды. Әгәр килеп сыҡма а, суҡмарға тотонор. Ана бит, ҡорал менән яҫҡыныуҙың кәрәге теймәне. Туран ханы, күпме кәрәк – шул тиклем кеше ал, тине. Әлбиттә, мал, ҡорал, яҡшы мәғдән, баҡыр теймәйәсәк. Кеше бул а, уларын ғына табырҙар.

Бына Вишпастының түҙем еҙлек менән көткән көнө етте. Был Иранға китергә ниәтләнеүселәрҙең Арҡаил янындағы Оло яланда йыйылыр көнө ине. Ошо көндә йыйналырға кәрәклек хаҡында Туран ханы әр илгә, ҡала, ауылға хәбәр еткерткәйне. Ошо хәбәрҙән тыш кешеләргә бүтәнсә бер үҙ ҙә әйттертмәне ул. Китеү яҡшымы, ҡалыумы – әр кем үҙе хәл ит ен, тине. Ысынлап та халыҡҡа ирек ҡуйҙы. Әммә кешеләрҙең кәйефен, ни уйлағанын, ни өйләгәндәрен белә торҙо. әр йәмғиәттә уның үҙ кешеләре бар. Башҡорттар менән ҡорттар ара ында сардарҙар етәрлек. Әммә бер юҫыҡтан да Бәксәсәнгә хәүефле хәбәр килмәне. Кешеләр илде ташлап китергә ашҡынып торманы. Шуға Туран ханы йыраҡҡа йыйыныусыларҙың Арҡаил янына килер көнөн ағаймай ғына көттө. Ни булырын алдан белә ине шул.

Ул көн матур килде. Күк йөҙө аяҙлы-болотло. Әммә ямғыр ыҙ, эҫе лә, ыуыҡ та түгел, еләҫ кенә. Оло яланға тиҙерәк сыҡҡы ы кил ә лә, Вишпасты хужаның әйткәнен көттө. Ә ул ашыҡманы. Иртән тамаҡ ялғағанда Бәксәсән:

– Китеүселәр туплан ын әле. Ялан иркен, бөтә енә лә урын етерлек. Йыйнал - ындар, шунан барырбыҙ, – тине.

Төш етте, йөнә тамаҡ туйҙырҙылар. Вишпастының түҙем еҙлеге йөҙөнә яҙылғайны. Уға ҡарап Бәксәсән көлөм өрәне:

– Йөрәк енмә, хан. Йыйылған кеше таралмаҫ. Күберәк кил ендәр әле.

Туран ханы ни  өйләгәнен беләһе. Оло яланға нисә кеше йыйылғанын да, ауыл, ҡалаларҙан күпме кеше килерен дә уға еткергәйнеләр инде. Шуға ул эстән генә тантана итте.

– Әгәр теләһәң, барайыҡ  уң тупланмаға, – тине ул.

– Әйҙә! – Вишпасты ырғып торҙо.

Аҡбуҙ аттарға атланған башҡорттар юл башланы, уларҙың артынан  игеҙ атҡа егелгән аҡ арбала Туран ханы килә, уның артынан ҡара аттар тартҡан ҡара арбала – Вишпасты хан, уға эйәрә уның башҡорттары юрттыра.

Оло ялан ғәләмәт киң. Арҡаилдән сыҡҡанда  ан ыҙ күп тойолған хан үңәрҙәре киңлектә юғалып ҡалғандай булды. Йөҙҙән ашыу атлы кеше лә аҙ ғына кеүек күренә. Ә уларҙы көтөүселәр бынан да аҙыраҡ ине. Иранға китергә тип сығыусылар ни бары 70-80 кеше булып, улары ла ауыл, ҡалаларҙа йәмғиәткә  ыйып бөтмәгән бәндәләр икән. Күбе е урта йәштән уҙған йә унан да оло кеше, бер нисә бала-сағалы ғаилә күренә. Эш эшләрлек, яу йөрөрлөк йәштәр юҡ ти әң дә була.

Яланға  ыймай эркелешкән кешеләрҙе күрергә өмөтләнгән Вишпасты быларға ҡарап аптырап ҡалды.

– Ҡайҙа бүтәндәр? Әллә Оло яланға барып етмәй туҡтаныҡмы? – тип  ораны йөҙө ҡап-ҡара булған Вишпасты.

Бәксәсән уның хәлен аңланы, йәлләп ҡуйҙы. Ләкин ни эшләтә ал ын.

– Ошо инде Оло ялан. Бүтән юҡ. Килгән кешеләр ҙә, күрә ең, ошо.

Вишпасты ҡорт саҡҡандай ырғып китте лә, Әришаснаға боролоп:

– Хуш.  ин мине алданың! – тине, шунан  арба ына атылып барып менде, дилбегәсенең ҡулындағы оҙон сыбыртҡыны тартып алып аттарға  ыҙырҙы. Арттағы аттар ҡапыл үрәпсеп, алдағыларына  икерҙе, тегеләре алға ташланды,  әм саҡ-саҡ арба йығылмай ҡалды. Эйәрҙәренән төшөп өлгөргән ҡара атлы башҡорттар, тиҙ генә менгеләренә атлана  алып, хужаларын ҡыуып китте. Ә ул ҡыуҙырҙы ла ҡыуҙырҙы ҡара юрғаларҙы. Арба артынан туҙан болото ғына күтәрелә барҙы.

Бәксәсән хан моң оу ғына ҡарап ҡалды туғаны артынан. “Минең гона  юҡ та бит, әммә ул мине ғәйепләп китте, –тип уйланы. –Яйыҡ буйына етер ҙә, ғәскәрен күтәреп,  өжүмгә сығырмы икән инде? Илде туҙҙырма ын өсөн ҡаршы көс туплар кәрәк.”

Тик Туран хандың мәшәҡәттәре бушҡа булды. Вишпасты боролманы. Шул китеүҙән туҡтамай Иранға сапҡан, ә ғәскәре артынан ҡайтҡан, тинеләр.

16

Арҡаилгә килгәндә Факи менән Заратустраларҙы арбаға ултыртып елдертеп килтергәйнеләр ҙә, кире ҡайтыу йәйәү булды. Атлап нисек кенә шәп бар аң да, сәғәтенә 5-6 саҡрымдан арттырып булмай. Атта бер көн үткән юлды йәйәүлеләргә өс көн атларға тура килде. Икенсе төндө улар Яйыҡ туғайында ҡунырға булдылар. Усаҡ ҡабыҙҙылар, ҡулға эләккән сытыр-сатырҙан ҡыуыш рәтләнеләр ҙә, таҙа  ыу ала була, Заратустра Яйыҡҡа китте. Күкрәгенән  ыу эсендә баҫып торған килеш тәүҙә ҡулын-битен йыуҙы, шунан арҡа ындағы күнәген алып  ыу тултырайым ғына тигәйне, ярҙа берәү күҙенә салынды. Теге ағас ышығынан сығып, яр ситенә үк килеп баҫты.

– Заратустра,  аумы? – ти был. – Мине танымай ыңмы?

– Сырамытам. Мин  ине А ура Мазда янында күргәйнем.  ин – Ман хоҙай.

– Эйе, күҙең үткер икән. Сыҡ минең янға. Әйҙә, Үлем еҙ Изге йәндәр йыйынына барабыҙ.

Заратустра  ис  үҙ еҙ буй ондо. Ҡулындағы күнәген артмаҡланы ла йылғанан сыҡты. Өҫтөнән  ыу аға, уға иғтибар ҙә итмәйенсә, Ба уман артынан эйәрҙе. Күп

тә барманылар, ҙур тармаҡлы ҡарт ҡарама янына килеп сыҡтылар. Ҡарама төбөндә күкрәп үҫкән үлән өҫтөнә ете хоҙай түңәрәкләп ултырған. Иң түрҙә – А у-ра Мазда. Заратустра сәләм бирҙе. Бүтәндәр өндәшмәне, А ура яуапланы:

– ин беҙҙең аулыҡ менән ҡыҙыҡ ына ың, рәхмәт. Беҙ – оҙон ғүмерле генә түгел, ә үлем еҙ изге йәндәр. еҙҙең, кешеләрҙең, ғүмере беҙ керпек ҡаҡҡан арала ғына үтә лә китә. Шуға беҙҙең аулыҡты түгел, үҙегеҙҙекен ҡайғыртырға кәрәк.

– Ә үлем еҙ изге йәндәр кешеләрҙән ни көтә уң? Ни нәмәне тәүҙә улар иң ка-милы анай? Ни нәмә уң икенсе е, өсөнсө ө?

– Беҙ кешеләрҙә иң алда изге ниәт булыуын теләйбеҙ. – Шулай тигәйне А ура Мазда, баяғы Ба уман баҫты.

“Ә ә, – тип уйлап алды Заратустра, – тимәк, кешеләрҙең изге ниәте өсөн А ура Мазда әм бүтән үлем еҙ изгеләр алдында Ба уман яуаплы”.

– Икенсенән, беҙ кешеләрҙән изге үҙ көтәбеҙ.

Йәнә бер хоҙай баҫты ла кире ултырҙы.

– Өсөнсөнән, кешеләрҙең изге эш кенә башҡарыуын теләйбеҙ.

Тағы бер үлем еҙ изге ҡалҡынып ҡуйҙы.

– Беҙ иңә, Заратустра, Ахун Ыуары доға ын өйрәтергә ниәтләнәбеҙ. ин шуға ризамы?

– ис шик еҙ, ризамын.

– Әммә ин ризалығынды өс ынау аша раҫларға тейеш ең. Әгәр ин ынау бары-шында ризалыҡтан баш тартма аң, тимәк, әйткәнең менән беҙ ҙә килешәбеҙ. ы-науға әҙер еңме?

– Эйе.

А ура Мазда ул ҡулын елтәгәйне, ҡарт ҡарама янынан башлап Яйыҡ ярына та-бан дөрләп янған ике рәт усаҡ барлыҡҡа килде. Рәттәрҙең бер осо бында, икенсе е күренмәй.

– Беренсе ынау ошо, – тине А ура. – Утлы ике рәт ара ынан йүгереп үтергә тейеш ең. Ҡурҡ аң, ынауҙан баш тарт.

– Ҡурҡмайым.

– Улай а, йүгер.

Заратустра йән көсөнә ут ара ына ташланды. Аяғы ергә тейгәндә тейҙе, теймәгәндә – юҡ, “ ә” тигәнсе уттың икенсе осона етте. Ут ара ынан уҙған кеүек тә булманы. Әллә баяғы ыуҙан кибеп бөтмәгән кейеме ярҙам итте, әллә инде шул тиклем тиҙ йүгерҙе – тәне түгел, асыҡ бите менән ҡул суҡтары ла бешеп өлгөрмәне.

– Беренсе ынауҙы үттең, хәҙер – икенсе е, – тине А ура. – Хәҙер мин күкрәгеңә иретелгән баҡыр ҡоям. Шуның эҫе енә сыҙарға тейеш ең. Ҡурҡ аң, ы-науҙан баш тарт.

– Мин риза.

– Ят.

Заратустра уҙылып ятты ергә, А ура уның күкрәген асты ла әллә ҡайҙан пәйҙә булған оҙон аплы бәләкәс башлы сүместе уның өҫтөнә килтерҙе. Баҡыр төтәп тора. А ура Заратустраның күҙҙәренә ҡараны. Күҙҙәрҙә ҡурҡыу асыҡтан-асыҡ яҙылғайны. А ура текләп торҙо ла уйланы: “Әгәр ҙә ҡурҡа белмә ә, алйот булыр ине... Түҙеү менән ҡурҡыу ике е бер түгел шул.” А ура сүместе ҡыйшайтты, шый-ыҡ баҡыр күкрәккә аҡты. Шунда уҡ көйөк еҫе таралды. Заратустра тештәрен ҡы-ҫты, күҙҙәрен шытырҙатып йомдо, тәнен ағас кеүек ҡатырҙы.

– Йөҙтүбән ят! – тигәнгә генә иҫкәнеп китте әм әйләнде. Иретмә баҡыр ергә төштө. А ура ҡайҙандыр шыйыҡса алды ла Заратустраның күкрәгенә өрттө. – Ямауы өҫтөндә, ти егеҙ бит әле еҙ. Шулай икән ысынлап та. Янған яра түгел, йөйө

лә ҡалманы. – А ура яланғас тәнде ыйпап ҡуйҙы. – Икенсе ынауҙы ла үттең. Ә хәҙер өсөнсө өнә әҙерлән. Быны ы тәүгеләренән ҡатмарлыраҡ булыр. Түҙер бул - аң ғына ризалаш.

– Ниндәй ынау?

– Бына иңә хәнйәр. – А ура нәҙек оҙон хәнйәр сығарҙы. – Шуның менән ин тәнеңде үтәнән-үтә тишергә йә хәнйәрҙе төбөнә тиклем эсеңә ҡаҙарға тейеш ең. Ҡурҡ аң, ынауҙан баш тарт.

 уңғы үҙҙе А ура өсөнсөгә ҡабатланы. Күрә ең, ниндәйҙер ҡөҙрәте барҙыр. Әммә ул турала әйтеп торманы.

– Ризамын. – Заратустраның тауышы ҡәтғи сыҡты.

– Риза бул аң, мә.

Хәнйәр еңел генә ине, бысағы йоҡа, үткер, хатта бөгөлөп тора. Заратустра хәнйәрҙе ботона ҡаҙарға булды. Кейемен систе лә йәтешләп аяҡтарын бөкләп ултырҙы. Хоҙайҙарҙың күҙе унда. А ура и ә Заратустраның янына сүгәләгән. Заратустра бот итенә хәнйәрҙең осон терәне лә яйлап тәненә индерә башланы. Шуны ы ғәжәп: йәрәхәттән ҡан аҡманы. Тешен ҡыҫҡан көйө Заратустра хәнйәрҙе боттоң икенсе яғынан килеп сыҡҡансы этте. Бысаҡтың осо күренгәс, бер тамсы ҡан төштө.

– Ярар, булды, – тине А ура.

Заратустра хәнйәрҙе баяғыса әкрен генә урып алды. Бысаҡ урынында йәрәхәт ҡалды, ҡан күренде. А ура уң ҡулының ике бармағы менән яраны ыйпағайны, бөтәште лә ҡуйҙы.

– Дөрөҫөн әйт, ауырттымы? – тине А ура.

– Эйе.

– Ә ин түҙҙең.

– Мин бит үҙем ризалаштым.

– Бик яҡшы. ынауҙарҙы әйбәт үттең. Инде антҡа күсәйек.

– Ниндәй ант?

– Был инең миңә – А ура Маздаға, бүтән изге хоҙайҙарға тик беҙҙең динде тотасағың, Ахримандың әм дейеүҙәрҙең ҡотҡо она бирелмәйәсәгең тура ында ант. ин шул ант йөкләмә ен үҙеңә алырға әҙер еңме?

А ура менән бүтән хоҙайҙар Заратустраға текләште. Уны ы:

– Әҙермен, – тип тыныс, әммә ышаныслы яуап бирҙе.

– Антҡа әҙер бул аң, минең арттан әр үҙҙе аңлап, мәғәнә енә тәрән төшөнөп ҡабатла. Белеп тор: антты әйткәс, уны үтәргә мәжбүр була ың. Антты боҙоу – үҙеңде изгелеккә ынтылған кеше рәтенән ыҙыуға тиң. Ә хәҙер минең арттан ҡабатла.

Заратустра аҡрын, ләкин ап-асыҡ итеп ант үҙҙәрен теҙә башланы:

– Дейеүҙәрҙе ҡә әрләйем. Үҙемде, Маздаға табыныусы, дейеүҙәрҙең дошманы, А ураның, дан ибеүсе Әмишә-Спента, ғибәҙәтләнеүсе Әмишә-Спента дауамсы ы, тип ысын күңелдән белдерәм. Мин бөтә яҡшылыҡты, барлыҡ әйбәтте уныҡы, Әртәне күтәреүсе, нур бөркөүсе, мал-тыуарҙы әм Әртәне бар итеүсе, изге йәндәр төйәгенә нур әм яҡтылыҡ ибеүсе А ура Маздаға ҡайтарып ҡалдырам.

А ура шымды ла саҡ ҡына ситкә китте. Уның урынына икенсе хоҙай баҫты әм ант үҙҙәрен дауам итте. Заратустра уны ҡабатланы.

– Мин үҙемә изге, игелекле Әрмәйтте алам, ул минеке бул ын. Мазда ауылдарына зыян килтереүҙән, малын талау әм ҡыуып алыуҙан баш тартам.

Икенсе ен – өсөнсө, өсөнсө өн дүртенсе хоҙай алмаштыра, ант үҙҙәрен теҙә, урынына ултыра торҙо. А ура Мазда ғына баҫҡан көйө ҡалды ла Заратустра әйткәнде ҡабатланы.

– Мин был ерҙә мал тотҡан хужаларҙың иркен йөрөүен әм ирекле тормошон тәьмин итәм. Әртәгә баш эйеп, үҙ хәйерем менән вәғәҙә бирәм: үҙ мәнфәғәтем өсөн Мазда ауылдарына зыян килтереп талап йөрөмәйәсәкмен.

– Ерәнгес, зыян, яуызлыҡ сәсеүсе дейеүҙәр йәмғиәтенән баш тартам, иң алдаҡсы, иң аҫы, иң яуыз тереклек – дейеүҙәрҙән, уларҙың әшнәләренән, йән эйәләрен көсләүселәрҙән баш тартам. Уйҙа ла, ниәттә лә, эштә лә уларҙан баш тартам.

Ант биреүҙе күҙәтеп торған А ура йәнә Заратустра янына килде әм үҙҙе дауам итте:

– Ант итеп үҙемде Маздаға табыныусы тип танытам. Изге ниәтте ант менән нығытам, изге үҙҙе ант менән тамамлайым, изге эштең осона сығасағыма ант менән ышандырам.

– уғыш барымталарын бөтөрөргә, ҡорал ташларға саҡырам, туғандар ара ында ир – ҡатын булыуға ҡаршы сыҡҡан, әлеге әм буласаҡ диндәр ара ында иң бөйөк, иң яҡшы әм иң яҡты Мазда диненә тоғро буласағымды ант менән нығытам!

– Антыңды бер ваҡытта ла, телә ә ниндәй сүрәттә лә аяҡ аҫтында тапамаҫыңа ышанабыҙ. Беҙ ине Әмишә-Спентаға алдыҡ. Ә хәҙергә хуш бул. Беҙ инең менән күрешеп торорбоҙ!

А ура Мазда әм унан кесе хоҙайҙар юҡ булды. Заратустра алан-йолан тирә-яғына баҡты. Бая Ба уман килгәнгә тиклем күҙ алдында булған күренештән тыш бер ни ҙә юҡ ине. Заратустра үҙ алдына йылмайҙы ла, күнәгенә ыу тултырып, ярға сыҡты. Тәне нисектер бик еңел ымаҡ тойолдо. Әллә Бөйөк Хоҙай менән өйләшеп, күңелендә күптән йыйылып йөрөгән ант үҙҙәрен әйтеүе еңеләйттеме икән, аяҡтары кәүҙә ен, ҡулы ыуҙың ауырлығын да тоймай, юлдаштары киткән яҡҡа атланы. Үҙе эстән бер үҙҙе ҡабатланы:

– Мин үлем еҙ хоҙайҙарҙы күрҙем. Мин үлем еҙҙәргә ант иттем.

ыу алырға киткән Заратустраны көтәләр ине инде. Осоп тигәндәй килгән ирҙе күргәс тә, улар бының менән ниҙер булғанына төшөндө. Төпсөнмә әләр ҙә, күҙ ҡарашы менән орашырға теләгәндәрен Заратустра ла аңланы әм инәлтмәйенсә Яйыҡ буйындағы осрашыуҙы түкмәй-сәсмәй, антты үҙмә- үҙ ҡабатлап өйләп бирҙе.

Ышанманы юлдаштары. Алдаҡсы йә йүләр тип атаманылар, әммә ышанманылар ҙа. Факи:

– Күкрәгеңде йә ботоңдо күр әт әле? – тине.

Заратустра кейемен алды. Баҡыр ағыҙылған әм хәнйәр ҡаҙалған урында йәрәхәт йөйө юҡ, әммә ныҡ ҡыҙарған тап бар ине.

– Бая А ура ыйпағас, ҡыҙыл ҡалмағайнысы, – тип ғәжәпләнде Заратустра үҙе.

Факи ҙа, уның ҡатыны менән Лиагова ла бер үҙ ҙә өндәшмәне. Күреп тора Заратустра: ышанмайҙар. Ысын да ысын тип ҡабат-ҡабат өйләп ҡараны, әммә бер ни ҙә ҡыра алманы. Иренең хәлен аңлаған Лиә:

– Әйҙә инде, арыған ың, – тип алып китте.

Иртәгә енә ғалимдар ауылға ҡайтыу юлын дауам итте. Иртәнге сәй алдында ла, ҡуҙғалғас та берәү ҙә кисәге хәлдәрҙе иҫкә алманы. Әлбиттә, улар ис кемдең хәтеренән юйылмағайны. Әммә әҙәм бала ы йә ҡыуанысты, йә үтә ағышты уртаға алып өйләй бит. Ә кисәгеләре юлдаштарға күбе енсә аңлашылманы. Ҡайтауыллап төпсөнөү теләге лә тыуманы.

Был көндө иҫтә ҡалырлыҡ йәнә бер ваҡиға булды. Мал тотоусылар ауылы янынан үтеп баралар ине. Иң ситке өй ҡаралтылары ара ынан берәү өс йәпле ағас әнәк тотоп йән-фарманға эт ҡыуып килеп сыҡты. Мәхлүк эт ҡойроғон бот ара ына ҡыҫып саба, кеше ҡысҡыра-ҡысҡыра быны ҡыуа. Әлбиттә, йүгереклектә кеше

эткә тиңләшә алмай. Шуға бәндә, тегене ҡыуып тоторҙай булмағас, әнәкте сөйҙө. Эш ҡоралының яу ҡоралына әүерелеүен дә беләбеҙ. Был юлы ла шулай килеп сыҡты. әнәктең сата ы эткә эләкте. Ҡаҙалдымы-юҡмы, кем генә бел ен, әммә эт саңҡылдай-саңҡылдай ары ҡасты. Кеше әнәген барып алды ла эт яғына йоҙроғон болғап өрәнләне:

— Ҡабаттан ғына тейеп ҡара, йәнеңде алам мин инең!

Заратустра теге кешенең ҡаршы ына барып баҫты.

— Ни булды? Ни эшләп үлтерә ең этеңде?

— Ни эшләп, ни эшләп?.. Йоморҡа баҫып ултырған тауығыңды тотоп аша ын әле. ин ни эшләр ең икән?

— Нимә ашата ың уң этеңә?

— Эткә ашатырға түгел, үҙебеҙгә таҡы-тоҡо ғына. Эт бит ул, тап ын да аша ын.

— Ул таба ла инде. ин ашатмағас, тауығыңа ынтыла. Этеңә икмәк, ҡалған аш бир әң, боламыҡ бешер әң, ул да ит тип тауыҡҡа ынтылмаҫ ине. Хоҙайыбыҙ А ура Мазда ни ти? Тере йәнде үлтереү генә түгел, уны ҡыйыр ытырға ла ярамай, ти. Ә ин эткә әнәк менән ташлана ың. Йән эйәләре бары ы ла бер тиң. Тик бере е үҙ менән аралаша, икенселәре — уау-уаулап, өсөнсөләре — төрлөсә хәрәкәт әм беҙҙең ҡолаҡ ишетмәгән өндәр ярҙамында...

— Йән эйә ен ҡыйыр ытырға ярамағас, ниңә кешене терелә й ергә күмәләр?

— Кем күмә?

— Кисә генә ауылдың бер бабайын ерләнек. Уның менән ҡуша әбейен терелә й күмдек. Раған үҙе ҡушты.

— Дөрөҫ түгел. Ярамай. Кешене лә, малды ла ҡушып ерләргә ярамай. А ура Мазда миңә үҙе шулай тине.

— иңәме? — Эт хужа ы Заратустраға секерәйеп баҡты.

— Эйе, кисә генә күрештем.

Ауыл кеше е быға ҡулын елтәне лә боролоп китте. Йәнә е, аҡылға бер төрлө икән был.

Заратустра асҡан ауыҙын да яба алмай ҡалды. Китеүсенең артынан ҡарап торҙо ла әнәк менән уғылған этте эҙләргә тотондо. Ҡыуаҡ төбөндә яра ын ялап ята ине мәхлүк. Заратустра эттең башынан ыйпаны, арҡа ынан ҡағып өйҙө, шунан күтәреп алды ла үҙен көтөп торған юлдаштары янына барҙы.

— Ни эшләтә ең уны? — Факи ораны.

— Кеше йәберләне бит йән эйә ен. Кеше ғәфү үтенергә әм артабан яҡларға тейеш.

— Шулайҙыр... — Лиагова үҙгә ҡатнашты. — Рәнйетелгән тип әр этте күтәреп йөрөтөр өң инде. — Иренә бер ваҡытта ла ҡаршы әйтмәгән ҡатын да риза ыҙлығын белдерҙе.

— Эйе, бар этте лә йыям. әр йән эйә енән дә ғәфү орайым.

Юлдаштары, арҡа биреп, юлға төштө. Эт күтәргән Заратустра арттарынан эйәрҙе.

Барыр-барыр ҙа этте ташлар, тип көткәйне тегеләр. Әммә Заратустра уны ҡалдырманы. Төшкә туҡтағас, үҙ өлөшөнөң ярты ын бүлеп, януарға бирҙе.

— Бер ин ярҙам итеп бөтөрә алыр ыңмы кешенән зыян күргән барлыҡ йән эйә енә? Өҫтәүенә, хайуандар үҙ-ара ла бер-бере ен йыға бит әле. Бүре арыҡты ашай...

— Йән эйәләренең бары ы ара ында ла ғәҙеллек урынлаш ын өсөн, иң алдан кеше бүтәндәрҙең йәненә ҡул уҙыуҙан баш тартырға тейеш. Шуны аңлатырға тырышасаҡмын мин әр кешегә.

— Аңла алар ярай ҙа бит...

— Аңларҙар. Мин ышанам.

Был хаҡта Факи менән Заратустра ара ында ҡабаттан үҙ булманы. Ә Заратуст-

ра этте ауылға тиклем күтәреп алып ҡайтты.

17

Ғалимдар ауылында ла яңылыҡ көткән Заратустра менән Лиагованы. Улар йәшәгән өйҙөң туп а ында Заратустраның ҡусты ы, Лиагова менән бергә уйнап үҫкән Майыт-Монхи ултыра ине. Майыт быларҙы күреү менән икереп торҙо, ауыҙы ҡолаҡтарынаса йырылды.

– Таптым бит мин еҙҙе барыбер, – тип тәүҙә аға ын, шунан Лиагованы алмаштилмәш ҡосаҡланы.

– Ҡустым, ипләберәк. Еңгәңдең эсен ыға ҡыҫма. Унда минең вариҫ ята, – тине шаяртыу ҡатыш Заратустра.

– Нисек... еңгә?

– Эйе. Беҙ өйләнештек. Ана, Факи ғалим түҙҙермәне, ҡауышырға ҡушты.

– Яҡшы булған. Беҙ ине, бер үҙең йөрөй өңдөр байғош ымаҡ, тип уйлағайныҡ.

– Кем ул – еҙ?

– Кем бул ын? Беҙҙең ауыл, әсәйең Догдова, ҡустыларың, туғандарың.

– еҙ мине онотоп бөткән егеҙҙер, ти әм әле.

– Ни эшләп улай уйлай ың? ин ташлап кит әң дә, беҙ хәтерҙән сығарғаныбыҙ юҡ. – Майыт үпкәләгәндәй итте.

– Ярар инде, ҡыҙҙар кеүек иренеңде тур айтма, шаяртып ҡына әйтеүем. Ә ин нисек таптың беҙҙе?

– Раған әйтте.

– Ни тине?

– Ғалимдар ауылында ул, ти.

– Ул ҡайҙан белгән?

– инең турала яңылыҡты әр илдең рағаны – Рабағаға, ә Рабаға барлыҡ рағанға ла еткереп тора икән. Беҙҙең раған үҙе шулай тине.

– Дан киткән икән! – Быны ын Заратустра әллә ҡәнәғәтләнеү, әллә риза ыҙлыҡ менән әйтте, аңлап бөтмәҫ ең. – Әсәйем нисек уң?

– Мине Догдова еңгә ебәрҙе лә инде.

Майыт Заратустраға ике туған ҡусты тейеш. Унын ата ы менән Пурушасна бер туғандар.

– Ни тине әсәм?

– Ауырый... Хәлем насарлана бара, Заратустраны күреп үләйем тигәйнем, тине.

– Ныҡ сирләйме ни? ин дә мин тороп ҡалғайны ла?

– инең ғәйеп булыуыңды бигерәк тә ауыр кисерҙе.

– Мине лә теге саҡта ул өтәләндереп сығарып ебәргәйне бит. – үҙгә Лиагова ҡушылды. – Әллә ни эшләп ин тип өҙөлә лә тора бит. Бүтән балалары ла бар ҙа инде. Уларға ул хәтлем үк түгел.

Был үҙ Заратустраның күңеленә май булып ятты. Үҙенде ағынып торған кешенең барлығын белеү рәхәт икән. Күрә ең, ошо тойғо уға тиҙ генә ҡарар ҡабул итергә лә ярҙам итте.

– Ҡайтам. Әсәй кеше ебәргән икән, тимәк, кәрәк. Ҡайтам.

Заратустра ҡусты ынан ауыл хәлдәрен бәйнә-бәйнә орашты, исеме аталмаған кеше, телгә алынмаған уңғы ваҡиға ҡалманы. үҙҙең осона сыҡҡас, Заратустра башын ҡулына терәп бер аҙ ултырҙы. Шунан:

– Ҡайтам, – тине өҙөп. – Ҡайтып әсәйҙе күрер кәрәк. Бөгөн ял итәйек тә иртәгә юлға сығырбыҙ.

– Иртәгә иртүкме? – Лиагова үҙгә ҡатнашты.

– Ә ин ҡайтмай ың. ин бында тороп тор. Буйыңда бар көйө алыҫ юлға йөрөмә.

Ҡатын шаҡ ҡатты, бындай мөнәсәбәтте көтмәгәйне, күрә ең.

– Бул а ни. Ана, Арҡаилгә барып килдем, бер ни ҙә тойолманы. Юҡ, мин инең үҙенде генә ебәрмәйем.

– Мин бер үҙем түгел. Ҡусты менән бит.

– Ә иңә кем ашарға йүнәтә? Кем кейем- алым рәтләй? Ҡустыңдың үҙен ҡарар кәрәк.

– Үҙемде генә тәрбиәләмәҫкә аяҡ-ҡулым зәғифме ни? Ә иңә күп йөрөргә ярамай, өҙлөгөп ҡуйыуың бар.

– Өҙлөкмәм. Бисәләр бесәй йәнле улар, ныҡ булалар.

– Ниңә? Ҡайт ын, – Майыт үҙ ҡыҫтырҙы. – Догдова, уны ла бик ағындым, ти ине.

Ошо дәлил бары ын да хәл итте. Заратустра ҡабаттан ныҡышып торманы.

Факи Тайран Заратустра, унын ҡатыны әм яңы килгән егеттең юлға әҙерләнеп бөтөүҙәрен иртәнсәк, төнгө эшенән ҡайтҡас ҡына белде. Был яңылыҡ уға тәүҙә болот оҙ көндө атҡан йәшен ымаҡ булды. Шуға ни әйтергә лә белмәйерәк торҙо. Шунан ғына:

– Ай, ҡыйын булды бит әле. инең менән әллә күпме эш тәғәйенләп бөткәйнем. – Бик үкенесле сыҡты ғалимдың тауышы. – Атылған йондоҙ айы етте. Был мәлдә йондоҙҙар әләк күп атыла. Шуларҙы күҙәтеү үтә лә ҡыҙыҡ әм кәрәк. Бергә эшләрбеҙ тип ниәтләгәйнем.

Заратустра үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне. Кире ҡайтауыллар ине, ҡатыны менән ҡусты ына вәғәҙә биргән. Ҡайтып кит ә, Факи алдында уңай ыҙ.

Унын хәленә ғалим төшөндө.

– Бәй, онотоп та торам. Минең иңә бер үтенесем бар ҙа ба а. – Йөҙө яҡтырып китте үҙенең тапҡырлығынан. – ин юлда алыҫлыҡты үлсә әле.

– Нисек үлсәйем?

– Бик ябай. Был турала уйлағайным инде, тик эшкә ашырырға форсат сығара алмай йөрөйөм. Хан ҡашына барғанда үлсәйемме әллә тигәйнем дә, хан янына тиҙ йөрөргә кәрәк булғас, тыйылдым.

Заратустра, ғалимдың оҙаҡ өйләренә самалап, ултырып уҡ алды. Әммә яңылышҡан булып сыҡты. Факи үҙен өҙҙө лә елтләтә баҫып китеп барҙы әм оҙаҡламай кире килде. Ҡулына ниҙер тотҡайны.

– Бына иңә ике сағыт, – тип ондо Заратустраға. – Быларҙың ни өсөн кәрәклеген ин беләең. Эсенә ыу тултырып, ваҡыт үлсәгәйнек, иҫеңдәме?

– Эйе.

– Хәҙер юл үлсәйбеҙ.

– Ҡай ылайтып?

– Бына ошолай. Сағытты тултырғансы ыу ҡоябыҙ. Эйе, тиген.

– Эйе.

– Шунан бына ошо бауынан ин тота ың йә, бауҙы оҙонайтып, иңенә аҫа ың.

– Шунан.

– Артабан теге энә менән сағытты аҫтынан ипле генә тишәбеҙ. – Факи Заратустраға энә тотторҙо. – Әле тишмәй тор. Ауыл осонда тишербеҙ. Тишкәс, ыу аға башлай, әм еҙ атлап китә егеҙ. Ҡабаланмай ҙа, әммә яйламай ҙа атлай ығыҙ, ҡәҙимге юл аҙымы менән. Сағыттан ыу аҡҡанда нисә аҙым үткәнегеҙҙе анар ығыҙ. Төшөндөңмө?

– Төшөндөм. ананыҡ, ти. Шунан ни булды?

– Шунан бер сағыт үткәнсе еҙ күпме аҙым юл үткәнегеҙ билдәле була.

– Белдек тә, ти, ул нимәгә кәрәк?

– Ғалимдар ауылынан еҙҙекенә тиклем нисә сағыт ыу ағып бөтөр ине – шуны беләбеҙ. Йәғни шул юлды еҙ күпме ваҡытта үтә егеҙ.

– Беҙ уны былай ҙа беләбеҙ бит.

– Күпме?

— Мин унан ун тәүлек килдем. Сөнки гел шырлыҡ, әҙәм йөрөмәгән ерҙән барҙым. Лиагова биш көн килгән. Майыт уны өс көндә үткән.

— Бына күрҙеңме, бер үк юлды төрлөгөҙ төрлөсә йөрөй. Ә юл бер үк бит.

— Берлеген бер ҙә ул. Тик уны төрлө кеше төрлөсә йөрөй.

— Ана шул-шул. Ә беҙ инең менән ошо юлдың оҙонлоғон ғына үлсәй ҙә ҡуябыҙ. Ул саҡта бер үк араны кемдең күпме ваҡытта үткәнен бел әк, беҙ ул кешенең юлда ни эшләп йөрөгәнен өйләмә ә лә белә алабыҙ. Юлда ятып йоҡлағанмы, әллә йоҡламай атлағанмы?

— Ярар, аңланым. Әйҙә ауыл осона, ҡалғанын унда өйләр ең. Юҡ а ваҡыт үтә, беҙҙе лә йоҡлағанға анай башлар ың.

— Ә ә, шыртлай ыңмы? Ғалимдың эше ана шулай йоғонтоло була ул. — Факи ихлас көлдө.

Ауыл осона еткәс, туҡтанылар. Шунда ғына Заратустра кисәге эттең үҙе артынан эйәргәнен шәйләне.

— Хәбәргә әүрәп, ине онотоп китә яҙғанмын, — Заратустра эттең башынан ыйпаны. — Әйҙә, минән ҡалма. — Шунан ҡусты ына өндәште. — Майыт, ин этте ҡара, ҡалып ҡуйма ын. Ауырый ул, хәле саҡ-саҡ ҡына. Ә мин Факиҙың сағытын тотам.

— Тотам ғына түгел, ин сағыттан ыу ағып бөткәнсе нисә аҙым үткәнендә анарға тейеш ең.

— Ауылға еткәнсеме? Ул тиклем аҙымды анарға иҫәп белмәйем мин.

— Юҡ, әр аҙымды анай алмаҫ ың. Шуға күрә ошоноң кеүек тигеҙ, таҡыр ерҙә бер сағыт аҙымдарын иҫәплә, тауға менгәндә — йәнә бер, төшкәндә — өсөнсөгә, урмандан атлағанда — дүртенсегә. Бар ерҙә лә атлауы берҙәй түгел бит. Аҙаҡтан ана шул дүрт сағыт аҙымдарын бергә ҡуш та йәнә дүрткә бүл. өҙөмтәлә бер сағыт ыу аҡҡансы уҙған уртаса араны анап сығарыр ың.

— Эйе шул. Беҙ ул араны сағытара-саҡыра тиербеҙ.

— Ярар, шулай бул ын.

— Әйҙә, хәйерле юлға. Тиш сағытты. Туҡта әле.

— Ни булды?

— Ә бынан ауылға тиклем нисә саҡыра икәнен ҡайҙан белә ең?

— Ә-ә, уны ын әйтеп бөтмәгәнмен икән. Беҙ бында көн айын сағытты анап торабыҙ бит. Ҡояш ҡалҡҡандан ҡояш байығансы нисә сағыт үткәнен белеп торабыҙ. Ә еҙ шул саҡта ис шик еҙ юлда булығыҙ. Шунан сығып беҙ еҙ күпме юл үткәнегеҙҙе анап сығарырбыҙ.

— Нисек анай ың? Беҙҙең нисә көн юлда йөрөгәндә ин ҡайҙан белә ең?

— Бәй, ин кире килә ең бит. Шунда әйтер ең. Бик тә бик булма а, үҙегеҙҙең ауылдағы рағанға әйт. Ул барыбер Рабағаға еткерә. Ә тегенең үҙе бында килә ул.

— Ярар. Рағанға әйтеп торғансы, үҙебеҙ ҙә анап сығарабыҙ уны. Тик бөгөн ҡояш ҡалҡҡаны бирле юлда түгелбеҙ бит. Шуға ҡояштан уң күпме ваҡыт үткәнен әйтеп ебәр.

— Күпме ваҡыт үтте ҡояштан уң? — тип ҡысҡырҙы Факи, ҡоролма яғына ҡарап.

— Ике сағыт та ун биш мөйәт! — тигән яуап килде.

— Ишеттеңме?

— Ишеттем.

— Улай а, хәйерле юлға. Мин ине көтәм, Заратустра. Ҡасан кил әң дә көтәм.

Заратустра ҡулдарын ҡояшҡа табан күтәрҙе лә бары ы ла ишетерлек итеп өндәште:

— Бөйөк А сура! — Ҡай ы берҙә Заратустра иркәләп А ура урынына А сура тип тә ҡуйғылай. — Беҙ алыҫ юлға ҡуҙғалдыҡ. Йондоҙҙарыңдың уңай тороуын ҡара - аңсы! Беҙҙең ниәтебеҙ изге, беҙ ҡара уй менән йөрөмәйбеҙ. — Заратустра ғибәҙәтен бөтөрҙө лә ыу тултырылған сағыттың аҫтына энә менән төрткәйне, ыу

атылып китте. – Ҡуҙғалдыҡ. Бер, ике, өс...

Тәүҙәрәк аҙым анап атлау ирмәк ине, тора-бара ялҡыта башланы, уңғараҡ сей елкәгә тейҙе. Иң алдан Майыт мөңгөрләне:

– Аҙым анап бар аҡ, ҡасан ҡайтып етәбеҙ уң?

– Факи Тайран үҙе үтенде бит. Фән өсөн кәрәк, – ҡырт киҫкәйне лә башта Заратустра, шунан үҙенә лә ҡыйын була башланы. Шул саҡта уға уй килде. Кеше бер нәмә эшлә ә, бар иғтибары, күрә ең, шуға йүнәлтелә. Ә ике эште бер юлы башҡарыу уға бик ҡыйын, йәғни иғтибар бер генә юҫыҡта бул а, өҙөмтә тиҙерәк тә, яҡшыраҡ та сыға. Ике сағыт ыу ағып бөтөүгә, былар тамам арыны, ял алырға ултырҙылар. Шунда Заратустра әлеге фекерен ҡысҡырып йомғаҡланы.

– Күп тә атламаныҡ, ә аяҡтар саҡ өйрәлеп бара. Бүтән саҡта был араны ғына ы та итмәй уҙа инек. Күрә ең, анап баҫыу икеләтә хәлде ала.

Ары а арыны, ҡәҙимгесәнән яйыраҡ бар а барҙы, әммә Заратустра аҙым анауҙы туҡтатманы. Факи ғалим ҡушҡанса, тигеҙ ерҙә лә, тауға үрләгәндә лә, арҡыуға төшкәндә лә юл үлсәнеләр. Уңайы тура килгән айын ике сағытҡа ыу тултырҙылар ҙа үлсәй бирҙеләр. Аҙна тигәндә үҙҙәренең ауылы ҡаршы ындағы тау түбә енә күтәрелделәр ҙә тағы ергә сүгәләнеләр. Заратустра, янында ятҡан эттең башынан ыйпай- ыйпай, бер аҙ кеше торлаҡтарына ҡарап ултырҙы.

"Ауылым шул уҡ ерҙә, бер үҙгәреш еҙ..." – тине эстән генә. Ҡысҡырып әйт ә, юлдаштары көләр ымаҡ. Әммә Майыт менән Лиагова ла шундай уҡ уйҙа ине. Күрә ең, бер былар ғына түгел, бүтән кеше лә йыраҡ ерҙән ҡайт а, тыуған ерендә үҙгәреш эҙләй. Ул юҡ саҡта нимә бул а ла бүтән төргә инергә тейеш кеүек тойола инде.

Ауыл күҙгә ташланып торған үҙгәреш кисермәгәйне, шуны ығымталағас, Майыт орай ы итте:

– Күпме юл үттек инде беҙ?

– Был юлды ин ғалимдар яғына барғанда дүрт көн атлаған ың, ә беҙ алты көн килдек. Юл оҙонаймаған да, ҡыҫҡармаған да. Тимәк, беҙҙең тиҙлек төрлөсә. Тигеҙҙә әтьюҡ, үргә яйыраҡ, түбәнгә шәберәк атланыҡ. Факи Тайран өйрәткәнсә, бар үлсәнгән юлдағы аҙым анын ыуы аҡҡан сағыт анына бүл әң, 1 мең сама ы аҙым килеп сыға. Йәғни 1 сағытара мең аҙымға тиң.

– Ә нисә сағытара уҙҙыҡ уң?

– Ике йөҙ ҙә илле дүрт сағытара.

– Аҡтырнаҡ, – тип өндәште Майыт, – ана күпме ер юртҡан ың. Ә башта көскә килә инең.

Заратустра, этте иркәләй-иркәләй, унының урынына яуапланы:

– Аҡтырнаҡ та арыны инде. Ана бит, йыш-йыш улыш алып ята. Ярар, күбенә түҙгәнде, аҙына түҙер ең. Хәҙер ине Догдова инәйең тәмле ризыҡ менән ыйлар.

Тау түбәненә йә әт-йә әт атлап, ауыл урамына инде юлсылар. Осраған кешеләргә ҡысҡырып сәләм бирҙеләр. Тик, ни эшләптер, улар ғына шул уҡ рәүештә яуапламаны. Йә баш ҡағып ҡына ҡуйҙылар, йә " аумы ың"дан уҙманылар. Сәйер енеберәк ҡуйҙы шулайтҡанға Заратустра, бүтән саҡта ауылдаштары ҡысҡырғанға ҡысҡырып, шым өндәшкәнгә тауыш күтәрмәй генә иҫәнләшә торғайны. Бөгөн әллә ни эшләйҙәр... Әммә сәбәбен төпсөнөп торманы. Үҙе йәшәгән йорт ихата ына инделәр. Бында ла аптыратырлыраҡ күренешкә юлыҡтылар. Аға ының ҡатыны – Заратустраның еңгә е, быларҙы күргәс, өйгә керҙе лә китте, хатта сәләм дә биреп торманы. Быға хайран итеп торған юлсылар иҫ йыйырға ла өлгөрмәне, әле генә еңгә е күҙҙән юғалған ишектән аға ы күренде. Теге е ғәҙәтенсә әлмәк кенә баҫып килеп күреште.

– аумы ығыҙ, нисек ҡайтып еттегеҙ? – тип белеште. – Арыған ығыҙ, асыҡҡан ығыҙҙыр. Хәҙер еңгәң аш йүнәтер.

– Рәхмәт, ағай, беҙ тиҙерәк әсәй янына инәйек. Унын сәйен эсербеҙ.

– Эй, ҡустым, ҡустым. Ауыр бул а ла әйтәйем. Өлгөрә алманығыҙ шул. Әсәй беҙҙе ташлап китеп барҙы.

– Ҡайҙа?

– Кисә ерләнек.

– А -а , кит, булмаҫтайҙы...

– Булды шул.

– Беҙ бит ул тип атлығып ҡайтып киләбеҙ.

– Ул да унғы улышына тиклем ин тип ятты. Көтөп еткерә алманы.

Заратустра йөрәген тотто ла ергә сүгәләне.

– Ай, әсәй, әсәй, ни эшләнем уң мин? Аҙым анап йөрөмә әм, ҡайтып күрә алаым булған бит. А , А ура Мазда, исма ам, ин дә иҫкәртмәнең.

– Бәлки, әшкәрткәндер ҙә,– аға ы Хоҙайға үпкә үҙен кире ҡаҡмаҡ итте. – Элекке көн эңерҙә, ҡараңғы төшөп бөттө тигәндә, көнсығыш яҡта күк йөҙө ҡапыл яҡтырып китте. инең йондоҙоң икән был, тип белдек беҙ. инең ҡайтып етеүеңде А ура хәбәр итте, тип уйланыҡ.

– Күк йөҙөнөң ағарғанын мин дә шәйләгәйнем. Әммә Заратустра ағайға әйтеп торманым, – тип үҙгә ҡатнашты Майыт. – Еңгә менән улар серемгә киткәйнеләр инде.

"Еңгә" тигәнгә Заратустраның аға ы ялт боролоп Лиаговаға ҡараны. Тегене е ҡарашын баҫты. Теге Лиәнең йыуанайып барған биленә күҙ алды ла эштең ниҙә икәнлеген шунда уҡ аңланы.

– Ярар, берәү тыумай, икенсе е ҡалмай, тигән кеүек, ҡуша йәшәй башлағас ығыҙ, яҡшы булған. Әйҙәгеҙ, юлдан хәл алығыҙ ҙа атайҙан, әсәйҙән ҡалған өйҙө биләр егеҙ. Хәҙер ул еҙҙеке булыр.

Заратустра ла, Лиагова ла, баш баҫып, өлкән ир артынан эйәрҙе, яҙмыштарына күнде. Тик Догдованың үлеме Заратустраны хандар нәҫеле менән бәйләп торған унғы ептең өҙөлөүе икәнен генә белмәнеләр. Заратустраны атай, әсә е менән бәйләр йәнә бер еп бар ҙа бит, тик унын осо сығырмы уң – берәү ҙә өҙөп кенә әйтә алмаҫ, хатта күрәҙәлек тә итмәҫ.

18

Үлгән артынан үлеп булмай. Ҡайғы нисек кенә оло тойол а ла, яйлап үтә, кеше күнеле ыуына, бүтән хәсрәт йә шатлыҡ элекке ен баҫып китә. Догдованың үлемен Заратустра менән Лиагова ауыр кисерҙе. Ярай әле, туғандары бар, улар был икәүҙе яңғыҙын ҡалдырмаҫҡа тырышты. Өйҙән-өйгә йөрөп ризыҡ уртаҡлаштылар, Заратустраның ситтә күргән-ишеткәндәрен ораштылар. Ғалимдар ауылындағы хәлдәрҙе лә, хандар менән көрәшеүен дә өйләне ул. уғыш яланына етә яҙыуын да ҡалдырманы. Тик Албашҡорттоң үҙен сисендереп ҡарауын ғына өндәшмәне. Ниңәлер был хаҡта өйләге е килмәне, күңелендә бер төйөр булды ла торҙо Албашҡорттоң ғына түгел, Вишпасты хандың да шыр сисендереп тикшереүе. Шуға юл хикәйәттәренән быны ын төшөрөп ҡалдыра килде. Өҫтәүенә, анау саҡта Албашҡорт: "Был турала бүтәндәрҙең белмәүе хәйерле," – тип киҫәткәйне бит.

Унын ҡарауы, Заратустра А ура Мазда әм бүтән хоҙайҙар менән көрәшеүе тураында яйлап, тәфсирләп теҙҙе. Үҙе өйләне, үҙе янындағы әр кешене күҙәтә ултырҙы. үҙҙәренең кешеләргә нисек тәьҫир итеүен белергә самаланы. Теге саҡ Яйыҡ буйында Факи, унын ҡатыны әм Лиагова нисек тыңлаған бул а, бында ла Заратустраның өйләгәндәрен ауыҙ асып тыңланылар, әммә бер үҙ менән дә кире лә ҡаҡманылар, хуплап та ултырманылар.

Ошондай табындарҙың бере ендә ишек ҡаҡтылар.

– Әйҙүк, раған, беҙҙең менән ҡуша ризыҡ ей, – ауылдың рағаны инде, хужа ырғып торҙо.

– Рөхсәт бул а, ултырам, – тине инеүсе. – Бер юлы Заратустра ағай менән дә танышып китермен.

– Мин иңә ағай буламмы?

– Ағай ыңдыр, тимен. Минән олораҡ ың, өйләнгән ең. Ер- ыуҙы ла күп гиҙгән ең, ундай кешегә мин тиңем тип әйтә алмайым.

– Ә бит ин – раған. Билдәләп ҡуйылған кеше.

– Вазифа килә лә китә ул. Кеше ҡала.

Был раған аҡыллыға оҡшаған, тип ығымталаны Заратустра. Элекке е аҡырыпбаҡырыуҙан уҙмай торғайны, быны ы улай түгел.

Өй хужа ы рағанды түргә әйҙүкләне. Хәл-әхүәл белешә- ораша ултырғас, Заратустраның ҡусты ы Майыт әллә ҡасандан бирле күңелен өйкәгән орауын бирҙе.

– Ағай, ин әллә ҡасан уҡ, донъяның бар булыуын өйләрмен, тигәйнең.

– Эйе, әйткәйнем шул. Был турала өйләүҙе миңә Хормузд үҙе ҡушҡайны, үҙебеҙҙең лөғәткә яҡын...

– А ура Мазданы ин Хормузд ти еңме, ағай? – Майыт йәнә бер орау биреп өлгөрҙө.

– А ура Мазданы шулай тип тә әйткеләйбеҙ бит.

– Үҙебеҙҙең лөғәткә тағы ла яҡынайтып, Хөрмәт тиергә лә була.

– Булалыр. Исемен бүтәнсәрәк әйткәндәренән А ура Мазданың үҙлеге боҙолмаҫ. Тик уға хөрмәтләп, кәм етмәй, үҙеңә тиң күреп өндәшеү шарт. Күктәге бөйөк хужабыҙ үҙе лә шулай уҡ яуаплаясаҡ.

– Ә иңә нимә тине?

Әңгәмә ике туған ара ында дауам итте. Бүтәндәр, шул иҫәптән раған да, алмаштилмәш быларға ҡараш күсереп, өндәшмәй генә тыңланылар.

– Хормузд, Майыт әйтмешләй, Хөрмәт мине үҙ янына ултыртты ла, иңемдән ҡосаҡлап: “Миңә орауың бармы?” – тине. Мин әле генә Майыт ораған менән ҡыҙыҡ ындым. “ еҙ йәшәгән Ер шарын ғына түгел, Йы андағы барлыҡ йондоҙ әм планеталарҙы мин бар иттем, – тине Хормузд. – Бәлки, мин уларҙы эшләмәгән дә булыр инем, быға мине Ахриман, йәғни Ахрызаман мәжбүр итте.” Бына үҙҙең асығы.

– Нисек? – Йәнә Майыт ҡыҫылды. – Хөрмәт быларҙы үҙ ирке менән эшләмәгәнме ни?

– Үҙ ирке, үҙ ирке менән. Ишетер ең был турала ла. Бушҡа елгән ҡойон кеүек, алдан сапмай тор. – Заратустраның ошо киҫәтеүе етте. Майыт үтә күп орау менән аға ын маҙа ыҙламай башланы.

– Әйтте: “Меңәр йылдар элек Бөйөк йы анда беҙ Ахрызаман менән икәүҙәнikәү булдыҡ. Минең донъям яҡтылыҡ ине. Мин уны әр саҡ күңел нурҙарым менән ҡойондороп торҙом, әм мәңгелек яҡты булды. Унда тыныс, унда ил, унда рәхәт ине. Әммә минең донъямдан түбән ик еҙ-сик еҙ ҡараңғылыҡ барлығын да күрә торҙом. Унда минең нурҙарым үтеп етмәне. Ни сәбәптән нурҙарым тотолоп ҡала икән, тип уйланып торғанда, ҡараңғылыҡта ниндәйҙер шәүлә ҡуҙғалғандай итте. Баҡ ам, был Ахрызаман донъя ы икән...”

Рағандың килеп инеүе табында күптән барған үҙҙе бер аҙға ғына өҙҙө, әммә Заратустра янында ултырған өлтөк аҡаллы ир кеше ҡулына ҡыуыш ҡабыҡтан я алып, өҫтөнә ат ҡылынан сиртмәләр ҡуйылған думбыраны алғас, киренән ялғанды.

– Мин еҙгә үҙебеҙҙең яҡта йырланғанса “Урал”ды өләңләп бирәм, – тине думбырасы.

Тик ситкәрәк ултырған берәү ҡырыҫ үҙ ҡыҫтырҙы:

– Дөрөҫ түгел инең “Урал”ың. Беҙҙең ырыуҙа уның исемен Гилгәмеш тиҙәр, “Урал”ды еҙ беҙҙән алған ығыҙ.

– Туҡта-туҡта, ҡустым, – Заратустра тегене бүлдерә алды. – Беҙ тәүҙә

“Урал”ды ишетәйек, шунан ин “Гилгәмеш”те әйтер еҥ. Берәү ҙә тыймай бит. Ваҡытыбыҙ иркен, икегеҙгә лә үҙ етер, – тине лә рағанға ҡарап күҙ ҡыҫты. Йәнә е: “ инеҥ эшеҥде мин башҡарып ултырам. Йәмғиәттә тәртип булдырыу, табында олоно хөрмәтләүҙе ойоштороу – инеҥ эшеҥ”. Ысынлап та шулай ине. Ығы-зығыға юл ҡуймау, ғөрөф-ғәҙәттеҥ теүәл үтәлешен күҙәтеү рағанға йөкмәтелгәйне. Шуға быны ыныҥ йөҙөнә ҡыҙыллыҡ йүгерҙе, башын аҫҡа эйҙе.

Ә думбырасы, табындашыныҥ ни әйткәнен ишетмәгәндәй булып, амаҡлап ебәрҙе:

*Батша ҡыҙы, аралап,*
*Бер егетте айлаған,*
*Ара ынан оҡшарҙай*
*Бер егет тә тапмаған,*
*Аҙаҡ сиктә, яҡынлап,*
*Уралға килеп еткән, ти.*
*Туҡтап тороп шул ерҙә,*
*Уралға күҙ теккән, ти;*
*Ҡулына алып бер алма*
*Уға бүләк иткән, ти.*
*Батша ҡыҙы майҙанда*
*Башҡа айлап тормаған.*
*Уралды алып барырға*
*Бер яранға ымлаған.*
*Ҡыҙ тәхеткә ултырған,*
*Тағы ҡолдан күтәртеп,*
*арайына юлланған.*
*“Батша ҡыҙы өйҙө бит,*
*Батша кейәүе булды бит!” –*
*Тип бары ы шау килеп,*
*Ярандары зыу килеп,*
*Халыҡты ситкә тарҡатып:*
*“Әйҙә арайға, егет,*
*Батша ҡыҙы көтә,” – тип,*
*Уралға йола аҥлатып,*
*Бер яраны шул саҡта*
*Юл башларға булған, ти.*

Думбырасы ҡылды сиртеүҙән туҡтап, үҙе лә шымғайны, Заратустра уны хуплап ҡул сабып ебәрҙе:

– Ай, мәртәбәҥ артҡыры, бигерәк оҫта әйттеҥ бит “Урал”ды. – Шунан бая ҡаршы сығып та, хәҙер шым ғына ултырған икенсе йыраусыға боролдо. – Думбыра бирегеҙ әле егеткә, “Гилгәмеш”те ишеттерәм, тигәйне лә ә.

Киҫкен хәрәкәт менән тартып алды теге үҙенә онолған уйын ҡоралын. Өйгә моҥло әм күҥелгә үтеп инерлек тауыш яҥғыраны:

– Тыҥлағыҙ, беҙҙеҥ Юрматыла ошолайыраҡ әйтәләр уны:

*...Ул үҙен генә түгел, хатта уҡ- аҙағын да ялтыратҡансы таҙартҡан,*
*Маҥғайына төшкән сәсте арҡа ына ул атҡан,*
*Керле бар нәмәне ташлап, таҙа ына кейенгән,*
*Иҥенә елән алған әм билен ҡыҫып быуған.*
*өлөк кеүек сибәр егеткә әүерелгән Гилгәмеш,*
*Уныҥ матурлығы Иштар ханбикәне хайран итте.*
*“Гилгәмеш, ирем бул минеҥ, – тине, –*
*Тәнеҥдеҥ ғәйрәтен бүләк ит миҥә.*
*ин – ир, мин ҡатын булырмын!*

*иңә алтын арба әҙерләтермен,*
*Алтын тәгәрмәсле, электра тәртәле булыр,*
*Ҡеүәтле әм көслө үгеҙҙәр егерҙәр.*
*Беҙҙең өйгә ағастар сәскә атҡанда ин.*
*Өйгә аяҡ баҫыуың булыр,*
*Туп а ла, тәхет тә инең табаныңды үбер,*
*Дәүләтбай ҙа, батшалар ҙа, ҡағандар ҙа*
*инең алда теҙләнеп торор,*
*иңә тиеп тауҙар әм яландар бүләген килтерер,*
*инең кәзәләрең өс, арыҡтарың икешәр бәрәс тыуҙырыр,*
*инең йөклө ишәгең атты ла уҙып китер,*
*инең арбаңа егелгән аттарҙан да етеҙе булмаҫ,*
*инең үгеҙҙәрең тейәлгән йөктө тоймаҫ...*

Думбыра ла, амаҡ та ҡапыл тынды. Табын ни тиергә белмәй ултырҙы бер аҙ. Шунан ғына Заратустра, алдындағы кәсәне бушатҡас, әйтеп ҡуйҙы:

– Ҡыйыу булған икән ҡыҙҙар борон, үҙҙәренә ирҙе бар халыҡ алдында айлаған.

– Уның ин ҡыҙығы шунда, – раған үҙгә ҡушылды. – Урал да, Гилгәмеш тә хан балаларының тәкдименә ризалашмаған, сибәркәйҙәргә ир булыуҙан баш тартҡан.

– Иртәктәрҙе ин дә ишеткән ең икән быға са? – Заратустра рағанға өндәште.

– Эйе, ике ен дә ишеткәнем бар. Бере ен – юрматыла, икенсе ен ҡарыла әйтәләр.

– Үҙең нисек уйлай ың, кем дөрөҫ әйтә уң? Ана бит, егеттәр, минеке дөрөҫ, инеке – түгел, тип бере е икенсе енең өҫтөнә менеп бара.

– Бик ҡыйын орау ҡуйҙың, Заратустра ағай. Урал менән Гилгәмеш ваҡиғалары бик тә борон булған. Бар тирә-яҡта туфан ыуы тулҡынланған саҡ бит әле, хатта беҙ йәшәгән Ирәндек тауы ла булмаған. Шуға кемдең әйткәне – хаҡ, кемдеке нахаҡ икәнлеген белеп булмайҙыр. Бәлки, ике е лә хаҡтыр.

Бик аҡыллы егет икән был, тип фекер төйнәне Заратустра раған тура ында. Төптән уйлай, уйлағанын матурлап, еренә еткереп әйтә белә.

Заратустраның фекерен бүлделәр. Яратҡан ҡусты ы Майыт икән.

– Ағай, әле генә беҙ ишеткән Урал менән Гилгәмеш тура ындағы хәлдәр ысын булдымы икән? Шуға бер ҙә генә ышанғы килмәй. Урал бер үҙе шул тиклем ажда а менән дейеүҙәрҙе юҡ иткән, хатта уларҙан тауҙар барлыҡҡа килгән, тиҙәр. Кеше шул тиклем ғифриткә ҡаршы тора алырлыҡ көслө буламы ни?

– Кешенең көсө, ҡустым, сик еҙ. Ғифритте лә, унан дәүерәктәрен дә еңә ала. Бик борон кеше әлеге кеүек булмаған бит. Ер йөҙөнә тәүге кеше А ура Мазда тарафынан ебәрелгән. Хормузд тәүҙә уны ниндәй сүрәткә индерергә белмәй аҙап торған. Шунан, ер өҫтөндә хәрәкәтләнеүе еңел бул ын тип, ап-аҡ болот кеүегерәк хасил иткән. Ҡул-аяҡ, баш тип аталған ағзалары ла бик үк беленеп тормаған. Күктә болот нисек күсә, шулай йөрөй биргән. Ул ашамаған, эсмәгән, беҙҙең кеүек ҡысҡырып өйләшмәгән. Ә уйы, фекерләүе көслө булған. Ул туранан-тура А ура Мазда йә фәрештәләр менән өйләшеп торған, үҙе белмәгәнде йә уға кәрәкте уларҙан ораған. Ә Йы анда Ер, Ҡояш, Ай, бүтән йондоҙҙарҙағы тереклек, барса йән эйә е өсөн уртаҡ Аҡыл үҙәге бар, ти. Кешеме, бүтәнме үҙенә кәрәкте шунан белә ала икән.

– ы, нисек итеп унан бел ен? Беҙ бына Үҙәктән орай алмайбыҙ ҙа а?

– ин, ҡустым, минән өйләткең кил ә, зин ар, аҙ ғына шым ултыр. Юҡ а, фекерҙе бутай ың.

Егет башын түбән эйҙе. Бүтәндәрҙең дә ошондайыраҡ ораужары тел осонда ғына ине – Заратустраның киҫәтеүенән уң шым булдылар.

– Хөрмәт, йәғни А ура Мазда инде кешегә ер өҫтөндә болот кеүек хәрә-

кәтләнеүе бик ҡыйын икәнлеген күргәс, уның тәнен тығыҙландырырға булған. Уның ҡул-аяғы, башы билдәләнгән, йөҙөндә ике күҙ, соңҡа ында бер күҙ я алған, кәүҙә е кесерәйгән. Хәҙер ул Йы андағы Аҡыл үҙәге менән соңҡалағы күҙ аша хәбәрләшергә тотонған. Йәшәй-йәшәй, ти, был, ерҙә үҙе кеүек кешеләрҙе үрсетә, үҙенә тормош өсөн уңайлыраҡ урындар таба. Ул саҡта кешенең балалары әлеге кеүек әсә күкрәгендә йөрөп яралмаған, кеше үҙенең тән өлөшөн тотоп өҙгән дә ташлаған. Шунан яңы кеше үҫкән, ойошҡан.

Ошо рәүешле бик күп йылдар үткән, әм кешенең кәүҙә е ҡатҡыллана барған, елгә елберҙәп торған аяҡ-ҡул нығынған, тора-бара тарамышланған улар, шунан кимерсәк үҫә башлаған. Кеше ерҙә йәшәүгә нығыраҡ күнеккән, йыртҡыстарҙан ҡасырға, тау-таш хәүефенән аҡланырға өйрәнгән. Быны күреп торған Хөрмәт, йәғни А ура Мазда кешенең үҙендә аҡыл сатҡылары тыуғанына өйөнгән. Шунан ул әйткән, ти: ин күберәк үҙең уйла, тормошоңдо яҡшыртыу хәстәрен күр, үҙеңдең әләтең етмәгәндә генә Аҡыл үҙәгенә әйт.

Тағы бик күп дәүерҙәр уҙған. Кешенең тәне ҡатҡылланған айын, уны үрсетеү ҡыйынлаша барған. Сөнки ул бала ын үҙ тәнен өҙөп алып я ай бит. Тәнеңде киҫеп йә йолҡоп ҡара әле, ана нисек ауырта!

Шунан А ура Мазда кешене ике енеслегә бүлгән. Берәүҙәре – ир, икенселәре – ҡатын. Ирҙең кеше ярата торған мәне шыйыҡса ын ғәүрәтенә алған. Ә шыйыҡсаны А ура Мазда үҙенең иң яҡты нурҙарынан әм иң саф ауа ынан ҡойған. Бына шуға ла ирлек шыйыҡса ынан я алған бала бик матур, бик татлы була. Ә кешене ялғытыу әм тәүге бәпләү урыны итеп Хөрмәт ҡатындың ҡарынын айлаған да, барығыҙ, үрсегеҙ, йәшәгеҙ, тигән. Ошо мәлдән кешенең өсөнсө быуыны барлыҡҡа килә. Был ваҡытта уларҙың кәүҙә е бик оҙон, күҙҙәре өсәү, ауыҙ ыҙ була. Сөнки улар ашамай, эсмәй, Хөрмәт ебәргән нурҙарҙан көс ала.

Тағы күп, бик күп йыл үтә. Ер йөҙөндә кеше ныҡ үрсей. Инде улар ҡорола ла, ыуҙа ла, аҙлыҡта ла йәшәргә күнегә, тик ауала ғына ҡош ымаҡ осмай. Быныӊ уларға кәрәге лә юҡ. Сөнки күккә күтәрелергә телә әләр, әлеге өсөнсө күҙ менән ҡарашын Йы андың телә ә ниндәй нөктә енә йүнәлтә әм йәне шунда оса, ә тәне ерҙә йәнден ҡайтҡанын көтөп тора. Йән Йы анда үҙенә күпме кәрәк – шул тиклем йөрөй ала: бер сағытмы, бер йылмы, әллә мең-мең йылмы.

– Ул ваҡытта кешенең тәне тик кенә ятамы, әллә ул да йөрөймө? – Әңгәмәселәрҙең бере е түҙмәне, орауын бирҙе.

– Ни эшләп йөрө өн инде, әлбиттә, тик ята, – икенсе кеше Заратустра урынына яуап биреп тә ҡуйҙы. – Ана, Заратустраның үҙен күрмәнеңме ни? Юлбарыҫ менән өҙөшкәндән уң өс көн, өс төн тик ятты. Торғоҙ аң да, ятҡыр аң да, семте әң дә, уҡ аң да белмәне. Башын ҡырҡып ал – иҙмәҫ ине.

– ин бигерәк... – йәнә берәү үҙгә инде. Заратустраны оҙаҡ тыңлағандан уң тел сарлап алыу форсатына шат ине шикелле улар. – Баш ыҙ кәүҙәгә йәне нисек ҡайт ын, ти?

– Ә шулай ҙа әйт әле, Заратустра, – быға са өндәшмәй ултырған өлкән аға ы үтенде, – юлбарыҫ менән алышҡандан уң инә үҙ йәнең ҡайттымы, әллә бүтәнме? Шунан уң ин бөтөнләй икенсе кешегә әүерелдең бит. А ура Мазда тура ында бер үҙ ҙә әйтмәгән бәндә ике үҙҙең бере ендә А ура, Хормузд, Хөрмәт тип кенә тора.

Заратустра аҫтан ғына йылмайҙы ла тыныс ҡына яуапланы:

– Ағай-эне, йәне күккә олғашҡанда тәне көтөп торған кешеләр беҙ түгел. Улар беҙгә саҡлы бик күп мең йылдар әүәл йәшәгән. Кеше ерҙә барлыҡҡа килгәс, улар өсөнсө быуын булған, ә беҙ бишенсе е. Шуға күрә уларҙың йәненең күккә гиҙеүен беҙҙекенә тиңләргә ярамай.

Тыңлаусыларҙы яуап ҡәнәғәтләндермәне.

– Ярар, беҙҙең менән улар ара ында мең-мең йыл булған, ти. Шул дәүерҙә ни булған да, йән тәндән айырылыуын туҡтатҡанмы ни?

– Туҡтаған, ти әң дә, тимә әң дә була.

– Нисек инде улай?

– Кешенең тәне тығыҙлана килә, әлеге өйәктәр урынына кимерсәк үҫеп, ит ҡунғас, был тәнде хәрәкәтләндерер өсөн туҡтау ыҙ көс кәрәк була. Шул саҡта А ура Мазда уға ауыҙ, танау, эс-ҡарын ҡуя, ашап торорға ҡуша. Ошонан бирле кешенең төп хәстәренең бере е – үҙенә аҙыҡ хәстәрләү. Ризыҡ табыу, уны төрләндереү, тәмләндереү өсөн әллә нимәләр уйлап табып бөтә әҙәми зат. Шуны күргән Хөрмәт әйтте, ти: “ Кеше, ин хәҙер үҙ аллы йәшәргә өйрәндең, әр нәмә ҡулыңдан килә. Үҙеңдең аҡылың бар. Үҙеңдеке генә етмә ә, Йы андағы Аҡыл үҙәге әр саҡ инең ҡарамаҡта. Кинәнеп йәшә.”

Ысынлап та, асыл тормош оҙаҡ дауам итә. Ер йөҙөндә лә, бар Йы анда ла ниндәй генә йән булма ын, рәхәтләнеп йәшәй. Бер ҡайғы, бер хәүеф, бер йәберләү юҡ. Әммә мәңге шулай дауам итә алмай. Был турала бөйөк Мазда белә. Яҡты Йыандың сигендә ҡараңғылыҡ упҡыны башланғанын, шул упҡын Ахриман-Ахрызаман донъя ы икәнлеген дә белә Хөрмәт.

Ул бер тапҡыр Ахрызаманды үҙенең доға ы менән иҫ еҙ итеп ҡолатҡайны. Өс мең йыл ушына килә алмай ята Ахрызаман. Өс мең йыл бик күп ғүмер бул а ла, барыбер үтә. Шул осорҙа А ура Мазда дошманына ҡаршы Яҡты донъяға үтеп инә алмаҫтай кәртәләр ҡора. Ул иң алдан Мәңгене төҙөй. Мәңгелә уй ҙа, хәрәкәт тә, иҙемләү ҙә юҡ. Унда бөтә е лә тик рәхәт, тик рәхәт кенә. Шунан Хөрмәт Ахрызаманға әйтә: “Күрә еңме, мин ниндәй матур Мәңге эшләнем? Ысынлап та гүзәл бит! ин дә уны маҡта, унан ҡәнәғәт бул. Ул сағында ин үҙ, мин үҙ донъямда тыныс ҡына көн күрербеҙ.” Маҡтарға теләмәй Ахриман Мазданың Мәңге ен. Дошманы тура ында яҡшы үҙ әйтеүҙе түбәнселек анай. “Мин инең Мәңгеңде маҡтамау ғына түгел, емереп ташлаясаҡмын. ин я аганды мин инең үҙеңә үк ҡаршы ҡотортасаҡмын, улар ине күрә алмаясаҡ, ә мине, кире енсә, яратасаҡ,” – тип яуаплай Ахрызаман.

Әгәр ошолай дошманлашыу туҡтау ыҙ бар а, яйлап ике донъяның ҡушылырын әм Яҡты донъяның әкренләп үнерен, ватылырын белә А ура Мазда. Шуға күрә ул Ахрызаманға сикле ваҡыт – туғыҙ мең йыл эсендә уғышырға тәҡдим итә. Ошо дәүерҙә кем еңә, бар донъя уныҡы була. Ҡара көс Хөрмәттең ни уйлап шулай тәҡдим иткәнен иҙмәй. Ә Хөрмәт өс мең йыл үҙенең өҫтөнлөгө, алдағы өс мең – яман менән яҡшылыҡтың үҙ-ара ҡушыла-ҡушыла уғышырын әм тағы өс меңендә Ахрызамандың көс өҙләнеп, ғәйрәте сигеп, донъянан атып бәрелерен белә.

Көрәш башланғас та, А ура Мазда үҙенең иң беренсе әм иң төп 21 үҙҙән торған доға ын уҡый. Доғаның көсө шул тиклем ҡөҙрәтле әм дошманына ул бик ныҡ тәьҫир итә. Ахрызаман, доғаны ишетеү менән, ҡалтырана, тәүҙә теҙләнә, шунан йығылып, уштан яҙа. Ә уның ҡуштандары: ажда а әм дейеүҙәр, ен әм пәрейҙәр тырым-тырағай ҡасып бөтә.

А ура Мазда шул арала яңы донъя төҙөй башлай. Нәмә донъя ы күңел донъя ы менән үрелеп бар ын, тип уйлай Хөрмәт. Был донъя тереклекте дошмандан аҡлаын, шул уҡ ваҡытта Ахрызаманға ҡапҡан да бул ын, ти.

Иң алдан ул Күкте хасил итә. Ялтырап торған үтә күренмәле тимерҙән йомортҡа рәүешендә төҙөй Күкте. Уның иң бейек нөктә е Сик еҙ Нурҙа ята, ә был донъя уның эсендә ҡала, Күктең иңе буйына, буйы бейеклегенә, бейеклеге тәрәнлегенә тиң. Күккә А ура Мазда 12 йондоҙлоҡ ҡуя, былардан тыш алты миллион дүрт йөҙ ик ән мең вағыраҡ йондоҙ сәсә. Күктәге бар эште күҙәтеп, йүнәтеп тороуҙы Ыуары фәрештәгә йөкмәтә.

Шунан Хөрмәт күк есеменән ыу барлыҡҡа килтерә лә уға ярҙамға ел, ямғыр, томан менән ҡар булдыра. ыу фәрештә е итеп ыу ауаны ҡуя.

Өсөнсө итеп А ура Мазда Ерҙе я ай. Ерҙе түңәрәк әм Күктең урта ында осоп йөрөрлөк итә. Уның бер өлөшөн ул – бик ҡаты ташҡа, икенсе ен – ҡомға, өсөнсө өн йомшаҡ балсыҡҡа оҡшата. Тәүҙә Ерҙең өҫтө шыма була, тауҙар ҙа, убалар ҙа, соҡор менән тарлауыҡтар ҙа булмай. Ерҙең иңе буйына, буйы тәрәнлегенә тиңләшә. Ерҙең эсенә Хөрмәт төрлө ҡаҙылма байлыҡтар: тимер, алтын, баҡыр а-ла, уларҙы тауҙар ара ына төрә. уңынан тауҙар ерҙең эсенән өҫкә сыға. Ерҙе ҡарап-күҙәтеп тороуҙы Хөрмәт үҙенең дауамы, яҡын ярҙамсыларының бере е Ермәй фәрештәгә ҡуша.

Ер яланғас булма ын өсөн А ура Мазда үҫемлектәр сәсә. Тәүҙә улар үксә бейеклек кенә булып үҫә. Үҫемлектәрҙең ҡабығы ла, ботағы ла, сәнске е лә булмай әле. Улар күтәрел ен, нығын ын өсөн ул ярҙамға Ут менән ыуҙы ебәрә. Тегеләрҙең көс-ҡеүәтен файҙаланып үҫемлектәрҙең бере е – үлән, икенсе е – ҡыуаҡ, өсөнсө ө ағас рәүешенә инеп үҫә әм ерҙең бар тарафын ҡаплай. Үҫемлектәргә баш итеп Ғүмерҙе ҡуя.

А ура Мазданың бишенсе ижад емеше, беренсе йән эйә е – Үгеҙ. Төнгө айҙай аҡ әм нур сәсеп торор мал була ул. Бейеклеге өс тер әк сама ы. Үгеҙгә ярҙамға йәнә Үҫемлек менән ыуҙы оҙата. Улар ике е бергә ҡушыл а, Үгеҙгә рәхәт булыу ғына түгел, көс-ғәйрәт тә ҡуна. Уға баш итеп Мәнеүҙе бирә. Үгеҙҙең торор урыны тип Ирәмәлде билдәләй.

Иң аҙаҡтан, алтынсы эш итеп, А ура Мазда Ғүмерҙе бар итә. Ҡояш кеүек нур сәсеп торған буйы дүрт тер әккә еткән, иңе буйына тиң кеше барлыҡҡа килтерә. Кешенең фәрештә е – яҡлаусы ы әм аҡлаусы ы А ура Мазда үҙе була.

– Ағай, ә ин Туранға тиклемге хәлдәрҙе лә өйләй торғайның. Шуны ҡабатла - аң, бәлки, бүтәндәргә лә ҡыҙыҡ күренер,ә?

– өйләргә була, – тип уҙҙы Заратустра. – Тик раған ҡустының үпкәләүе бар. Сөнки был тарихты улар бүтән төрлө төшөндөрә.

– Ә инеке башҡасамы? – Раған да яуап ыҙ ҡалманы.

– Башҡаса. Өҫтәүенә, ул минеке түгел, ә А ура Мазданың үҙенеке. Миңә ул үҙе бәйәнләне.

– Улай икән. А ура Мазда менән күрештеңме? – Раған ышанманы.

Заратустраны тыңлап ир-ат бөгөн оҙаҡ ултырҙы, сәй артынан сәй яңырҙы, ашъяулыҡтағы ризыҡ та бөттө. Бөгөнгө йыйын бүтән көндәрҙекенә оҡшаманы, ти әң дә ярай. Башҡа саҡтарҙа Заратустраның әсә е Догдованы иҫкә төшөрә, мәрхүмәне маҡтай, балаларын хөрмәтләй торғайнылар. Бөгөн бары ын да Заратустра үҙенең ауыҙына ҡаратты ла ҡуйҙы. Оҙон-оҙаҡ өйләне ул. Бары ы ла аңлап та бөтмәне Заратустраның тел төбөн. Әммә бер нәмәне яҡшы төшөндөләр: уларҙың ауылдашы Бөйөк Хоҙай А ура Мазда менән ин дә мин күрешеп йөрөй, әм уны Мазда үҙенең ерҙәге вәкиле итеп таный. әр хәлдә Заратустра үҙе шулай ти.

Кешеләр ашыҡмай ғына таралышты. Заратустра ла ҡайтырға ҡуҙғалғас, раған да торҙо. ый өсөн рәхмәт әйтеп, Заратустра артынан тышҡа сыҡты. Ҡояш байыған, офоҡҡа эңер яҡкан мәл ине. Көнсығыш яғы нығыраҡ ҡараңғыланған, унда киске йондоҙҙар ҙа йымылдаша инде. Раған тамаҡ ҡырҙы. Заратустра уның ниҙер әйтергә теләгәнен самалап туҡтаны. Раған үҙен борғолап торманы.

– Ағай, ин кешеләргә ҡотҡо сәсә ең, – тине.

– Рәхмәт, ҡустым. Аҡыллы булыуың өҫтөнә, тура үҙле лә икән ең.

Тегене е аптырап ҡалды. Төшөнмәне Заратустраның тәнҡитен.

– Минең нимә өйләгәнде Рабағаға әләкләргә йүгерер ең, тип уйлағайным. Ә ин шуны үҙемә әйтеп тора ың.

– Еткерергә өлгөрөрмөн. Уға әйтмәй минең сарам юҡ. Тик мин инең яңылышыуыңды күр әтергә теләгәйнем. Әле ин А ура Мазданың фәрештәләре тип беҙҙең хоҙайҙарҙың дәрәжә ен төшөрөп бөттөң. Имеш, А ура бары ына ла баш, ҡалғандар – уның хеҙмәтселәре. Ә ырыуҙарыбыҙҙың иң ауыр саҡта ярҙам орап өндәшә

торған уғыш, Ҡояш, Ашлыҡ, Ағас хоҙайҙарыбыҙ, дошманды еңергә ярҙамлашҡан Сыңрау торнабыҙ, кешеләр өйҙә юҡта уларҙың донъя ын аҡлаған Өй эйәбеҙ – бере е лә юҡ, йә булма а А ураның табан аҫтында ғына булып сығамы?

А ураны барыбыҙ ҙа хөрмәтләйбеҙ. Ул кешеләрҙе аҡлай әм яҡлай. Ләкин ул түгел бит бар ҡөҙрәтте лә үҙ иңенә алыусы. Ҡатын бәпесләгәндә бала ы арҡыры кил ә, А ура ярҙамлашамы ни? Мөхәббәт әм уның емешенең ни икәнен дә белмәгән көйө...

Йәш раған ҡыҙып-ҡыҙып үҙенең хаҡлығын раҫларға тырышты. Заратустра уны бүлдермәй тыңланы. Быңдай үҙҙе тәүгә генә ишетмәй бит инде. Уны тыңлаусыларға иң оҡшамағаны – А ураны ныҡ маҡтау. Ҡалған хоҙайҙарҙы кәм етә кеүек тойола уларға. Шуға яҡлашырға тотоналар. Әйтер ең, үҙҙәре фәрештә.

Заратустра, раҕанға ниҙер яуап бирерҙән элек, әңгәмәсе енең ҡаршы ына баҫып, арыу уҡ ваҡыт йөҙөнә текләп торҙо. Шунан ғына:

– Әйт әле, раған. Быңа ин, юғары даирәләргә яҡын йөрөгән, Рабағаның ышанысл аналған кеше е булараҡ, белә ендер: ярты йылдан элегерәк, Көнбайыш менән уғыш буласаҡ, тип ырыуҙарҙың бөтә енән дә, мәғдәнсе менән тимерсенән дә, игенсе менән малбағарҙан да тапҡан мөлкәтенең ярты ын тиерлек алымға йыйҙылар. Әммә уғыш булманы. Ялан яҡтары, күсмә халыҡ, кире енсә, беҙгә өжүм итте. Байтаҡтарҙың малын, иретелгән мәғдәнен, я алған ҡоралын талап алды, бисәләрҙе, балаларҙы ҡоллоҡҡа ҡыуҙылар. Ырыуҙарҙы аҡларға тейешле ҡорттарҙың уларға көсө етмәне. Ярай ҙа, башҡорттар ханды, рабағаны, ҡағандарҙы яҡлап ҡалды. Юҡ а, ил дә бөтә ине.

Ҙур уғыш ҡупмаған, кесе енән аҡланмаған, ырыуҙарҙан йыйылған алымды ниңә кире ҡайтарманығыҙ уң? Борон-борондан, алым тейешле маҡсатында тотонолма а, кире таратылырға тейеш, тигән ғәҙәт бар. Бүтән саҡтағы ымаҡ, өстән бер өлөшөн ҡалдырырға ла бүтәне кире бирелергә тейеш бит. Ни эшләп хан да, рабаға ла, раған да беҙҙе алданы. Ҡайҙа ҡуйҙығыҙ алымды, ҡайҙа дөрөҫлөк?

Раған аптыраны. Әле генә бөтөнләй икенсе нәмә тура ында өйләшәләр ине, был алымға төштө лә китте. Ярар әле, был турала ул бая кеше ара ында үҙ ҡуптарманы. ора а, ни тиер ине икән раған, ә хәҙер ни әйтергә уң? Шулай аптырап торғансы, Заратустра үҙе үк яуап бирҙе.

– А ура Мазданың иң мөҡәддәс маҡсаты – кешегә лә, йондоҙға ла, малға йә үҫемлеккә фәрештәлек итеү түгел, үҙе тыуҙырған Мәңгелектә изгелек әм хәҡиҡәт урынлаштырыу, шуның менән Ахрызамандың ялғанына, яуызлығына ҡаршы көрәшеп еңеү. Ахрызамандың ҡотҡо она төшмә ә, мәкер, көнсөллөк сәсеп йөрөгән дейеү-пәрейҙәр, убырлы ҡарсыҡтар бөтөрөл ә, кеше өсөн мәңге кинәнес тормош буласаҡ. Бая өйләгән Урал менән Гилгәмеш үлемдең үҙен үлтереп, Йәншишмәнең ыуын әр тереклеккә бирәсәк әм бер кем дә бер ҡасан да үлем алдында ҡалтыранып тороуҙың ни икәнен дә белмәйәсәк. Ә еҙ А ура Маздаға ла, бүтән хоҙайҙарға ла яҡшатланыу өсөн туҡтау ыҙ ҡорбан, хатта кешене ҡорбан итеп терелән ергә күмдерә егеҙ. А ура Маздаға ҡорбан кәрәкмәй. әр кеше уның үҙе менән өйләшеп, кәңәшләшеп, үҙенең эшен, уйын, фиғелен тик изгелеккә генә ҡор а, Ахрызамандың көнө лә йә әтерәк бөтәсәк. Маздаға кәрәккән берҙәнбер ғәмәл – ут яндырыу, ул беҙгә биргән изге бөрйәнде* – утты үндермәү.

Раған ни тип әйтергә лә белмәне. Быға са А ура Мазда тура ында уға был тиклем ентекләп аңлатыусы ла, ғөрәфтәрҙе лә шуға яраҡлы ойоштороусы ла булманы. Күбе е кире енсә тиерлек ине. Шуға өндәшә алманы.

Заратустра уға ынамсыл ҡарап торҙо ла уң ҡулын уҙҙы.

– Бир ҡулыңды, ҡустым, усыңды усыма алып ҡыҫайым. Минең күңел йылым иңә, инеке миңә күс ә, уй-ниәттәребеҙ берегер.

Раған ҡулын бирҙе. Әммә "уй-ниәттәребеҙ берегер" тигәндән тәне земберҙәп китте. Заратустра менән уйың берек ә, Рабаға менән дошманлашырға тура килә

түгелме  уң? Унның ни кисергәнен Заратустра ла тойҙо, әммә бер  үҙ ҙә өндәшмәне, әр кем үҙ юлынан атланы.

19

Заратустраның ауылы бүтән малбағар арыйҙарҙыҡынан әллә ни  айырылмай. Ҙур булмаған йылғаға терәлгән өҙәк ҡалҡыулыҡтың көньяҡ битләүендә ултыра йәнтөйәге. Ошондай ерҙе айлауҙарының, әлбиттә, мәғәнә е бар. Йылғаның яҡынлығы, эсер-йыуыныр ыуҙың эргәлә булыуы мө им. Ә көн бите яҙын ҡарҙың тиҙ әрселеүенә килтерә, ямғыр ыуы ла торлаҡ тирә ендә тиҙ урыға, оҙаҡ ятмай. Урман да алыҫ түгел ауылдан, быны ы өй алырлыҡ бүрәнәгә, утынға мохтажлыҡ кисермәү өсөн кәрәк. Тау ыртына теҙелгән өйҙәр ҙур түгел. Ваҡ ҡына тәҙрәләре ҡарындыҡтан, өй башы күбе енсә ләпәш, ҡай ы бере е ҡыйыҡланған әм кәҫ йә ҡабыҡ менән ябылған.

Заратустра ауыл ҡаршы ындағы тау башына менеп ултырҙы. Бынан ауыл ғына түгел, унның тирә-яғы, ауылға ингән әр юл, хатта уҡмаҡ та күренә. Заратустраның да күҙе шунда. Ике көн көттө инде, килмәнеләр. Бына өсөнсө көнгә китте, бөгөндән дә ҡалмаҫтар, тип уйланы. Көткән кешеләре и ә — уны алырға килеүселәр. Теге ваҡытта рағандың унның ни өйләгәнен Арҡаилдағы Рабағаға еткергәнен яҡшы белә бит. Ошаҡ етеү менән уны саҡыртып аласаҡтар әм йә өгөт-нәсихәт менән Рабаға өйрәткән “дөрөҫ” юлға өндәйәсәктәр, йә бүтән сара күрәсәктәр. Заратустраны күпме өгөтләргә була, моғайын, ваҡыт әм тел әрәм итеп тормаҫтар, сараға тотонорҙар...

Ошо ваҡыт ул ултырған тирә йылынып китте, алҡынса ауа урынына үпкәне кинәндереп йылы ауа инде, бит-ҡулды иркәләне. Заратустра, быға ғәжәп итеп, тирә-йүнгә ҡараны. Бар нәмә лә элеккесә, бер генә үҙгәреш тә күренмәй. Саҡ ҡына болот йөҙгән күк, ялтлап торған ҡояш, ян-яҡта үҫкән ағастар, ситтәрәк утлаған көтөү — әммә е лә ҡәҙимгесә, тик ҡапыл йылы ғына бөркөлдө ҡайҙандыр. Заратустра бер-ике аҙым ситкә баҫҡайны, йылы тулҡын юғалды ла баяғыса алҡын ауа уратты. Кире аҙымлағайны, йәнә йылы.

— Шунда ғына тор. Миңә инең менән ошонда өйләшеү уңайлы, — тигән тауыш ишетте Заратустра. Бәй, был — А ура Мазда тауышы! Үҙен күрмәккә була, Заратустра тирә-яғын байҡаны, әммә Хөрмәтте тапманы.

— Мин бында, бейектә, — тине Хоҙай. Заратустра ҡарашын сөй ә, болоттарҙан аша сәмреғоштоҡо ымаҡ күҙҙәр шәйләнде. — Заратустра, ин яҙмыш үҙеңде килеп алғанын көтөп тау башында ултырма. Мин ине ергә үҙ вәкилем итеп минең үҙемде кешеләргә еткер ен өсөн ебәрҙем. Юҡ а, байтаҡтар Ахримандың ялғанына ышана бара, хәҡиҡәт кәмей. Дөрөҫлөктөң өҫтөнлөгөн иң алдан батшаға әйт.

Тауыш тынды, күктәге үтә күреп торған күҙҙәр ҙә юғалды, тәнде иркәләгән йылы ауа ла таралды. “Батша тип кемде әйтә уң әле А ура Мазда?” — тип баш ватты Заратустра. Уларҙың илендә батша юҡ бит. Хан бар, ҡаған бар, батша юҡ...

Шул мәл унның күҙ ҡарашы ауылға ингән юлға төштө. Унда ике ат юртып килә ине. Бере ендә яйҙағы бар, ә икенсе ендә... Икенсе атта кеше ен күрмәй ҙә ҡуя. Юҡтыр шул яйҙағы? Аттар ауыл урамы аша уҙып, Заратустра йәшәгән өй янында туҡтаны. “Килделәр, мине алырға килделәр,” — тип уйланы Заратустра әм ауыл яғына атланы.

Ул өйөнә килеп ингәндә ыбайлы атынан төшкән, өй ширлегендә ултырып тора. Лиә тоҡсайға нимәлер тултыра. Заратустра ҡатынына өндәште:

— Миңә йыя ыңмы?

— Эйе. Бына алырға килгән.

Юлсы ла өйгә инеүсенең кемлеген аңланы.

---

*Бөрйән, Бөрйән Ми ырбан — изге ут.

– Хан үҙ ҡашына саҡыра. Тиҙ килтереп еткерергә ҡуштылар.

– Хан түгел, раған тиген, – тип төҙәтмәксе булды Заратустра.

– Юҡ шул, хан үҙе саҡырта. Йәйәү йөрө ә, оҙаҡ булыр тип, ат ебәртте.

Бая яйҙаҡ ыҙ ат тип дөрөҫ күргән икән, яйҙағы үҙе буласаҡ.

– Ярар, саҡыртҡас барыр кәрәк. Бигерәк тә хан көн дә өндәшеп тормай. ин әҙерме, Лиагова? Әйҙә, юл алдынан ултырып торайыҡ.

Өсәүләп шым ғына ултырҙылар ҙа, тышҡа сығып, юртаҡтарға менделәр. Башҡортҡа ни нәмә, тыумыштан ат өҫтөндә тиерлек йәшәгәс, йылп итеп кенә менде лә ултырҙы. Заратустра атҡа атлана алмай аҙапланды, көс-хәл менән урынлашты. Быны күргән башҡорт иҙҙермәй генә йылмайҙы. Аттан йығылып ҡалма а ярар ине был, тип уйланы, буғай. ыбайлылар ҡуҙғалып ҡына киткәйне, арттан тауыш яңғыраны:

– Ағай, мин дә инең менән барам, – ҡусты ы Майыт икән.

– Ат артынан йәйәү йүгерә еңме?

– инең яндан йүгереп бар ам да риза.

– Ҡуй, юкты өйләмә. ин еңгәңә ярҙамлаш, ул бер үҙе ҡалды. Ауыры ла ҙурайған, аҡла уны.

Арҡаилгә Заратустра саҡ-саҡ барып етте. ыбай йөрөргә күнекмәгән тән ҡыйралды ғына, оса ы иҙелеп бөттө. Шуға хан ҡашына индерерҙән алда аҙ ғына бул а ла ял иттереп алмайынса булмай ине. Өҫтәүенә, юлдан уң таҙарыныу ҙа зарур. Теге саҡта Факи Тайран менән ҡуша йәшәгән ҡунаҡ өйөнә индерҙеләр. Заратустра ҡаҡ икегә ауҙы ла йоҡлап та китте. Төрткөләгәнгә генә уянды. Күпме ятҡандыр, белгән юҡ. Ҡарындыҡ тәҙрәнән яҡты шәйләнә.

– Әйҙә, юлсы, – тине йортто ҡараусы. – Йыуын да йүгер хан алдына.

Ысынлап та, оҙаҡламай уны теге саҡта индергән бүлмәгә үткәрҙеләр. Берәү ҙә юҡ ине, оҙаҡламай Туран ханы үҙе сыҡты. үҙҙе ҡыҫҡа тотто хаким.

– ин ил ханын ырыуҙарҙы алдауҙа ғәйепләй ең инде?

– Нисек ғәйепләйем? уғыш дәүере тип алым алдығыҙ, ә уғыш булманы бит.

– уғышҡа кешеләрҙе йыйҙыҡмы? Йыйҙыҡ. Орош яланына барҙыҡмы? Барҙыҡ. Шул тиклем мең кешене кейендереп, ҡоралландырып, ашатып-эсереп тоттоҡмо? Тоттоҡ. Яуға килеп тә, беҙҙең менән уғышыуҙан баш тартҡас, элекке ҡәрҙәштәребеҙҙе ыйлап йәшәттекме? Йәшәттек... алым ана шунда китеп бөттө.

– Бөткән икән, ниңә был турала ырыуҙан ырыуға, аранан араға, кешенән кешегә әйтмәй егеҙ? Ниңә илдән йәшерә егеҙ хәҡиҡәтте? Әллә был хәҡиҡәт түгелме? Әллә Ахриман ыңғайына ыу ҡойоусы ялғанмы?

– ин мине, Туран ханын, ялғанлыҡта ғәйепләр китә еңме? – Хан, төкрөктәрен сәсеп, Заратустра өҫтөнә уҡталды.

– Туҡта, хан! – Заратустра ла икереп торҙо. – Икебеҙ ҙә ҡыҙыу баштан бер-беребеҙҙе рәнйетеүебеҙ бер. Әгәр мин яңылыш ам, ғәфү ит.

– Ғәфү орай берәү! Ул үҙең өсөн инең башыңды киҫеү аҙ. – Хан яр ыны-яр ыны ла, иҙеүен ысҡындырып ебәреп, йыш-йыш тын алды. – Иран ханы хөрмәтләгәнгә генә тере ҡалдырам мин ине. – Хан стенаға терәтеп ҡуйылған көбсәктән Заратустра бығаса күрмәгән аҡ нәмә сығарҙы ла быға ондо. – Мә, уҡы.

Заратустра аҡрын ғына төргәкте үтте, ҡулында йоҡа ғына, ҡытыршыраҡ, ләкин тығыҙ аҡ нәмә ине. Унын аптырап торғанын күргән хан:

– Папирус ул. Яҙыу өсөн махсус я айҙар, – тине. – Тамғаларҙы белә еңме?

– Факи Тайран менән өйрәнгәйнек. Ныҡлап белмәйем шул.

Хан Заратустарың ҡулынан папирусты тартып тиерлек алды.

“Ҡәҙерле Туран ханы, теге саҡтағы вәғәҙәләрҙе үтәү йөҙөнән Иранға Факи Тайран менән Заратустра тигән кешеләрҙе ебәр әң ине. Икенсегә орайым бит. Шуға,

кире ҡаҡмаҫ ың, тип ышанам," – тип яҙылған бында. Йыйын да кит Иранға. Йөрөмә минең илемде бысратып, булмаҫтай хәбәр өйләп. Өс көндән илде ҡалдырып кит!

– Хөрмәтле хан! – Теге бүлмәнән сыҡҡылағансы, Заратустра әйтеп өлгөрҙө. – Бер генә үтенесемде тыңласы.

– Нимә?

– Иранға Бөрйән Ми ырбанды – изге утты алып барырға рөхсәт ит.

– Ал.

20

Заратустра хан янынан сыҡты ла йүгерә-атлай ауылына китте. Тиҙерәк-тиҙерәк булырға кәрәк. Хан уға илдән сығып китергә ни бары өс көн бирҙе. Ә унын ни тиклем эше бар әле. Юлға әҙерләнергә, ут үнмәҫлек итеп уға аҙыҡ йүнәтергә кәрәк.

Заратустраның бер көнө ҡайтып етеүгә китте. Хан менән булған үҙҙе ҡатынына өйләп биргәйне, тегене е төргәктәрен йүнәтергә тотондо.

– Күп алма, алмаш кейем менән бер аҙ ризыҡ бул а, шул етәр. Ҡалғанын юлда табырмын, – тип ҡаршылашты Заратустра.

– Бер иңә генә түгел бит. Миңә лә кәрәк. Мин инән ҡалыр ти еңме ни? – Лиагова тыныс ҡына, ҡәҙимге эш тура ында өйләгәндәй әйтте.

Заратустра лыпын ултырҙы.

– ин бына-бына бәпесләргә торғанда ошондай алыҫ юлға сыҡмаҡсы ыңмы? Башыңа ла килтермә!

– ине мин яңғыҙ ебәрә аламмы?

– Янғыҙ түгел, Бөрйән Ми ырбан утын алып китәм бит. А ура Мазда миңә үҙе юл күр әтеп торасаҡ.

Шул мәлдә ах та ух йүгереп Заратустраның ҡусты ы Майыт килеп инде. Йышйыш тын ала-ала ораны:

– Ағай, ин Иранға китә еңме ни?

– Эйе, ҡустым. Ә ин быны ҡайҙан ишеттең?

– Раған кешеләргә өйләгән.

– Ни тип?

– Заратустра илдән өрөлөп китә, берегеҙ ҙә унын артынан бара күрмәгеҙ. Юҡ-а, юлда үлеп бөтәсәк егеҙ, ә бында ҡалған туған-тыумасаларығыҙ ҡоллоҡҡа атыласаҡ, тигән.

– Кешеләрҙе аман ҡурҡыталар икән, эй...

– Ә мин, ағай, инең менән китәм. Ни генә тип әрлә әләр ҙә, бер үҙенде ебәрмәйем. Мин дә А ура Маздаға әм иңә ышанам.

Заратустра аҡрын ғына ширлек ситенә терәлде.

– Рәхмәт еҙгә, минең ғәзиз кешеләрем. еҙ минең ҡәҙерлеләрем генә түгел, еҙ минең фекерҙәш әм күңелдәш кешеләрем. А ура Мазданың фатиха ынан юлға ҡуҙғалайыҡ.

Өсөнсө көн тигәндә Заратустра менән ҡатыны Лиагова, ҡусты ы Майыт – өсәү ауылдан сығып китте. Бар ауыл оҙатты уларҙы. Ҡатын-ҡыҙ ғына түгел, ирҙәр ҙә күҙ йәштәрен йәшермәне.

Бынан уң ун көнләп уҙғас, өс юлсы Бөрйән Ми ырбан утына килеп етте. Мәңге үнмәй торған ут ине ул. Бик ҙур күлдең бейек текә яры өҫтөндә ҙур майҙан рәүешендә таштар ята. Шуларҙың бере ендә ярым шар рәүешендә ике соҡор ҡаҙылған. Шул соҡорҙарҙың бере ендә әр саҡ ут яна. Соҡорға ҡоро үлән дә, кипкән утын да алалар, күбе енсә йә ер майы, йә мал майы яндырыла. Ҡай ы берҙә

күлдән тотолған, яҡшылап киптерелгән имеҙ балыҡты ла утҡа алалар. Ут бер ваҡытта ла үнмәй, ул ашай торған ризыҡ бер соҡорҙа бөтә башла а, икенсе ен тултыралар әм ялҡынды быны ына күсерәләр.

Ут тирә енән бер ваҡытта ла кеше өҙөлмәй. Утты аҡлап тороусылар ҙа бар. Улар күлдең ярындағы мәмерйәлә йәшәй, әр саҡ ғибәҙәт ҡыла әм утты аҡлай. Иң хөрмәтле кешеләр улар. Утты үндермәү генә түгел, бөйөк Бөрйән Ми ырбан, Йы андарҙы ҡосоп хәҡиҡәткә саҡырыусы А ура Мазда, Ерҙе йылытып тороусы Ра-Ҡояш, Ҡояшты офоҡ артынан тартып сығарыусы юлбарыҫ тура ында хаттар-йырҙар йырлай улар.

Заратустра әм унының эйәрсендәре килеп етеү менән, уларҙы кешеләр ырып алды. Уларҙың ҡайҙа йыйынғанын, ни сәбәптән сығып киткәнен бындағылар белә ине инде. Шуға ҡәҙерләп, оло хөрмәт менән Бөрйән Ми ырбан утына иң яҡындан урын бирҙеләр. Өс юлаусы утҡа текләп уйға ҡалды.

Эй, бөйөк ут! Аллы-ҡыҙыллы- арылы булып янған ялҡының, ялҡын сығанағы күкле-ҡыҙыллы ҡуҙҙарына ҡарап күҙ талмай. инә текләгән айын, бар донъянды онотоп, оҙағыраҡ ултырғы килә. Ут күңелдәге бар ауырлыҡты, ҡыйын кисерештәрҙең бөтә ен дә алып китә, күңел сырхауҙарын яндырып, өмөткә, тик яҡтыға ғына урын ҡалдыра. Ут сафландыра, ут йылыта, ут арбай, ут нескәртә, ут золомдо, уй-фиғелгә ойлаған хөсөттө, мин-минлекте яндыра. Изге ут инең уй-ниәттәреңде бөйөк Йы анға осора әм А ура Мазданың фекере, тәғлимәте булып күңелгә кире ҡайта. Ут әм Мазда, шул уҡ А ура, шул уҡ Хормузд, шул уҡ Хөрмәт — унарлаған телдә яңғыраған иң Бөйөк Хоҙай ут аша нур булып кешенең әр күҙәнәгенә инә, рәхәтлек тыуҙыра, бөйөккә олғаштыра.

Заратустра менән унының юлсылары төнө буйы ут янында булдылар. Тәғәмде лә ошонда ейҙеләр, күлдең ыуын да шунда эстеләр. Таң ата башлағанда Заратустра урынынан торҙо. Бөрйән Ми ырбан утын алырға ла алыҫ Иранға ҡуҙғалырға кәрәк. Утты аҡлар өсөн ер майына манып бик күп ағас киҫәүе, ҡосаҡ-ҡосаҡ үлән алғайны улар. Шуның бере енә ут күсерә була, Заратустра изге соҡорҙан янып ятҡан торонбаш алды әм юлсылары янына боролдо. Шул саҡ бер яҡ ситтән үҙенең исемен әйткәнгә боролдо. Ҡара а, Факи Тайран тора. Дуҫтар ҡосаҡлашып күреште.

— ине оҙатырға килдем, — тине Факи. — Иранға китәсәгеңде еткерҙеләр миңә.

— ине лә саҡырған да инде Иран ханы?

— Эйе. Тик мин бармайым. Ирәмәлдә минең эшем күп, Ирәндектә тағы ла йондоҙҙар күҙәтеү арайы ала башланыҡ. ине Иранда аңларҙар. А ура Мазданы ҙурларҙар, уны ына ышанам мин. Иран ханы — аҡыллы хан. А ураның үҙҙәрен ин унда киң яңғыратыр ың. Шунан үҙебеҙгә кире ҡайтыр ың әле. Быны ына ла ышанам әм ине көтөп ҡалам.

— Рәхмәт, дуҫым. ин миңә туғанымдан да яҡыныраҡ ың.

— Юлыңды еңеләйтер, Бөрйән Ми ырбан утын ышаныслы аҡлар өсөн дүрт үгеҙ әҙерләнек инә. Беренсе енең арҡа ына ут әр саҡ янып торорлоҡ итеп бәләкәс мейес я аныҡ. Икенсе үгеҙҙең арҡа ына ут ризығы — ер майы менән мал майы тейәнек. Өсөнсө үгеҙҙең өҫтөндә ятып та, ултырып та торор урын бар. Уны ы Лиәгә. Юлда бала тапҡас бик йонсома ын өсөн уға — махсус үгеҙ. Ә дүртенсе енә еҙҙең төрлө нәмәгеҙ — ризыҡтан башлап төнгө алҡындарҙа ябынып ятыр тирегә тиклем алынған.

Үгеҙҙәрҙе күреп, Факиҙың аңлатма ын ишеткәс, Заратустраның күҙҙәренән йәш атылып сыҡты.

— Рәхмәт, дуҫым. инән күргән изгелекте атайымдан да күргән юҡ ине.

— Изгелек — инең үҙеңдең изгелегең өсөн бер бәләкәй семтем генә рәхмәт. Ки-

лер заман — иңә тотош кешелек рәхмәт уҡыр әле. Хәйерле юл!

— Хуш булығыҙ. Бөрйән Ми ырбан утын үндермәгеҙ!

Заратустра беренсе үгеҙҙе етәкләне, ҡусты ы икенсе енең теҙгенен тотто, әм бәләкәй генә каруан тау үренә менеп китте. Таң йондоҙо ҡалҡты шул мәлдә. Заратустраның йондоҙо — Таң сура ы. Алда атлаған үгеҙ мөгөҙөнөң осона ҡунған кеүек күренә Таң сура ы. Ә иң алдан кеше бара. А ура Мазда иң тәүҙә бар иткән Үгеҙ менән Кеше бер ептең ике осонда атлай. Каруандың иң артынан Аҡтырнаҡ юрта.

## ЙОМҒАҠЛАУ УРЫНЫНА

*Заратустра — бынан дүрт мең йыл сама ы элек йәшәгән тарихи шәхес. Донъяла Заратустра дине тип аталған тәғлимәттәр теҙмә ен Көньяҡ Уралда ул барлыҡҡа килтерә әм Иранда тарата башлай. Беренсе булып был динде Иран ханы Вишпасты ҡабул итә, унан уң — башҡалар. Утҡа табыныусылар бөгөн Иранда, Әзербайжанда, индостанда, бүтән тарафтарҙа йәшәй, әммә ошо диндең сығанағы бөгөнгө Башҡортостан ерҙәрендә, тарихи Арҡайымда, ынташта, Ирәндектә, Ирәмәлдә, Асылыкүлдә, Ыуарыла, Әртәлә, Әшәлә була. Ваҡыт, аралыҡ үлсәмдәренең, металлургияның ошонан башланып киткәне кеүек үк, башҡорт исеме лә бик борон ошонда тыуған, тик халыҡ атама ы булмайынса, ә йәмғиәттең бер өлөшөнөң атама ы рәүешендә йөрөй. Бөгөнгө Башҡортостанда А ура Маздаға бағышлап Заратустра сығарған шиғырҙарҙағы исемдәр ер- ыу атамалары булып аҡланған.*

*Кеше үҙ илендә бөйөк булмай, тиҙәр. Үҙ илендә кеше тик олтан ғына, сөнки быға са йәшәп килгән солтандар бүтәнде үҙҙәренең тәхетенә ҡуйҙыртмаясаҡ. Заратустра ла Туранда түгел, Иранда солтан була. Иранда А ура Мазда — Хөрмәт динен киң йәйелдергәс, кәрҙәштәрен дә ошо юлға әйҙәр өсөн Уралға кире ҡайтҡан, тиҙәр уны. Тик Ахримандың ҡапҡанына баҫа — көнсөлдәрҙең ҡулынан әләк була. Заратустраның уба ы ла ҡайҙалыр үҙебеҙҙә — тыуған ерендә. Ә ике көс — изгелек менән золом ара ында көрәш аман бара. Изгелек, хәҡиҡәт еңергә тейеш. А ура Мазда менән Заратустра — Таң сура ының васыяты шундай.*

**2008 йыл.**



**Салауат**
**ӘБҮЗӘР**

# ҠИӘМӘТ

ХИКӘЙӘ

— Атаҡ-атаҡ! Нимә булды был?! — Ҡәберенән ҡубарылып сыҡҡан Тимербай, күҙе аларып, ян-яғын байҡаны. Уңарсы булмай, ҡолаҡ тондорғос борғо тауышы тағы яңғыраны. Артта ғына нимәнеңдер шатыр-шотор килеүен ишетеп, ҡапыл тертләне Тимербай. Әйләнеп ҡараны ла, Абдулла мулланы күреп, теле тотлоҡто:

— Аб-аб-аб... — тине, саҡ-саҡ тын алып.

— Тимербай?! ин?! — Абдулла өҙөп ҡараны уға. Шулай бер-бере енә теклләп торған арала йәнә борғо ҡысҡырттылар.

— Кем таң менән борғо ҡысҡырта, инәнең башы? — Шешенгән күҙҙәрен ыуа-ыуа, ҡәберҙән Ғәләүетдин килеп сыҡты. — а, Абдулла мулла, мунсанан сыҡтыңмы, ап-аҡҡа төрөнөп алған ың?

Белә-белгәндән өҫтөнә иҫке көпө, тиҙәккә ҡатып бөткән ямаулы ырма салбар кейеп йөрөгән Ғәләүетдинде яңы костюмда күреп, сырамытмайыраҡ торҙо былар. Аҙаҡ ике е бер юлы:

— Ғә-ләү! — тип уҙҙы.

— Мин,— тине Ғәләүетдин, Тимербайға ҡулын уҙып. — Шәпме, Тимербай ағай. Арыу итеп кейенеп алғас, танырлыҡ түгел ине. Туйға әҙерләндеңме әллә?

— Туй? Туй үтте инде... — Тимербай риза ыҙ ғына ҡул елтәгәндәй итте.

— Улай булғас, берәй нәмәң барҙыр? Туй йыуасаңды әйтәм. Ана, Абдулла мулла ла мунсанан сыҡҡан. Килешер ине.

Ғәләүетдингә теклләп торған Абдулла мулланың арыуы ҡайнаны:

— Тфю!.. Иҫәүән!.. Ҡайҙа торғаныңды белмәй еңме? — Ҡаты ғына әйтте ул. — Күҙеңде асыбыраҡ ҡара.

Ғәләүетдин әле генә йоҡо онан илереп торған кеше шикелле ян-яҡҡа ҡаранды:

— Инәнең башы-ы-ы! — тине, аҡал төктәре баҫҡан эйәген ыуып. — Кисә

---

*Салауат Әбүзәр Ғафури районының Ташаҫты ауылында тыуған. Өфөлә йәшәй, “Башҡортостан” гәзите редакция ында эшләй.*

*Салауат Әбүзәр — билдәле шағир. уңғы осорҙа ул проза жанрында ла әүҙем эшләй.*

нығ булғанбыҙ, ахыры. Зыяратҡа килеп йоҡлағанбыҙ, ә! Берәй ен ерләнекме әллә?

Абдулла мулланың асыуы ҡабарҙы:

— Йоҡламай ни... Үлгәнбеҙ бит!.. Мәйеттәр беҙ!

— Кит әле, юҡты өйләмә, — Ғәләүетдин үҙенең өҫтөндәге кейемгә иғтибар итте. — А , а ! Ғүмерҙә кеймәгән нәмә... Кемдеке икән?.. Туҡтале!.. Тимербай ағай, ин бит...

— Нимә мин? — Тимербай ирен сите менән мыҫҡыллы йылмайып ҡуйҙы.

— ин бит... ин бит үлдең... ине бит күмдек... Абдулла мулла, ине лә... — Ғәләүетдин артҡа сигенде. — Белогорячка башланды әллә... Китегеҙ!.. Китегеҙ күҙ алдынан!.. Тфю!.. Тфю!.. Бисмилла...

— ин дә мәйет... — тине Абдулла мулла битараф ҡына. — Хәйер, теге донъяла ла...

Ғәләүетдин ҡуш услап башын тотоп, сүгәләп төштө. Ошо минутта үлтереп тәмәке тартҡы ы килде. Башын яй ғына ҡалҡытып, Тимербайға ялбарыулы ҡарашын төбәне:

— Тәмәкең юҡмы, Тимербай ағай?

— Ай, иҫәүән! — тип ҡул елтәне Тимербай. — Башың юҡ икән дә...

— Шымығыҙ! — Абдулла мулланың киҫәтеүле тауышы яңғыраны. Яҡында ғына “Ярҙам итегеҙ!” тип кемдеңдер ыңғырашҡан тауышы ишетелде. Тауыштың эргәләге ҡәберҙән килгәнен шәйләп, Абдулла мулла Ғәләүетдингә өндәште:

— Эй, Ғәләү, бар, ярҙам ит!

Ғүмер буйы кеше ҡушҡанын башҡарып өйрәнгән Ғәләүетдин:

— Күмергә лә мин, сығарырға ла мин... — тип ауыҙ эсенән мығырлап, теләр-теләмәҫ кенә тауыш килгән яҡҡа ыңғайланы. Күп тә үтмәне, ҡәберҙән Әсмәне тартып сығарҙы. — Әсмә апай!.. аумы, апай!

— Кем ти эм, Ғәләү, имеш, — тине Әсмә, өҫ-башын ҡағыштырып. — ин ни эшләп йөрөй өң бында?.. Әс-тә, Абдулла мулла инде әллә?!

— Әссәләмәғәләйкүм, — тип ике ҡуллап күреште Абдулла мулла.

Аңшайып торған Тимербай ҙа ҡапыл иҫенә килде:

— Әсмә?!

— Мин, Тимербай, мин! — Улар ҡосаҡлашып, бер-бере енең арҡа ынан өйҙө. Теге донъяла бергә ғүмер өргән ҡарсығын күргәс, зыярат яҡтырып киткәндәй булды Тимербайға. Шулай ҙа улар оҙаҡ хәл-әхүәл орашып тора алманы, уң яҡ ҡәбер өҫтөндә ҡапыл берәү пәйҙә булды. Тайфа икән, тамсы ла үҙгәрмәгән. Шунда уҡ танынылар уны.

— Иҫән- ау ғына килеп еттеңме, Тайфа? — тигән булды Әсмә.

— Иҫән бул ам, ошонда ятыр инемме ни?! — Бер яҡтараҡ бөршәйә биреп торған Ғәләүетдинде шәйләне Тайфа. — Балаҡайым, ин дә килдеңме?!

Ғәләүетдиндең кәйефе юҡ, буғай, иренеп кенә өйләнде:

— Килмәй ҡайҙа бара ың. Тапап-тапап күмеп киткәндәр.

Тайфа быларҙы ынағандай ҡарап торҙо ла орап ҡуйҙы:

— Ә башҡалар... Башҡалар ҡайҙа?..

Тимербай, эйәге менән Абдулла муллаға ишаралап:

— Ауыл зыяратында урын бөттө, тип Абдулла ағай ошонда яңы зыярат астырҙы бит. Яңы урынға күмелгәндәрҙән беҙ генә, күрә ең. Ҡалғандар тегендә — иҫке зыяратта, — тип төшөндөрҙө.

Тайфаның теле тик торамы, әләктереп тә алды:

— Ғүмер буйы урын етмәне уға, — тип төрттөрҙө.

Абдулла мулла уҫал ғына ҡараш ирпеп алды: “Ну, был халыҡҡа ышан

инде. Кемдәрҙе килтереп алғандар! Үҙемдән уң яңы зыяратҡа иманлыларҙы ғына ерләгеҙ, тип исемлек тә ҡалдырғайным...” Тел осона төйөлгән ошо үҙҙәрҙе саҡ ысҡындырмай, ауыр бул а ла, кире йотоп ебәрҙе лә, Ғәләүетдингә тексәйеп, баянан бирле күңелен өйкәгән ораўҙы бирҙе:

— Ғәләү, ин бында нисек килеп эләктең, ә?

Әллә был бер төрлөләнгәнме, тигәндәй ҡараны Ғәләүетдин:

— Минән орап тормағандар шул... — тине, салбар кеҫә енә тыҡҡан ҡулы менән нимә ендер ҡашып. — Перестройка башланғайны бит.

— Перестройка? Уны ы нимә тағы? — Абдулла мулланың бәзерәйгән күҙҙәре йылтырап киткәндәй булды.

— Донъяның аҫты өҫкә килде.

— Ҡиәмәтте әйтә еңме?

— Ҡиәмәт инде, ҡиәмәт. Тик айырма шунда: ораусы ы ла, яуап биреүсе е лә юҡ...

— Бында ине ниндәй ахмағы килтереп алған икән уң? — Был ораўҙы Абдулла мулла үҙ-үҙенә биргәндәй әйтте.

— Этем бел ен, — тине Ғәләүетдин. — Мәрфуға ҡарсыҡтың тауыҡ тиҙәге ҡушып эшләнгән самогонын эскәнде генә белеп ҡалам. Бында уянып киттем. Етмә ә, өр-яңы кейем кейҙергән булғандар, — шунан нимәлер иҫенә төштө шикелле, ҡатҡан усы менән өҫтөндәге кейемде ыпырғыланы. — Япяңы... Абдулла ағай, ала ыңмы әллә?

Абдулла мулла ғәҙәте буйынса күҙе менән тегене баштан-аяҡ әрмәп сыҡты. Яңыға оҡшаған. Ғәләүетдин уның был ҡылығын ризалыҡ билдә е тип ҡабул итте. Өҫтөндәге костюмын, был кире уйлай күрмә ен, тигәндәй, сисә алып муллаға ондо.

— Арыу ғына икән дә, — тине Абдулла мулла, костюмды ыйпаштырып. Үҙе лә иҙмәҫтән, ҡапыл йәшен уҡҡандай, ҡулын тартып алды. — Тфю! Ахмаҡ!.. Әҙәм башын бутап... Тәүбә!.. Онотолоп кителгән!

Ғәләүетдиндең күҙҙәрендәге өмөт осҡоно өрөп үндерелгән шәм кеүек “былҡ” итеп кенә ҡалды, сырайы ҡараңғыланды әм, еҙҙең менән эш бешмәҫ, тигән ҡиәфәттә ҡул елтәп китә башланы.

— Ҡайҙа бара ың, балам? — Тайфа улының юлына арҡыры төштө.

— Ауылға.

— Донъя бөттө бит, балаҡайым. Ҡиәмәт етте! Ҡиәмәт!..

— Бөт ә ни, — тине Ғәләүетдин битараф ҡына. — Мәрфуға ҡарсыҡтың самогоны телә ә ниндәй ҡиәмәттә лә бөтөрлөк түгел. Бер-ике уртлам ҡалғандыр әле.

Мулла ерәнгән кешеләй төкөрөп ҡуйҙы:

— Тфю, ахмаҡ!..

—Төкөрөгөңдө сәсмә, кем, Абдулла, — тине Тайфа, улын яҡларға булып. — Изге урында баҫып тора ың.

Быға тиклем шым ғына күҙәтеп торған Тимербай ҙа йөпләп ҡуйҙы:

— Изге урынды мәсхәрәләргә ярамай. Гона ы ҙур булыр.

— ин дә гона өйләп торғас инде... — Абдулла мулла Тимербайҙың ҡыҫылыуын өнәмәне. Өнәмәне, тип йомшағыраҡ ысҡындырҙым, буғай, теге донъяла ла борсаҡтары бүртеп бармай ине, бүрт ә лә, бер туҫтаҡҡа ҡашыҡ уҙа алманылар. Теге енә етә ҡалды:

— Ипләп өйлән, Абдулла. Теге, ни, мулла тигәс тә... — тип телә ә ниндәй яуға ташланырға әҙерлеген киҫәтеп ҡуйҙы. Бел ен кем менән өйләшкәнен!

— Ай, ошоларҙы! Көҙгө әтәс ише... — Әсмә, юҡ ҡына ҡуҙҙан ут тоҡанып китеүҙән шөрләп, ыу бөркөргә ашыҡты.

— Исма ам, Хоҙайға доға ҡылайыҡ.

— Эйе, эйе, Әсмә дөрөҫ әйтә, йәмәғәт, — тине Абдулла мулла, үҙҙең икенсе юҫыҡ алыуына ҡыуанып. иҙә ул, Тимербай менән артыҡ үҙ көрәштереп булмай, ҡыҙыу ҡанлы. — Хоҙайҙан ярлыҡау орайыҡ.

— е… Тамуҡҡа ташларлыҡ ни гона ым бар минең!? — тине Тимербай. Теге донъяла ла, күңеле булғанда ғына, ирәк-мирәк “бисмилла” әйтә торғайны ул. Ураҙа тип торманы — умырып ашаны, Ҡөрьән сүрә енә лә әллә ни ҡолаҡ алманы.

— Ана, Ғәләү ора ын…

Үҙ исемен ишеткән Ғәләүетдиндең ҡолағы ҡарп итеп ҡалды:

— Бер нәмә бул а, мин, инәңде эт йыҡҡыры. Башҡа кеше юҡтыр шул. Үҙегеҙ орағыҙ. Миңә теге донъяла ла бирмәне, быны ында ла тоттороп ҡуймаҫ. орансылай белмәйем.

— Улай тимә, Ғәләү. Хоҙайҙың ҡөҙрәте киң. ора аң, бирә ул, — тине Әсмә, тамуҡтың иң төбөндә янасаҡ Ғәләүетдинде йәлләп.

— Әйттем бит, орансылай белмәйем. орап өйрәнгән кеше еҙ орағыҙ. Алланы түгел, колхоз председателен ышандырып, кәрәк нәмәгеҙҙе ала торғайнығыҙ, — сығынсыланы ла китте Ғәләүетдин.

— Аллаға үҙ тейгеҙмә, Ғәләү! Алланы колхоз берсиҙәтеле тип беләеңме ни, иман ыҙ! — Абдулла мулланың яман асыуы килде.

— Беҙҙең өсөн етәкселәр Алла инде… — Бирешергә теләмәне Ғәләүетдин.

— Тфю, мәғәнә еҙ! Ләғнәт төшкөрө!

Ғәзиз улын ҡә әрләп тороуға сыҙаманы Тайфа, сәрелдәп ебәрҙе:

— Ниңә ин үҙ… Әй, Алла! Баламды ҡарғай ың! Ҡарғышың үҙ башыңа төшөр!

— Яҡлама балаңды, Тайфа. Унның өсөн үҙеңдән дә орарҙар, — тине Абдулла мулла, ниңәлер ситкә ҡарап.

— Бәлки, инән… еҙҙән орарҙар, ә?! — Тайфа, әллә изге урында тороуынан шөрләп, шып туҡтаны.

— Кеше бала ы өсөн нишләп беҙҙән ора ындар? — тине Тимербай. Үҙе күңелендәге ҡараңғы бер мөйөштә ниндәйҙер ҡара бесәйҙең тырнағанын иҙҙе.

— Ата ыҙ бала тыумай… — Тайфа гөлтләп тоҡанырға әҙер ине, Әсмә туҡтатты:

— Етәр! үҙ сурытмағыҙ. Алла ы Тәғәләгә доға ҡылып, ярлыҡау орайыҡ.

Алла үҙен ишеткәс, Тайфа ла йомшара төштө:

— Эйе шул. Уҡы доғаңды, Абдулла мулла.

— орау ала башламаҫ элек, уҡый ал, Абдулла ағай, — тип йөпләне Тимербай ҙа.

— Бисмилла и-рахманир-рахим… — Абдулла мулла, нимә ендер юғалтҡан кешеләй, кеҫә ен, ҡуйынын ҡапшарға кереште.

— Йә, ниңә туҡтаның? — тип сабыр ыҙланды Тайфа.

— Эй, эттәгенә е, китап юҡ.

— Ниндәй китап ти ул бынауындай саҡта?

— Ҡөрьән. Исма ам, табутыма алып ебәрмәгәндәр… — тип мығырланы Абдулла мулла. Китаптың булмауына ысын күңелдән үкенеп ҡуйҙы был минутта.

— Китап ыҙ уҡы, — тине Тимербай. — Ғүмер буйы мулла булып йөрөнөң дә ба а.

— Йөрө э… — Тимербайҙың бойороҡ биреүе оҡшаманы Абдулла муллаға. — Үҙегеҙ уҡығыҙ.

— Мулла белмәгәнде беҙ ҡайҙан беләйек, — йәбеште лә э был Тимербай.

— Ысын күңелдән ора аң, бирә Хоҙай. Үҙегеҙ ярлыҡау орағыҙ. Мин те-

ге донъяла доғаны күп уҡыным. Миңә ҡурҡа ы түгел, — тип ҡул елтәне Абдулла мулла.

— Әстәғәфирулла! — тине Тайфа, ҡото осоп. Бына-бына әллә ниндәй шөкәт еҙ шайтандар килеп сығыр ҙа Абдулла мулланы елтерәтеп тамуҡҡа алып китер ымаҡ ине уға. Уйҙарынан тәне семерҙәп ҡуйҙы хатта.

— инең мулла булыуыңды әйтәйем, — Тимербайҙың кәйефе күтәрелә төштө, эске бер ләззәт менән усын-уска ыуып ҡуйҙы. — Гона шомлоғо!..

— ин дә, Тимербай, гона тип торған була ың. Тырнаҡ осондай сауабың бармы үҙеңдең? е, буҡ ейҙектән көлә... — Абдулла мулланың йәне көйҙө.

— инең гона ың алдында минеке — сауап, белдеңме? — Тимербайға Абдулла мулланың доға уҡый алмауы рәхәтлек бирә ине, шикелле. Ҡәнәғәтлеге йөҙөнә сыҡҡан.

— Ай-бай, нисек телең ҡоромай.... — Абдулла мулла, ошоноң менән үҙ бөттө, тигәндәй, быларға ырты менән боролдо.

— Беләбеҙ инде, Абдулла ағай, гона ын да беләбеҙ... — Әсмә ирен яҡламай сыҙаманы.

— Нимәне? — Терт итеп ҡалды Абдулла мулла. Әсмә юрамал төрттөрҙө:

— Ана, Тайфанан ора...

— Нишләп минән? Кеше гона ын яҙып барырға мин фәрештә түгел. — Тайфа, нимәнәндер шикләнгәндәй, Абдулла муллаға ялбарыулы ҡараш ташлап алды. Быға тиклем бер яҡ ситтә шым ғына баҫып торған Ғәләүетдин тел шартлатты:

— Ай-бай!.. Теге донъяла нисек йәшәнегеҙ икән? Бында үлешеп бара ығыҙ...

— ин ҡыҫылмай ғына тор, Ғәләү! — Тимербай күҙенең ағы менән ҡараны.

— Бында ин хужа түгел, Тимербай ағай. Бригадир тигәс тә... Тегендә командовать иткәнең дә еткән. Бында — демократия! — Ирешеүгә тигәндә Ғәләүетдин зә әр инде ул.

— Демократия тигәнең ошонда ғына булма а... — тине Тимербай, көлөм өрәп.

Эш ҙурға барғанын күңеле менән иҙҙе Тайфа:

— Гона шомлоғо! Ҡайҙа икәнегеҙҙе онотмағыҙ! — тип быларҙы тынысландырырға маташты. Ғәләүетдин дә әллә уйлағанын, әллә тел осона килгәнен әйтеп алды.

— Бында дүрт-биш кеше ыйышмайбыҙ, иҫке зыяраттағылар нишләйҙәрҙер?!

Уның үҙҙәренә берәү ҙә ҡолаҡ алманы. Иҫәпкә бар, анға юҡ бәндәнең үҙе ни!.. Ҡолаҡҡа кереп өлгөрмәй ҡойолоп төшә. Абдулла мулла баш елкетеп Тимербайға бер талай ҡарап торҙо ла нимәлер хәл иткәндәй әйтте:

—Иман юҡ шул... Ай, иман юҡ... Әйҙә, Ғәләү, минең менән, хур булмаҫ ың, — ҡайҙа саҡырғанын үҙе лә төшөнмәне, шикелле, шулай ҙа, ышаныслыраҡ бул ын типмелер, бер-ике аҙым атлаған булды.

— Урын алмашыуҙан сумма үҙгәрмәй, тип уҡыттың бит үҙең, Абдулла ағай, — Ғәләүетдин дә йомшаҡ урынды семетә белә.

— Тормош кире ен иҫбатлай, — тине Абдулла мулла, ҡаштарын йыйырып. — Йыш ҡына сумма урынға бәйле була. Ана, Тимербайҙың да колхозник сағында ауыҙын ас а, үпкә е күренә ине. Бригадир булғайны, ҡоторҙо ла китте, майына сыҙай алмай...

Бөттө былай булғас. Әсмә менән Тайфа ла, кәфенлек осо менән ауыҙҙарын ҡаплап, бер-бере енә ҡарап алды. Хәҙер берәй нәмә булырын көт тә тор.

–Үҙең уң!.. Үҙең! – Тимербайҙың көр тауышы яңғыраны. – Пенсийәгә тиклем мәктәптә балалар башын ҡатырҙың, аҙаҡ халыҡтың елкә ен кимерҙең…

Абдулла мулла башлаған ике аҙымын кире атланы:

– Бит еҙ, мин халыҡтың елкә ен кимерҙемме?! Миңә килтереп бирҙеләр.

– Беләбеҙ инде. Бер бит ыйпағанға бер арыҡ орап ултырҙың…

– Шулай шул, – иренең үҙҙәрен Әсмә лә йөпләне. – Тамсы оятың юҡ! Сәрбиямалдың ҡыҙына никах уҡытҡанда бәрәсле арыҡ алдың, Дамираның ире үлгәндә кәзә бирҙеләр, Суфияның бала ына исем ҡуштырғанда…

Абдулла мулла түҙмәне:

– Риза булып бирҙеләр. Йола ы шул, – тине, иренен ҡымтып.

– Кеше талай торған йола юҡ ул, – Әсмәнең тауышы дорфа ғына сыҡты. Тайфа бер Абдулла муллаға, бер Тимербайға, бер Әсмәгә ҡараны:

– Етәр еҙгә! – тине ул ахырҙа. – Алла ы Тәғәлә ишетеп тора!..

– Ишет ен! Минең Хоҙайҙан йәшерер нәмәм юҡ. – Абдулла быны кемгәлер хөкөм ҡарары сығарғандай ҡысҡырҙы.

– Шулаймы ни?! – Әсмә мулланың ҡаршы ына уҡ килеп баҫты. – Тайфаның ишеген төндәрен кем шаҡый торғайны, ә?

– Ни-мә? – Аптырап Әсмәгә төбәлде Тайфа.

Тимербай әллә Абдулла мулланы йәлләне, әллә зыяратта тороуҙарын иҫенә төшөрҙө:

– К-хм… Ярай, етәр! Әллә нимәләр өйләй башланығыҙ! – тине ул. Ҡыҙҙы ла китте Әсмә:

– Юҡ, етмәй тор он әле. Әйт, Тайфа, кем шаҡый торғайны ишегеңде?

Тайфа, ярҙам өмөт иткәндәй, бер Абдулла муллаға, бер Тимербайға ҡарап-ҡарап алды. Тегене е сат йәбеште:

– Әйт, Тайфа, кем?..

Тайфаның йәне көйҙө. Унан ороу алып торорға кем уң әле Әсмә? Күп уйлап торманы, тегенең күҙенә бәреп әйтте:

– Иреңә баш булырға кәрәк ине…

– Ай, Алла! – тине нимә эшләргә белмәй бер урында тапанған Тимербай.

Муллаға етә ҡалды быны ы:

– Вот-вот! – тине Абдулла, ҡәнәғәт кеткелдәп.

– Ке-ем?! – Әсмә, яңылыш ишеттемме әллә, тигәндәй, ҡолағын ҡаплап торған кәфенлеген аса төштө.

– Кем бул ын, инең Тимербайың! – тине Тайфа, асыуы ҡабарып. Хәҙер йәшереп маташыуҙан фәтеүә юҡлығын тоя ине ул.

– ин… ин нимә өйләй ең, ә? – Ишеткәненә ышанманы Әсмә.

Тимербай битараф ҡына ҡул елтәгән булды:

– Ну, был бисәләр! Ҡолаҡҡа ятмағанды…

Ә Абдулла мулла тантана итә ине был минутта:

– Беҙ ҡапсыҡта ятмай, – тип мәғәнәле ығымта я ап ҡуйҙы ул. – Беҙеңде телә ә ниндәй ҡапсыҡҡа тығып бармаҫҡа ине, Тимербай! Хе-хе-хе…

– Тимербай?! ин?! – Әсмәнең күҙе шар булды. – Минең өҫтән!? Ошоноң менән!?

– Ну, шәп иттең, Тайфа! ай, шәп иттең! – Абдулла мулла ихлас шатланды был яңылыҡты ишетеп. Ҡай ылай йәтеш килеп сыҡты.

– Эскән… Эскән баш менән… – Тимербай тотлоҡто.

– Оят ыҙ, минең битемдән көлөп… – Әсмә әллә илай ине, тауышы ҡалтыранып сыҡты. Ҡара-ҡара, ғәрлеге ни тора! Тимербай ҡарсығын йыуа-

тырға самаланы:
— Ҡуй әле, Әсмә, үткән эш өсөн. Яңылышылған. Шайтан ҡоторттҡан.
— Кит, күҙемә күренмә, шаҡшы!.. Был гона ыңды Хоҙай мәңге ярлыҡамаҫ, бит еҙ! — Әсмә, ҡапыл иҫенә килгәндәй, Ғәләүетдингә текләне. — Тимәк... Тимәк... Аңлашыла...
— Нимә аңлашыла? — Тимербай тертләп китте.
— Тимәк... Ғәләү... — Әсмә шикле ҡарашын Тимербайға батырҙы.
— Әү, — исемен ишеткән Ғәләүетдин тауыш бирҙе.
— иңә әйтмәйем.
— Бәй, бында минән башҡа Ғәләү юҡ, — тигән булды Ғәләүетдин.
— Тимәк... — Әсмә, асыш я ағандай, әр үҙенә баҫым я ап өйләнде. — Ғүмер буйы ир еҙ йәшәгән Тайфаның бала ы... Тимәк, Ғәләү — инең улың...
Тимербай, көлгө ө килмә ә лә, көлөп маташты:
— Кит, Әсмә, ҡолаҡҡа ятмағанды. Миңә ҡара ла Ғәләүгә ҡара. Тамсы оҡшаған ере юҡ.
Әсмә иғтибар менән Ғәләүетдинде ҡапшаны:
— Гона шомлоғо!..
— Шулай инде, Әсмә апай. Эскән кешенең йөҙө йөҙмө, — тине Ғәләүетдин, башын эйеп.
— ине әйтмәйем, — тине Әсмә йомшағыраҡ тауыш менән. — Гона тан тыуған баланың ғәйебе юҡ.
Тайфаның ауыртҡан еренә эләкте был үҙ:
—Гона тан?! Бала табыу гона буламы?
—Уйнаштан тыуған! Гона шомлоғо! — Әсмә ян-яғына төкөрөнөп, ҡул елтәне.
—Гона та гона ... Үҙеңде бел, йәме.
— Мин ни эшләгән, ә?
— Иҫлә әле, иҫлә... — Тайфаның нимәлер иҫенә төштө, буғай, йөҙө яҡтырғандай итте. — Тимербайыңдың аттан ҡолап, имгәнеп балниста ятҡан сағын...
Абдулла муллаға оҡшаманы был:
— Туҡтағыҙ әле, йәмәғәт! орау алырға килерҙәр... Фәрештәләргә ни йөҙөгөҙ менән күренер егеҙ!..
Дауаханала ятҡан сағын шунда уҡ хәтере элеп алды Тимербайҙың. Төпсөп орарға кереште:
— Әйтеп бөт, Тайфа, мин балниста саҡта нимә булды?
Сабыр ыҙланды Абдулла мулла:
— Был фәрештәләрҙе әйтәм, нишләп оҙаҡлайҙарҙыр, — тип өйләнде үҙ алдына.
Тимербай унығ айын ныҡышты:
— Әсмә, әйт, нимә булды? инән орайым.
— Өҫтән йөрөүең етмәгән, хәҙер килеп орау ала ыңмы? — Әсмә иренән ҡарашын йәшереп маташты.
— Ҡабатлап орайым: нимә булды мин юҡта?
— Элеккене түгел, кисәгене хәтерләмәйем. Төпсөмә юҡты, — тип был ауыр орауҙан ҡотолорға самаланы Әсмә. Хатта үкенеп ҡуйҙы: әллә нимә енә үҙ ҡуйыртты үҙе.
Абдулла мулла ла итәғәтле булырға тырышты:
— Ҡартайғас хәтер насарая, — тине ул белдекле ҡиәфәттә. — Онотолоп бөткән нәмәләрҙә соҡонмайыҡ, йәмәғәт.

Тимербай сығырынан сыҡты:

— инең ҡыҫылышың булмаын, мөртәт! — тип екерҙе ул Абдулла муллаға. Тайфа шуны ғына көткән тиер ең, төрттөрә алды:

— Бар шул ҡыҫылышы…

Тимербай Әсмәгә тишерҙәй итеп ҡараны:

— Ә?! Әллә?! Мин юҡта.. Әсмә, әйт!..

Әсмә өсөн хәҙер барыбер. Теге донъя түгел, әллә ни эшләтә алмаҫ.

— Өҫтөмдән йөрөмәҫкә ине, үҙеңдән, — тине ул, иренең күҙенә тура ҡарап.

Тимербайҙың быуындары ҡалтырап китте хатта:

— Ни-мә?.. ин?.. ин?..

Теге донъяла Абдулла мулланың үҙенә ҡолаҡ ала торғайнылар, әллә шул иҫенә төшөп, дорфа итеп екереп ебәрҙе:

— Етәр еҙгә! Хәҙер фәрештәләр орау алырға килер…

Тимербай бар тип белде ти уның үҙен, үҙенекен тылҡыны:

— Бында мин орау алам. Әйтеп бөт, Әсмә!

— Бер генә… — тигән мығырҙаҡ үҙ сыҡты Әсмә ауыҙынан. Йүнле үҙ генә ишетелеп бармай, яман үҙҙең бышылдап әйткәне лә шаңдауға әйләнеүсән. Ишетте Тимербай. Ишетте генәме, ҡолағын ярғансы ҡысҡырҙылар, шаңдауы бөтә донъяға сәселде ымаҡ.

— Кем менән? — Тимербайҙың күҙе тондо.

Был ҡараште күп күргән Әсмә шөрләй төштө әм үҙе лә иҙмәҫтән:

— Ай, Алла! Ана тора, — тип ысҡындырҙы.

Тимербай бер аҙ шаңҡыны. Нимә әйтергә белмәне ул. Бөтә нәфрәте алҡымына килеп тығылды:

— Шул аҡаллы кәзә тәкәе менәнме?!

— Үҙең төпсөнөң, — тип кенә әйтә алды Әсмә.

— Ах, үлтерәм мин уны! Үлтерәм!.. — Тимербай, аҡты-ҡараны айырмай, Абдулла муллаға ташланды. Был тиклемен көтмәгән Ғәләүетдин улар араына икерҙе:

— Туҡтағыҙ, ағайҙар! Туҡтағыҙ!.. Мәйетте үлтереп булалыр!

— Етәр, ләғин! — Абдулла мулла Тимербайҙың матҡып тотҡан ҡулынан ысҡынырға тырышты. Тимербайҙың ҡулы ҡатыраҡ, ахыры, уртаға кергән Ғәләүетдинде ситкә елтәмәксе иткәйне, теге енең еңе бүҫелеп китте. Был икәүҙең дә хәле тиҙ бөттө, шикелле, ах та ух килеп ергә сүгәләнеләр.

— Инәнең башы, тәүге тапҡыр яңы бишмәт кейҙем, уны ы ла бүҫелеп сыҡты. Хәйерсенең ауыҙы ашҡа тей ә, мороно бешә, ти, дөрөҫ икән, — тип мығырланы Ғәләүетдин. Уңарсы булмай, Әсмә Тимербай эргәенә килеп етте:

— Берәй ерең ауыртманымы, бабай?

— орап торған була, — тине Тимербай, йыш-йыш тын алып. — Йөрәгемә уҡтың. Йөрәгемә ҡан ауҙы. Кит бынан, уйнашсы. Талаҡ! Талаҡ! Талаҡ!

Тайфаның Әсмәгә үпкәе ҙур ине. Түҙмәне:

— Бына, Әсмә, минең кеүек, ин дә бабайыҙ ҡалдың, — тине.

— Кит, ҡорсаңғы, күҙемә күренмә. инең арҡала булды, — тип ғәйбәр орҙо Әсмә. Хәленән кил ә, ботарлап ташлар ине Тайфаны. — инең түшәгеңдә лә ятҡанын беләбеҙ Абдулланың. Ғәләүең дә шуныҡылыр әле. Ана, күҙен бәзерәйтеп тороуы хас та Абдулла. Был тиклем дә оҡшар икән кеше…

— Миңә оҡшаған ере бармы шуның?! уйған да ҡаплаған — Тимербай, — тине Абдулла мулла.

— Тас Абдулла. Атлауына тиклем — ин. Йәле, Ғәләү, атлап күр эт шуға.

Әсмә үҙен бирмәне. Ғәләүетдин, иҫәр кеше шикелле, шарҡылдап көлөп ебәрҙе:

— Үәт мәрәкә. Теге донъяла бер атай ҙа юҡ ине, быны ында ике атайлы булдым. Эх, тегендә үк белгән бул ам, ике ен дә кинәнеп ығыр инем…

— Атлап күр эт, Ғәләү, — тип ныҡышты Әсмә.

Абдулла мулла ла Ғәләүетдиндә ниндәйҙер ыҙаттар эҙләне:

— Ҡашыңды йәмерәйт әле, Ғәләү. Ана бит, уйған да ҡаплаған Тимербай.

— Үҙ гона ыңды кешегә яп арып, йәннәткә керергә самалай ыңмы? — Тимербай киҫәткәндәй өйләнде. — Юл ҡуймам. ора алар, вис өйләп бирәм.

— Минең дә ауыҙҙы тегеп ҡуймағандар… — тине Абдулла мулла, фәрештәләр орау алғанда нисек яуап бирәсәген күҙ алдына килтереп.

— Тимербай менән ғүмер буйы йәшәп балабыҙ булманы. Абдулланыҡы Ғәләү, — асыш я аған кеүек әйтте быны Әсмә. Тимербайҙың көйгән йәненә ут ҡына өҫтәне был.

— Нимә, ин ҡыҫыр булғанға мин ғәйеплеме!? — тип үкерҙе ул Әсмәгә.

Шунда уҡ элеп алды Абдулла мулла:

— Тимәк, Тимербайҙыҡы! үгенеүенә тиклем уға оҡшаған.

— үгенеүгә ҡара аң, бөтә кешеләр ҙә бер туған булыр ине, — шәп әйтте Тимербай. Был үҙҙәрҙән үҙе лә ҡәнәғәт ине.

Абдулла мулла ла бирешерлек түгел:

— Ана, баҫып тороуын ҡара ин уның. Тас ин!

Тимербай, икереп тороп, Абдулла муллаға уҡталды:

— Хәҙер мин ине!..

— Туҡтағыҙ! — тип ҡысҡырҙы Ғәләүетдин. — Туҡтағыҙ! Эсмәйенсә лә уғышыр икән кеше. Берҙән-бер бишмәтте эшлектән сығарҙығыҙ, эт йыҡҡыры.

Әллә Ғәләүетдиндең үҙҙәренән йомшара төштө Тимербай, ҡул елтәп, кире сикте әм:

— Бәхетең, теге донъяла түгелбеҙ, — тип ыҫылданы. — Ни эшләтергә белер инем мин ине!..

Әсмә Тайфаға ялбарғандай өндәште:

— Тайфа, талаштырма шуларҙы, кемдеке икәнен әйт тә ҡуй.

— Мин ҡайҙан беләйем?! — тине Тайфа. — Ике е лә бер-бер артлы килмәҫкә ине…

— Бына бәлә, — тип өйләнде Абдулла мулла үҙ алдына. — Дүрәк Ғәләү өсөн дә хөкөм ит эләр… Тимербайҙыҡы бул а ярар ине…

Уйламағанда Ғәләүетдин илап ебәрҙе. Ҡалын ирҙәр тауышы менән йәм еҙ итеп үк ене, ғүмерҙә ҡыланмағанын. Бөтә е лә тынып ҡалды.

— Теге… Теге… Теге донъяла, — урыҡ- урыҡ өйләнде Ғәләүетдин, — еҙҙең гона ығыҙ ҡиәфәтендә әҙәм өркөтөп йөрөгәнмен икән! Ниңә тыуҙырҙың мине?! Ниңә?!

Уны берәү ҙә йыуатманы, үҙҙәрен дә ҡолағына элеүсе булманы, шикелле. Был мәлдә Абдулла мулла — Тимербайҙың, Тимербай — Абдулла мулланың, Әсмә Тайфаның гона тарын барлай ине…



**Замир**
**НИЗАМЕТДИНОВ**

# УТЫҘ ЙЫЛ УҘҒАС...

Инеш ∞үҙем оҙонғарак китмәксе – алдан ук ғәфү үтенәм. Әле ∞еҙ укыясак яҙмамдың үҙенсәлекле ∞әм ғибрәтле яҙмыш-ғүмере бар. Мин уны Бөйөк Еңеүҙең 35 йыллығы алдынан ижад итеп, 1979 йылдың икенсе яртыъында, якты теләк-өмөттәр менән “Ағиҙел” журналына конкурсҡа ебәргәйнем. Ләкин уның юлы үтә сетерекле, ҡыҫҡа булып сыкты. Редакция ә∞елдәре яҙманы яратып ҡабул иткән ∞әм баҫып сығарырға фатиха биргән, хатта тексы йыйылған. Ләкин...

Хәйер, баштан... 1977 йылда мин, Туймазы район Советы башкарма комитетының мәҙәниәт бүлеге мөдире йөгөн тарткан сакта, юғарылағы ағай-энеләрҙең фатиха∞ынан башка ∞әм эшемдән китмәҫкә өгөтләүҙәренә ҡарамаҫтан, “Ҡыҙыл таң” республика гәзите редакция∞ына әҙәби хеҙмәткәр вазифа∞ына күстем. Был баш-баштаҡлыкка ҡала-район түрәләре нык асыуланды. Өҫтәүенә, республика гәзиттәрендә бәғзеләренең ҡырын эштәре тура∞ында минең бер нисә тәнкит мәкәлә∞е лә донъя күргәйне. Был и∞ә чиновниктарҙы сығырынан сығарҙы: элек ҡул аҫтында эшләгән бер бәндә уларҙы республика матбуғатында фашла∞ын әле?!

Көттөм-көттөм дә, ғаиләмде (ул вакытта өс балабыҙ бар ине инде) күсерергә фатир булмағас ∞әм аҙна ∞айын Өфө – Туймазы юлын тапау арыткас, тыуған яктарыма әйләнеп ҡайтырға мәжбүр булдым: “Ленинский путь” – “Ленин юлы” гәзитенә мөхәррир урынбаҫары булып урынлаштым. Редакция партбюро∞ы секретары итеп тә ∞айлап ҡуйҙылар. Шулай, тора-бара, үҙем тәнкитләгән ағай-эненең үткер тырнағына килеп ҡапканымды ∞иҙмәй ҙә ҡалдым. Бер аҙ вакыт үткәс, яйын ∞әм сәбәбен табып, башка кешенең дә ғәйебен миңә яп∞арып, мине партиянан сығарҙылар. *(Үҙ инаныу-теләгем менән КПСС сафына 18 йәшемдә үк ингәйнем.)* Шунан ∞уң... башланды.

Туймазыға әҙәби кисәләр үткәреү өсөн бер төркөм яҙыусылар килеп төштө. Дөйөм

---

*Замир Низаметдинов Туймазы районының Сәрән ауылында тыуған. БДУ-ны тамамлай, мәктәптә, райондың мәҙәниәт бүлегендә, “Ленин юлы”, “Ҡыҙыл таң” гәзиттәре редакция ында эшләй.*

*Билдәле журналист әҙәби ижад менән дә шөғөлләнә. Уҡыусыларыбыҙға уның инеш үҙе менән бер хикәйә е тәҡдим ителәә.*

ятакта үтәсәк бер кисәгә өлкән дуҫым Рәшит Солтангәрәев (йәне йәннәттә булыр!?) мине лә сакырҙы. Партияның ҡала комитетындағы әңгәмә барышында "тиҙҙән "Ағиҙел" журналында минең әҙәби әҫәрем баҫыласағы" хаҡында хәбәр итеп өлгөргән, бәхетһеҙ-леккә ҡаршы. Кисәлә мин дә сығыш яһаным. Етмәһә, ҡунаҡтар менән йәнәшә "президи-ум"ға ултырттылар. Был хаҡта иртәгәһенә үк партия ҡала комитетында билдәле була. Партия-совет түрәләренең асыуын ҡабарта был хәл: беренсе секретарь Ә.Ш. Ғәлиев, ми-нең яҙмамды "Ағиҙел" журналында сығармауҙарын һорап, яҡташыбыҙ – Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, БАССР Юғары Советы рәйесе һәм депутаты Ә.М. Мирзаһитовка шылтырата. Данлы яҡташым, "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире менән килешеп, номерҙан әлеге яҙмамды алдырта. (Миңә был хаҡта баҫманың ул ваҡыт-тағы проза бүлеге мөдире, яҙыусы Ғабдулла ағай Байбурин әрнеп һөйләгәйне). Шулай итеп, әҫәрем "футбол"ға әйләнде, яҙыусы булыу хыялым селпәрәмә килде. Мин журналист булып киттем, ҡалдым. Һис үкенмәйем!..

Эҙәрлекләнеүҙәр һәм ҡыйырһытылыуҙар, түрәләр алмашынып торһа ла, бик оҙаҡ барҙы. Эшкә урынлашырға, урынлашһам, иркенләп эшләргә ирек бирмәнеләр, мәҡәлә, очерктарымды, әҙәби яҙмаларымды баҫтырманылар, ҡайҙалыр хат юллаһам, почтаның сортировка бүлексәһенән партия ҡала комитетына шунда уҡ хәбәр итеп торҙолар, ә ун-дағы инструкторҙар хатым барасаҡ ойошмаға алдан уҡ мине хурлап, яманлап шылтыра-тыр булды. Ҡайһы саҡ хаттар бөтөнләй юҡҡа сыҡты. Шулай итеп, "блокада"ла ҡалдым, ниндәйҙер дәрәжәлә "халыҡ дошманы"на әйләндем. Шауҡымы ғаиләмә лә, туғандарыма ла, хатта яҡын дуҫтарыма ла тейҙе.

Өй архивымда бер бәләкәй генә записка һаҡлана. Уны 1982 йылдың 14 ғинуарында ул осорҙа "Совет Башҡортостаны" гәзитендә эшләгән курсташым Аҫылғужа Баһуманов баҫылмаған очеркымды кире ҡайтарғанда һалып ебәргәйне: "Замир! Һиңә "табу" һалды горком. Медстеклонан яҙған әйберенде сығарғайным, редакторға шылтыраткандар. Хәл юҡ инде. Сәләм менән Аҫылғужа".

Быға ниҙер өҫтәү кәрәкмәйҙер...

Ниһайәт, сыҙарлыҡ хәлем ҡалмағас, бөтәһен дә эҙмә-эҙлекле бәйән итеп, Мәскәүгә барып, КПСС Үҙәк комитетының Генераль секретары Леонид Ильич Брежневка хат юлла-ным. Бәхетемә, хат партияның Үҙәк комитетына барып еткән. Тиҙҙән Туймазыға КПСС өлкә комитетынан У. Бакиров етәкселегендә абруйлы комиссия килеп төштө: унда "Со-ветская Башкирия" һәм "Совет Башҡортостаны" гәзиттәренең баш мөхәррирҙәре Н.Каменев һәм А.Исмәғилев; ә "Ҡыҙыл таң"дың баш мөхәррире (хәҙер мәрхүм) Р. Даш-кинды (мин уның етәкселегендә аҙмы-күпме эшләһәм дә) ниңәлер индермәгәндәр. Инст-рукторҙар П. Байғужин менән Р. Фәттәхов 13 сәғәт 15 минутта, фатирыма килеп, 14 сәғәткә партия ҡала комитетына саҡырҙылар. Сәбәбен дә әйтмәнеләр, әгәр мин өйҙә булмаһам, улар өсөн бигерәк тә отошло – мәсьәләне минән башҡа ғына хәл итмәксе бул-ғандар. Барҙым. КПСС өлкә комитетының дүрт ағзаһы БАССР Юғары Советының дүрт депутаты идеологик яҡтан (ә партиянан нәҡ "идеологик яҡтан тотанаҡһыҙлыҡ өсөн" сығарҙылар) эшкәртә башланы. Ҡурҡыталар, янайҙар, вәғәз уҡыйҙар, ояладар... Быларҙ-ың файҙаһы теймәгәс, бөгә-һындыра алмағас, "беренсе" Ә. Ғәлиев миңә (ғаиләмде – ҡа-тыным һәм өс балабыҙҙы Туймазыла ҡалдырып) районның иң төпкөлөндә урынлашҡан Өйәҙетамаҡ ауылы мәктәбенә уҡытыусы булып барырға тәҡдим яһаны. Ҡәтғи рәүештә баш тарттым һәм: "Һеҙҙән эш урыны һорамайым, талап та итмәйем. Берҙән-бер теләгем – мине эҙәрлекләүҙәрҙе һәм ғаиләмде ҡыйырһытыуҙы туҡтатығыҙ! Матбу-ғатҡа юл асығыҙ! Шул еткән," – тинем дә, протест йөҙөнән ишекте шарт ябып, бер ниндәй рөхсәтһеҙ кабинетынан сығып киттем. Шунан һуң түрәләрҙең миңә ҡарата мөнәсәбәте бер аҙ үҙгәрҙе: хәҙер туранан-тура, оятһыҙ рәүештә һәм ләззәт татып эҙәрлекләмәйҙәр һәм йәберләмәйҙәр, ә аҫтан киҫә башланылар...

Бер аҙҙан кала комитетының беренсе секретары вазифа∞ында 17 йыл(!) эшләгән, БАССР Юғары Советы депутаты Ә. Ғәлиев әфәндене эшенән бушаттылар ∞әм КПСС сафтарынан осорҙолар. Шуға күрә мин йыш кына: “Советтар Союзында перестройка – булғанды ∞үтеү, үҙгәртеп короу Туймазынан башланды,” – тип кабатларға яратам.

Тиҙҙән КПСС та таркалды. Ә мин бөгөн дә коммунист – Рәсәй Федерация∞ы Коммунистар партия∞ы ағза∞ымын.

Бөгөн, 30 йылға якын ғүмер үткәс, әлеге әҙәби әҫәремде “Ағиҙел” журналына ∞әм уның укыусыларына кабат тәкдим итәм. Хәйерлегә бул∞ын! Юғи∞ә, әлеге яҙмам – күңел емешем, етем калған үгәй бала ише, миңә рәнйеп яткан кеүек... Бирғәйбә!

---

# ҠАЙТАУАЗ

ХИКӘЙӘ

*Илебеҙ азатлығы өсөн изге көрәштә яу ҡырында ятып ҡалған ғәзиз ауылдаштарымдың яҡты иҫтәлегенә.*

Аҡ ромашкаларға күмелеп, болонда автоматтар ята. Ил сигендәге кеүек хәүефхәтәр көтөп, тын ғына ята улар.

 алдаттар, ирәк-мирәк мыйыҡтары әле яңы ғына күренә башлаған егеттәр, төнгө күнегеүҙәрҙән  уң ялға туҡтаған. әммә е лә уйҙа: хатта уғыш уйыны ла уйын эш түгел икән.

Иртәнге аштан уң, сәскәләр менән сыбарланған йәшел үләнле аҡланға уҙылып ятып, йәш алдаттар тәмәке көйрәтә. Икенсе берәүҙәре, усаҡ янына сүгәләп, тәмләп мәтрүшкәле-еләкле сәй емерә. Шулай ҙа бере е лә бил ҡайышын ысҡындырмаған: ир-аттың ял ваҡытында ла билбаулы булыуы хәйерлерәк!

Форсаттан файҙаланып, замполит халыҡ-ара хәл тура ында әңгәмә ен дауам итә. Ҡатмарлы әле донъялар: әр тарафта ҡорал өсөн, уғыш өсөн — кеше үлтереү, кеше ғәриплләндереү-имгәтеү өсөн ҡорос ҡоялар. Башта уйҙар йөҙә: Ер шарының уңы бар, улы бар — ҡай ы бер мәғлүндәр ҡай саҡ шуларҙы бутап ебәрә. Ер иҫкәнеп, ҡалтырап ҡуя. Уның да ғәмәлдә күсәре бар: йылъяҙма-тарих яҙып, тәгәрмәстәй ыңғыраша-шығырҙай әйләнә лә әйләнә. Ҡай ы бер яуыздар, ҡом оҙланып, киң донъяны тар ынып, ваҡыт — осор — тарих тәгәрмәсенә күҫәк тығырға самалай.

... Күҙ алдына ауылдашым Шәрәфетдин бабай килеп баҫа. Ул да шулай донъя елләтеп йөрөй ине. Төтөн, дары еҫен ис тә яратманы. “Төтөн, уғыштағы кеүек, уҡшыта, күҙҙе томалай, күкрәкте тонсоҡтора, зи енде тарҡата. Төтөндән көйгән ер, янған өйәк, ҡурылған ит, ыҫланған ҡан еҫе килә”, — тип теңкәгә тейә ине. Үҙе тәмәке ен ауыҙынан төшөрмәне. Аңламаҫ ың кешене...

Фронтҡа буй еткергән малайы менән парлап киткән Шәрәфи ағай (уға ауылдаштарының күбе е шулай өндәшә ине) уғыш аҙағында улын да, ыңар ҡулын да юғалтып, бер аяғын бүкән-таяҡҡа алыштырып ауылға ҡайтып төшә. Халыҡ хәләхүәл белешергә йыйылғас, беренсе әйткән үҙе шул була:

— уғыш — тамуҡ түре, үлем тирмәне ул. Шул тирмәнгә минең бер ҡулым, бер аяғым инеп китте. Башты ваҡлай алманы.

Яулыҡ осон күҙ йәше менән сылатырға керешкән еңгәй-әбейҙәрҙе бер ауыҙ үҙ менән шып туҡтата:

— Йәгеҙ, балауыҙ ығып тормағыҙ бында, маттитиләр, күңелде болоҡ отоп. Хуатит! Ҡыҙғаныу, йәлләү кешене меҫкен я ай ул. Быуынын йомшарта. Кешенең

рухын, умыртҡа өйәген емерә. Ул көнгә төшкәнем юҡ әле! Ир кеше бит мин, тулы уҡ булма ам да. Донъя ын дер елкетеп йәшәрбеҙ әле беҙ Хәбирә еңгәгеҙ менән, Алла бойор а. Ҡул-аяҡ ыҙ ҡалдым тип тормам, Гитлерҙың мин унының...

уңыраҡ шуны ы асыҡлана: Шәрәфи ағай контузиянан уң бер самараҡ булып ҡалған икән. Зи ене ваҡыты-ваҡыты менән шыйыҡланыпмы, әллә тығыҙланыпмы китә ине. Шулай тип өйләнеләр.

Беҙ уңды улдан айыра башлағанда, Шәрәфи ағайға "карт" тигән ярлыҡ йәбештерелгән ине инде. Көн айын тип әйтерлек осрата инек беҙ уны. Гәзиткә оҙон, йыуан махорка төрөп ауыҙына ҡаба ла кистәрен ҡапҡа төбөндә гармун тартып ултыра. Гармундың ул ҡайышын өҙөлгән ҡулы "ботағына" эләктереп, ергә ултырған килеш ыңар ҡулы менән уйнай ҙа уйнай. Үҙе туҡтау ыҙ тәмәке ен көйрәтә. Йөрәккәйҙәре янғандыр инде. Ҡайсаҡ, бер кем орама а ла, аҡланғандай әйтеп ҡуя:

–"Баҡа" ына баҫыу ниәбизәтелне. Гармундың бар моңо алма төптәрендә лә, минең йөрәктә...

Беҙ, танау аҫты кипмәгән, тишек ыштанлы малайҙар, ситтәнерәк күҙәтеп торабыҙ. Үтеп барыусы берәй е уға үҙ ҡуша. "Ни хәлдәрҙә, Шәрәфи ағай, ниңә эскәмйәгә ултырып уйнамай ың?" Ҡарттың яуабы ҡәтғи: "Ерҙә яйлыраҡ. Окоптағы кеүек. Окоптар беҙҙең күңелгә соҡолған бит ул, ҡустым".

Ҡараңғы төшкәнсе шулай күҙ йәштәренә төйөлә-быуыла уйнай Шәрәфетдин ҡарт. Унан уң: "Гитлерҙың мин унының..." – тип елләнеп-дыуамалланып өйөнә инеп китә. Ҡулбашына эленгән гармунының күреге тартылып- уҙылып, атлаған айын ыңғырашып-уфылдап бара. Шунан уң өс-дүрт көн урамда күренмәй ҡарт. Дүртенсеме, бишенсеме көнөндә, ағас аяғын тоҡҡа алып, ҡул ботағына эләктерә лә, ҡултыҡ таяғына таянып, аҡ ай-туҡ ай аласыҡҡа табан юл тота. Бындай саҡтарҙа берәү ҙә унан ҡайҙа барыуын орамай. Кәрәк анаған кеше енә Шәрәфи ҡарт үҙе әйтә:

–Ике-өс көн инде ошо аяҡ тынғы бирмәй, – ти, тоғона ымлап. – Көнө-төнө ыҙлай, мәлғүн. Йоҡо заты күргән юҡ. Аласыҡҡа барып, исма ам, нервыларын тынысландырып ҡайтайым әле.

Тағы бер сәйерерәк ғәҙәте бар ине. Ҡапҡа төбөндә ултырғанда, үтеп барыусы кешене туҡтата ла орай:

–Донъя хәлдәре нисек, туған, илдәр именме?

Күңеленә ятышлы үҙ ишет ә, үҙе бер:

–Рәхмәт, туған, шулай ғына була күр ен. Именлектә – бәрәкәт. Имен генә була күр ен донъялар.

Шикле-шөб әлерәк үҙ ҡолағына ин ә, ҡарт, ҡултыҡ таяғын болғап, ҡыҙып уҡ китә:

– Гитлерҙың мин унының!.. Күңелем күгендә аҡ күгәрсендәр ос а ла, йөрәгемдә дошманға ҡаршы үткер ҡылыс ята минең.

Ә инде Ер шарының ниндәй ҙә бул а төбәгендә аҡылынан туйып шаша башлаған берәр әҙәм аҡтығының ҡорал "шылтыратыуы", кемгәлер янауы әм ҡул күтәреүе тура ында ишетеп ҡал а, ҡарт алдат, дыуамалланып, теткеләнеп-силәкләнеп бөткән иҫке шинеле менән биштәрен арҡа ына алып, ауылдан уҡ сығып китә:

– Гитлерҙың арт абағын уҡытып, тәүбә ен әйттереп ҡайтам хәҙер! Үҙенән онталҡан я ап, эйәрсендәренән ыумас ыуам, инәләрен эт ялағырҙарҙың!

Ундай саҡтарҙа Шәрәфи ҡарт ҡайҙа нишләп йөрөй – бер кем бер нәмә белмәй. Бер аҙ тыныслана төшкәс, кисен көтөү менән бергә ҡайта үҙе. Мал ҡыуа-ҡыуа, тәмәке ен төтәтеп, башҡалар алдында аҡланған кеүек өйләнеп ҡайта:

— ай, малҡай, тиҙерәк атла. Өйҙә хужаң көтәлер. Аҡыл эйә е бит ин. Гитлерҙа ғына хайуан башындағылай ҙа аҡыл юҡ. Мәлғүн! Әйткән инем бит, Гитлерҙың мин унын...

Халыҡ тора-бара уның да серенә төшөндө: был саҡтарҙа Шәрәфи ҡарт үҙен яуҙан ҡайтҡандай хис итә икән. Күрә ең, күңеле бушап ҡалалыр инде.

Ҡарт төндәрен ҡарсығына тынғы бирмәй башлаған икән. Ойоп-бүҫелеп йоҡлап ятҡан ҡарсығын ис уйламағанда уята ла:

— Бар белгәнең — йоҡо. Малайҙың өҫтөн ҡарар инең, исма ам, йоҡо бирәне. Өҫтө асылып, өшөп-туңып ятма ын, ерҙә алҡын бит. Үҙең юрғанға төрөнөп ятҡас та, — ти икән, үтә лә хафаланып. Ҡарсығы нишлә ен инде — күнә. Хәбирә еңгәбеҙ төн урта ында уҡрана- уҡрана тороп, ике янында бер аҙ ҡыштыр-мыштыр килгәс кенә тына икән ҡартлас...

Ғәйрәте сигә-сигенә төшкәс, төндәрен ҡарауылда тора башланы был. Ашлыҡ келәттәрен аҡлай. Бер көн колхоз рәйесенә әйткән, ти:

—Рәйес туған, кем дә бул а аҡта торорға тейеш. Уяулыҡ әр саҡ кәрәк! Ашлыҡ порых кеүек бит ул, ҡабынырға ғына тора. аҡланғанды Алла ы Тәғәлә үҙе аҡлаған, ти.

Төн урта ында Шәрәфи ҡарт, кәрәк ә-кәрәкмә ә лә, ауаға шартлатып атып ебәрә. Имеш, тыныс йоҡлағыҙ, ауылдаштар, аҡта — ҡарт алдат Шәрәфи. Ул-был булмаҫ!

Иртән ауыл халҡын уның ағас аяғының шаҡ-шоҡ итеп атлаған тауышы уята. Ҡарауылдан ҡайтҡанда урамды урап сығыу уның ғәҙәтенә ингән. Әйтер ең дә, Шәрәфетдин бабай ағас аяғы менән заң ҡаға. Ғәләм яңғырап тора.

Уларҙан да иртәрәк тороп урамға сыҡҡан кешеләрҙән Шәрәфи ҡарт, туҡтап, ҡат-ҡат орай:

— Донъялар именме? Төнөң нисек үтте?

Шулай ти ҙә тағын арыраҡ атлап китә: туҡ-лап-туҡ, туҡ-лап-туҡ! Ысын аяҡ менән ағас аяҡ, әйтер ең, ыҙлатып, йөрәккә, бәғергә баҫалар...

Бер мәл, уғышта ятып ҡалған ауылдаштарға колхоз әйкәл ҡойҙора икән, тигән хәбәр таралды. Шул көндән башлап ҡарт алдатҡа пар ҡанат үҫкәндәй булды, барлы-юҡлы тыныслығын юғалтты. Шәрәфи ҡартты көн айын тиерлек колхоз рәйесе бүлмә ендә осрата башланылар. Барған-йөрөгән айын бер үк үҙҙәрен ҡабатлай икән:

— Рәйес туған, рәхмәт үҙеңә! Оло йәнле, башлы кеше икән ең. Кеше хәтеренең ҡәҙерен белә ең. Улыма әйкәл ҡуйҙырырға ниәтләп йөрөй өң икән. Гитлерҙың беҙ унын...

әйкәлдең алдына таҡтаташ та ҡуйыласағын белгәс, сатанлай-сатанлай күрше ауылға барып, ҡунып, шиғыр яҙғылап- ыҙғылап маташҡан бер уҡытыусынан дәфтәр битенә "изге" шиғри үҙҙәр ҙә яҙҙырып алған. Үҙ теләгенә тамам ирешкәнсе уҡытыусыға төнө буйы тынғы бирмәгән, буғай. Күрше ауылдан ҡайтышлай уҡ колхоз етәксе енә инеп, ҡәтғи рәүештә бына ни әйткән:

— Рәйес туған, улымдың әйкәленә ошо изге Алла үҙҙәрен яҙҙыра ың. Бәхәсләшеп тә торма минең менән. Ҡарт алдат әйтте — бөттө!

Колхоз етәксе е таҡтаташҡа шиғырҙың дүрт юлы ғына ыясағын ныҡлап төшөндөргәс, бер аҙ аяҡ терәп тартҡылашҡан- атыулашҡан да тәки ынған — ризалашҡан ҡарт алдат:

— Ярай, Рәйес туған, тәки күндерҙең, ин әйткәнсә бул ын, грамота бармы ни ул беҙҙең, аң-зи ен бул а ла. Уҡыу бер көн дә тәтемәне бит беҙгә. Ярай, таҡтаташтағы ы үҙ урынында булыр, ҡалғандары күңелдә йөрөр. Күңелдә лә изге үҙҙәр булырға тейеш. Алла менән Ҡөрьән-Кәрим шулай ҡушҡан.

әйкәл ҡуйылғас, Шәрәфетдин бабайҙың йыйылған халыҡ алдында әйткән беренсе үҙҙәре шул булды:

— Улым ҡайтты, туғандар, әйкәл булып минең улыҡайым ҡайтты. Нәҡ бына үҙе инде, ҡойоп ҡуйған кеүек. Каска ы ла, шинеле лә уныҡы. Улымды ҙурлауығыҙ өсөн рәхмәт, туғандар. Командирҙары унынан яҙҙы: унғы уғышында дошман амбразура ын күкрәге менән ҡаплап алған бит ул. Ил улдары әйкәлгә лайыҡ.

Шәрәфетдин бабай ул көндө ғүмерендә беренсе тапҡыр, йәнәшә ендәге ҡарсығы Хәбирә еңгәне лә белештермәйсә, таҡтаташҡа башын ҡуйған килеш шашынып-быуылып, үк ей-үк ей иланы. Был мәлдә уны тынысландырырға, уға ниндәйҙер үҙ әйтергә берәү ҙә баҙнат итмәне, шулай кәрәк, тип тапҡандарҙыр инде, күрә ең. Үҙҙәре лә әсе-ҡайнар күҙ йәштәрен тыя алманылар...

әйкәл ҡуйған көндән башлап, кәрәге булма а ла, ҡарт алдат төндәрен үҙ теләге менән әйкәлде аҡлай башланы. “Ниңә уны аҡлай ың, Шәрәфетдин ағай, бер ҡайҙа ла китмәй ул хәҙер, нигеҙе таштан бит, ныҡлы. Шунда ғүмерлеккә ҡуйылған да а ул”, — тип үҙ әйтеүселәргә яуабы әр саҡ әҙер:

— Улар — беҙҙе, беҙ уларҙы аҡлайбыҙ инде. Ғүмер баҡый шулай. Яу ҡырында ятып ҡалған яугирҙар беҙҙең тыныслыҡты, беҙ уларҙың хәтерен аҡлап, күңелдә яңыртып ғүмер итәбеҙ, туғанҡайым. Яралы алдаттарҙы бимазалама ындар!

Әле тағы бер тапҡыр уйлап ҡуям: ауылдашым Шәрәфетдин бабайҙың күңел майҙаны тулы изгелек әйкәлдәре булғандыр, моғайын...

...Үҙе, урамдан үтеп барыусыларҙы туҡтатып, таҡтаташҡа уйып-соҡоп яҙылған юлдарҙы ҡат-ҡат уҡыта. Унан уң күңелдәге ен өйләп күр әтә:

*әйкәл итеп кеше ынын түгел,*
*Батырҙарҙың данын ҡоялар.*
*Исемдәрен гранит ташҡа түгел,*
*Кешеләр хәтеренә уялар.*

— Бына шул! Гитлерҙың беҙ уның!..

Армияла хеҙмәт итергә киткәндә беҙҙе, ауыҙ ситтәренән әсә өтө лә кибеп бөтмәгән, әле мыйыҡ төктәре лә морон төртмәгән “малай аҡтыҡтары”н, тиле ғәйрәт менән донъяны дер елкетергә әҙер “никруттар”ҙы, биҙәкле-ҡыңғыраулы дуғалы ат ектереп, Шәрәфетдин бабай хәрби комиссариатҡа ҡәҙәр үҙе алып барҙы. уғыштан “эйәреп ҡайтҡан” ыңар еңе өҙөк гимнастерка ын үҙе менән алған. Ҡан-туҙан таптары әле лә бөтмәгән. Өҫтөндә — өр-яңы алдат кейеме. ( алдат хеҙмәтенән ҡайтҡан әр ми ырбанлы егеттең үҙ гимнастерка ын Шәрәфетдин бабайға бүләк итеүе ауылдың матур ғәҙәтенә әйләнеп китте. Шуға күрә ул әр саҡ яңы алдат кейемендә йөрөр ине.) Хеҙмәтен тултырып ҡайтҡан әр егет аҫылынан бер генә әйбер орай икән ул: “Гитлерҙы дөмөктөрөп ҡайттыңмы, улым? Бик әйбәт иткән ең!” Шәрәфетдин бабайҙың арҡа ында — биштәр. “Армияға алыпнитеп ҡуй алар, кәрәк булыр. Юлда ниҙәр булмаҫ. Әрмис тормошо бит ул...” — ти ҡарт алдат. Үҙе бер яйға гармунын тарта. Күңеленән арҡып- ығылып, йөрәгенән ташып-тулҡынланып сыға көйҙәре. Үҙәккәйҙәрҙе өҙә. Дуғалағы ҡыңғырауҙар, әйтер ең, Шәрәфетдин бабай гармунының “алмалары” инде, ике көй-моң менән сыңлау бергә үрелеп бара. Түҙеп-сыҙап ҡара бына шундай ила и мәлдәргә. Семеттереп, тән буйлап әллә нимәләр йүгерә-йүгерешә...

Тәмәке ен көйрәтеп бөтөргәс, Шәрәфетдин бабай миңә ирәк-мирәк үҙ әйтеп ҡуя:

— Ҡулыңда – дилбегә, улан. Атыңды ҡыуырҙан алда күсәренде ҡара, улым. Тәгәрмәс күсәрен. Ҡабалан аң да, ҡауҙарланма, сабыр аҡыл менән эш ит. Ҡыйыр ытма уны, ат та йән эйә е. әр тарафҡа төкөрөк сәсеп барма. Беҙҙең ауыл

менән комиссариат ара ындағы юл да – үҙе бер тарих. Был донъяла бер кем дә төшөп ҡалған бөкө түгел. әр кемдең үҙ дәрәжә е, үҙ мәртәбә е, үҙ түбә е менән түшәме бар...

Был фә емдән нимә теләй ең, нисек булдыра ала ың, шуны аңлай ың инде...

Хәрби комиссариатта хушлашҡанда, бер-ике генә үҙ әйтте ҡарт алдат:

– Уяу булығыҙ, уландар! Уяулыҡ әр саҡ, әр ерҙә кәрәк. Гитлерынан аҡ булығыҙ еҙ унын. Үләт кеүек ул, ҡалҡып сығырға ғына тора. Шәрәфетдин бабайығыҙ әйтә еҙгә. Ҡарт алдат киҫәтә еҙҙе!..

Унан уң – бабайыбыҙ кинәт еңеләйеп китте бул а кәрәк – майҙанды тултырып "Смирно!" тип ҡысҡырып ебәрҙе. Беҙ баҫҡан урындарыбыҙҙа үрә ҡаттыҡ. Шәрәфетдин бабай арба ына ултырҙы ла, "Вольно!" тиергә лә онотоп, атын ҡыуалап китеп тә барҙы. Беҙ, ҡатҡан бағана кеүек, "Смирно" баҫып ҡалдыҡ. Ауыҙҙарыбыҙҙы асып, бер-беребеҙгә ҡарашып...

***

Хәрби хеҙмәттең бер нисә айы үткәс, ауылдан хат килде. Шәрәфетдин бабай тура ында ла юлдар бар ине унда.

...Урып-йыйыу ваҡытында ырҙын табағын ҡош-ҡорттан ҡарауыллай башлаған ул. Бер мәл шулай ырҙын табағында компрессор менән асфальт ремонтлайҙар икән. Барлыҡ тирә-йүнде "трр-трр-трр!" тигән өн-ауаздар баҫа. Иҫләмәгәндә шул тауыш ҡолағына килеп ингәс, Шәрәфетдин бабай, ҡултыҡ таяғын ауаға күтәреп, үҙәк өҙгөс әсе тауыш менән ҡысҡырып ебәрә:

– Тағы ләғнәт төшкөрө уғыш, тағы ҡан ҡойош, тағы әҙәм үлтереш!

Эштең нимәлә икәнен аңлап алғас, Шәрәфетдин бабай, бер үҙ ҙә әйтмәйенсә, башын түбән эйгән килеш, аҡ ай-туҡ ай өйөнә ҡайтып китә әм урынына ауа. Шунан хәлләнә, аяғына баҫа алмай. уңғы үҙе былай булған бабайҙың:

– Ҡайҙа, Хәбирә, Гитлерҙың кәрәген биреп, тағы тәүбәгә килтереп ҡайтайым әле мин. Теге донъяла ла эҙләп табам мин ул үләт батша ын. Күрмәгәнен күр әтәм! Был юлы Берлинына барып етеп, ҡоҙғон ояларына Еңеү байрағын үҙем элеп ҡайтам. Юлға әйберҙәр әҙерлә, Хәбирә!..

Дөрөҫ бул а, ағас аяғын тотҡан килеш, туп аға арҡыры төшөп йән биргән икән. Нервы ептәре, йөрәк алма ы сыҙамағандыр инде...

Шәрәфетдин бабайҙың кинәт вафат булыуы тура ындағы ҡайғылы хәбәр көҙ килгәйне. аман күҙ алдымда шул тора: көҙгө ел сағандарҙың ары япраҡтарын а-ры ағыш итеп туҙғыта. ары ағыш аҫтында ҡарт алдаттың өр-яңы ҡәбере хәтер кеүек күпереп ята. Был йөрәк нисек ыҙлама ын да нисек ағышланма ын!..

***

...Зәңгәр ҡыңғырау сәскәләренә күмелеп, болонда ҡултыҡ таяҡтары ята. аҡтағы алдат кеүек, хәүеф-хәтәр көтөп, аҡ ҡына ята улар. Кескенә аҡ ыҙлыҡ күр әт әң дә, таяҡтар, ҡыңғырау сәскәләренә ҡағылып, заң ҡағасаҡ. Барлыҡ Ғаләмде заң тауышы күмәсәк.

Ветерандар үҙ еҙ генә тәмәке көйрәтә, хәтер яңырта... Замполит донъя хәлдәре менән таныштыра. Бик болғансыҡ икән донъялар, әр тарафта уғыш өсөн ҡорал ҡоялар. Күҙ йәшенән, ҡандан ҡоялар. Берүк аҡ-уяу була күр, Кеше!

# “Күңелемдә – донъя сере”



Ринат СӨЛӘЙМӘНОВ

## Яҙ

Ҡоштар ҡайта. Көткән яҙҙар еткәс,
Ҡоштар ҡайта тағы талпынып.
Улар моңо йөрәгемә үткәс,
Яҙғы ҡояш кеүек балҡыным.

Әле генә тыуған бәпесме ни?
Эй, ыҡрай шул зәңгәр миҙгелем.
Ҡар ыуҙары менән ярышыпмы
Арттыралар елдәр тиҙлеген?

Томан селтәр аша ҡояш нуры
Ер-бишеккә үтә таң айын.
Сәңгелдәктә ятҡан бәләкәскә
Оҡшатамын йәмле яҙ айын.

***

Үҙ халҡынан зар күрмәгән,
Сит тарафтар тешләгән.
Әммә илем дәрәжә е
Ер йөҙөнән төшмәгән.

Ағиҙелдең ыуын урған
Ҡайындарҙан ут тама.
Үҙ ереңдә аҙымыңды
Киңерәк baç, туҡтама!

***

Сайҡалғанда тормош тулҡынында
Ҡәләмемдән әсе йәш тама.
Яҙылыр үҙ көтә үҙ сиратын,
Әйҙә, күңел, айра, туҡтама.

Күңелемде сиртә килəсәгем,
Ил ам ҡошо ҡунған иңемә.
Оҙатып бар аң ине, эй, фәрештәм,
Еткәндә лә ғүмер сигемә.

Тутыйғошҡа, юҡ, ул оҡшамаған,
андуғас та түгел, ә йырлай.
Ул йәннәттән килгән, кемгә ҡуна,
Шул кешенең күңелен ул нурлай.

омайғоштоң үҙе, ти әм әгәр...
Йәннәт ҡошо бит ул, йәннәттән.
Ҡунып айрар күңел баҡса ына,
Моңо – ерҙән, тәме – еләктән.

## Эльмираға

*Яғылғанда тәҙрәләргә
Май таңының  ары ы.
 ағындырып иҫкә төшә
Күҙҙәреңдең ҡара ы.*

*Их, шул күҙҙәр. Ул күҙҙәрҙә
Сағыла яҙ төҫмөрө.
Мөхәббәтем сәскә ата,
Япраҡ ярғанда бөрө.*

*Таң йөҙөндә сағ(ы)лып ҡала
 иңә булған  ағышым.
Тамсы тама, хәтерләтеп
Йөрәгеңдең ҡағышын.*

*Тамсы көйөнә ҡушылып,
Моң тамыҙам дәртләнеп.
 ары шәлен болғай-болғай,
Таң ата рәхәтләнеп.*

*Таям  инең шатлығыңды
Таң кәйефенә ҡарап.
Яр ыу күңелең, – әйтер ең,
Атылып сығыр шарап.*

***

*Ҡышҡа сыҡтым. Тышҡа сыҡтым.
Күңел торошом  алҡын.
Туңып барған йөрәгемә
Ҡайнар йәштәрем – ялҡын.*

*Тышҡа сыҡтым. Ҡышҡа сыҡтым.
Ерҙең өҫтө – аҡ алтын.
Аҡ  уҡмаҡҡа оҡшатамын
Мөрйәләге  аҡалды.*

*Шул  аҡалдай сайҡалалар
Күңелемдең ҡылдары.
Ҡылдарымды сиртә кеүек
 инең бәрхәт ҡулдарың.*

*Ап-аҡ ҡар ҙа шундай бәрхәт,
Тоймайым  ис  алҡынын.
Ул ҡарҙарҙа тоямын мин
Ҡулдарыңдың ялкынын.*

*Ҡышҡа сыҡтым. Тышҡа сыҡтым.
Серле күктән хис тама.
Янмай тор аң ине, йәнем,
Бер минутка, исма ам.*



## Гөлназ МУСИНА

### Нык булырға саҡырыу

Кешеләрҙең ниҙәр күрәсәге
Яҙылғандыр, ахыры, тыумыштан.
Шул яҙылған бер көн ишек ҡаҡ а,
Ғәйеп эҙләмәйек яҙмыштан.

Ҡыл өҫтөндә торған намыҫыңды
Йылан телдәр киҫеп төшөр ә,
Кешеләрҙең нахаҡ ғәйбәт үҙе
Кер еҙ йөрәгеңде бешер ә;

 үкранмайса ғына ҡаршылайыҡ
Болот баҫҡан ҡара төндәрҙе.
Ҡарғанмайса ғына кисерәйек
Рәхәттәре ирәк ғүмерҙе.

Беҙ ғазапта саҡта башҡаларға
Еңел килеп ин ә бәхеттәр,
Ихлас ҡыуанырға көс табырлыҡ
Таҙа бул ын беҙҙең йөрәктәр.

Беҙгә мәкер ҡорған ҡара эсле
Бер көн төш ә ергә бөгөлөп,
Ҡыуанмайыҡ. Рәнйештәрҙе еңеп,
Ҡул уҙайыҡ уға эйелеп.

Кешеләрҙең яҙмыш ыҙандары
Маңлайҙағы яҙыу – ихтыяр.
Беҙ күрә ен кемдәр күр ен инде?
 ынар әле тормош, күп ынар.

### Ҡарт ҡайын

Урман ҡалын. әр бер ағас баҫҡан
Бер-беренә арҡа терәшеп.
Араларға ел дә үтеп инмәҫ,
Ғәйбәт-маҙар сыҡмаҫ өләшеп.

Тик ҡайынға ҡыйын. Бер яңғыҙы
Бәргеләнә асыҡ яланда.
 ыңар ҡулын она ул имәнгә,
Бере ен оноп ҡарай сағанға.

Улары ла алыҫ, буй етке еҙ,
Шығыр-шығыр ыҙлай олондар,
Әле ҡасан ғына был тирәлә
Геүләр ине киске уйындар.

А , ғүмерҙәр!
Йәшлек – йәшеллектә,
Яңғыҙ булма икән ҡартлыҡта.
 илдә ойой...
Ҡоштар сутылдаша.
Юрай ҡайын:
Быны ы шатлыҡҡа.

**Туймазы ҡала ы.**

# МӘҒАРИФҠА АРНАЛҒАН ҒҮМЕР

*(Ғалим Әхмәр Аҙнабаевҡа 75 йәш)*



Әҙәм бала ының ғүмере, аҡҡан ыу кеүек, бер туҡтау ыҙ алға йүгерә. Бына Әхмәр Мөхәмәтдин улы Аҙнабаев менән тәүге осрашып танышыуға ла 40 йыл ваҡыт үтеп киткән. Башҡортостан Уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтында дәреслектәр әм уҡытыу программалары кабинеты мөдире булып эшләп йөрөгәндә мине БАССР халыҡ мәғарифы министры урынбаҫары Мөхәррәм Ҡужаков саҡырып алды ла Башҡорт дәүләт университетының филология факультеты деканы урынбаҫары Әхмәр Аҙнабаевтан райондарҙан килгән абитуриенттарҙың исемлеген асыҡлап, төрлө мәғлүмәттәр алып килергә ҡушты. Беҙ икәүләп ултырып әр районға анализ я аныҡ, исемлек төҙөнөк, был мәғлүмәт мәғариф бүлектәре мөдирҙәре кәңәшмә ендә файҙаланылды. Ошо ваҡыттан беҙҙең хеҙмәттәшлек башланып китте лә инде.

Артабан уны КПСС-тың Башҡортостан Өлкә комитетына эшкә алдылар, ә мине 1971 йылда “Башҡортостан уҡытыусы ы” журналына баш мөхәррир итеп тәғәйенләнеләр.

Әхмәр Мөхәмәтдин улы Аҙнабаев 1934 йыдың 23 майында Учалы районының Ҡобағош ауылында тыуған. Ул бала саҡтан уҡытыусы булыу хыялы менән йәшәй. Ошо хыял уны Белорет педагогия училище ына килтерә. Училищены тамамлағас, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Диплом алғас Учалы районының Яңы Байрамғол мәктәбендә, Белорет педагогия училище ында эшләй. Ошо саҡта Әхмәр Аҙнабаев үҙенең алдына тағы бер мө им маҡсат ҡуя: фән, ғилми эш менән шөғөлләнергә. өҙөмтәлә ул Мәскәүҙә аспирантурала уҡып, кандидатлыҡ диссертация ын уңышлы яҡлай, 1965 йылда Башҡорт дәүләт университетында эшләй башлай. Унда ассистенттан доцент дәрәжә енә күтәрелә, декан урынбаҫарынан декан вазифа ына үрләтелә. Әхмәр Аҙнабаев, уҡытыу менән бер рәттән, йәмәғәт эшендә лә әүҙем ҡатнаша: бер йыл факультеттың партия ойошма ы секретары, өс йыл университеттың профсоюз ойошма ында етәксе вазифалар башҡара. Тап ошо йылдарҙа уның ойошторou әләте, кешеләр менән уртаҡ тел таба белеүе асыҡ күҙәләнә. Ул: “Өс йылғы йәйге ялым төҙөлөш майҙанында үтте. Уҡытыусылар менән бергә хужалыҡ ысулы менән торлаҡ төҙөнөк. Кем ташсы, балта оҫта ы, буяусы өнәрен башҡарҙы. өҙөмтәлә 3 уҡытыусы яңы фатир менән тәьмин ителде

йәки иҫкеләрен киңәйтте. Дәүләт фатирҙарын биреү наҡыҫ ваҡытта беҙҙең эш үтә мө им, изге әм кәрәкле булды", – тип хәтерләй Әхмәр Аҙнабаев.

Әхмәр Мөхәмәтдин улының оҫта ойоштороусы әләтен, эшкә яуаплы ҡарашын партияның Өлкә комитетында ла белеп ҡалалар. Бер көн уны М. З. Шакировҡа саҡыралар. " ине Өлкә комитетына эшкә күсерергә булдыҡ, фән әм уҡыу йорттары бүлеге мөдиренең мәктәптәр буйынса урынбаҫары вазифа ын башҡарасаҡ ың. Тағы шундай үтә яуаплы бурыс йөкмәтелә. Мәскәү йыл айын күпләп аҡса бирә, әммә беҙ шуны файҙаланып бөтә алмайбыҙ, байтағын кире ебәрергә мәжбүр булабыҙ. Был бөтөнләй килешкән эш түгел. ин ошо мәсьәләне ҡаты контролгә ала ың, минең менән кәңәшләшеп торорға тейеш була ың", – ти уға беренсе секретарь.

Әхмәр Аҙнабаев үҙенең ризалығын белдерә әм дүрт йыл бүлек мөдире урынбаҫары булып эшләй. Артабан уны бүлек мөдире итеп үрләтәләр.

Ул ошо системала эшләгән дәүерҙә уҡыу йорттарының матди база ы иҙелерлек нығый, яңы биналар, дөйөм ятаҡтар, мәғариф хеҙмәткәрҙәре өсөн торлаҡ йорттары төҙөүгә ҙур иғтибар бирелә.

Мәктәптәрҙе әм уҡыу йорттарын яңы уҡыу йылына тулы ынса әҙерләү матур традицияға әйләнә. Йыл айын тип әйтерлек социалистик ярышта еңеп сыҡҡаны өсөн республикаға ВСЦПС-тың әм РСФСР Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл байрағы әм аҡсалата премия тапшырыла ине.

Ә. Аҙнабаев әм ул етәкләгән бүлек уҡыу йорттарын етәксе кадрҙар менән нығытыуға ҙур өлөш индерә. Үҙен әләтле, оҫта ойоштороусы итеп күрәткәндәр юғары уҡыу йорттарына ректорҙар итеп тәғәйенләнде, байтаҡтар проректорҙар булып китте.

Шулай итеп, Әхмәр Мөхәмәтдин улы 17 йылға яҡын партия органдарында етәксе вазифа ын башҡарҙы, республикала мәғарифты үҫтереүгә күп көс алды.

Артабан ул Башҡорт дәүләт педагогия институтына фән эштәре буйынса проректор итеп күсерелә. Бында ла эшкә ең ыҙғанып тотона. Быға тиклем институтта аспирантура, докторантура булмай, диссертациялар яҡлау буйынса ғилми совет та юҡ. Шуға күрә ул төп эшен институтта аспирантура, докторантура асыуҙы, ғилми совет булдырыуҙы юллауҙан башлай. өҙөмтә оҙаҡ көттөрмәй, был хәстәрлектәр бары ы ла тормошҡа аша. Әхмәр Аҙнабаев 12 йыл проректор булып эшләгән осорҙа 26 өнәр буйынса 150-ләп аспирант, 3 өнәр буйынса докторант була. Иң мө име – ғилми дәрәжә өсөн диссертация институт советында яҡлана. Әйткәндәй, уның үҙенә лә Рәсәй Мәғариф министрлығы тарафынан профессор дипломы тапшырыла.

Үкенескә ҡаршы, проректор булып тик 65 йәшкә тиклем генә эшләргә мөмкин, положениела шулай ҡаралған. Шуның өсөн Әхмәр Аҙнабаев башҡорт теле кафедра ы мөдире итеп айлана. Кафедра институтта алдынғылар рәтендә иҫәпләнә. Унда бигерәк тә йәш ғалимдарҙы әҙерләүгә әм үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелә. Кафедра ағзаларының 90 проценттан ашыуын ғилми дәрәжәләге белгестәр тәшкил итә. Был йә эттән ул институтта икенсе урынды биләй.

Уҡытыуҙан тыш, Әхмәр Мөхәмәтдин улы дәреслектәр, ғилми әм практик ҡулланмалар яҙыу менән дә әүҙем шөғөлләнә. Ул юғары уҡыу йортары өсөн 2002 йылда "Башҡорт теленең тарихи грамматика ы" дәрес-

леген баҫтырып сығарҙы. 2006 йылда профессор Р. Х. Хәйруллина менән яҙған “Сопоставительная грамматика русского и башкирского языков” дәреслеге донъя күрҙе. Шул уҡ йылда “Башҡорт телендә айырымланған эйәрсән киҫәктәр” баҫылды. Авторҙашы – Өфөнөң 20-се мәктәбе уҡытыусы ы Д. Латипова. 2007 йылда “Башҡорт теленең ҡушма өйләм синтаксисы” дәреслеге менән ҡыуандырҙы.

Әхмәр Аҙнабаев дөйөм мәктәптәр өсөн дәреслектәр яҙыуҙа әүҙем ҡатнашты. Т.Х. Аслаев әм Х.С. Фәритов менән башланғыс кластар өсөн бер нисә дәреслек яҙыуҙа авторҙаш булды. Педучилищелар өсөн баҫылған дәреслек тә унық исем-фамилия ы аҫтында баҫылды, 7-се кластар өсөн яҙылған “Башҡорт теле” дәреслеге республика конкурсында еңеп сыҡты, бөгөн дә мәктәптәргә тоғро хеҙмәт итә.

Әхмәр Мөхәмәтдин улының тағы бер әйбәт сифаты бар: ул – өлгөлө ғаилә башлығы. Ҡатыны, Флүрә Аҙнабаева, оҙаҡ йылдар “Башҡортостан уҡытыусы ы” журналы редакция ында бүлек мөхәррире, яуаплы секретарь булып эшләне. Артабан кандидатлыҡ диссертация ын уңышлы яҡланы әм доцент дәрәжә енә өлгәште. Бик күп мәҡәләләр әм дәреслектәр авторы. Улдары Булат – тарих фәндәре докторы, ҡыҙҙары Гүзәл – юғары категориялы врач, ҡыҙҙары Гөлдәр ҙә юғары белемле.

Әхмәр Аҙнабаев тик ултырырға яратмай, ҡулында ҡәләм тибрәтергә ғәҙәтләнгән. Әле, ваҡыт табып, мемуарҙар яҙғылай, хатта китап та әҙерләгән. Республика матбуғатында төрлө темаларға мәҡәләләр менән сығыш я ай.

Ә.М. Аҙнабаевтың фиҙакәр хеҙмәте юғары ба а алды. Ул Халыҡтар дуҫлығы ордены әм ике миҙал менән бүләкләнгән. Уға “Башҡортостандың атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре”, “Рәсәй Федерация ының юғары профессиональ белеменең маҡтаулы хеҙмәткәре” исемдәре бирелде. Ул – Ж. Ғ. Кейекбаев исемендәге премия лауреаты.

Ошо көндәрҙә Ә.М. Аҙнабаевҡа 75 йәш тула. Ул бөтә ғүмерен мәғарифҡа, уны артабан үҫтереүгә бағышланы. Уҡытыусы, ғалим, йәмәғәт эшмәкәре Әхмәр Мөхәмәтдин улы бөгөн бай тормош тәжрибә ен, ғилемен, белемен йәш быуындарға өләшә, уларҙы республикабыҙҙың лайыҡлы, патриотик рухлы граждандары итеп тәрбиәләү хәстәрлеген күрә.

**Сәлимйән ҒҮМӘРОВ**,
**Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусы ы.**

# МОҢДОҢ ЙӘНЕ – МӨХӘББӘТ

*(Рәмзилә Хисаметдинованың тыуыуына 60 йыл)*



ис икеләнмәй, Рәмзилә Хисаметдинова йондоҙо башҡорт шиғриәте күгендә әр ваҡыт балҡып янып торасаҡ, тип раҫлайым. Был аштырыу түгел, ә ысын. Ҙур түгел Рәмзилә Хисаметдинова йондоҙо. Әммә сағыу! Хәйер, ҙурлыҡ ошо сағыулык менән билдәләнәләр. Күренмәү йәки онотолоу өсөн үтә яҡты әм үтә а әңле уның ижады. Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәрим ба алағанынса ла, Рәмзилә ҙур күләмле мираҫ ҡалдырманы, әммә булған тиклем ижады ла уның оло талант эйә е икәнен күр әтеп тора. ан менән түгел, сифат менән алдырҙы Рәмзилә. Кескәй ғүмерендә ҙур ил ам менән йәшәп өлгөрҙө.

Эйе, яҡты донъяларҙа ни бары 46 йыл ғына йәшәне ул. Тәүҙә тыуған Учалы районы Сәфәр ауылында урта мәктәптә уҡыны. Шунан – Башҡорт дәүләт университетында, Стәрлетамаҡ педагогия институтында юғары белем алыуға киткән йылдар. Тыуған яғында Юлдаш, Сәфәр, килен булып төшкән Салауат районы Малаяҙ мәктәптәрендә мөғәллимлек итеү. Ҡыҫҡа биография. Әммә шул ҡыҫҡа ғүмер эсендә йөҙйәшәр кеше кисергән барлыҡ хис-тойғоларға ла, ҙур тормош тәжрибә енә лә эйә булып өлгөрҙө Рәмзилә, аҡылаң тупланы, донъя менән, ғаләм менән эске берлеген тоя алды, рухи үҫеш юлы үтте. Был үҫеш, көҙгөләге кеүек, уның шиғриәтендә сағылыш тапты.

Рухи үҫешкә өлгәште, тигәнемдә лә хәйләләшмәйем, нимәнелер буяп, матурлап күр әтеү өсөн үҙ йөрөтмәйем. “Үҫеш” үҙен мин кешенең донъяға тыуымы бурысын үтәп өлгөрөүе мәғәнә ендә ҡулланам. Тойомлауымса, кеше донъяға әр бирелмешендә үҙен нимәгәлер бағышларға, тап ошо тормошонда тәғәйен бер маҡсатты бойомлаштырырға тыуа. Рәмзилә и ә үҙенән уң йөрәк тетрәндергәс ил амлы, хисле шиғриәт ҡалдырыу өсөн, мөхәббәт йырсы ы булыу өсөн тыуғандыр. Был мөхәббәтте үҙ йәнендә тәрәндән кисереп, үҙ тормошонда тулы ынса татып, өйөүҙе иң ҙур йән байлығы, рух ихтыяжы итеүгә өлгәште әм донъяға өйөү өләште Рәмзүк! Беҙ уны, әхирәттәре, шулай атап йөрөтә инек. Был донъяны ул өйгәндәре – "нәҡ декабрист ҡатындары төҫлө" артынан китеп мөкиббән киткән кеше е, ҡәҙерле әсәкәйе, ғәзиздәрҙән-ғәзиз өс бөртөк ҡыҙы, тотош донъя, ер-күк, тәбиғәт сифатында яратты. Шиғырҙарын уҡып ҡарағыҙ: ниндәй камил, өлгөргән хистәр, ниндәй тәрәнлек әм юғарылыҡ! Хәйер, Рәмзилә үҙен бер ҡасан да тәрән шағирә тип иҫәпләмәне.

*Тәрәнлектәр төрәндәргә ҡал ын,*
*Еткән уға сафлыҡ, ихласлыҡ,*

– тип яҙҙы ул үҙенең " ай шишмә" тигән шиғырында. Был юлдар уның үҙенең дә тормош кредо ы ине. Рәмзилә бер ҡасан да үҙенән аҡыллыраҡ булырға тырышманы. Уның өсөн кешегә иң кәрәк сифат – ихласлыҡ, күңелдең шар асыҡлығы әм йән сафлығы ине. Әммә ошо сафлыҡ үҙе үк тәрәнлек билдә е түгелме ни? Шулайҙыр тип уйлайым. Тәүге осрашыуҙан уҡ Рәмзилә мине үҙенең тап шарран асыҡлығы, тимәк, саялығы менән шаҡ ҡатырҙы. Шуға ла ул бөтә ғүмеренә тәрән кеше булып ҡала алды.

Күңелде әр саҡ ихлас, асыҡ тотоуҙы мин көслө кешегә генә хас сифат тип анайым. Шар асыҡ күңелгә яра алырға теләүселәр, төкөрөүселәр табыла. Сөнки кешегә хаталаныуҙар хас, тормошта бит гел генә дөрөҫ аҙымдар я алмай. Бер кем дә камил түгел. Әммә әр кемгә лә камиллыҡҡа ынтылыу хас. Яңылышыу – яҙыҡ түгел, ә уларҙы төҙәтергә теләмәү, тәүбәгә килмәү – гона . Кешелектең тәүгона ы ла ошолор әле,

бәлки. Тәүбәгә килә белгән кешеләрҙән ине Рәмзилә. Тормош – ул камиллашыу мәктәбе. Беҙ – ошо мәктәптең шәкерттәре, әр шәкерт унғы синыфҡаса етергә әм үҙе лә остаз баҫҡысына күтәрелергә бурыслы. Рәмзилә ошо юғарылыҡҡа күтәрелә алды, тип иҫәпләйем.

Рәмзилә Хисаметдинованың шиғырҙарын уҡып, беҙ унын йәненең ни тиклем ҙур хеҙмәт башҡарғанын аңлайбыҙ. Был йән үҙ өлөшөнә төшкән кисерештәр аша аңланған, моңланған, ил амланған. Көсәйгән әм ныгынған. Бит донъя беҙҙән үҙ-үҙебеҙҙе аңлауыбыҙҙы көтә. Үҙ-үҙенде аңлау – ҡанундары мәңгелеккә билдәләнгән донъяны таныуға тиң. Рәмзилә үҙ ижадында ошо хеҙмәт менән шөғөлләнде: үҙенең мөғжизәле асылын асты, үҙ-үҙе булыуға, үҙ йөҙөнә ҡарай алыуға өлгәште, эске донъя ын яҙҙы.

*Хыянат ыҙ киттем унғы юлға,*
*Аҡ йән менән тынмс мин киттем.*
*Киләсәкке еңеү бокалына*
*Тамсы бул ын минең бәхетем.*

унғы юлына шағирә: "Иң-иң изге ышанысым менән инанам: мин барыбер еңдем, еңеүсе мин",– тип китте. Әлбиттә, әгәр кеше донъяға тыуа алған икән, ошо тыуым – үҙе үк ҙур еңеү. Шуға кешенең төп маҡсаты ла – тормоштан еңеүсе булып үтеү. Ә был, тимәк, – бәхет өсөн бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөңә алыу тигән үҙ. Еңеү бына ошолай алдан уҡ, тыумыштан уҡ планлаштырылған икән, донъя ҡолдарҙы түгел, тик еңеүселәрҙе генә таный икән, ул еңеү бары мөхәббәт иҫәбенә генә бойомға аша ала. Рәмзилә үҙенең бөтә ижады менән кешенең мөхәббәт өсөн, гармония, үҫеш, осош өсөн яратылғанын раҫланы.

Донъяны Рәмзилә ике күҙ менән түгел, йөрәге менән күрҙе, иғтибарын үҙ күңеле төптәренә йүнәлтте. Ә ул төпкөлдә әр кеше лә сығанағы – Алланың үҙе кеүек саф, бер тап ыҙ, гона ыҙ. Унда негатив юҡ. Бары мөхәббәт кенә бар. Рәмзиләнең хистәре әр ваҡыт урғылып, бөркөләп, осҡондар сәсеп, ут сығарып торҙо. Юҡҡа ғына фамилияында ла хис үҙе ултырмайҙыр. Хис унын төп эш ҡоралы булды. Ҡай ы ғына шиғырын алмайыҡ, мөлдөрәмә хистәре ҡорт күселәй гөжләп, яҙғы ташҡындай аҡтарылып ташып, андуғастай сутылдап айрап, ҡояш нурҙарылай ҡыҙҙырып тора. Унын шиғырҙары образлылығы менән генә түгел, алсаҡлығы, сабыйҙарса эскер еҙлеге менән йәнде арбай.

*Өт өн, әйҙә, алҡын өт өн, –*
*Мин барыбер ялҡында.*
*Өндәү булып баҫып торам*
*"өйәм" үҙе артында,*

– тип яҙҙы ул үҙенең тәүге китабы "Бүләгем"дә. Шул саҡтан уҡ: “Асыла бара киңлектәр, сиктәрем сигенә”, – тип иғлан итте.

*ыҙла ын, әйҙә, ярам,*
*Ятам ауыртҡан яҡҡа:*
*Ун игеҙҙәге ялҡыным*
*Ҡалма ын ғына ятҡа!*

– тип аңлы рәүештә үҙ ҡарарын ҡабул итте. Яҙмыш төшөнсә енә ул бер ҡасан да осраҡлы хәл йәки күктән төшөрөлгән, алдан билдәләнгән нәмә тип ҡараманы. Яҙмышты ул үҙең айлап ала, үҙең билдәләй торған нәмә тип белде. Бәхет төшөнсә е лә Рәмзилә өсөн көтөп ала торған нәмә түгел, ә яулап алына, хаҡ түләнә, көс түгелә торған нәмә ине. " өйөүгә ҡаршы барам" тип ул тиккә генә яҙманы. Кеше асылы унын ниҙе айлауына, уй сафлығы ҡанунына бәйле икәнен Рәмзилә Хисаметдинова яҡшы аңлай ине. Рәмзилә мөхәббәте яҡты юлды, ижадында яҡты буяуҙарҙы айланы әм яңылышманы.

**Таң ылыу ҠАРАМЫШ.**

# ИЖАДИ МА ИРЛЫҠ

*(Күренекле ғалим, педагог, атаҡлы фольклорсы Марат Мин ажетдиновтың тыуыуына 75 йыл)*

Марат Хәләф улы Мин ажетдинов... Был исем нәфис әҙәбиәт, әҙәби тәнҡит, фольклористика әм мәғариф өлкә ендә күп йылдар йәшәр әле. Шәкерттәре, замандаштары ара ында айырым хөрмәт яулаған педагог, әҙәбиәт ғилеме донъя ында, халҡыбыҙҙың ауыҙ-тел ижадын юғары бейеклеккә күтәреүҙә ижади ма ирлыҡ күр әткән ғалимға ошо йылдың 18 майында 75 йәш тулған булыр ине.

1956–1972 йылдар арауығында башҡорт әҙәбиәт ғилеме, әҙәби тәнҡите әм фольклористика ында лайыҡлы урын тотҡан Марат Хәләф улы Мин ажетдиновтың ижад лаборатория ына күҙ алыу, уны өйрәнеү, заман күҙлегенән ба а биреү – бөгөн өлгөргән мәсьәләләрҙең бере е. Дөрөҫ, ғалимдың бер килке хеҙмәттәре тупланған “Ҡәләмендә ҡөҙрәт бар” (төҙөүселәре, баш үҙ авторҙары – Т. Килмөхәмәтов, Ә. Сөләймәнов. Өфө: “Китап”, 1995) йыйынтығында донъя күргәйне. Был китапта шәкерттәренең, замандаш-ҡәләмдәштәренең күңел йылылығына төрөнгән шәхес хаҡындағы мәҡәләләре, ғалимдың “ әҙиә Дәүләтшина. Тормошо әм ижады” монография ы, “Поэмаларға бер ҡараш” мәҡәлә е, башҡорт халҡының эпосына арналған ҙур ғилми хеҙмәте урын алған.

Марат Мин ажетдиновтың әҙәбиәт фәне өлкә ендәге уңыштарын, башҡорт әҙәбиәтенең дөйөм үҫеш тенденцияларын күр әткән проза, поэзия әм ауыҙ-тел ижады проблемаларын объектив ихтыяждан сығып яҡтыртыуын хронологик тәртиптә өйрәнеү маҡсатҡа ярашлы, буғай. Был алым буласаҡ ғалимдың үҫеш эволюция ын асыҡ тоҫмалларға ла мөмкинселек бирәсәк.

Студент йылдарында уҡ Марат Мин ажетдиновтың нәфис әҙәбиәттең бөтә нескәлектәрен төшөнөү, аң-зи ене аша үткәреү, үҙ фекерен асыҡ, тура белдереү ҡеүә е көслө була. 1956 йылда “Яҙыусы-патриот Низам Ҡәрип әҫәрҙәре” исемле тәүге тәнҡит мәҡәлә е әҙәбиәт фәненә әм тәнҡитенә етди уйҙары әм үҙенсәлекле фекерләүе менән өмөтлө йәш ғалим килеүен күр әтте. Ижад шишмә енең башында уҡ М. Мин ажетдиновтың үҙ ҡәләме, үҙ йөҙө, төпсөн тикшереүе, аналитик фекерләүгә ҡоролған ығымталары күҙгә бәрелеп тора.

Ғалимдың архивынан күренеүенсә, 1956 йылда “Совет Башҡортостаны” гәзитендә баҫылған “Яҙыусы-патриот Низам Ҡәрип әҫәрҙәре” исемле мәҡәлә е иң тәүге хеҙмәттәренең бере е булырға тейеш. Әле икенсе курста ғына уҡыған студенттың яҙыусы әҫәрҙәренең художестволы үҙенсәлеген, яҙыу стилен әм ижтимағи тормоштоң йәнлелеген тәрән әм саф күңеле аша яҡтырта белеүе ирәктәргә генә төшкән өлөш булғандыр ул дәүерҙә. Был мәҡәләлә студенттың яҙыу манера ы, әҙәбиәт теория ын яҡшы төшөнөүе әм тәнҡиттә урынлы, килешле, олпатлы ҡуллана алыуы, бәләкәй генә фекерҙе лә үҙенең бай тойғоло фантазия ы аша үҫтерә алыу үҙенсәлеге иғтибарҙы тарта.

Әлеге көндә лә яратып уҡылған Али Карнай әҫәрҙәренә 1957 йылда яҙылған тәнҡит мәҡәлә ендә Марат Мин ажетдинов яңы тормоштоң киҫкен синфи

көрәштә тыуыуын әм үҫеш юлдарын күр әтеп, ялҡынлы көрәштә яңы кеше тибы формалашыуын анализлай. “Али Карнай әҫәрҙәре реаль тормошто унын бөтә тулылығында, бөтә ҡатмарлылығында, тулы ҡаршылығында әм революцион үҫешендә биреүе менән айырыла. Карнай тормошто ситтән тороп күҙәтмәй, ә унын эсенә, ауыртҡан еренә кереп китеп, уны бөтә дөрөҫлөгөндә ҙур художество оҫталығы менән асып бирә”[1] алыуын автор “Боролмала”, “Әбсәләмовтар”, “Турғай”, “Йәшлек”, “Далалағы уттар”, “Ишембай”, “Беҙ ҡайтырбыҙ” әҫәрҙәре миҫалында тикшерә.

М. Мин ажетдинов Али Карнай ижадын хронологик тәртиптә тикшереп, унын ижад офоҡтары киңәйә барыуын күр әтә. Мәҫәлән, тәүге нәҫерҙәрендәге яңы тормош күренештәренән тыуған тойғо, фекерҙәр сылбыры абстракт төҫ алыуын “Беҙ – таң кешеләре”, “Әсәйем хаты” әҫәрҙәрендә күрәбеҙ. Әлегә яҙыусының эҙләнеү юлдары асыла бара. Тәнҡитсе Карнайҙын “Мүк еләге”, “Йыртылған указ”, “Барометр”, “Ҡәберҙән ҡунаҡ” сатирик хикәйәләрендә образдарға характеристика биреү аша килә. “Далалағы уттар” повесында яҙыусының хеҙмәт героика ын тасуирлағанда характерҙарҙың үҫеш эволюция ын, конфликттар сиселеү процесын динамик үҫештә күр әтеп, әҙәби типтарҙы төркөмләү алымын ҡуллана.

Яҙыусы ижадында “Беҙ ҡайтырбыҙ” әҫәре үҙәк урынды биләй.1940 йылда донъя күргән был әҫәр хаҡында тәнҡитсе үҙенең шәхси фекерен асыҡтан-асыҡ әйтеп дәлилләй ҙә. “Был образдар ҡоро схема түгел, улар тере кешеләр булып күҙ алдына баҫа, уларҙың шул заманға хас, типик сифаттары күр әтелә... Карнай типик геройҙарҙы типик шарттарға ҡуйып үрәтләй...”[2]

Әҫәрҙең тормошто дөрөҫ сағылдырыуы яҙыусының әҙәби оҫталығын билдәләүсе төп ыҙаттарҙың бере е икәне тикшереүсенең фекерендә асыҡ сағыла.

“Башҡорт ярлы ы синфи көрәштәрҙә йәнен-тәнен йәлләмәгән, ҡан түккән. Быны йәштәргә күр әтмәү ҙур гона буласаҡ”, – тип яҙа әҙиә Дәүләтшина үҙенең көндәлегендә. Был изге теләге “Ырғыҙ” романында тормошҡа аша. . Дәүләтшинаға, унын ялҡынлы ижадына арналған мәкәлә е йәш тәнҡитсене артабан ниндәй ижади ынтылыштарға әйҙәрен ул мәлдә иҙемләүе, бәлки, ауыр ҙа булғандыр. “Ырғыҙ” романын анализлауҙы М. Мин ажетдинов унын тарихи ерлегенән башлай, әҫәрҙә яңы тормош өсөн көрәшеүсе әҙәби типтарҙың, башҡорт пролетариатының әм ярлы ының был тормошто үҙгәртеп ҡороуға әләттәренә төшөнөп, Айбулат кеүектәрҙең донъяны яңынан ҡороусылар сафында көрәшеүен әм азатлыҡ юлында әләк булыуҙарын әҙиә Дәүләтшинаның иң ҙур уңышына – тормош материалын яҡшы белеүенә, уны юғары художестволы яҡтыртыуына тығыҙ бәйләнешен күрә. Тәнҡитсе мәкәлә ендә геройҙар портретына иғтибар көслө. Портрет аша яҙыусы үҙ геройҙарының эске донъя ы ҡаршылыҡтарын, йә ыңғай, йә кире сифаттарын, милли үҙенсәлектәрен оҫта тотоп ала. “Милли үҙенсәлектәр иң элек геройҙарҙың эштәрендә, хәрәкәттәрендә асылып бирелгән, ә этнографик күренештәр уларҙы ҡуйырта ғына төшә”,[3] – тип яҙыусының милли колоритын да, ихтыяж талабының көсөн дә тулы аңларға мөмкинлектәр бирә. Әйтергә кәрәк, М. Мин ажетдинов романдағы башҡорт халҡының “тура үҙле, киң күңелле, аҡыллы, ҡыйыу йөрәкле батыр улдарын” биргән күренекле әҙибәбеҙ әҙиә Дәүләтшина хаҡында оло әм саф йөрәктән сыҡҡан тәүге тәьҫораттарын заман рухында, уҡыусы ихтыяжына тап килтереп биреүе менән әҙәби тәнҡиттә йоғонтоло әм мө им үҙен әйтте.

“Ни бары дүрт хикәйәнән торған йоҡа ғына китап. Ләкин уны уҡып сыҡҡандан уң тыныс күңел менән генә ябып булмай. Күп әйберҙәр тура ында уйланырға

*[1]Мин ажетдинов М. Карнай әҫәрҙәре. //”Әҙәби Башҡортостан”, 1957, №3, 87-се бит.*
*[2] Шул уҡ хеҙмәт, 90-сы бит.*
*[3] Мин ажетдинов М. Ырғыҙ. //“Совет Башҡортостаны”, 1958, 4 февраль.*

мәжбүр итә был китап. Шуға ла, әгәр беҙ хикәйәләр әм унын авторы тура ында ҡай ы бер фекерҙәребеҙҙе әйтергә теләйбеҙ икән, был Ватанының азатлығын аҡлауҙа вафат булған кешенең яҡты иҫтәлегенә хөрмәт күр әтеү билдә е генә түгел, бәлки, унын ижади эш өҙөмтәләрен дә бер ни тиклем ба аларға ынтылыу"[4] тип изге ниәтен белдерә тәнҡитсе. Былар – Марат Мин ажетдиновтың ижады бөрөләнеп килгән сағында фронтҡа китеп, уғыштың беренсе көндәрендә үк әләк булған Сынғыҙ Хановтың "Ҡаратау партизандары", "Комиссар Зыков", "Яппар", "Фатима" хикәйәләренә ҡарата яҙылған фекерҙәре. Ихлас яҙылған мәҡәлә нимә е менән үҙенә тарта уң? Дүрт хикәйә эсендә тәнҡитсе йәш прозаиктың өмөтлө хыялдарын, тарихи материалды оҫта файҙаланыуын, шул ерлектә быға тиклем сағылдырылмаған партизандар көрәшен тасуирлауын миҫалдар менән нығыта.

1959 йыл. Марат Мин ажетдинов – бишенсе курс студенты. Русса төплө грамоталы йәш тәнҡитсе "Советская Башкирия" гәзитенең дә ышанысын яулай. Был йылдарҙа ул әҙәби бәйләнештәр проблемаларына иғтибарын көсәйтә. "Природа Башкирии в творчестве Аксакова" мәҡәлә ен оригиналь фекерҙәр тупланма ы тип әйтергә мөмкин. "Аксаков влюблен в природу Башкирии, он восхищается ее красотой, и это чувство редко выражается через восклицательные предложения. Он убеждает читателя в красоте изображаемой природы не тем, что она нравится, восхитительна, а тем, что показывает и раскрывает красоту и этим дает возможность читателю самому убедиться и согласиться с оценкой автора"[5]. Ғалимдың тағы бер фекере иғтибарҙы йәлеп итә. "Аксаков дает не только картины, но и передает их характерные особенности..." Бында тәнҡитсе Аксаков әҫәрҙәре менән бергә художестволы әм сер йомғағына ҡойонған фекерләү сәйәхәтенә сығамы ни!

1960 йылдар башы. Марат Мин ажетдинов – башҡорт әҙәбиәте кафедра ының тәүге аспиранты. Ижад юлы асыҡ унын, ҡөҙрәтле ҡәләме көндән-көн шымара, үткерләнә, күңел офоғо ижад офоғона ҡушылып саялана, йөрәге алға, бейеклектәргә талпына. Эйе, 60-сы йылдарҙа ул ҡолас ташлап ижад донъя ында йөҙҙө. Төрлө гәзит-журналдарҙа донъя күргән мәҡәләләрен уҡый ын да ғәжәпкә ҡала ың. Унда ҡанатлы фекерҙәр, изгелеккә сорналған уй-хыялдар, интеллектуаль фекер азатлығы, тойғолар бәрелеше – әммә е лә дәүер әҙәбиәтенең ҡайнар улышы ла, рупоры ла булып яңғырай. М. Мин ажетдиновтың хеҙмәттәре художестволы әҫәр кеүек, уҡыған айын уҡығы, өйрәнгән айын өйрәнге, унын төп өҙ күңел кисерештәренә ысын күңелдән төшөнгө килә. Ул теге йәки был әҫәрҙең йөкмәтке ен өйләмәй, ә әҫәр эсенән өр-яңы художестволы әҫәр яҙа, яңылыҡтар аса, үҙ ма ирлығының ҡеүәтен бирә, яҙыусыны, унын геройын асылына, әйтергә яра а, иманына ҡайтара. М.Мин ажетдинов был йылдарҙа үҙ ҡәҙерен, үҙҙең ила и көсөн, тел матурлығын, унын нәфислеген тойоп ижад иткән тәнҡитселәрҙең бере е булғандыр.

Фәрит Иҫәнғоловтың "Алтынбикә" исемле повесына ҡарата автор унын "художество оҫталығының артабан камиллашыуын, әлмәк, ышаныслы аҙымдар менән үҫә барыуын... бигерәк тә образ тыуҙырыуҙа, геройҙарҙың рухи донъя ын асып биреүҙә, кеше яҙмышындағы эске хәрәкәтте логик эҙмә-эҙлелек аша үрәтләүҙә"[6] әҙәби оҫталығын билдәләй. Алтынбикә образының яңы тормошта яңы әҙәби тип булараҡ ынланышы әҫәр буйынса тәнҡитсенең иғтибар үҙәгендә.

*[4]Мин ажетдинов М. Йәш яҙыусының халҡына ҡалдырған бүләге. //"Совет Башҡортостаны", 1959, 1 апрель.*

*[5]Мин ажетдинов М. Природа Башкирии в творчестве Аксакова //"Советская Башкирия," 1959, 12 май.*

*[6]Мин ажетдинов М. Юлда... //"Ленинсы", 1960, 11 июль.*

Героиняны әр ваҡыт эш өҫтөндә, хеҙмәттә, эштең тәмен, ләззәтен татыған мәлдә күр әтеүен, хеҙмәт эстетика ын асыуҙа беҙҙең әҙәбиәттең әлегә ҙур ғына мохтажлығын да сағылдыра. “Яҙыусының тағы бер уңышы – Алтынбикәнең бөтә ғүмере юлда, алға барыу, үҫеү юлында, – ти әҙәбиәт белгесе ,– тимәк, йәш прозаик Ф. Исәнғоловтың ижады әле үҫеш юлында”. Эйе, тәнҡитсенең ышанысын Ф. Исәнғолов артабанғы ижад юлында тулы ынса аҡланы, матур әҫәрҙәр яҙҙы, заман ихтыяжына ауаздаш образдар, әҙәби типтар тыуҙырҙы.

“Шағир тура ында тәүге оло үҙ” мәҡәлә е Ғайса Хөсәйеновтың Рәшит Ниғмәти поэзия ына арналған китабына ҡарата яҙылған. Был ҡеүәтле талант эйә ененең ижадын бөтә киңлегендә, бөтә тәрәнлегендә өйрәнеү – ауыр, яуаплы эш. Бөйөк тәнҡитсе Белинский әйтмешләй, насар әҫәрҙәр тура ында үҙ алып барыуҙан да еңел эш юҡ, ә бына яҡшы әҫәрҙәрҙе тикшереү, бигерәк тә беренсе үҙ әйтеү – үтә ҡыйын нәмә. Бына шуға Ғ. Хөсәйенов: “Ошо бурысты үтәү юлына бер кереш булараҡ, китап уҡыусылар иғтибарына Рәшит Ниғмәти поэзия ын күҙәтеү характерында яҙылған тәнҡит-биографик хеҙмәт тәҡдим ителә”, – тип яҙыуына өҫтәп, тәнҡитсе М. Мин ажетдинов та, үҙ өҫтөнә ҙур яуаплылыҡ алып, ҙур хеҙмәткә ҡарата конкрет уй-фекерҙәрен асып ала. Беҙ мәҡәләлә Р.Ниғмәтиҙең поэзия ын үҫеш процесында анализланыуын, тарихи принциптарҙың теүәл аҡланыуын, айырым етеш еҙлектәрен билдәләүен, ижади эҙләнеүҙәрен, тәжрибә туплауын, әҙәби оҫталығының үҫә барыуын, әҙип тауышының формалаша, үҙ сәнғәтенең камиллаша барыуын тоҫмаллайбыҙ. М. Мин ажетдинов, әҙәбиәт белгесе Ғайса Хөсәйенов фекерҙәрен тулыландырып, “яҙыусының халыҡ бәхете өсөн көрәште үҙ тормошоноң маҡсаты итеп ҡуйыуын, халыҡ мәнфәғәттәре менән йәшәүен, халыҡҡа шиғри үҙ менән хеҙмәт итеүҙе күңеленең ышаныуы, йөрәгенең ҡушыуы әм таланты буйынса айлап алыуын”[7] объектив күҙлектән сығып ба алай.

“Шағир тура ында тәүге оло үҙ” хеҙмәтендә М. Мин ажетдинов китап авторы Ғ. Хөсәйенов тикшереүҙәренең өҙөмтә ен ыңғай ба алай, яҙыусының ижадында поэтик аҡыл бөртөктәренең формалашыуын эҙмә-эҙлекле, мәҙәниәтле күҙәтеүҙәрен дөйөм әҙәби процесҡа, төрлө милләт әҙәбиәте процесына ҡушып өйрәнеүенә баҫым я ай.

“Ырғыҙ” романы хаҡында беренсе тәнҡит мәҡәлә енән уң дүрт йыл үткәс, М. Мин ажетдинов “ . Дәүләтшинаның тормош әм ижад юлы” исемле ҙур ғилми хеҙмәттең юл башы булып аналасаҡ мәҡәлә ен яҙҙы. Бында ул үҙенең тотороҡло позиция ын дауам итеп, әҙибәнең биография ына, ижадына ҡарата күңел түрендә йөрөткән иң матур кисерештәрен уҡыусыға еткерә. Мәҡәлә ҙур тойғолар, изге ынтылышлы уйҙар менән уғарылып, яҙыусының көслө ихтыярлы кеше булараҡ та, халыҡсан ижадсы ма ирлығының сағыу өлгө ө булараҡ та көслө тәьҫир я ай.

Халыҡ ижадына булған өйөү уның донъяға ҡарашын, эстетик тойғо әм поэтик иҙгерлеге, көрәҙәлегенең тәүге сатҡылары ла М. Мин ажетдиновтың төп тикшереү концепция ын тәшкил итә. Яҙыусының 1923 йылда башланған хикәйә е, ижад биография ы мәҡәләлә иғтибарҙы йәлеп итә. Уның “ ылыуҡай пионерка” хикәйә е, “Айбикә” повесы буйынса төплө анализ, ул ваҡыттағы ғилми күҙлектән ҡарағанда, интеллектуаль фекер йөрөтөүгә тиң. А. Фадеевтың “... Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарынан берҙән-бер яҙыусы” тигәне бар. Яҙыусы фекеренең әҙиәгә, уның тулайым ижадына булған ба а ы ҡеүәтләнә төшә. 30-сы йылдар тормошо әм ижады мәҡәләлә ижтимағи тормош аша анализ төҫөн алыуы әм тәнҡитсенең фекерҙәре тотошлайы менән мәш үр әҙибәнең ижад потенциалын “йотоп”, диҡҡәт менән күҙәтелә. Тормошоноң әм ижад юлының уңғы йылдарында “ уңғы тапҡыр дөрләп янайым” үҙҙәре бөгөнгө көндә актуаллеген юғалтмаған, кире -

[7]*Мин ажетдинов М. Шағир тура ында тәүге оло үҙ. //"Совет Башҡортостаны", 1961, 30 август.*

енсә, баҙыҡлана барған ижадын М. Мин ажетдинов артабанғы хеҙмәттәрендә балҡытты. Тәнҡитсенең “Айбикә”, “Башаҡтар тулҡыны”на яҙған этаплы рецензия ы заман талабының асыҡ сағылышы ла ине. Яңы кеше образы, беҙҙең көндөң геройы, “масса”нан сыҡҡан кеше тибы яҙыусы әҫәрҙәрендә “ҡатын-ҡыҙҙың аңлы тормошҡа ураныу тарихы, яңы кешенең формалашыу процесы үтә лә эстәлекле әм художестволы яҡтыртылыуы” халыҡтың халыҡсан ыҙаттары ерлегендә анализлана.

Марат Мин ажетдиновтың “Ырғыҙ” романы хаҡында “Ступени жизни народной” мәҡәлә ен “Дружба народов” журналы ла нәшер итә. Авторҙың 60-сы йылдар башында Бөтә Союз күләмендә сығыш я ауы башҡорт әҙәбиәт ғилеменә лә ҙур абруй әм мәртәбә өҫтәй. Ысын ғилми ижад, милли сиктәрҙән аша сығып, ғалимды көндән-көн яңы киңлектәргә саҡыра.

Тәнҡитсенең “Ҡәҙерле исем” хеҙмәте лә . Дәүләтшинаның яҡты иҫтәлегенә арнала. Бында әҙибә ижады, уның эстетик ҡараштарының формалашыуы, донъяны поэтик күрә әм ба алай алыу әләтенең нығыуы, әҙәби оҫталығының үҫә барыуы М. Горький, Ғ. Туҡай ижадтары бәйләнешендә яҡтыртыла. Әҙибәнең үҙ халҡының героик үткәненә бағышланған әҫәренең барлыҡҡа килеүендә М. Горькийҙың “Әсә”, “Артамоновтар эше”, “Клим Самгиндың тормошо” кеүек әҫәрҙәрҙең йоғонто он асыҡ күр әтә әҙәбиәт белгесе.

Ҙур таланттарҙың ижади яҡынлыҡтарын тәнҡитсе уларҙың шул заманда йәшәүсе халыҡ ихтыяжы, рухи донъя ы, изге ынтылыштары рамка ында кәүҙәләндерә. Гуманизм принцибы әҙәбиәт белгесенең уй-фекерҙәре аша . Дәүләтшинаның ижад принцибына тормош дөрөҫлөгө аша тығыҙ бәйләнә. Мәҡәлә еңел уҡыла, тәнҡитсенең фекерҙәре беҙҙе шул дәүерҙең ҡатмарлы, сетерекле ваҡиғалары эсенә алып инеп китә. Ә бына “Яңы табылған шиғырҙар” рецензия ында автор әҙиә Дәүләтшинаның нескә тойғоло, поэтик рухлы шағирә икәнен аса.

Ысын хәҡиҡәткә ышанысын юғалтмаған яҙыусының егермеләгән шиғырҙар шәлкеме – ул ситлектәге хәл еҙләнгән ҡоштоң, әммә рухы үнмәгән кешенең яҡты хәтирә е лә, ағышы әм ҡыуаныстары ла, яҙмышының аяныс хәлдәре лә. Шәхес культы тарафынан эҙәрләнгән яҙыусы хәле, көнитмеше, күңелендәге кисерештәре, йөрәк ыҙлауҙары, хыял ҡошо, өмөттәре көслө ихтыярлы кеше хаҡында икәненә инандыра был мәҡәлә...

Марат Мин ажетдиновтың . Дәүләтшинаның тыуыуына 60 йыл тулыу айҡанлы яҙылған “Халҡыңды йырланың – халҡың онотмаҫ” тигән киң полотнолы мәҡәлә ендә быға тиклем яҙылған хеҙмәттәренең төп ыҙаттарын художестволы биографик әм тарихи планда дөйөмләштереп бирә. Беҙ был хеҙмәттә тәнҡитсенең үҙенең ғилми концепция ының формалашыуын тулы ынса күҙ алдына килтерәбеҙ. М. Мин ажетдинов был йылдарҙа ысын мәғәнә ендә художестволы әҫәрҙәрҙең тарихи ерлеген, поэтик ҡаҙаныштарын төптән өйрәнгән айын яңы ғилми фекерҙәр тыуҙыра, әҙәбиәттең төп йүнәлештәрен художестволы туплауға ирешә, үҙ көсөнөң ба а ы фекерҙәр үҫешендә күтәрелгәндән-күтәрелә. “ әр бер ижади подвиг – ҙур поэтик асыш, ә поэтик асыш – яңы геройға ғүмер биреү” тиҙәр. “ әҙиә Дәүләтшинаның поэтик асылы ниҙән ғибәрәт уң?”, “Уның геройы кем?” тигән орауҙарға яуап биргәндә ул әҙибәнең күңелен тетрәткән йылдарға мөрәжәғәт итә әм яҙыусының заман улышын тарих ағышында бирергә тырышыуы геройҙарҙың рухи ураныу эволюция ын үрәтләүҙә асыҡ күренеүен дәлилләй. Тәнҡитсе, әҫәрҙәге яңы кеше концепция ына яҡын килеп: “ әҙиә Дәүләтшинаның утыҙынсы йылдарҙағы башҡорт әҙәбиәтенә алып килгән яңылығы – яңы кешенең тыуыу эволюция ын күр әтеүҙә генә түгел. Ул әҙәби оҫталыҡтың күп кенә мәсьәләләренә лә яңылыҡ өҫтәне. Кеше ғүмере яҙыусы өсөн баштан үткән ваҡиғалар йыйылма ы йәки йылдар ҡатламы ғына булманы. Кешенең тарихи биография ы иң элек – рухи биография, күңел биография ы ине. Был – кеше психология ының форма-

лашыу тарихы ине,”[8] – тип үҙ фекерен анализда шаҡтай бай кимәлдә киңәйтеүгә өлгәшә.

М. Мин ажетдиновтың “Халҡынды йырланың – халҡың онотмаҫ” тигән үҙҙәре хәҡиҡәткә әйләнде: мәш үр яҙыусыға үлгәндән уң Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы бирелде. Ошо айҡанлы М. Мин ажетдинов “Ижади батырлыҡ” мәҡәлә ен яҙҙы. Тәнҡитсе мәҡәлә ендә танылған әҙибәнең ижады төрлө яҙыусылар, ғалимдар фекерҙәре аша тағы ла байып, яҡтырып киткәндәй.

Бөгөнгө әҙәбиәттә кеше яҙмышы ил яҙмышына бәйле, уларға фекер ялҡаулығы, күңел зәғифлеге, “тормош ваҡиғаларының уҡыр ҡоло булыу – ят әм сәйер күренеш. Был геройҙарға кисерештәрҙең тәрәнлеге, ҡараштарҙың етдилеге хас... Ҡыҫҡа ы, хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә актив натуралы геройҙарҙың яңы тибы формалашты. Был яңы геройҙар романдарҙа, бигерәк тә повестарҙа тыуҙырылды. Улар, нигеҙҙә, психологик типтар”[9]. Тәнҡитсе был типтарҙы Ә. Бикчәнтәев, Х. Ғиләжев, З. Биишева, Б. Бикбай, Ф. Иҫәнғолов, Н. Мусин, И. Ғиззәтуллин әҫәрҙәрендә юллай әм нигеҙле фекер йөрөтә. Беҙ әле яңы быуатҡа аяҡ баҫҡанда ла әҙәбиәттең, әҙәбиәт фәненең мө им проблемалары: герой проблема ы, унын концепция ы, төрлө характерлы типтар хаҡында үлпән генә үҙ алып барғанда, 60-сы йылдар урта ында уҡ, йәғни бынан өс тиҫтәнән ашыу йыл элгәре, М. Мин ажетдинов был магистраль проблеманы ҡуйған икән!

М. Мин ажетдиновтың ижад ма ирлығы, заман улышын иҙгер тойоу әләте, йәмғиәттең мө им мәсьәләләренә заманса яуап биреү ҡеүә е әр тәнҡитсенең өлөшөнә төшкән көмөшө түгелдер. Ғалимдың 60-сы йылдар аҙағындағы фекерләү киңлеге шул тиклем байыны, әйтер ең, ул яҙыусылар менән художестволы үҙ әйтеү буйынса сәмле ярышҡа сыҡҡан!

Тәнҡитсенең “Заман әм тарихилыҡ” хеҙмәте художестволы үҙҙең поэтик сағылышы булып, гражданлыҡ бурысына әйләнеүе күңелдәрҙе арбай.

Мәҫәлән, Р. Байымовтың “Сыбар шоңҡар” романы хәҙерге көн тема ына яҙылған ҡай ы бер әҫәрҙәргә ҡарағанда күпкә замансараҡ икәненә уҡыусы бөгөн ышанды бул а кәрәк. Романдағы тарихи шәхес Зәки Вәлиди үҙенең бөтә булмышы менән әҙәбиәттәге хәҙерге герой, характер ҡалыптарының камиллашыуына социаль әм этик планда тәрбиәсе ролендә сик еҙ йоғонто я ай бөгөн. М. Мин ажетдинов, заман әм тарих тема ын конкрет әҫәрҙәрҙә анализлап, ошондай фекергә килә.”Ысынлап та, уңғы йылдарҙа беҙ заман тема ын, замандашыбыҙ образын талап итеп оран ала торҙоҡ, халыҡ тарихына бағышланған “Ырғыҙ”, “Кәм етелгәндәр”, “Бөртөкләп йыйыла алтын” кеүек романдар, быуаттар ҡосағына инеп ыйынған ваҡиғалар үрәтләнгән “Ай тотолған төндө”, “Мөхәббәт әм нәфрәт”, “ өнәрсе менән Өйрәнсек” .б. әҫәрҙәр әҙәбиәттә тыуа торалар... Ләкин был әҫәрҙәрҙә заманыбыҙҙың мө им социаль процестары нисегерәк художестволы сағылыш алыуын анализлап еткермәнек”[10], – ти әм тарихи темаға ижад ителгән әҫәрҙәрҙең яҙыусы талантына ҡарап хәҙерге көн идеяларын үткәреүен, заманды эстетик ба алау кимәлен күтәреүен, үҫтереүен күрә. Тарихи теманың бөгөнгө көн рухы менән уғарылыуы, хәҙерге көн юғарылығынан яҙылыуы әм ба аланыуы мө им әм принципиаль күренеш икәненә ғалим үҙе лә ышана әм беҙҙе лә ышандыра белә.

Совет яҙыусыларының IV съезы алдынан донъя күргән “Яҙыусы. Тәнҡитсе. Уҡыусы” исемле мәҡәлә ендәге ғалим фекерҙәре бөгөнгө көндөң дә актуаль мәсьә-

[8]*Мин ажетдинов М. Халҡыңды йырланың – халҡың онотмаҫ. //“Совет Башҡортостаны”, 1965, 20 март.*

[9]*Мин ажетдинов М. Башҡорт әҙәбиәте ғилемендә яңы күренеш. //“Ағиҙел”, 1966, №7, 68-се бит.*

[10]*Мин ажетдинов М. Заман, герой әм әҙәби типтар. //“Совет Башҡортостаны”, 1966, 15 ғинуар.*

ләләре булып ҡала килә. Мәҡәләлә “Әҙәби оҫталыҡ, тәнҡит кимәле ниндәй булырға тейеш, ул яҙыусыны өйрәтергә тейешлеме?” кеүек орауҙар алғы планға сыға.

Әлбиттә, әҙәбиәт белгесенең күп кенә хыялдары, өмөт-ышаныстары артабан ғалимдар Ғ. Хөсәйенов, К. Әхмәтйәнов, Ә. Хәкимов, С. Сафуанов, Ә. Вахитов, М. Ғәйнуллин, Н. Зарипов, З. Нурғәлин, С. Галин, И. Вәлитов, Р. Байымов, Р. Бикбаев, Т. Килмөхәмәтов, Р. Шәкүр, Ғ. Ҡунафин, Г. Гәрәева, З. Шәрипова, Ә. Вилданов, М. Иҙелбаев .б. хеҙмәттәрендә тормошҡа ашырылып бара. Шул уҡ ваҡытта, эшләнгән эштәр күп әм етди бул а ла, киләсәк, әр дәүер үҙенең талаптарын әҙәбиәткә, унын фәненә ҡуя килә.

Бөгөн әҙәби тәнҡит өлкә ендә ҡыйыулыҡ, художестволы фекерләү ҡеүә е самалы, тарих әм заман, яҙыусы әм герой позиция ы, тотош әҙәбиәттә милли ерлектә тыуған герой концепция ы теоретик планда эшләнмәгән. Тарихи теманы заман күҙлегенән ижад иткән, герой концепция ына килеү юлында башҡорт әҙиптәре Я. Хамматов, Ғ. Ибра имов, Ә. Хәкимов, Т. Ғиниәтуллин, Б. Рафиҡов, Ғ. Хөсәйенов, Р. Байымов, Й. Солтанов, И.Ғиззәтуллин, Н. Мусин әҫәрҙәре үҙҙәренең тикшереүсе ен көтә. Заманының талантлы әм үҙенсәлекле яҙыусылары Д. Бүләков, Р. Солтангәрәев, Т. Килмөхәмәтов, Ә. Әминев, Ринат Камал романдары, повестары буйынса ла өйләшергә үҙ бар. Был әҙиптәрҙең хәрәкәт майҙаны киң, шуға күрә ижтимағи фекерҙең ҡеүәтле ҡоралы булған тәнҡиттең, художестволы фекерҙең геройҙарға ҡарата әйтер үҙе күптән өлгөргән мәсьәлә булып ҡала. М. Мин ажетдиновтың әҙип ижады, әҙәби тәнҡитсе әм ижтимағи фекер тыуҙырыусы уҡыусының заман йөҙөнә бағып берҙәм эшләүҙәрен, уртаҡлашыр уй-кисерештәрен ошо аспектта күрә белеүе үтә мө им әм ҡиммәтле.

Рауил Бикбаевтың “Ҡош юлы” исемле китабына яҙған “Ҡош юлы – оло юл” мәҡәлә ендә М. Мин ажетдинов шиғриәттең асылына төшөнә барған шағирҙың хистәр дауылын, яҡты уйҙар әм шатлыҡлы, бай фекерҙәрен, күҙгә бәрелеп торған тышҡы шиғри биҙәктәрен, поэтик үрәттәрен, троптарҙың камиллығын, сағыштырыуҙарҙың үрәтлелеген, оригиналлеген берәм-берәм сүпләп, күңел байлығын ихлас өйрәнә.

“Күңелдәрҙе яҡтылыҡҡа күмеп ил амландырыусы былдай тасуири күренештәр, поэтик сағыштырыуҙар Рауил Бикбаевтың әр бер шиғырында ғына түгел, әр шиғырының әр бер строфа ында тип әйтерлек Ҡош юлындағы ибелгән йондоҙҙар кеүек” [11], – ти автор әм “ерҙән бәреп сыҡҡан нурҙар кеүек, арҡаларҙа балҡыу ҡайындар... юлдарында күренеүенсә, был тышҡы матурлыҡ әм мө абәтлек кенә түгел. Сағыштырыуҙар ярҙамында шағир Уралды эстән балҡыта алған, унын эске ҡеүәтен динамикала, тормошсан хәрәкәттә тасуирлауға ирешкән.” Р. Бикбаевтың ташҡын хистәр, дауыллы уйҙар шағиры булыуын Марат Мин ажетдинов аныҡ билдәләй.

М. Мин ажетдинов күренекле әҙибә Зәйнәб Биишеваның 60 йәшенә ҡарата “Яр ыу ижад” мәҡәлә ен яҙа. Бында З. Биишева ижадының башҡорт әҙәбиәтендә үҙенсәлекле күренеш булыуын, башҡорт проза ын, роман жанрының үҫешендә мө им роль уйнауын юғары эпитеттар ҡулланып, милли ерлеген нигеҙләй. Тәнҡитсе яҙыусы хеҙмәтен тәрән белә, төптән фекер йөрөтә, ихтирам итә. Яҙыусы концепция ы тәнҡитсенең художестволы концепция ына заман талабынса бәйләнә, ба алауҙар ижтимағи фекерҙәр аша дәлилләнә. Әҙәбиәт белгесе З. Биишеваның, башҡа әҙиптәрҙән айырмалы рәүештә, драматик яҙыусы икәнлегенә баҫым я ай, унын “әҫәрҙәрендәге хәл-ваҡиғалар ҙа, геройҙарының яҙмышы

[11] *Мин ажетдинов М. Ҡош юлы – оло юл. //“Совет Башҡортостаны”, 1968, 23 май.*

ла, образдарҙың композицион төҙөлөшө лә, бәрелеше лә, сюжет ҡоролошо ла драматизм менән уғарылған. Яҙыусы әҫәрҙәренең теленә лә, стиленә лә яр ыу драматизм хас. Ул тормош ваҡиғаларын үҫештең иң юғары нөктә ендә ала ла ҡаршылыҡтарҙы киҫкен, үлемесле көрәштә, сик еҙ ҡатмарлы мөнәсәбәттә күр әтә. Йәшәү менән үлем, уяныу менән йоҡо, юғарыға, яҡтыға үрләү менән кәм етелеү, яҡшы менән яман, аҡ менән ҡара, өйөү менән нәфрәт, диңгеҙ менән ҡая, ер менән ауа тибындағы ҡаршылыҡтар" аша яр ыу драматизм кәүҙәләнешен оҫта күр әтә тәнҡитсе. "Зәйнәб Биишева — тенденциоз яҙыусы", — ти ул. Унын иғтибарын биләгән, әҫәрҙәренең тема ына әм үрәтләү объекттарына әүерелгән хәлваҡиғаларға тыныс ҡарай алмауы менән аңлатыла был әҙәби күренеш. Яҙыусы ижадын байҡап, М. Мин ажетдинов талантлы сәсмәүерҙең ҙур полотнолы әҫәрендә рельефлы тасуирлау әләте, үрәтләүҙә яр ыулыҡ, поэтик ҡабартыулыҡ, тормоштоң үҙе кеүек хәрәкәтсән, йәнле донъя төҙөүе, типик геройҙарҙың типик шарттарҙа үрәтләнеүен, актив позицияла булыуҙарын унын әҙәби оҫталығына бәйләп өйрәнә. М. Мин ажетдинов яҙыусы повестарында ыңғай әм кире геройҙар тыуҙырыуҙа үҙенсәлекле алымын юғары ба алай. Был герой типтары аша "дәүер рухын, тормош, ваҡыт ағышын тулыраҡ бирергә, тормош логика ын ҡалҡыуыраҡ итеп үрәтләүгә" өлгәшеүен күр әтә алған. З. Биишеваның тағы бер яғы — халыҡтың өйләү теленә, халыҡ ижады байлығына, унын мотивтарына мөрәжәғәте аша яңынан-яңы йөкмәтке әм поэтик мөмкинлектәрен эҙләп табыу әм асыу теоретик планда тормошҡа ашырылған.

Яҡуп Ҡолмой шиғриәтенә ҡарата әйтелгән үҙ — ул быға тиклем тәнҡитселәр әйткән үҙ түгел, ә жанрҙың үҙенә генә хас стилен асҡанда, тәнҡитсенең ижад фантазия ына, поэтик үҙенең осҡорлоғона, азатлығына, сафлығына, әр үҙҙең оло кисерешле мәғәнә енә етди иғтибар итеү, күңел яҡтылығын биреп тасуирлау. Урыҫ әҙәби тәнҡитендә быңдай художестволы фекерләү, билдәле булыуынса, В. Белинскийҙа ғына булғандыр. Бында башҡорт тәнҡитсе ен бөйөк рус тәнҡитсе енә тиңләүҙән алыҫ торабыҙ, шулай ҙа бөйөклөккә тиңләшеүҙән зарар килмәйҙер. Кем белә, бәлки, ғүмере оҙон бул а, М. Мин ажетдинов таланты бик бейектәргә күтәрелер ҙә ине.

"Керешкәйе тартылған ян икән" мәҡәлә е ошо үҙҙәрҙең бер саҡкы ы ымаҡ балҡый. "Хәҙерге ҡай ы бер, бигерәк тә йәш, шағирҙар, тауҙарҙы ат итеп эйәрләп, ажарланып сабышып йөрөгәндә, күкрәктәрен йыртып асып, йөрәктәрен урып алып ауаларға сөйгәндә, күккә уҡтар атҡанда, уҡ булып айҙың арҡа ына ҡаҙалғанда, яратҡан ҡыҙҙарының ҡыйғас ҡашын ыҙылып киткән Урал тауҙарына тиңләгәндә, "яртым ут, яртым боҙ" тип өрән алғанда, бер күҙем күккә баҡҡан, бере е ерҙә, тип күҙҙәрен салышайтҡанда — Яҡуп Ҡолмой нисектер көндәлек тормоштоң мәшәҡәттәре менән күберәк мәшғүл кеүек"[12], тигән ығымтаға килә әм шағирҙың шул көндәлек тормош проза ынан үҙенсәлекле поэзия ын асып, унын төп ыҙатын билдәләй. М. Мин ажетдинов бөйөк идеалдар менән уғарылмаған, шул "бөйөк идеалдары менән рухландырылмаған ҡыҫыр шиғыр йүгән еҙ менгән ат кеүек, сәп еҙ атҡан уҡ кеүек, уҡырайған ҡош кеүек, кереше өҙөлгән ян кеүек, ил еҙ ҡалған ир кеүек"тәрҙең кире ен сағылдырыуҙа фольклор мотивтарынан ҡобайыр жанрына тартым үҙ поэтик үҙен ижади ҡуллана.

Тәнҡитсе Яҡуп Ҡолмой поэзия ын "оло ҡыуаныс тыуҙырыусылар" сафына баҫтыра. М. Мин ажетдинов башҡорт легенда ындағы кереше тартылған тылсым-

[12] *Мин ажетдинов М. Керешкәйе тартылған ян икән. //"Совет Башҡортостаны", 1969, 8 август.*

лы ян образын шағирҙың “замана елдәре, тормош ваҡиғалары уның шиғри күңел керешен тартып” уҙыуына образлы бәйләй.

Заманының күренекле әҙәбиәт белгесе Әнүр Вахитовтың “Эпик киңлектәрҙә” исемле китабында башҡорт проза ының яңы күренештәрен фактик материалдар нигеҙендә тикшереүен, ундағы мө им ыҙаттарҙы, уңыштары менән етеш еҙлектәрен дә анализлаған “Эпик киңлектәргә бер сәйәхәт” мәҡәлә ен яҙа М. Мин- ажетдинов. Хеҙмәттең проблематик характерҙа булыуын, унда башҡорт проза ы үҫешенең ҡай ы бер актуаль мәсьәләләре тарихи үҫеш күҙлегенән ҡаралыуын, структур бөтөнлөгөн билдәләй автор. Ә. Вахитовтың яҙыусыларҙың индивидуаль йөҙөн, әҙәби үҫештә ролен, тотҡан урынын уңышлы күр әтеүен ыҙыҡ өҫтөнә ала. “Дөрөҫөрәге, – ти ғалим, – автор унғы йылдарҙағы башҡорт проза ының үҫешен конкрет проблематик мәсьәләләргә бәйләп, уны фәнни-теоретик планда аса алған... Ә. Вахитовтың был китабы әҙәби тәнҡиттә әм әҙәбиәтебеҙ фәнендә унғы йылдарҙа билдәләнгән бер өйөнөстө арттыра: ул тәнҡитебеҙҙең художестволы тәнҡиткә әүерелә барыуында бер мө им аҙым булып тора”[13]. Был инде – художестволы тәнҡит өсөн көрәшкән ғалимдың ҡыуанысы ла, ышанысы ла.

М. Мин ажетдиновтың әр хеҙмәтендә заман заңы зыңлап ҡолаҡтарға инә, күңелдәрҙе биләй, әҙәбиәт үҫешендәге әр яңылыҡ, әр оригиналь күренеш, геройҙар нисбәте яңы тойғолар уята, йөрәк түренән урын ала, тормош абаҡтары, уҡыусы ихтыяжы өр-яңы художестволы үҙ ярҙамында киңәйтелеп, ҡанат ҡуйылып, ижад серҙәрен аса килә.

Динис Бүләковтың “Ҡояш ярсығы” исемле хикәйәләр йыйынтығына яҙған “Яңырыу шатлығы” мәҡәлә ендә ошо фекер өсләтә раҫлана кеүек. “Китапты уҡый башлау менән, ғәжәп бер мөләйем, яҡты әм кешелекле донъяға инә ең, хатта хикәйәләрҙең балаларға тәғәйенләнгән булыуын да онота ың. Автор әленәнәле йә урталай теленгән ҡарбузды, йә ҡыҙыл тупты, йә ҡыҙыл шарҙы хәтерләткән ҡояшты үрәтләй, әм ергә тереклек биреүсе, кешеләрҙең күңелен йылытыусы ҡояш мотивы бөтә хикәйәләр аша лейтмотив булып уҙыуы” яҙыусының ысын образдар аша фекерләүен күр әтә. Тәнҡитсе йәш яҙыусының ижади фекерен алғы планға сығара. Бында ҡояш нурҙары аша кеше күңелдәренең йылылығы, мөнәсәбәттәре яңырыуы, кеше психология ының яңырыш кисереүе, төптән, күңел төбөнән изгелекле ынылышы, тормош күренештәренең әм кешеләрҙең яңыса мөнәсәбәте, рухи үҫеш эволюция ы – тәнҡитсенең бай ижади фекерләүе аша сағылдырыла. Д. Бүләковтың күңел даръя ы ҡояш ярсығына ыйған донъя күренештәреме ни!

Башҡортостан яҙыусыларының әм әҙәби тәнҡитселәренең алдында М. Мин- ажетдинов әҙәбиәттә хәҙерге заман геройына арналған “Замандаштың яңы образы” тема ына проблемалы сығыш я ай. Ул “Ағиҙел” журналында 1972 йылда донъя күрә. Билдәле булыуынса, М. Мин ажетдиновтың ижады буйына был актуаль тема беренсе планда торҙо. Дәүеренә ҡарата, йәмәғәтселек ихтыяжына яуап бирерлек, халыҡ тормошоноң алғы сафында барырлыҡ көрәшсе-герой образы хаҡында ул шул мәҡәләләрендә проблема итеп күтәрә килде. Был хеҙмәттә ғалимдың замандаш образына мөрәжәғәт итеүе, уны ниндәйерәк планда күрергә теләүе, тарих әм бөгөнгө заман, милли ерлек әм яҙыусы концепция ы нисбәтендә фекерләү ҡеүә е ярылып ята. “Заман менән замандаш ара ындағы мөнәсәбәттәрҙең йөкмәтке е менән нисбәтен художестволы анализлау процесында дәүеребеҙ-

[13] *Мин ажетдинов М. Эпик киңлектәргә бер сәйәхәт. //“Совет Башҡортостаны”, 1969, 12 август.*

ҙең ыңғай геройын дә шәтле ынтылышында образлы көүҙәләндереү – әҙәби ижад эшенең үҙәк проблема ы буларак алға баҫкан”лығы теоретик планда ҡарала. Хеҙмәттә актив гражданлыҡ тойғо о, кешеләрҙең рух активлығы, бейеклеге, иҫкелектән ҡотолоп яңылыҡҡа юл ярыусы геройҙар тибы хаҡындағы әҙәбиәттең үҙләштерелмәгән сиҙәмдәрен аса ғалим. Күп кенә әҫәрҙәрҙә геройҙың, яңы масштаблыҡ алып, ижтимағи яуаплылыҡтың яңы орбита ына сығыуы ла... үҫештең яңы ыҙаттарына бәйләнгән. Яҙыусыларыбыҙ, бигерәк тә шағирҙарыбыҙ тормош ваҡиғаларының тышҡы яғы менән мауығыуҙан арынып, уларҙың эске асылына, төпкөл закондарына барған айын тәрәнерәк үтеп инә башлауҙарын дәлилләй. Тарих әм дәүерҙең бөгөнгө сағылышы, тетрәнеүҙәр, психологик тәрәнлек, геройҙарҙың эске монологы, хат, диалог, васыят кеүек формалары үҙләштерелеп, яҙыусылар герой концепция ына яҡынлай башлауҙары тәнҡитсенең иғтибар үҙәгендә, ул теоретик фекерҙәр тупланма ын тәшкил иткән.

“Әҙәбиәт замандың үҙендә өлгөргән, шытып сыҡҡан проблемаларҙы бөтә конкретлығында әм тәрән асылында, ҡатмарлы үҫешендә әм тормошсан ә әмиәтендә көүҙәләндереү өсөн саҡырылған... Әгәр яҙыусы... эске асылға ишаралаусы индивидуаль ыҙаттарҙы таба алмай икән, өҫтәүенә, уларҙың эске асылына ла үтеп инә алмай икән, проблемаларҙы тәрән асылында” күрә алмауҙы ла иҫкәртә. Ғалимдың был фекере бөгөнгө геройҙың яңы орбитаға сығыуында тағы ла актуаль әм оригиналь яңғырай.

Ғалимдың хеҙмәттәрендә айырым әҫәр менән генә мауығыу юҡ, ул әр әҫәрҙе яҙыусының дөйөм ижадына, заман ихтыяжына, уҡыусының күңел зауығына, төрлө жанрҙағы герой концепция ына юл асыу менән тормош ерлегендә анализлай. М. Мин ажетдинов яҙыусы әҫәренә таянып заман ихтыяжы, уның проблемалары тура ында киң планда: социологик, фәлсәфәүи әм эпик йүнәлештә фекер йөрөтә. Билдәле, бындай ижад стиле В. Белинский, Н. Добролюбов, Н. Чернышевский хеҙмәттәрендә, башҡорт әҙәбиәте фәнендә Ә. Вахитов, К. Әхмәтйәнов, Ғ. Хөсәйенов, Р. Бикбаев мәҡәләләрендә әҙәби оҫталыҡ мәсьәләләрен асҡанда күренде. Был бай традиция әҙәби тәнҡитсе М. Мин ажетдинов хеҙмәттәрендә артабан ижади үҫтерелеп, сағыу төҫ алды. 70-се йылдарҙа әҙәби тәнҡиттең оперативлығы, ваҡытында саң ҡағыуы, үҙ ижад йөҙө ул күтәргән проблемаларҙың характерын, актуаллеген, поэтик фекерләү формаларында, үҙенсә генә хас тел-стиль үҙенсәлектәрендә, әлбиттә, полемик, фәлсәфәүи ығымталарында сағылыш тапты. Ғалим хеҙмәттәрендә “образлы фекерләүҙәр ағышын логик фекерләүгә күсереү, образдарға әҫәрҙең идея-художество концепция ына ҡоро характеристика биреү генә түгел...”, шул әҫәрҙәге геройҙарҙың эске донъя ына үтеп инеү йүнәлешендә башҡалар күрмәгән, тоймаған яңы рухи гүзәллекте асыу, “зи енеңде байытырлыҡ, күңеленә ятырлыҡ” айырым бер ғәжәп донъя тыуҙырыу маҡсаты алғы планда торҙо.

М. Мин ажетдинов художестволы үҙ ҡөҙрәтенә эйә булған тәнҡитсенең оло яуаплылығын зирәк тойҙо, ул әҙәбиәттең идея-художество сифаты бейеклеген, рухи сафлығын ҡурсалаусы, үҫтереүсе дәрәжә икәнен бер ваҡытта ла хәтеренән сығарманы. Бөгөнгө көндә лә уның әҙәби тәнҡит өлкә ендәге мәҡәләләре, рецензиялары, йылдар ынауын үтеп, актуаль яңғырай.

**Рәүеф ША ИЕВ,**
**филология фәндәре кандидаты.**

# ЗАМАН ЙЫРСЫ Ы

*(Мөслим Мараттың тыуыуына 100 йыл)*

Мөслим Марат (Миңнулла Нәбиулла улы Мөслимов) 1909 йылдың 10 майында Башҡортостандың Борай районы Борай ауылында тыуған. Үҙ ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. 1928 – 1931 йылдарҙа Өфөләге Башҡорт педагогия техникумында уҡый. 1934-1935 йылдарҙа СССР Яҙыусылар союзы ҡаршы ындағы йәш яҙыусылар курсында була. Ул бер нисә йыл республикабыҙҙың “Пионер”, “Октябрь” журналдары редакцияларында эшләй. Йәмғиәтебеҙҙәге иң хәүефле, фажиғәле осор башлап яҙыусының тормошон да урап үтмәй. Репрессия ҡорбаны булып, әҙәби мөхиттән бөтөнләй айырылырға мәжбүр була. Тик 1960 йылдарҙа ғына Өфөгә ҡайтып, ижад эшенә тотона.

Мөслим Марат тыуған ауылы мәктәбендә уҡығанда уҡ Ш. Бабичтың сатирик әҫәрҙәренә эйәреп шиғырҙар яҙа. Уның тәүге шиғыры 1927 йылда Мәскәүҙә сыға торған “Игенселәр” гәзитендә баҫыла. “Ике корабль” исемендәге тәүге йыйынтығы 1930 йылда нәшер ителә. Артабан бер-бер артлы “Ҡартаймаҫ йәшлек йыры”, “Еңеүсе ғүмер”, “Хәйҙәр ҡарттың күргәндәре”, “Шат колонналар йырлай”, “Шиғырҙар йыйылма ы” тигән йыйынтыҡтары донъя күрә. уңынан М. Мараттың “ аумы ығыҙ, дуҫтар, иптәштәр!”, “Балҡы, ҡояшым” әм рус телендә “Яҙғы ҡойон” тигән китаптары баҫылып сыға.

М. Мараттың шиғриәтендә төп темаларҙың бере е – заман әм замандаш образы. әр шиғырында ла шул осорҙоң идеологик ҡалыптары ижадының сиктәрен билдәләй. Уның комсомолға, йәштәргә арналған тиҫтәнән артыҡ йырҙары, марштары, Башҡортостан йәштәренең хеҙмәт батырлыҡтары хаҡында шиғри телмәрҙәре заман улышын бирә ине. Авторҙың “Шамундың үлеме” тигән поэма ында революционер шағирҙың йәшәйеше, эшмәкәрлеге үрәтләнә. Әҫәрҙә публицистик пафос өҫтөнлөк итә. Ошо теманы “Беҙҙең инженер”, “Еңеүсе ғүмер” поэмаларында эпик планда дауам итә. Шағирҙың поэмаларындағы лирик герой – алдынғы комсомол. Тап ошондай шәхестәр генә ил, халыҡ яҙмышын яҙыусылар рәтендә тора. “Ҡа арман әм үлем” шиғырында ике тарихи шәхес – В. Чапаев әм М. Йәлил образдарын йәнәш ҡуйып үрәтләй.

Мөслим Мараттың эпик пландағы “Мейессе әм уның улы хаҡындағы хикәйәт” шиғырында сюжет үҙенсәлекле генә тармаҡланып, боронғо осор әм хәҙерге заман мәсьәләләрен йәнәш ҡуйып тасуирлай.

Авторҙың “Мәрфуға әм Марфа”, “Яхыл әм әм Тося” исемле эпик ҡоласлы шиғырҙарында дуҫлыҡ тема ы бай художестволы образдар аша уҡыусыға еткерелә. Шағирҙың “ еңлемдең туйында”, “Та ир ҡарттың ағышы”, “Бейеүсе Шәмсинур” әҫәрҙәре сюжет ҡатмарлылығы, әр образға алынған идея ы менән айырылып тора. “Сәскәләр шатлығы” шиғырында автор Гөлнар образы аша Ватаныбыҙҙың киңлеге, Ҡара диңгеҙ, “Артек” лагеры хаҡында бай мәғлүмәттәр бирә. Тап ошо юҫыҡта граждандлыҡ лирика ы “Ҡай сәскә е”, “ үнмәҫ мөхәббәт”, “Яҙ килә”, “Диңгеҙ саҡыра”, “Беҙҙең ҡарағайҙар” шиғырында дауам ителә.

Мөслим Мараттың ижадында шул замандың ҡотолғо оҙ ҡалыптарына эйәреү ҙә бар. “Марсель исемен йөрөтөүсе” шиғырында, заман мода ы артынан эйәреп, боронғо башҡорт исемдәрен генә тәнҡитләмәй, Зәки Вәлиди образын да негатив планда тасуирлай.

М. Марат ижадында яҡты ҡарашлы, киләсәккә өмөт менән бағыусы әҫәрҙәр ҙә етерлек. Мәҫәлән, “Беренсе аккорд” шиғырында сабыйҙың донъяға килеүе матур поэтик образ аша кәүҙәләндерелә. Ысынлап та, сабый тыуыуын йәмғиәттең, илдең киләсәге менән бәйләп күр әтеү шиғырҙың эпик башланғысын көсәйтә генә.

Шағир М. Марат ижадында ҡатын-ҡыҙ тема ы матурлыҡ, ила илыҡ символына тиклем еткерелә. “Беҙҙең Зәйнәп”, “Кәләштең тыуған көнө”, “Ҡояшым минең”, “Яҙ килә” шиғырҙарында ҡатын-ҡыҙҙың эске әм тышҡы матурлығының гармония ы поэтик образдарҙың бар тулылығында урын ала.

Уның шиғырҙары ара ында айырым шәхестәргә арналғандары ла етерлек. Татар шағиры Хәсән Туфанға “Дуҫыма хат”, композитор Х. Әхмәтовҡа “Ҡанаттар бүләк ит”, халыҡ шағиры Р. Ниғмәтигә “Үлем”, тәүге космонавт Ю. Гагаринға “Мәңгелек кеше” шиғырҙары менән билдәләнә. Шулай уҡ М. Марат тәржемә өлкә ендә лә эшләй. Рус теленән А. Жаров, В. Луговскойҙың айырым әҫәрҙәрен, немец әм чех шағирҙарының ҡай ы бер шиғырҙарын башҡорт теленә тәржемә итә.

Ғөмүмән, М. Марат ижады үҙенең публицистик пафосы, заман геройҙарын сағылдырыуы, әҫәрҙәрендә тематик төрлөлөккә ынтылыуы менән билдәләнә. Башҡорт үҙ сәнғәтендә Мөслим Марат заман йырсы ы булараҡ танылыу алды.

**Зэки ӘЛИБАЕВ,**
**БДУ доценты.**



**Шәриф БИКҠОЛ**

## Ҡайтарал ам әгәр

Йөрәгемдә йыр яралған мәлем
вулкан атылыуға торошло.
Ҡанат ҡаҡҡан әр бер йырым өсөн
мин, Кешеләр, еҙгә бурыслы!
Йөрәгең — боҙ, алҡын саҡта,
ҡалай
ил ам даръялары ҡуҙғал ын?
еҙ өҙлөк өҙ
күңел усағыма
өҫтәп тора ығыҙ ҡуҙ, ялҡын.

Йырым тыуа.
Төн йөҙөмө, таңмы —
был минутҡа әҙер, аҡ торам:
атаҡаға ҡалҡҡан алдат ымаҡ,
йыр яҙырға тороп ултырам!
Шөкөр итер инем яҙмышыма,
«Таптым, — тиер инем, — ырыҫты», —
йырҙарығыҙ өсөн
йырым менән
ҡайтарал ам әгәр бурысты!

---

*Шәриф Бикҡол 1924 йылдың 28 майында Ҡырмыҫҡалы районы Ҡарлыман ауылында тыуған. Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағандан уң Дәүләкән педучилище ында уҡый. Бөйөк Ватан уғышында ҡатнаша. БДПИ-ла уҡый. Шәриф Бикҡол йәмәғәт эшмәкәре, билдәле әҙип ине.*
*1996 йылда вафат булды.*

## Үпкәм юҡ

*Яҙмыш мине үгәй етмәне, тик*
*« еҙ» тип өндәшмәне,*
*« ин» тине;*
*алдарымда ут тор а ла дөрләп,*
*«Ситләп үт», — тимәне,*
*«Ин!» — тине.*
*Белмәнеме яҙмыш —*
*быңдай ынау*
*бөгә батыр ынлы батырҙы:*
*ялдар тейеш саҡта,*
*ул, оранлап,*
*мине аяғүрә баҫтырҙы!*
*Юҡ,*
*ул,*
*минең баштарымдан ыйпап:*
*«Ни кәрәк?» —тип орап торманы;*
*иңбашыма алдат йөгө өйҙө,*
*наҡыҫ булды*
*бик йыш юрғаны.*
*Ҡайсаҡ*
*(ниндәй тылсым тапҡандарҙыр*
*яҙмыш менән алдан килешеп) —*
*миңә тигән хәләл өлөштәрҙе*
*көнсөл йәндәр алды бүлешеп…*
*Бик талапсан булды миңә яҙмыш —*
*« еҙ» тип өндәшмәне, « ин» тине;*
*алдарымда ут тор а ла дөрләп,*
*«Ситләп үт», — тимәне,*
*«Ин!» — тине.*
*Эйе, индем —*
*мин уттарға индем, аяғүрә баҫтым оранға;*
*бик йыш өлөшөмдән ҡоро ҡалдым,*
*ризалаштым наҡыҫ юрғанға.*
*Ғүмер үтте алды-ялды белмәй,*
*ә күңелдә тынғы*
*аман юҡ:*
*ҡулым бармай —*
*алдат биштәрен*
*мин*
*әлегәсә иңдән алған юҡ!*
*Быуындарҙың талған сағы байтаҡ,*
*ә шулай ҙа теҙгә сүккән юҡ!..*
*… ынау артлы ынау табып тора,*
*яҙмышыма мәгәр үпкәм юҡ!*

*Әммә рәхмәт…*
*ин мине уттарға алдың,*
*батырҙың ҡайғыларға;*

мәжбүр булдым
алдарыңда
юғалып ҡалғыларға.
Күктәргә сөйҙөң,
шунда уҡ
зыңҡыта орҙоң ергә;
бер сабый итеп ҡараның
миңә —
яу үткән иргә…

Әммә
рәхмәт:
байрам я ап
тынғы ыҙ йылдарымды,
 ин,
Али әм,
яҙҙыра ың
баш бирмәç ырҙарымды…

***

Яуызлыҡҡа ләғнәт уҡый бәндә:
– Күңелдәрҙә —
яман оро ин;
атың ғына түгел,
ҡә әрҙәрҙән
мәңгелеккә затың ҡоро он!
– Ниңә был тиклем үк, — ти яуызлыҡ, —
иркен донъяларың тарайған?
«Затың ҡоро он» тип уйлап өйлә —
мин бит, бәндәм, инән яралған!..

***

 ағынам
Ҡиблам итеп,
бары иңә бағам
был донъяның барса яғынан:
Әсәм-бәғеремдең эҙе ҡалған
Тыуған тупрағымды ағынам…
Күңелемдә, иркәм, ин бер генәм,
элеккесә иңә табынам.
Ғүмер юлдарымда
 ин осраған
Яҡты таңдарымды ағынам…
Йөрәгемде тыйыр саралар юҡ —
бөркөт булып ҡанат ҡағына:
уттар- ыуҙар кисеп,
яуҙар үткән
сая йәшлегемде ағынам…

Ғәли
ИБРА ИМОВ

# КИНЙӘ

ТАРИХИ РОМАН

III китап

## БҮГӘСӘҮ БАТША АНАТЫ

### Өсөнсө бүлек

### Бағиҙар* уғышы...

*“С каждым днем силы Пугачева увеличивались. Войско его состояло уже из двадцати пяти тысяч; ядром оного были яицкие казаки и солдаты, захваченные по крепостям; но около их скоплялось неимоверное множество татар, башкирцев, калмыков, бунтующих крестьян; беглых каторжников и бродяг всякого рода”.*

**А. С. Пушкин. История Пугачева.**

I

Екатерина Икенсе был ваҡытта үҙенең дача ы Царское Селола янтар залда ине.

Генерал Карҙан тағы бер курьер килгәс, императрица унын рапортын йүнләп уҡып та торманы. Белә, яҡшы хәбәр юҡ унан. Еңелгән. Ғәскәрен туҙҙырған. Әле Петербургка яҡынлап килеүе.

Петербургка индермәҫкә!

Екатеринаның асыуы ташты. Күпме көс, күпме аҡса. Бөтә е юҡҡа... Ә кем ғәйепле? Ябай казак Емельян, яуыз, ялған әҙәм, йүн еҙ.

Шулай ғынамы?.. Башҡасараҡ күҙ алдына килтерә башланы. Унын губернаторҙары тыңлата алмаған халыҡты. Үҙенә ҡарата белә, генералдарын еңә, крепостарҙы ала, ҡамап тора...

Государыня, үҙе лә иҙмәй, был юлы уны бүтәнсә атаны:

– Маркиз Пугачевтың көсө нимәлә?..

**Бағиҙар – баш күтәреүселәр, бунтовщиктар (автор үҙлегенән).*

*Башы 3-4-се андарҙа.*

***

Ә “маркиз Пугачев” был ваҡытта Бердала тантана итә ине.

Берданы – Петербург тип, ә арттараҡ урынлашҡан Ҡарғалыны Мәскәү тип атаны.

Был үҙгә Берда казактары шат ине.

– Ырымбур урыны беҙҙеке инде. Неплюев беҙҙе бында килтерҙе. Аҙаҡ ситкә этте. Бына беҙ – Петербург, – тиҙәр.

Уға батша палата ы я анылар. Казак Ситников К. Е. өйөндә. Эсе биҙәлгән, стенала – тәхет вариҫы Павел Петровичтың ҙур үрәте.

Үҙенекен дә бер крәҫтиән я ай. Ҡайҙа я а ын? Губернатор дача ында Екатерина Икенсенең үрәтен алғайны. Шуның өҫтөнә я аны ла ҡуйҙы. Юғалды ла ҡуйҙы государыня... Ни бары Пугачевтың ҙур бүрке аша танауы, күҙҙәре генә тороп ҡалды. Юрамал шулай эшләне.

Быны күр әме Екатерина! Аҡылдан яҙыр ине!

Мәгәр үрәтте ҡуйманылар.

Пугачев тәүҙә ябай ғына ине. өйләшеүе лә, кейеме лә. Әле, батша булғас – бул, тип ул килештерергә тырыша. Кейем: сапан, лента, бүрек. Бөтә е лә затлы.

Өй тирә ендә 25 аҡсы: гвардия. Элекке казакса джура (джура – сура). Быға баш – сотник Тимофей Мясников.

Ә ишек төбөндә дежур-майор Еким Давилин.

Яңы Петербург түгелме ни?

Бердала сиркәү. Шунда Пугачевҡа, унын аулығына ғибәҙәт ҡылына.

Яйыҡ казактары – староверҙар. Сиркәүгә йөрөмәйҙәр. Пугачев:

– әр дингә ирек, – тип кенә ебәрә.

Ул иртән сыға халыҡҡа. Рус крәҫтиәндәре килгән. Тәре күтәргәндәр. Байраҡ та тәреле.

– Государь, надежда...

– Будь послушаше яко агнец...

Сакмарскиҙан сыҡҡанда шулай бер әйтте. Бөгөн – икенсе тапҡыр. Батша йөгөн күтәргәс, иреп тә китә ул. Свитаны сиркәүгә оҙаттылар.

Емельян Пугачевты уңғы еңеүҙәре, ай- ай, ҡанатландырҙы. Бигерәк тә генерал Карҙы ҡыйратыу дәрт өҫтәне. Екатерина Икенсенең ышанған корпусы ине тегенең ғәскәре.

Ырымбур алынма а ла, эйе, баш күтәреүселәренең еңеүе ҙур ине. Хлопуша – Воскресен, Әүжән заводтарын, Салауат менән еләү ен, ике е ике яҡтан төшөп, Ағиҙел туғайҙарын губернатор йоғонто онан таҙартты. Салауат команда ы, айран, Көҫәпҡол командалары ныҡ тырышты. Яугирҙар аман өҫтәлә тора. Ҡалмыҡтар килә. Толкачев Гурьев ҡала ын алған. Каспий ярҙарынан алып Стәрлетамаҡҡа саҡлы енде. Яу байрағын күтәргән урындар башҡа төбәктәрҙә лә аҙ түгел.

Пугачев иҙмәгән дә кеүек: үҙенә күпме провинциялар, күпме олоҫтар ҡушылған. Казактар, рустар ғына түгел – төрлө халыҡтар. Уңдағы губернала ла, улдағы ында ла күп.

Еңеү шулай килер, шулай барыр ымаҡ. Бөтә ен аңлата ың, ҡаршылыҡты еңә ең. Халыҡ үҙенекен эшләй.

Минең янымда халыҡ, ти. Шуның өсөн дә унын үҙенә ҡоролған батша палата ында ултырыуҙы йәне өймәне. Йә ат өҫтөндә, йә кешеләр ара ында. Хатта күкрәк аша уҙылған зәңгәр таҫма ла ҡыйын ыта. Бүреккә тегелгәне етә. Көрәшсе лә ә ул! Халыҡтар иркен даулаусы!

Емельян шул бүркен ҡырын алып, тунын кейҙе, биленә ҡылыс таҡты, мирға сығып китте. Казактар йөрөп ята. Татары, башҡорто ла осрай. Уға бүрек алалар, бил бөгәләр. өйләшеп-шаярып үтә ғәли йәнәптәре.

Арттан дежурный сыҡҡан, әлбиттә, аҡлайҙар. Хлопушаны ебәргән бит губернатор. Башын бер меңгә ба алаған. Ос оҙмо? Табылыр берәй атлыҡ йән. Әммә был хаҡта уйламаны ул.

Мөйөштән боролғанда уға ике башҡорт осраны. Бере е өлкән, бере е йәш.

– Батша ҡайҙа? – тип орайҙар.

– Ана атаҡай. – Емеляның тауышы ишетелә. Ул ҡайҙалыр күршелә йәшәй. Ҡайҙа барма – килә лә сыға, эйәрә. Пугачев алдында йөкәләнә.

Пугачев уны саҡырып алды:

– Емеля!

– Атаҡай, килдем.

Шутмы был, шымсымы?

– Будь послушаше!

Пугачев уларға ҡарап алды.

– Мин – батша.

– инме? әй... – Көлдө йәшерәге. – Китсе... Батша шулай була тиме ни? – тип баҡты өлкәненә.

Былар артта торған дежурный майор Давилинға шикле тойолдо. Яҡын килеп, ситкә этте. Яман булыуҙары бар. Батша башына бер мең ум ярлыҡаш билдәләнгән. Губернатор Афанасий Соколовты ебәргәйне. Ярай, беҙҙең күс keше е булып сыҡты. Ләкин төрлө кеше бар.

Тағы бер нисә казак туҡталды.

– Батша нисек була уң? – тип көлдө Пугачев.

Давилин:

– Ә ин ҡайҙан? – тип күр этте өлкәненә.

– Мин яҡындан, батшаға хеҙмәткә килдек бит.

– Ҡарғалынанмы?

– Юҡ.

– Юлаев команда ынанмы?

Юҡ, улай тип әйтергә сәме ирек бирмәне.

– Беҙ Ҡырҡөйлө иләүенән. Батшаға йомошом бар.

Казактар Ҡырҡөйлөнөң ҡайҙалығын аңламаны. Был – Әлибай Мырҙағолов улы Алтынбай менән тағы кемдер.

– Йомошондо Кинйә атаманға әйт. Кәрәк ә, ул килеп әйтер, – тип Давилин башҡорттарҙы төрткөләп ебәрҙе. Батша ары китте.

II/XI. Хәрби коллегия уҙғарылды.

Пугачев тәртип талап итте.

Беренсе көн (6/XI) тәртип юҡ ине. Бөгөн талап итә. Тәүҙә атамандар, үҙҙәрен уға тиң күреп, ғәҙәти өйләшә ине. Бил бөгөү түгел, бүрек тә алмайҙар, йәнәш килеп ултыралар. Үҙ-ара ярай ҙа. Халыҡ алдында ла. Юҡ, күнек ендәр.

Быға Иҙеркәй менән Кинйә сәйер енә ине. Батша күргәс, ихтирам, шаншө рәте лә булырға тейеш.

Ә бына бөгөн...

Пугачев кереп ултыра. Башҡалар ҙа. Пугачев урын күр әтә.

– Иван Творогов! Ошонан ултыр, ул яғыма.

Пугачев Зарубинға ҡарай. Ул бер ваҡыт ултыра белмәй. Йөрөп ята. Батша яраны. Бына ултырҙы ирәйеп Андрей Витошнов. Шулай, өҫтәл янында әр кемдең үҙенә батша тарафынан күр әтелгән урыны бар. Дәрәжә енә, хоҡуғына, абруйына ҡарап. Уң яҡтағы ы, ул яҡтағы ы. Кинйә уйлай: тас хан ярандары, ундағы ы – мәймүнә, ул яҡта – май ары. Икенсе урын, өсөнсө ө...

Уң яҡта – Яйыҡтың ҡарт казагы Андрей Витошнов. ул яҡта – Илектән Иван Творогов. Полковник, коллегияның төп хакимдары – главный судья ы. Хәрби коллегияның начальнигы. Былай әйткәндә, рәйесе, хөкүмәт башлығы.

Ул берәй үҙ яҙа белеү түгел, уҡый ҙа белмәй. Үҙендә тәүәкәллек тә юҡ. Шулайҙы айлап ҡуйғандар. Ә эште унан түбәндәрәк ултырған Максим Шоғаев башҡара. Ул казначей, ул аҙыҡ-түлек хужа ы. Тап, бир, еткер...

Тағы кемдәр? Чумаков...

Главный атаман Овчинников. Бөтә оператив мәсьәләләр, поход, канцелярия мәшәҡәттәренә яуаплы.

Кинйә ултыра. Иҙеркәй Баймәков. Ҡарғалынан Садыҡ Сәйетов.

Секретарь – Максим Горшков[1].

Хлопушаны ҡабул итәләр. Янында – Әүжән кеше е Матвеев Павел. Полкта күбе е завод кешеләре, бергә килгән башҡорттар.

Пугачев:

– Ошо полк инә. Үҙең – полковник.

– Икегә бүләйек, – ти Творогов. Судья бит. – Уңайлы булыр.

Хлопуша улар менән таныш. Ә бит рустары – башҡортса, башҡорто русса упалай. Бергә кил ә, сәңкелдәшәләр.

– Юҡ, бер әйбәт, – ти ул. – Бер побым, бер муллам бар. Ә казактар башҡа-башҡа бул ын. Ә ҡалғаны бергә. Заводтыҡылар уҡ башағы, өңгө я ар, мылтыҡ төҙәтер; пушкарҙар бар. Ә башҡорттар – минең кавалерия.

– Күберәге күҫәк күтәргән бит, – тип көлдөләр.

– Мылтығын... Табырбыҙ, алдаттар, драгундар килә бит.

Ә бер аҙҙан Салауат инде. Унын батшаны күргәне юҡ ине әле. Бында килгәс тә, яңы команданы ауыл ситендә ҡалдырып килеүе хаҡында батшаға әйтергә тип, Салауаттың үҙен алып, Хлопуша менән Ҡотлогилде кергәйне. Батшаның эше күп саҡ. Салауатты маҡтап яурынынан ҡосаҡланы ла алды. Үҙе ғәскәр янына сыға алманы.

– еҙҙең полковник Юлаев булыр, – тине Хлопуша, сиреү янына килгәс. Ҡотлогилде уларҙы Аҡтүбәгә – Кинйә атаман ҡаршы ына алып китте.

Сиреү шат. Бүректәр өҫкә сөйөлдө, өңгөләр юғары күтәрелде. Ә Әлибайҙың сәме ташты. Икенсе көндө кискә табан батшаның үҙен күрергә булды.

Күрҙе күреүен, тик ғәрлеген әйтә алманы.

Быларҙың кемлеген дә, ниңә килгәнен дә белмәй ҡалды Пугачев. Ә әмиәт бирергәме? Ундайҙар булыр, улары күп, әллә ни түгел. Ә ҙурыраҡтар ҙа...

Еңеүле көндәр. Эстеләр. уғыш- төртөш булды.

Кинйә асыулы.

– Казактар, сабаталы, тип крәҫтиәндәрҙән көлә, башҡорт, татарҙан көлөү, голобый, тиеү – аҙым айын.

Пугачев Кинйәгә әйләнде:

– Башҡорттар ҙа көлә.

– Бар.

– Тыйырға кәрәк!

Эске менән Пугачевтың үҙенә лә бәйләнгәйнеләр. Бер атаманды аҫтылар, яза казактарға ла эләкте.

Ләкин ундай язалар, үҙҙәр менән генә эш бөтәме?

Был хаҡта шул көндө уйлашырға, өйләшергә кәрәк булды. Был хаҡта ишеткәс, Зарубин атамандар алдында:

---

[1]*Горшков Максим Данилович – Илек казагы, баш күтәреүселәрҙең Хәрби коллегия секретары.*

— инә, государь, улай йөрөргә ярамай, — тине.

Пугачев үҙе лә ниҙер уйлана ине. Шунда бар берәү. Аҙ үҙле. Уйлап өйләй. Тимофей Подуров ул. Екатеринаның Яңы закондар проектын төҙөү комиссия ы депутаты. Ырымбур казактары юкка айламаған. Уны губернатор Яйыҡ юлына ебәргәйне, бөтә сотня ы менән сыкты.

— инә хәҙер ярты Рәсәй бағынған. Тәхетең якын... Элекке батша сифатың ҡайт ын. Унан...

Уны иғтибар менән тыңланылар. Әлеге ярты Рәсәйҙә идара итеү еңел түгеллеген, хәҙер ойоштороу кәрәклеген өйләне.

Пугачев:

— Әле иртәрәк. Тамам еңгәс, — тине аптырабыраҡ.

— Еңербеҙ. Еңер өсөн хәҙер үк, — тине Кинйә. — Беҙҙең яу урындары күп. Бер үҙәктән бәр әк — була!

— Әле нисек уң?

— Әле лә бынан яу сабырға әҙербеҙ. Бөтә е инең ҡулда. Фарман бирә ең, бында яҙылып таратыла. Әммә ныҡлы түгел, — ти Кинйә, — тарҡаулыҡ бар.

Зарубин:

— Бөтә эште атҡарыу бер батшаға ауыр, — тине.

Овчинников:

— Ниңә? Ә беҙ тик ятабыҙмы?

— еҙ атамандар, башығыҙ эшләй. Молодцы!

Эйе, Овчинников — главный атаман. Башҡара, ойоштора. Башҡаларға ла үҙенә йөкмәлгән эш бар. Бөтә армияға Андрей Овчинников баш. Творогов — Илек казактары атаманы. Подуров — Ырымбур казактары атаманы.

Мосолман халыҡтары ғәскәренә баш атаман итеп Кинйә Арыҫланов ҡуйылған. Муса Алиев — Ҡарғалы полкы атаманы. Артиллерияның — үҙенеке, обоздың үҙенең атаманы бар.

Зарубин аңланы:

— Күмәкләп уйлаша ы саҡ етә.

“Хәҙер былар ғына етмәй,— тип уйланды Пугачев. — Аҙыҡ, фураж кәрәк. Илдәге тәртип, юлдағы именлек, яңы власть ныҡлығы кәрәк. Алпауыт байлығын алыу, крепостағы ҡорал, ғәскәр туплау — бары ына өлгөрөр өң. әр эшкә — бере е. Хөкүмәт кеүек бер нәмә кәрәк. Уны ы ҙурыраҡ та булыр... Пайтәхеттәге кеүек...”

Быға ағзалар ҙа билдәләне: Максим Горшков, Федор Чумаков, Кинйә Арыҫланов, Садыҡ Сәйетов, Иҙеркәй Баймәков. Секретары — Иван Творогов, Иван Почиталин — думный дьяк: бөтә канцелярия уға буй она.

— Хәрби коллегия! Граф Чернышевтағы кеүек. Минең дә үҙ графым булыр. — Пугачев Зарубинға хикмәтле ҡараны.

Коллегия янында казактарҙағыса эш алып барыу өсөн судьялар бар: Максим Шоғаев, Андрей Витошнов, Иван Творогов.

Пугачев:

— Бына Хәрби коллегия. Любомы?

— Любо.

— Рәйесе — граф Чернышев. Мин уға шул титулды бирәм. Чины — фельдмаршал.

Был уның тәү башлап ҙур дәрәжә биреүе ине.

Зарубин әллә аңламаны, уңай ыҙланды. Башҡалар көлөм өрәне.

— Уға йәл түгел, — тине Пугачев. — Катяны Орловтар ҡуйған. Шунан граф титулы биргән. Чика мине аҡланы. Ул — минә Чернышев, еҙгә — граф. әр ана-

тыма булыр ул хөрмәт.

Генеральный штаб – Пугачев үҙе. Ә сенаты – Тайный совет, тинеләр. Барыбер сенаторҙар...

...Кинйәгә ихтилалдың ныҡлы үҙәге булыуы яңы ышаныс тыуҙырҙы. Ә был хәрби әйәтте ойоштороу бик дөрөç.

Кинйә фекерен ҡыçҡараҡ белдерҙе:

– Коллегия булды булыуын, ләкин төрлө үҙҙәр йөрөй...

Әлибай:

– Ә ине ниңә хан итмәй, ин хан булырға тейеш ең, – тине. Үҙе хыял итте бит, үҙе хаҡында.

– Ниңә? Беҙгә берҙәм булыу кәрәк. Шундай бөркөттәре еткән батшаға.

– Беҙгә ләме?

– Беҙҙә бөркөттәр бар. Салауат, Ҡаранай, Ҡасҡын. Мин и ә Пугачҡа ярҙам итәм.

Кинйә уйлай: "Берҙәмлек. Бер батша. Шул ҙур бөркөткә ярҙам, үҙебеҙҙә граф та, фельдмаршал да булды. Генералдар, полковниктар. Эштәрен генә башҡар ындар. Ә уңынан... улар түрә булып... Деүәрәндәр кеүек. Яңы алпауыттар, яңы губернаторҙар... Барыбер шулай булырмы? Үҙе ләме?" Уйы әллә ҡайҙарға. Башы буталды... Үҙе лә... Бул а... тағы көрәш булыр. Унан ҡурҡып булмай, күпте уйлап күкле йәшелле булырға. Батша ы булғас, генералдар, полковниктар итмәй ҙә булмай шул.

Пугачев аңлай. Халыҡ ара ында ябай йөрөргә, кәрәк саҡта үҙен батша итеп торорға ла булдыра.

Кейем бар. әйбәт тун. Түбә е – ҡыҙыл бәрхәтле. Ҡаракүл бүрек. Яурыны аша генерал таçма ы аçыр. Ә ҡылыс, пистолдәрҙе элек тә ҡалдырмай ине.

Быны ул тиҙҙән күр әтте. Ҡыр-ҡаҙаҡтарҙан илсе-аманаттар килгәс. (Быларҙы Кинйә алып керә).

– анат ғәли йәнәптәре хәҙрәттәре, – тине Кинйәгә Сәйдалы.

Ишек төбөндә уларҙы батшаның адъютанты – дежур-майор Еким Давилин ҡаршыланы.

Пугачев янында – булава тотҡан казак, икенсе яҡта – көмөш йүгертелгән балта тотҡан тағы берәү.

Сәйдалыға хан карачиҙары кеүек күренде, ләкин ул үҙҙәренсә ундағы ын мәймүнә, икенсе ен май ары тип белде.

Эргә ендә анаттары.

– Дусалы улы Сәйдалы.

Ул сәләм тапшыра белә. Пугачев ҡабул итә белә.

Ике йөҙ кеше.

– Хеҙмәт итегеҙ... Ҡаҙаҡтарға иркен тормош, Яйыҡ ҡала ын алғас, уң яҡҡа сығыу булыр.

Ҡарғалыға барып ҡайтырға булды Пугачев. Парадный. Сигналист. Йыйылды. Байраҡтар. Үҙе алға баçты. Аты яҡшы. әйбәт ултыра. Эре өйәкле, бөркөт ҡарашлы. Атамандар. 25 казак аҡсы. Халыҡ йыйыл а, ҡылыстарын сығарып тора. Был – шәхси аҡсылар. Пугачевтың гвардия ы.

– Был Санкт-Петербург, – тине ул.

Шулай атай башланылар. Ә Ҡарғалыла – Мәскәү.

– Атамандарҙың күңелдәре булғандыр, – тине ул.

Эш унда ғына түгел ине, улар үҙҙәре лә тәртипкә өйрәнә хәҙер.

Салауат эргә енә Ҡарғалы егеттәре килде. Улар менән килгән көндө осрашҡайны ул. Яҡын дуҫтар. Бергә мәҙрәсәлә абаҡ алдылар. Салауаттың йырлауын, ҡурай тартыуын яраталар. Күпме хәтирә. өйләшеп туймаҫлыҡ.

Тик ваҡыты юҡ ине. Батшаға кереп киттеләр. Унда ла оҙаҡ торманылар. Сыҡтылар, сиреүҙе Аҡтүбәгә алып китергә кәрәк. Егеттәр көткәндәр. Ҡарғалылар форштадт яғында икән. Тороп ҡалдылар.

Салауат өсөн шатлыҡ ине. Шул көндө үк ата ына хат яҙып, Кинйә абыҙға тоттorҙо, берәй сапҡын кит ә, ебәрер ең, тип.

Килеп етеүҙәрен, батшаға ҡушылыуын яҙғайны ул. Ғәскәр ҙур. Бында килгәс, үҙемдең шәриҡтәштәрем менән осраштым, тип тә өҫтәне.

Бына әле Әлибай Мырҙағоловты күргәндәр, “Салауат палкауник ҡайҙа?” – тип уны эҙләп тапҡандар. Ул Кинйә урҙуға ынан унда, Яйыҡ битләүендә. Ыҙмаларға Салауат кешеләрен урынлаштырған. Ыҙма[1] ҡаҙыйҙар. Үҙенең тирмә е бар. Ырымбурға ҡарап тора ине. Ҡала. Бейек сиркәү. Унда губернатор. Күпме ҡә әрен сәскән әҙәмдәр... Бына шунда барып инергә...

– Эх, бөтә башҡорттар кил ә, көллө казак, көллө татар, мишәр күтәрел ә, был Торғай ҡаланы ғына түгел, Питербурын да алырбыҙ, тип тә...

Эйе, Катерина Саниянан нарази булған әммә халайыҡтарҙы күтәрергә кәрәк.

Ә эш бара.

Дозорҙар. Разъездар. Пикеттар. Разведка. Алыҫ-алыҫтарға.

Хәбәр килә:

– Чернышев яҡынлай.

Ә ә, бөгөн төндә йә иртәгә бында булырға.

Салауат эргә енә шәриҡтәштәре килде. Ғәбделхәй, Закир.

өйләштеләр. Улар ҙа штурм көтә.

– Ҡурай тарт.

– Була ул.

Сәй эстеләр.

– иңә ҡарт сәләм күндерҙе, остаз саҡырҙы.

– Афарин, Ғәбдессәләм остазға! Мең йәшә ен.

Ул инде ирәк кенә дәрес бирә ине. Шулай ҙа Салауат уны хөрмәт итте. Онотмаған, ишетеп ҡалған.

– Берәй яры юл төшөр. Барам.

– Ул бөгөн көтә, имеш.

Бөгөн бүтән эштәре күп. Боҫҡонға[2] ҡуйылған егеттәрҙе алмаштыра ы, шәйләктәр ебәрә е бар.

Ғәбделхәй менән Закир китеп күп тә үтмәне, Кинйә абыҙ Берданан елдереп ҡайтты. Туп-тура Салауат янына килде. Эше мө им ине.

– Бөгөн...

Ырымбурға бер полк яҡынлап килә икән.

Алыҫҡа йөрөй торған разведчиктарҙан шундай хәбәр алғас та, хәрби әйәтте ашығыс йыйып, уйлашҡайнылар.

Ғәскәрҙе полковник Чернышев алып килеүе асыҡ кеүек. Кар ебәргән ғәскәр.

Ҡаршы алырға, аҡ булырға.

аҡмар аръяғына бер нисә полк ебәрергә ҡарар иткәндәр. Ә Яйыҡ тирә енә башҡорттар ҡуйыла.

Чернышевтың юлды уратып, Яйыҡты аша сығыуы ихтимал. Туғайҙан Яйыҡ

[1] *Ыҙма – ҡышлау урыны.*
[2] *Боҫҡон – ҡасып ятҡан урын.*

ҡапҡа ына барыуы бар. Губернаторға курьерҙар шунан йөрөй.

– Ни ҡылана унда губернатор? Кинзей, аҡ бул. Көслө дозорҙар ебәр, – тигәйне Пугачев.

Әле шуларҙы Салауатҡа еткерҙе Кинйә.

Вылазка.

Салауаттар ҡатнаша.

Туп уғышы. Уҡтар. Ун-ун бишләпте ҡылыстан кисерҙеләр.

Дозорҙар. Кис. Ҡараңғы төштө. Атта берәү килә. Ҡыштыр-ҡыштыр, йәшеренмәй ҙә. Тотоп алдылар. Аттан өйрәй башлағас, үҙе төштө. Тыныс ҡына.

– Т-с-с, шауламағыҙ.

Сәйер әҙәм. Ҡаршылашманы. Пистоле бар.

– Алығыҙ. Мине Кинйә атаманға илтегеҙ, – тине.

Башта Салауатҡа илттеләр. Ул Кинйәгә алып китте.

Кинйә аптырашта ҡалды.

Василий Петров! Башҡорттарҙы аптыратып, ҡосаҡлаштылар. Тотоҡ, тип маҡтанырлыҡ түгел икән, үҙе сыҡҡанға оҡшай. Әйтә е үҙе бар. Ашығыс, күрә ең. Ләкин ул хәрби сер тигәнде белә. Башҡаларға күҙ ирпте.

– Салауат, ултыр, – тине Кинйә. – Башҡаларығыҙ сығығыҙ.

– Пистолде бир, – тине Петров сығыр алдынан.

– Ә, бирегеҙ бир. ине борсолоп көттөк. Бик оҙаҡҡа китте, – тип башлағайны Кинйә. Петров:

– Уны ы уңынан. Полковник Чернышев килә, – тине.

– Беләбеҙ.

– Уны ы яҡшы. Мин ҡаршы алырға барам. Губернатор ебәрҙе. Бөгөн төндө ҡапҡанан көтәләр.

– ин юл күр әтер ең.

– Аңлашыла...

– Килтерегеҙ атын! Салауат, минең урынға ҡал! Алпар, аттарға эйәр ал.

Алпар:

– Аттар әҙер.

Бындай кеше булғас, ҡайҙалыр барырға тип аттарҙы эйәрләп тә ҡуйған икән.

...Пугачевҡа барғас та ҡыҫҡа ғына өйләштеләр. Петров ышаныслы. Кинйә лә әйтеп тора.

– ин ҡаршыла Чернышевты, – тине Пугачев Петровҡа.

Пугачев үҙе ойошторҙо кәңәште. Овчинников бар. Кинйә. Салауат.

13/XI. Әҙерләнделәр. өйләштеләр. Шартлы ымдар[1] билдәләнде.

Чернышев Черноречинскиҙы үткән.

аҡмар тамағы. Боҙ тотҡан. Юл ағастар ара ынан үтә. Шунда боҫҡон булып яттылар. Ә Петров менән өс кеше *(сержант, алдаттар)* алға китте.

Көттөләр.

Алғы отрядта тоттолар.

Маяҡ тауы.

Петров:

– Мин – губернаторҙан. Полковникка илтегеҙ.

Чернышев Петр Матвеевич – санала. өйләп биргәс, ышанды. Петровтың өйләшеүенән үк дворян, аристократ икәнен белде. Бында, уғышҡа инмәй, ҡала-

[1]*Ым – пароль (автор үҙлегенән).*

ға инергә мөмкин. Артыҡ борсола ы юҡ икән.

– Ҡайҙан инәбеҙ?

– Водовозныйҙан. Көтәләр.

– Юл тынысмы?

– Килдек бит. Хоҙай беҙҙең яҡлы. Рәхименән ташламай әле. Ләкин, Алла хаҡы өсөн, шым ғына барырға кәрәк.

Баралар. Полк, оло юлдан сығып, ағас ара ына инде. Юл тар. Бына бер ваҡыт санаға ябырылдылар. Чернышев атырға теләне. Петров ҡулын баҫты, пистолен тартып алырға өлгөрә алманы.

– Ах, атлыҡ йән, – тип атып ебәрҙе Чернышев.

Саян ҡорттоң ағыуы бер генә тапҡыр сағырлыҡ булған кеүек, полковник та башҡаса ата алманы – уның ҡулын шаҡарып, пистолен тартып алдылар, түпәләп-түпәләп үҙен бәйләп тә алдылар. Ә сана янындағы Петров ҡарға йығылды.

Казактар – бер яҡтан, башҡорттар икенсе яҡтан уратты, алдаттар мылтыҡтарын яурындан алып та өлгөрмәне.

– Баш ал!

– Бирелегеҙ!

Чернышевты бәйләп алғайнылар. Команда ында 600 алдат, 500 ҡалмыҡ, 1100 казак, 32 офицер, 15 туп. Ҙур обоз.

Петровтың ҡар өҫтөнә ҡолағанын күреп, тартып торғоҙорға иттеләр. Хәле юҡ. Башы әленгән.

– Ах, үлтергән!

Кинйә арыраҡ ине. Бата-сума а ылдап килеп етте. Эйелде:

– Василәй, Василәй!

– Кинзя... Булдымы?

– Булды! Бөтә полкты алдыҡ!

– Күңелем тыныс хәҙер! – Петров ыңғырашты. Ҡулын ҡуҙғатырға итте күкрәгенә. Ҡанға буялды.

Хәлен аңлай ине, шулай ҙа шаяртҡандай итте. әр ваҡыт яҡты йөҙө төндә бул а ла яҡтырып, нур сәскән төҫлө булды, уның йөҙөндә йылмайыу сағылды.

– Кинзя, уҡты тартып ал! Йәш саҡтағы кеүек.

Әллә ҡасан, Кирилов заманында, үҙенең драгун булып башҡорт ерҙәренән үткән саҡта, әлеге кеүек хәл еҙ ятҡанда, күкрәгенән уҡ алғанды иҫкә төшөрә. Ул ваҡыт Кинйәнең ярҙамы килеште, иҫән ҡалды. Ихтимал, әле лә... Тик был ябайы түгел, утлы уҡ, абы күренмәй, күкрәккә үткән. Алып булмай.

Петров үҙе лә аңлай ине быны. Нимәлер әйтәм тип тағы бер улыш алды. уңғы улышын...

***

Чернышевтың артлы сана ына алып алып ҡайттылар Петровты. Бердаға тағы еңеү килде.

Петровҡа үлем, Кинйәгә ҡара ҡайғы. Дуҫы, үҙенең күкрәгендә бөтә ғүмеренә аҡлап йөрөткән изге уйына тоғро булып, яуға сыҡты.

Бынан ҡушҡанса Ырымбурға инде, дөрөҫлөк таратты, күпме егеттәрҙе өгөтләп ихтилал яғына сығарҙы. Ә үҙе...

Ҡай ы ваҡытта юғала шул йән дуҫтар...

Чернышев полкын ҡыйратыу менән мауығып, ирәйҙеләр бул а кәрәк. Тағы байрам иттеләр. Эстеләр. Шау-гөр. Шул арала бригадир Корф Орск ҡапҡа ынан ғәскәрен ҡалаға алып керә алды.

3

Туп атып ебәрҙе.

Был – “подъем”! Бөтә Берда уяна.

Көн айын шулай. Белеп бөткәндәр.

Армия тәртибе. Юҡка ғына регуль тимәйҙәр. Полктарға бүленгән. Полктар – әр халыҡтың үҙенә. Башҡорт полкы, татар, ҡалмығы ла бар. Сотня. Десятка...

Полктар менән сыҡтылар. Үҙ байраҡтары. Ҡыҙыл, ары, йәшел...

Строевое занятие. Пугачев әрмелә хеҙмәт иткәндә шулай була ине. Ҡыҙыҡ. Матур. Эскадрондар күнегә. Туп-туп тояҡ тауыштары. Боролалар. Марш, марш! Шашки – вон!..

Шулай эшләргә. Үҙе ҡарай... Кешеләр ҡарап тора. Ололар, малайҙар...

– Экзерциция! – Күнегеүҙәрҙе шулай ти Пугачев Петр ғәскәрендәгесә.

Кис. Тағы туп атыр: йоҡларға! Отбой.

Туҡтаған арала Пугачев:

– Депутация, кис, – ти.

...Икенсе көндө полковник Чернышевты дар ағасына аҫтылар.

Полк ҡыйралды. Әммә губернатор аман ҡала эсендә. Алырға ваҡыт, алырға кәрәк, тип сәмләнә Пугачев.

Штурмға әҙерләнергә кәрәк. Барып-барып ҡаранылар. Үҙенең кешеләре батыр уғыша, яҡын уҡ баралар. Ләкин офицерҙар бирешмәй. Сәбәбен аңлай Пугачев. Унда – ойошҡанлыҡ, бында ғәскәрҙе бер йоҙроҡка туплап булмай. Өйрәтелгән ғәскәр түгел шул.

Сағыштырып ҡара аң, ике е ике нәмә. Бында ауыр ваҡытта бере е уңға, бере е улға тартҡан кеүек. Йүнле үтәлмәй фармандар. Ә регуляр ғәскәргә ҡарауы оҡланғыс.

Өйрәнәләр өйрәнеүен. Пугачев күрә. Казактың бер белгәне – уғыш уйыны. Бында ла буш булдымы – әр кем үҙ белгәнен күр әтә, оҫтараҡ күренергә тырыша. Башҡорттар ҙа уҡ ата, өңгө ташлай. Ҡылыс менән сыбыҡ ҡырҡалар.

Мужиктар... Уларҙың ҡулдарында – өңгө лә әнәк. Йә салғыны өңгө итеп аплағандар.

Ҡарап йөрөнө. Бер мужик күҫәк тотҡан. Ғәжәпләнә е юҡ. Күптәр шундай. Ул да ҡорал, әлбиттә. Буш ҡул түгел. Ә ин ҡылыслы драгунға, мылтыҡлы алдатҡа ҡаршы барып ҡара.

Пугачев атынан төштө.

– Бының менән ни ҡыра ың?

Мужиктың сәменә тейҙе орау.

– Шуның менән үҙемде аҡлайым. Балаларымды, бисәмде аҡлайым бит.

– Насар аҡлай ың, бөтәгеҙ ҙә унының алдында бил бөгә, уға тир түгә.

– Бына бит шуға килдем.

– Көсөң...

– Килеп ҡара. Бына ин үҙең.

Пугачев үҙенең батша икәнен онотто. Был юлы унының сәменә тейҙе. Икенсеенән күҫәк алды. Быңдайҙы белә, уғышып киттеләр. Күҫәк күҫәккә тейә. Таҡтаҡ. Шаҡ-шоҡ.

Мужик үрелде. Батша булдыра икән. Шулай ҙа унының алдында уңай ыҙ. Күҫәген ергә төрттө.

– Батша булма аң...

– Эйе, батыр ың. Әле батшаны ла еңер ең, – ти. – Ә бына мин алдат булып ҡарайым. – Ул арттағы бер аҡсы ынан фузей ала.

– Бына, тоҫҡайым да атам... Күҫәгең менән нишләй ең?

Теге ҡуҙғалмай. Ышана, әлбиттә.

– Уны ы шулай ҙа. Мылтыҡ юҡ бит.

– Әле булма а, уғышта була ул. Күҫәгең менән тондора ың да мылтығын ала - ың. Шунан? Ата белмәй ең. Әле үк өйрәнергә кәрәк. Гусар атын ала ың, казак була ың, ҡылысын ала ың – биленә таға ың...

Өйрәтергә, бөтә ен өйрәтергә кәрәк. Пугачев Хәрби коллегия ын йыйып, бөтә енә өйрәтеү хаҡында кәңәш беркеттеләр.

– Бөтә тәртип сафта йөрөүҙән башлана, – тине ул. – Вольтижировка[1]. Вольтижировка!..

Кинйәгә батшаның шулай ысынлап тотоноуы оҡшай.

Хәрби коллегиянан сыҡҡас, уйланып барҙы. Былай ҙа яугирҙар тик ятмай. Өйрәнәләр. Йә мәргәнлек күр әтәләр, йә ат өйрәтәләр, өңгә ташлайҙар. Шун ыҙ еңеү түгел, үҙ йәнеңде лә аҡлап булмаҫын аңлайҙар. Тәнең ҡалҡан артында, ғүмерең ян керешендә.

Тик бөтә е бер сама түгел. Берәүҙәр тырыша, берәүҙәр йә ҡарап тора, йә ҡырын төшөп ята. Бөтә е бел ен, тип батша дөрөҫ талап ҡуя. Мәжбүр итергә кәрәк! Быны бигерәк тә Ырымбур казактарының сотнигы Подуров яҡланы.

– Өйрәнеү, маневр кәрәк, – ти ул да.

Хикмәт бит, бер көндө йәш кенә Салауат та шулай тип әйткәйне.

– Тәүҙә ҡалаға ябырылған булып “уйнап” ҡарарға ине, – тине лә ә.

Унда ла тик ятмайҙар. Аталар, өңгө сөйәләр. Мылтығы бар – мылтығын тота, ҡылысы бар – ҡылысын. Алмашып алалар ҙа өйрәнәләр. Был егеттәр менән элек тә өйрәнгәндәр бит, әле лә тынғы бирмәй.

Кинйә ҡарап торҙо.

– Дөрөҫ эшләй ең, – тип хупланы.

Салауат бер туп янында ине. Бер нисә тупсынан орашалар.

– Ҡыҙыҡмы?

– Өйрәнәбеҙ. Тик бына беҙҙә туп аҙ бит.

– Булыр. Тегенән тартып алырбыҙ.

Строевое занятие. Башҡорттарҙа ла “занятие”. Буштары – ат өҫтөндә... Кинйә ҡарап йөрөй. Салауат:

– Ләрт-лорт, ләрт-лорт. арман – арыға ыпырт... – тип амаҡлай.

ары – ул яҡ. Ҡояшҡа ҡарап торғанда ул яҡ. Борондан. Хатта бик-бик борондан. Шулай тауҙарҙы, йылғаларҙы атағандар. Илдәрҙе. ул яҡта... Хандың, солтандың анаттары ла ул яҡта ултырғаны – май ары...

Салауат килештерә. Унан йыр уҙа:

*Сал бөркөттәй саңҡылдап,*
*Янған урттәй ялҡынлап*
*Халыҡҡа оран ташлаған...*

Башҡалар ҙа йырлай. Бере е орай эргәлә барғандан:

– Кем?

– Петр батша...

– Шулай, Бүгәсәү йә Йәмәлке. – Үҙ-ара шулай тиҙәр, яратып әйтәләр.

– Яу фарманы!

Кинйәгә вестовой килә Пугачевтан. Хәбәр килтерә.

– Кил ен.

---

[1]*Вольтижировка – ат өҫтөндә оҫта йөрөү, хәрәкәт итеү.*

Бара. Хатты Иҙеркәй уҡыған. Бик мө им кеүек.

– Бына өйләш...

– Бына өйрәнгән булабыҙ инде.

өйләшеп киттеләр. Салауат ҡыҙып-ҡыҙып өйләй: беҙҙә насар. Ана, кареға теҙеләләр, ана, лава... Өйрәнә е күп.

Юғи ә, башҡорт ғүмере ат өҫтөндә үтә. Әленән-әле яу сапҡандар, барымта ҡайтарғандар. Ә шулай ҙа... Беҙҙә – боронғо тактика. Йә ябырылыу, йә ҡыҫа башлау. Насар түгел. Дошманға баралар. Уны уңайлы урындан алдатып сығарыу өсөн, ҡасҡан булып, кире боролалар. Ә яйлы урында, резервҡа еткәс, йә әт теҙелеп, уратып алалар. Ә эш мөшкөлгә ҡал а – йә үлгәнсе алыш-киҫеш, йә урманға, тау араына ҡасыу, көс туплап, сиреүҙе әлләү. Унан тағы өжүм.

Хәҙер улар ғына етмәй. Сафтарҙы теҙәләр, поход маршы, ибелеп атакаға барыу, унан – артҡа күсеү, ҡабат әйләнеү... Былары – команда менән, бер сигнал буйынса.

Әле Кинйә Салауат янына китте. Унда Салауат. Берәүҙәре – атта, берәүҙәре аттарын еккән. Буш арбаларға теҙҙерә. Икенселәре ябырылғансы – теҙеп тә ҡуя.

– Арбаларҙан ҡәлғә уғабыҙ, – ти. – Юлда, ябырылғанда ылауҙарҙы аҡлау, – ти.

Шунан ул “каре” хаҡында өйләп китте.

– Беҙ ат өҫтөндә, тиҙәр. Әммә өйрәнеш кәрәк.

Кинйә:

– Кәрәк була... Иртәгә өйрәнеүҙәр башлана. Сафта йөрөүҙән башларға ҡушты батша.

Быны ишеткәс, эргәләгеләр:

– Ниңә, ат өҫтөндә йөрөй белмәйбеҙме ни?

Салауат:

– Белмәйбеҙ!

Кинйә:

– Бөтә доға бисмилланан башлана.

Иртәгә ен...

Сигнал. Барабандар. Бөтә аҡмар буйы уянғандай булды, Ырымбурҙы ҡалтыратты. Ишетеп, бастиондарға менделәр.

– Нимә? Киләләрме? Әллә штурммы?

Байраҡтар төрлө-төрлө. Йыр ҙа сығарып алғандар.

Пугачев – парадный кейемдә. Яҡшы ат. Артында – гвардия ы, байраҡсылары.

Казактар бындай сборҙы элек-электән ярата. Башҡалар ҙа аяҡҡа баҫты. әр полкта, әр төркөмдә үҙ командирҙары. Башланды: йәйәүле е – йәйәүләп, атлы ы – ат өҫтөндә өйрәнеү.

Пугачев әйткәнсә:

– Вольтижировка...

Твороговты ҡарап үтә. Сафтары тигеҙ, йәтеш боролалар.

– Молодцы!

Сүкетеп үттеләр. Юртыуға күстеләр. Быларына ла маҡтауын йәлләмәне Пугачев.

– Лаваға теҙелегеҙ! – Был – аҡмар городогы казактарының өжүмдәге яратҡан ысулы...

Теҙелделәр. Ләкин йүндәре юҡ.

Пугачев:

– Улай буламы? – Үҙе команда бирә. – Налево, марш!

Подуровта туҡталды.

– Аттан төшөп, ырғып менеп...

Пугачев Аҡтүбә яғына китте. Унда – башҡорттар. Батшаны күреү менән йән инде, ай- ай. Бары ла бар. Байрағы. Сигналы. Барабаны.

Бер алайҙа ҡушар ат өйрәтәләр. Берәүҙәр – оҫта, берәүҙәрҙең аты өйрәтелмәгән.

Кинйә:

– Алпар, үҙең күр әт.

Алпар бер аттан икенсе енә – йылп. Шул саҡ Пугачев ҡарап тора.

– Молодцы!

Айыт атының ҡор аҡ аҫтынан әйләнеп сыға.

Кинйә Алпарға, Айытҡа әйтте:

– Бөтә ен дә шулай йөрөргә өйрәтегеҙ.

Пугачев, Кинйә ары киттеләр. Алыҫта – Салауат. Ул казактарҙың оҫталығында бер хикмәт барын күргәйне.

Ул сафтарҙы бер теҙә, бер тарата. Лава я ай – тиҙ бул ын. Аттарын ятҡыра, ышығынан атырға уңайлы.

Батша менән Кинйә килгәнен күргәс, йә әт кенә сафҡа теҙҙе.

Ҡаршынан үтергә кәрәк батшаның.

Үҙе эргәлә: ым тауышы алды.

Атлап баралар. Рустар раз-два ти ә, ул үҙенсә:

– Ләрт-лорт, ләрт-лорт...

Аттар шуға ғына баҫа.

Ысынлап та, ләрт-лорт барған кеүек... Артабан.

Шундай ым тауышы таныш. Улар элек тә булған. Әле лә.

– арман арыға ыпырт!

улға боролоп киттеләр. Тағы ләрт-лорт.

Ундай командалары ла бар барын. Килешеп тора. Бик үк ҡулланмайҙар. Кәрәге бөткән тиер ең.

Салауат бер-ике бороп йөрөттө лә батша ҡаршы ына туҡтатты.

– Бадишам хәҙрәттәре!

– Молодец, полковник Салауат!

Салауат үҙе алға баҫты, ары әйҙәне төркөмдө.

Йыр башлана.

– Бөркөт! – тине Пугачев.

– Бөркөттөң дә балапаны![1]

Батша ла, Кинйә лә ары китте.

Салауат дауам итте. Кис тә ул уйланды. Сигнал тауышы – уйын. Бына ғәскәр, бына көс.

... Алдағы көндәрҙә лә күнегеүҙәр ҡабатлана торҙо.

***

Беренсе штурм барып сыҡмағас, ҡай ы бер башҡорт старшиналары үҙ кешеләрен алып китергә теләк әйтә.

Кинйә күптәрен тотоп алып ҡала. Кеше ебәрә.

— Кире барырға! — ти кешеләренә.

— Кем әйтте?

— Кинйә атаман!

— Ярай, ул әйткәс...

Кешеләр килгәс, старшина ла...

---

[1]*Балапан – бөркөттөң иң көслө бала ы.*

***

Кинйәне Пугачев саҡырта.

— Йыйҙыңмы?

— Ҡайттылар.

— Бында бул. Әммә күр, баш бул. Артта еҙҙең ил. Губернатор әмере етмәй. Кәрәге лә юҡ, ин белә ең. Эште ойоштор, тәртип... Бөтә эш — инең өҫкә.

Берәү йылмайып әйтте:

— Башҡорт губернаторы...

***

Был хәлдәр Кинйәне ныҡ борсолдорҙо. Баҡти әң, ундай хәбәр Кинйәнең үҙенә тапшырылған мосолман алайҙарында ла ишетелгән икән. Бер атамандың дар ағасында тороуын күргәндәр. Төрлөсә өйләй, имеш.

Салауат килде.

— Низағ ҡуптымы әллә, Кинйә ағай? — тип ораны ул. Ҡайҙан ишеттең, тип орамаңы. Ә бит был хаҡта дуҫы Балтайҙан[1] да орағайны, ныҡлап әйтмәне. Кинйә лә бөтә ен әйтмәне.

— Дәүләт эше. Ҙур көрәш бара. Бөтә е ихтимал, — ти.

Ихтимал. Тарих шуны өйләй.

...Бер заман, хәлифәт ерҙәрендә, Әл-Фараби ғалим йәшәгән дәүерҙән әүәлерәк, ҡоллоҡтан, яуызлыҡтан, залимлыҡтан, хаҡ ыҙлыҡтан йөҙәгән төрлө халыҡ — шиғиҙар[2] вә сөнниҙәр, индустар вә утҡа табыныусы зәршәттәр, будда вә христиандар, ярлылар вә ҡолдар, ғәрәптәр бер булып яуға ҡуҙғалғандар икән.

Унын рә бары[3] булыр өсөн бер рухани йән Али ибн Мөхәммәт Әл-Барҡауи:

— Әҙәми зат бер төрлө. ис кемде ҡол итеп тотмаҫҡа. Бөтә ен азат итергә! — тигән.

Ул халайыҡтарға азатлыҡ, тигеҙлек вәғәҙә иткән, ерҙәрҙе бүлеп бирәм, тигән. Унын ғәскәре бик тиҙ үҫкән. Ираҡ, Хузистан[4] ерҙәрен алып, үҙ дәүләтен төҙөгән. Әл-Барҡауи үҙе хәлифә[5] булған. Ә дуҫтары, ярандары бик тиҙ байыған, үҙ-ара ыҙғыш-талаш башланған. әм улар Әл-Барҡауиҙы үлтергәндәр, ул төҙөгән дәүләт йығма ителгән...

Был хаҡта уҡыған саҡта Кинйә артыҡ иғтибар итмәгәйне. Әле бына, нисектер, үҙҙәренең киләсәге шуға бик оҡшаш.

Әле Салауат килгәс, шуны күҙ алдына килтерҙе, ләкин был хаҡта өйләмәне. Ишетмәүе яҡшы.

Ләкин Салауат ораша.

— Батша ең ә, нисек булыр?

— Нисекме? Ярандары юғары мансафлы генерал да сенатор булыр. Күп ерҙәре, ҙур арайҙары булыр. Үҙ-ара уғышырҙар. Ләкин улай тип, әле ҡул ҡаушарып, баш эйеп көтөп булмай.

— Беҙ юл ҡуймабыҙ! — ти Салауат.

— Эйе, ундай хәл булғанда, үҙебеҙҙекен бирмәбеҙ, — ти Кинйә.

Шул саҡ Пугачев килде. Үҙен ҡәҙимге тота, ял итке е килгәнме, тикшереп йөрөймө — белмәҫ ең.

Салауат орай алды:

[1]Балтай Иҙеркәйев – Пугачевтың «төрки» телендә яҙыусы писары.
[2] Шиғиҙар, сөнниҙәр (ғәр.) – ислам диненең ике тармаҡ кешеләре.
[3]Рә бар — юлбашсы (автор үҙлегенән).
[4]Хузистан – урта быуаттарҙа Яҡын Көнсығышта бәләкәй дәүләт.
[5]Хәлифә – мосолмандарҙа дини әм донъяуи башлыҡ.

— Бадишам хəҙрəттəре, еҙгə ораууым бар. Рөхсəтме?
— Йə!
— Бына беҙ еңербеҙ, ə шунан коллегиялар булырмы?
— Əле үк бирəү бар бит.
— Ə заводтар кемгə?
— Кемгəме? иңə. Кем ерендə тора — шуға.
— Алпауыттар уң?
— Деүəрəндəрҙе, помещиктарҙы ҡырып бөтөрəбеҙ.
— Ə алымдар?
— ?..
Салауат яуап ыҙ ҡалды.
— Аҡ батшаға баш орғас, ул башҡортҡа теймəгəн. Ə уңынан ҡыҫҡан, тапаған. Шулай булмаҫмы?
— Булмаҫ, булмаҫ.
— Ə еҙҙең вариҫығыҙ ҡалырмы?
Быңдай яуабы əҙер Пугачевтың.
— Улым Павел бар.
Уйнап əйт ə лə, уйлап əйт ə лə, барыбер шуға бара.
Пугачев шаярғандай итеп өйлəшə. Бында, ышанып, ысын уйҙарын асты.
— Атамандар ара ында төрлө ө бар. Берəүҙəре бик ышаныслы. Ə ҡай ылары... Ҙурыраҡ чин алырға ынтыла, үҙҙəре, бер-бер хəл бул а, тереләй ашарға əҙер. Тотоп бирерҙəр. Минең башҡа — аҡса... еҙҙең башҡортта ла шулайҙыр.
Салауат:
— Юҡ, ундайҙарға юл ҡуймабыҙ.
Кинйə:
— Башҡорт яугирҙарына ышанам.
— Ышанам, Кинзей. Янында гел көс тот. Йөҙҙө. Юҡ, ике йөҙҙө. ин дə, батыр, аҡ бул.
Пугачев күңелләнеп ары китте. Кинйə оҙата барҙы.

4

Афанасий Соколов нисек кенə тырыш а ла, Əлибай ҡулынан алып үҙенекендə тотоп торған серле байсаны онота алманы.
Ана ниндəй көмөш булған.
Ул башҡорттар төйəгенə барып, Əлибайҙы осратҡас, саҡ-саҡ ҡына унын яға ынан тотоп елкетмəне.
— Кемдəн алдың тегене? — тине.
— Үҙемдə...
Башҡа ын əйтмəне. Əйттерер ҙə ине. Лəкин ғауға сығыр, ярамай. Был үҙе түгел, ағас аяғы ҡалған арбала кем ултырғанын онотмаған. Шул яҡталыр.
Ат уйынында Əлибай булмай сыҡты. Ул Чернышевты тотҡан көндө лə булманы.
Кинйə ниҙер иҙҙе.
Барып ҡайтырға уйлай Хлопуша. Ваҡыт иркен кеүек ине. Дозорҙар берəүҙе тотоп килтерə.
Туп-тура батша палата ына, атамандар йыйылған саҡта.
Ҡайҙа баралыр, əйтмəй.
— Губернатор ни уй ҡора?
Əйтмəй.
— Əле күпме ҡылыс тоторлоҡ?
Өндəшмəй...

— инә унда — яфа. Миңә хеҙмәт ит.
— ин батшамы? Алдаҡсы, вор, тиҙәр.
— Ә-ә, шулаймы? Мин ҡушырмын: ине аҫырҙар. Иртәгә.
— Ә иртәгә ин дә булмай ың, уңлатма, аҫып ҡал.
Пугачев ҡарар итә:
— Овчинников, иртәгә ҡуҙғалабыҙ. Яҡтырыуға крепость янында булырбыҙ, — тегеңә ҡарай. — Ә ин — тоғро. Ғүмереҡ үҙеңә. Оҙатығыҙ! (Ҡарауылдан үткәнсе.)
Пугачев етди төҫ ала.
— Корф килгәс, көс күбәйҙе, тиҙер. – Ашатып, туйҙырып сығарырға уйлай. – Ә беҙ — алданыраҡ ҡыбырҙап... Ҡыйратайыҡ.
Бердаға килгәс, Әлибай Алпарҙы, Аҡҡалпаҡты күрә. Төш түгел дә ә... Бына ҡайҙа икән юғалған ҡыҙ. Туҡтағол урлатып, Тайбулат үҙенә кәләш итеп уңманы. Бына Ҡаныш малайы Алпар ҡулында, тәки ҡауышҡандар.
ылыу... Нисек үҙенең башына килмәгән. Икенсе ҡатын итеп, шунда ата ы Юралы янында ғына тота ы булған. Үҙенә өй алдыра ла бирә. Уйламаған... өйәрбикә ен ярата ине шул.
Әле хәҙер... Ул өйләшеп ҡарай Аҡҡалпаҡ менән.
— Бында иңә ир-ат ара ы. Әсәйеңде ағынманыңмы? Ҡайтып кил, мин дә ҡайтып киләм.
Улы иҙә... Миңә ҡоҙалаймы, ти. Алйот, үҙенең дәрте юҡмы?
Кинйә Әлибайға:
— Ниңә старшиналарың килмәй?
— Үҙҙәре беләләрҙер. Барып алып киләйемме?
— Барыр ың. Нуғай даруға ына ин баш. Ойоштор. Килтер. — Ҡарғалынан ҡайтҡас шуны ораны.
Губернатор эше, тик унынҫа эшләргә ярамай. Тәртип бул ын.
Әлибай күнде. Килтерҙеләр. Пугачев та күрә. Батша исеменән саҡырта Кинйә. Преображенскийҙан Сорокин да килде.
Барма аң, ғәскәр ебәртер, тиҙәр. Хатта Нуғай даруға ының баш старшина ы Ҡыҙрас килде. Үҙе ғәскәре менән Өфөгә ыйыр ине. Йорт-ил ҡала. Ил кем контролендә, ул шунда.
Пугачевҡа саҡырта, Пугачҡа килдем, тиҙәр.
Ә бит бындайҙы Кинйә башҡарғайны.
Строевое занятиела Әлибай Мырҙағолов ҡына күренмәне. Унда ғына түгел.
Кинйә быны иҙҙе. Кешеләре бында, улы ла, үҙе лә юҡ, үпкәләнеләрме, юғи ә. Алайын ҡалдырып ҡасмағандыр бит.
Килгән көндө ук ниңәлер борғоланды, кәйефе көй өҙ ине.
Баштан уҡ юлы уңмағанға эсе ташты уның. Ашҡаҙарҙан уҡ. Унда йәш кенә Салауат, ә Бикҡолда еләү ен сиреү менән осрашҡас... ғәрлегенән үлә яҙҙы. Алпар ҙа бында. Әмер биреп, күкрәк киреп йөрөй ҙә ә ҡасҡын Алпар. Уның элекке ялсы ы. Кире китер ине. Булмай. Кешеләре ҡала. Бындай ваҡытта ғәфү итмәйҙәр.
Килде ул, яйын табырмын, тине. Аҫыл таш ерҙә ятмаҫ.
— Бына, алып килдем, — тигәйне Кинйәгә.
Кинйә:
— инме?
— Анау йолҡош Алпар түгел.
— инең ялсың ине. Хәҙер...
— Ҡасҡын. Өс тапҡыр ҡасты, юл баҫып йөрөнө, – тине Әлибай.
— Ниңә ялсынды ҡасҡын иттең? Батыр егет ул. Батшаға хеҙмәт итә.

— Ниңә оҙаҡ? – тип Кинйә ораны.

— Килмәй, ҡурҡып туҡталдылар.

— Башҡорт яуҙан ҡурҡамы? — Кинйә ниңә туҡталғанын белә ине. — Эйәр өҫтөнә баҫып, яугирҙарҙы өндәнеңме?

Алдағы асылғанға сәмләнде.

— Эйәр өҫтөнә... Салауат...

«Минең хат ҡайҙа?» тип орай ы ине Кинйәгә, дуҫы Әлибайҙың уны Ораҡовтарға биреп, шул сиккә үк етерен уйлай алманы.

Команданы Яйыҡ буйына алып төшөргә тип Салауатҡа ҡушҡанда ла, Әлибай, әллә көнләшеп, әллә кәм енеп, унын алдында уҡ:

— Минең кешеләрҙе лә алып китәме? — тип ораны.

— әр алай үҙ старшина ы менән булыр.

Салауат унын ҡыланыштарын Стәрлетамаҡтан уҡ белә, тик әләкләшеү ярамай тип, Кинйәгә өйләмәне. аман аҡылға ултырмай бит, тип асыулы ҡараш ташланы.

— Мин бында баш булам тип атлыҡманым! Мырҙағол йортауай! Ирек яуларға килдем, – тине Салауат.

Әлибай хәйләгә алышты.

— а-ай, раҫын әйттең.

Салауат атын ҡуҙғатты, үтеп китешләй Әлибайға күҙ ҡыҫты.

— Яу яланында бер-беребеҙҙән ҡалышмайыҡ.

Кинйә Әлибайға текләне. Салауат өйләмә ә лә, ҡушаға[1] тигәнең юлда ни ҡыланғанын, Бикҡол янында ни әйткәнен белә ине.

— ин, дуҫҡай, юҡҡа сәнселмә уға, ул Ҡара аҡал да Батырша булырға көҫәмәй. Уны Шлиссельбург менән ҡурҡытырға кәрәкмәй.

(Бере е лә белмәй: бындай изге юлға сыҡҡан ысын ир азаматы көрәштең хәүефе хаҡында уйламай. Йә үлем, йә еңеү. Батырша өсөн Шлиссельбург бул а, Салауат өсөн шунын эргә ендә генә Рогервик әҙер тора. Бер үк көрәш бер үк юл менән бөтөүсән була.

Ләкин ул фажиғә, ундай ауыр яҙмыш алда әле.)

— иңә бере е лә оҡшамай. Мишәрҙәрҙе лә... Килгәндәр бит. Дуҫлаштыңмы?

— Үҙҙәре эйәрҙе.

Эйәртеү генәме...

Әлибай уны бел ә лә... Үҙенеке — үҙ. Тағы Алпар хаҡында иҫкә алды.

— Ай-ай... Улың янында Айыт ҡараҡ йөрөй.

— Ул аҫаба. Бирек уҙаман улы ине. ин Мырҙағол улы булған кеүек. Ул да батшаға я аҡ түләй торған башҡорт ине. ине ерҙәрендән Твердышев йә Левашев ҡыу а, ин дә шул көнгә төшөр инең. Бына шул афәт бөт өн өсөн. Күршең. Таулы аулы. Бөтә ярлы-ялпы...

Бөгөн үк Әлибайға шәкерттәр килде. Ғәбдессәләм мөдәрристән[2].

Ана бит, уны анға уғыусылар бар. Үҙенә саҡырған. Бөгөн тигән.

әм улын эйәртеп китте. Ултырҙылар. Серле өйләш. Ғәбдессәләм хәлде белә. Кинйәнән, улы еләү ендән дә өмөт өҙгән, Салауат, тине, килмәй.

— Үҙебеҙҙең йәшел байраҡ,— тигәс, Әлибай тиҙ аңланы.

Быны ы уныҡы. Тик ваҡытын көтөргә кәрәк.

Ташҡын ваҡыты. Икенсе юл биреш кәрәк. Халайыҡ ҡорал алған.

---

*[1]Ҡушаға – дуҫ (русса – собрат).*

*[2] Мөдәррис (ғәр.)– мәҙрәсәлә дәрес биреүсе, өлкән уҡытыусы.*

Әлибай:

— Йыйыла инде. Ҡорт инә е булғас, күсе тубалға үҙе инә.

Ғәбдессәләм:

— Умарта ти ең. Бал ҡорто янында бал була. Бында — тиреҫ еҫе... Уның янында тиреҫкә бата ың. Була ул ундай сәғәт. Әлегә дуҫтар тап, үҙеңә бағын ындар. Бөтә мосолмандарҙы.

Былай булғас, Әлибай шәжәрәләр хаҡында, батша ярлыҡтары хаҡында өйләне.

— Былар иңә ҙур тайра.

— Ҙурырағы бар. — Байсаны күр әтте. Ә ә...

— Был хан тайра ы булырлыҡ, — тип ҡужғытты Ғәбдессәләм. — Бетеү итеп тағып йөрөрлөк.

Үҙе таҡты уға.

Ҡайтҡанда ла муйынында ине ул байса.

Ул уйлай: кешеләрҙе эйәртеү өсөн абруйҙы ҡайтарыу кәрәк.

Юлда уларҙы казачий дозор туҡтатты. Тикшергәндә рөхсәт билеттары юҡ ине. Былай йөрөргә ярамай. Максим Шоғаевҡа алып килделәр.

— Минең эшем бар. Мин — Нуғай даруға ына баш старшина, — тине ул. Улы ҡурҡа төштө.

— Ябып ҡуй алар, — тип шыбырҙаны.

— Юҡты... Бер бөгөн генә тыуғанмы ни мин! Түрәләр ҡаршы ында булған бар. Улы ла:

— Әй, күрҙек бит инде уны... — тимә енме.

Лагерь аҡлана. Туҡтаттылар пикетта. Пропускы ы юҡ.

— Кем?

— Әлибай, — ти. — Башҡорт, старшина. — "Казак" тиергә кәрәк ине.

Ул батшаның үҙенә керергә ораны. Алып керҙеләр. Әлибайға дежур-майор рөхсәт итте. Эскә үттеләр. Батша палата ы итеп биҙәгәндәр. Әлибай ирен ситтәрен ҡыйшайтты. Йәнә е, палата, батша арайы... Гөбәргәйел дә үҙ ҡабырсығын, ай-ай минең арайым, шәп бит, тип маҡтаған бит.

Бында сәмләнеп, бригадир Корф ғәскәре үтеүен күрмәү өсөн өйләшеп ултыралар ине.

Шоғаев былар хаҡында әйткәс, Овчинников:

— Бына шундайҙар ара ында ул. Ҡарамағандар, — тип Әлибайға табан төртөп күр әтте.

— Ҡайҙа булдың?

— Ҡарғалыла.

Чика Кинйәнең борсолоп әйткәнен хәтерләне.

— Ниңә Чернышевҡа ҡаршы сыҡҡанда булманың?

— Унда... — Ыҡ-мыҡ итте. — Эш бар ине. Бында малайға аналам. Бында ни саҡлы яугир алып килдем. — Ул үҙенең баш старшина икәнен әйтте. Тегендә лә команда тәртипле бул ын. Яңы командалар кил ен.

Пугачев:

— Ә, баш старшинамы ни...

— Эйе, бадишам ғәли йәнәптәре. Беҙ — затлы нәҫел. Бына, — ул муйындағы байсаны күр әтте лә, алып алып, Пугачевҡа уҙҙы. — Хандар янындағы анаттарға бирелгән. (Ярлыҡтарын, шәжәрәләрен алып килмәгән, йәл.)

Ҡайҙа инде уны уҡыу Пугачевҡа. Ундан яҙылғанды башҡалар ҙа булдыра алманы, бик боронғоно Иҙеркәй ҙә уҡырлыҡ түгел.

— Миңә ата-бабанан ҡалған. Боронғо ул.

Байса ҡулдан-ҡулға йөрөнө. Хлопуша ла, таный биреп, үҙенең көрәктәй

ҡулына алды. Берсә Әлибайға, берсә оҙонса дүрткел көмөшкә ҡараны.

— Бына шундайҙың берәй ен күргәнегеҙ булдымы? Ә, юҡтыр. Ә мин уны бер ваҡыт ошо ҡулымда тоттом, — шуның янында әллә ни саҡлы көмөш аҡсалар булғанын ғына әйтмәне. — ин ҡайҙан алдың?

Туп-тура текләне.

Уҫал ҡараш. Үҙен дә уҫал тиҙәр. Шулай булма а, тауҙар ара ына барып, заводтарҙы буй ондороп, туптар, кешеләр алып ҡайта алмаҫ ине. Күп ине бит. Бикҡолда уны күргәс тә шулай тип өйләнеләр.

Әлибай, бер әҙәм бирҙе, тиер ине. Улай ғына ҡотолорлоҡ түгелдер был әзмәүерҙән, алдағы ла тотола.

— Миңә ата-бабанан ҡалған.

— Ах, ин мошенникка оҡшай ың.

Әлибай байсаға үрелгәйне, батша үҙенә алды. Бының сере ҡыҙыҡ ҡына төҫлө.

— Канцелярияла Балтай барҙыр. Йә Әбдрәшит мулла. Саҡырығыҙ, ни яҙғанын уҡырҙар.

Ләкин унда Кинйә лә бар ине. Үҙе килде. Батша:

— Был нимә?

Таныш ине. Уҡығайны.

— Был хан илселәренә бирелгән.

Кинйәгә уларҙың Ҡарғалы юлынан алып киленеүҙәрен әйттеләр. Ана ҡайҙа барған, ороштан тороп ҡалған. Бының өсөн яза ла бирелә. Ҡайҙа булды икән? Ул Әлибайға ҡарап алды.

— Ни бар ине унда?

— Тағы кемдәр килә, аҙыҡҡа ебәрҙем.

— Әйтергә кәрәк булған.

— Мин Нуғай юлына баш, — ти. Чин орай Әлибай.

Кинйә уны яҡлашырға булды.

— Эйе. Бында ла эшләр. Бадишам, ин дә ҙур шәфҡәт күр әтә ең, уға Нуғай даруға ының мансафын бир.

Был кәрәк ине. Кинйә үҙе ғәскәрҙә баш полковник, ә йорт-ер өсөн башҡорт иле атаманы, уға ярҙамға даруғасы атамандар булыуы кәрәк.

Пугачев башҡорт ерҙәрендәге даруғаның ни икәнен, уларҙың дүртәү булыуын белә ине инде.

— Шулай бул ын. Старшина Әлибай Мырҙағолов Нуғай даруға ының атаманы булып ҡала. Тәртип булыр, тотошлай миңә хеҙмәт ит ендәр.

Әлибайҙың йөҙө асылды. Бил бөгөп рәхмәт әйтте.

— Баш өҫтө, бадишам.

Кинйә яҡлашты. Аңлар, тине, ләкин был ышанғаны өсөн бер ваҡыт бик ныҡ үкенер.

Кинйә Әлибайҙың уйҙарын белмәй ине. Шулай ҙа ни эшләп йөрөүе менән ҡыҙыҡ ынды. Ҡарғалыға кеше ебәргәс, унда Ғәбдессәләмдә оҙаҡ ҡына булыуын еткерҙеләр. Ә билдәле улай булғас... Салауатты ла саҡырып маташҡан. Шул миңә әйткән үҙҙәрелер. Йәшел байраҡ.

Баҡти әң, Әлибай Яман ары менән дә өйләшеп алған икән.

— Беҙҙә кем хан була? — тип ораған Яман ары, Әлибай үҙенә эйәреп.

— Кем бул ын?.. Әле лә бар... Башҡорт иленең атаманы... Фарман бирә, беҙ тыңлайбыҙ.

Яман ары аңла а ла, Кинйәнең үҙенән ораны:

— ине ни... хәҙер хан тип атарға була.

— Ниҙән?

— өйләйҙәр.
— Кем?
— Әлибай.
Кинйә:
— ин үҙ ҡолаҡсынынды кеше башына кейҙермә. Үҙең лаҡылдай ындыр.
— Юҡ, валла и-билла и.
— антый, бер ҡатлы өйләнә ең. Мин ил ханы булырға ынтыла тип белә еңме?
— Юҡ та.
— Хандар, тархандар заманы үткән бит. Батырҙар заманы етте.
— Кем баш уң?
— Ундай азаматтар бар!
— Кем?
— Салауат.
Кинйәнең үҙенән дә шулай орашҡан була:
— Йә, был ысын батшамы? — ти Әлибай.
Шунан Кинйә орай:
— Ғәбдессәләм инә ниҙәр көндерҙе?
— Мин унда...
— Барҙың, хатта бер генә түгел.
— Нисә?
— Уны ы үҙеңә күберәк мәғлүм. өйлә...
— Юҡ, былай.
— Белә еңме, уның әллә ниндәй шымсылар менән бағланыуы бар. Илде бутанылар. Был – истиҡлал, мөстәҡиллек, тиерҙәр. Ә бында — Рәсәй, кешеләр. Үҙебеҙ белербеҙ. Яҙмыш уртаҡ. Шуларҙы өйләр.
Әлибай борсолдо. Баҡти әң, Кинйәгә бөтә е билдәле кеүек. Юҡ, күнергә кәрәк.
— Эйе, күндерә ул. Бәнем бағланышым күп, ти.
— Бына бит, аҙға бата ың. Теге байса-пәйҙәңде, тим, башҡаса күр әтмә.
— Бырыҡтырайыммы ни? Көмөш бит.
— Ташлама, ҡумтаңа ал. Әрүахтар бата ы итеп йөрөтөр өң. Ундай ҡомартҡы күп булмай. Ейәндәрең ҡыҙыҡ итеп ҡарар. Хәҙер халыҡ төрөккә лә, ханға ла эйәрмәй. Ниңә уның тоҡомо тип төш күрергә? Хаҡлы бул, батыр бул. Халыҡ шундайҙар артынан бара. Ана, Яйыҡтың ябай казактары атаман булып йөрөй.
Ундай шымсы бармы-юҡмы? Кинйә кешеләр ебәреп, уны тотоп килтерҙе. Кинйә Ғәбдесте лә килтерер ине. Юҡ, улай мәрхәмәт еҙ булыу ярамай. Элекке остазы. Теге кешене Пугачев алдына баҫтырҙылар.
— Мин Рәсәй батша ы! — тине Пугачев. — Төрөк шпионы менән эш итмәм.
Ҡулъяулыҡ елтәне. Шул етте, аҫтылар.
Ә бит Екатерина Икенсенең иң ҡурҡҡаны шул ине. Унынса, Емельян Пугачевты кемдәрҙер сит илдәрҙән ҡоторталар, уны сит-ят ҡулдар күтәрә кеүек ине.

5

Килделәр. Алыҫтан. Ярҙам орайҙар. Кама-Сулман буйынан. Уса юлынан. Тулва башҡорттары. Ғәйнә, Ирәкте башҡорттары.
Улар дәртле халыҡ. Элек — Батыршала, әле лә. Ләкин заводтар иҙә. Үрге Йөк, Түбәнге Йөк заводтары. Тулва заводы.
Ҡаҙмаҡтынан Туҡтамыш Ишбулатов баҫып тота. Ул Батырша яуын баҫты. уңынан үкенде. Әле депутат. Хәҙер икеләнә.
Ә Исмәғил Тасимовтың унда эше юҡ. Ҡуян ауылынан ул. Тау училище ын аса. Берг-коллегия указы менән. Горно-кадетский корпус асыуҙы орай. "Исмагил с

товарищи". С каждого пуда руды по полуполушки (полушка — иң бәләкәй монета, был сирек тин була). Бында яу. Ҡайҙа инде Исмәғилгә, ул яуға сыҡманы. Бында — Ямаҡ ауылынан Әбди Абдулов[1].

Батырҡай Иткинә улы[2].

Матвей Мазжерин[3].

Иван Тарасов[4].

Ноябрь. Турай Ишалин[5] Ҡарғалыға — Пугачҡа хат яҙҙы.

"Беҙ, Ҡазан юлы башҡорттары, татарҙары, сирмештәр, ҡаҙна крәҫтиәндәре, әммәбеҙ мәрхәмәтле бадишабыҙ П. Федоровичҡа баш орабыҙ, ул ағзам хәҙрәттәре ни бойор а, беҙ йәне-тәнебеҙ менән шуны атҡарабыҙ бөтә көс-хәлебеҙ менән уңғы тамсы ҡанға саҡлы".

Отрядта меңләп кеше бар. Өфөгә йүнәлделәр.

Бере е сос азамат. Күҙендә — осҡондар. Ҡара сәс остоҡтары.

Көс орап килгән. Пугачев ораша:

— Кем?

— Торнов... Персианинов тиҙәр.

Был — Вәлит...[6]

— Миңә казактар бир. Мин шундағы ауылдарҙы алам.

— Йый. Казактар тупла. Бөтә ен казак ит. Полк я а. Полковник итермен.

— Йыям. Миңә указ яҙ!

Пугачев Кинйәгә:

— Ҡайҙа ебәрәбеҙ?

— Нуғайбәк, Баҡалы яғына.

— Указ яҙ!

Эргәлә канцелярия бар. Ләкин Кинйә шунда уҡ яҙа. "Беҙҙең государыбыҙ бадиша хәҙрәттәренең дошмандарын, баярҙарҙы..." Кинйә уҡый бара, русса итеп яҙа бара.

Эйе, эйе... Полктарын ҡырырға. Күберәк, күберәк, тип тора. Көстән килгәнсә... Уларҙың имениеларын ҡыйратырға... Байлыҡтарын әрәм-шәрәм итмәйсә, ҡаҙна ын государь ҡарамағына ебәрергә. ис ҡаршылыҡ ыҙ.

Яҙып бөттө. Уҡып сыҡ, ти, уҡый, йәғни русса әйтә бара.

— Молодец, Кинзей... Әйт, ана Горшков, Ванюша Почиталинға... Русса...

Яҙылды... Бына тағы китә бер яҡҡа.

Салауатты оҙатҡас та, Кинйә канцелярияға йүнәлде.

Унда... Шванович[7] булырға тейеш.

Кар ғәскәренән әсир итеп алынғайны. Пугачев, ышанып, уға эштәр ҡушты: русса указдар яҙ. Немецса ла яҙ. Чертеж я а, Өфө, ә тегендә Ҡазан, амар, Бөгөлмә, Екатеринбург төш өн, күперҙәр күренеп тор он.

Аңланы Шванович. Яу ерҙәре, күрше урындар.

Ул карта төшөрөү оҫта ы түгел, әммә чертеж я ата ине. Үҙе төҫмөрләгәнсә, хәтерендә ҡалғанса я аны.

---

[1] *Әбди Абдулов – Уса даруға ы Ғәйнә олоҫо Удик (Елпачиха) ауылы мулла ы, б. к. полковнигы.*

[2] *Батырҡай Иткинин – Ғәйнә олоҫо Усть-Тонтор-Тамаҡ ауылының башҡорто, б. к. полковнигы.*

[3] *Матвей Мазжерин – эшсе кеше, Кама буйында яуҙа ҡатнаша.*

[4] *Иван Тарасов – Горы ауылы крәҫтиәне, б. к. отряд командиры.*

[5] *Турай Ишалин – башҡорт, Нуғай даруға ы ыбы-Мең олоҫо сотнигы, б. к. полковнигы.*

[6] *Вәлит Торнов – Торнов Василий Иванович (Персианинов) – керәшен перс, баш хәрби атаман, б. к. полковнигы.*

[7] *Шванович Михаил Александрович – дворян, подпоручик, әсирҙәр полкының атаманы, б. к. Хәрби коллегия ының секретары, немец теленән тәржемәсе.*

Ҡарайҙар ине. Генералдар, офицерҙар шуға ҡарап уғыш ойоштора, уғыш ыланын билдәләй. Башҡорттар ун ыҙ ғына самалай. Ләкин Кинйә ундай хариталарҙы Ғәбдессәләм ҡулында ла күргәне бар. Кәрәк. Әле бигерәк тә. Ҡайҙа кем барын күҙ алдына килтерә еңә.

Ерән сәсле, мундирҙа Шванович. Аңланы.

— Ландкартамы? Бына.

Унда яу усаҡтары билдәләнгән.

Бына Өфө, Богородское. Түңәрәк ҡуйылған. Шунда Ҡасҡын амаров.

— Усть-Ҡатау ҡайҙа? — тине Кинйә. — Ҡатайтамаҡ тигәнебеҙ...

— Бына.

— Красноуфимск?

— Бына.

Шуның урта ына Кинйә бармаҡ төрттө лә үҙ ҡулы менән Шванович билдә енә оҡшатып түңәрәк я ап ҡуйҙы.

— Шунда...

Шул арала Давыдов менән Пугачев инде.

— Ә ә, бына минең чертеж, — тине Пугачев. (Батша үҙе аңламай. Давыдов аңлай.)

— Был нимә?

— Бында Салауат. Бөгөн осоп китте. Шунда барып, үҙ тауына ҡуна ул.

Пугачев:

— О о, ҡайҙа барып сыҡтыҡ, ә?

— Эйе, таралды уғыш.

— Йә, хәҙер ни саҡлы ы минең ҡулда?

Давыдов уралтып күр әтте. Яйыҡ тирә е, Ырымбур, Өфө... унға ла, улға ла тағы ҙурайтырға.

Давыдов — депутат.

— Миндә — Катяның ике депутаты.

Кинйә:

— Тағы бер... Туҡтамыш ҡушылған, тигән хәбәр бар. Баҙарғол бар.

Шунан Кинйә әйтә:

— Ҡарҙунды (кордон) тағы киңәйтергә кәрәк.

Кинйә уйлай. Ҡояш батҡан яҡҡа, Ыҡ буйына саҡлы, яу ҡанаты йәйелгән. Унда бүләр, байләр ырыуҙары. Юрмей, ирәкте башҡорттары. Унда шө рәтле Күсем, Аҡай батырҙар төйәге. Унан да ары Ағиҙелдең Сулманға ҡойған ерҙәре, йәнәйҙәр, гәрәйҙәр, ғәйнәләр (башҡорттары).

Шул яҡҡа табан ымлап, Пугачев:

— Әйҙә, кешеләр әҙерлә, ебәр, — тине.

Ул белә. Яңылышмай, моғайын.

***

Ҡасҡын амаровтан яңыраҡ сапҡын килде. Ҡарауыл тауына килеп еттем, тип хәбәр иткәйне ул.

Күҙ алдына бөтә край килә. Картаны аңлағаны аңлап, аңламағаны былай ғына ҡарай.

Пугачевҡа яугирҙар ана ҡайҙарҙан килде. Күтәреләләр. Кама буйҙарынан уҡ. Унда — заводтар, улар ҙа ҡушылыр. Ә ары — Екатеринбург.

Ҡазан яҡтарында ла. Ана, унда Ҡаранай Моратовты, Вәлит Торновты ебәрҙеләр. Бына хәҙер Давыдов та шунда китә. Волга буйында, Ставрополдә[1] — ҡалмыҡтар. амар ҡала ында ла.

Ә көньяҡта – Яйыҡ, арыраҡ — Гурьев. Михаил Толкачев — шунда. Бик күп ер.

— Өфөнө алырға кәрәк, — ти Давыдов.

Улай тип әйткәс, Кинйә:

— Унда Ҡасҡын, Губанов. Әммә тура юл ябыҡ. Табын, Стәрлетамаҡ тарафтары тыныс түгел. Силәбе яғына ла барып етеп булмай.

— Ҡара, Кинзей. Кешеләр ебәр. Таныш ерҙәр, таныш кешеләр иңә унда...

Эйе, ул яҡ шулай... Ә Ырымбур ҡала ы алынмаған, ҡамауҙа.

Ә бына эргәлә генә, Яйыҡ буйлап, Корф ғәскәр керетте. Верхне-Озерный...

— Унда крепостар күп. Кирилов төҙөнө.

— Алырбыҙ. Миңә булыр. Иртәгә барам.

Алда Хлопуша бара. Желтый редутты алды. 1500 нуғай, 500 башҡорт ҡушылды.

22/XI. Ильин крепосы шунда уҡ бирелде, ҡаршы булғандарҙы үлтерҙеләр. Бында 500 кешене пленға алдылар, 3 туп.

Унан — Верхне-Озерный ҡәлғә е. Бирелмәй. Бында полковник Демарин полкы. Пугачев үҙе килә. 500 кеше менән.

6

Өфөлә көҙҙән үк башланды. Воеводаның эргә ендә, октябрь башында Пугачев манифестарын сиркәүҙә ҡалдыралар.

Ул манифестарҙы йыйҙылар. Екатерина ҡә әрле бағанала халыҡ алдында яндырырға ҡушҡан. Бында белмә әләр ҙә, үҙе белә. Екатеринаның яңы наказдар проектын хуп күрмәйенсә, французлар король ҡушыуы буйынса Парижда шулай яндырғайнылар. Үлем яза ы, йәнә е.

Ләкин халыҡ уҡыны.

Тирә-яҡта отрядтар. Хатта Өфө тауының үҙендә Черкалиха йырынындағы Бәхтиәр мәғәрә ендә[2]. Шул тау үңерендә үҙе, тиҙәр.

Ноябрь урта ында бер меңлек отряд. Башҡорт, татар, рус, мари, ҡаҙна крәҫтиәндәре.

...Көҙгө көндәр ине әле.

Ҡарауыл тауына бер кеше менеп бара, бик аҡ, йәшеренеп.

Менеп етте. Алда кемдер бар. Теге яҡтан менеп килә. Рус. Ҡарана-ҡарана, ҡара-ҡаршы килделәр. Рус икән.

— Айҙа! — тине башҡорт.

Ҡул бирештеләр.

Башҡортҡа был күнегелгән. Башҡорт йорто. Башҡорт ҡала ы, ғүмер баҡый. Болғарҙар, нуғайҙар Өфө янында тора, тауҙа, ә башҡорт — бында. Соҡолоҡ (Суталаҡ) тамағына Өфө алынғас та, воевода — унда, башҡорттар — бында. Бер ваҡыт улай башҡорттоң рус менән бергә баҫҡаны юҡ ине ҡарауылға. Ә бына икәү килеп, ҡул бирештеләр.

Былар ике е лә лагерь ҡорорға ебәрелгәйне.

— Ошонан Өфө яҡшы күренә.

— Эйе, бында лагерь ҡорорға әйбәт.

— Беҙ ҙә шулай уйлағайныҡ. Бергә бул аҡ.

Рус:

— Әйҙә, бергә көс күберәк булыр.

Ике е ике яҡҡа китеп, үҙ кешеләрен алып килде. Ҙур ғына отрядтар.

Шулай башлана ла... Өфө тирә ендә башҡа урындарҙа ла ҡулға күҫәк- әнәк алдылар.

Төрлө урында. Ә кем? Тегендә Губанов бар. Өфө казагы, полусотник. Бергә булайыҡ, тип хәбәр ебәрәләр.

Килеп китә теге:

---

[1]*Ставрополь – Волга буйындағы ҡала, амар ҡала ынан үрҙәрәк.*
[2]*Мәғәрә (ғәр.) – тау тишеге, мәмерйә.*

— Бында ҡалығыҙ. Мин Богородскийҙа булам, — ти.

***

Өфө казактары ара ында полусотник булып йөрөгән Иван Васильевич Губанов[1] күптән, октябрь башында уҡ, Ырымбур янына барып, Пугачев яғына сыҡҡайны.

Уны шунда уҡ Өфөгә ҡайтарып ебәрҙеләр. Манифест алып ҡайтты.

Казактарға, ҡаҙна крәҫтиәндәренә, крепостнойҙарға уҡынылар.

Күтәрелделәр.

Ауылдар күп. Черников — Максимовка — Новокрещенский — муҡшы утары. Шөгөр ауылы. Шунан Юрмаштан, Ҡыҙыл Ярҙан килделәр.

Богородский ауылы. Элек, Өфө алына башлағанда, яңы бер биҫтә булып ултырған. Яңы керәшен Иван Васильевич Кадомец ауылы, тиҙәр ине. Быны изге ауыл тиҙәр. Ауыл янында, урмандағы аҙлыҡ урында Ҡазан Мәрйәм ана ы иконаы табылғас, 1622 йылда сиркәү алалар әм шул хөрмәткә ауылдың исемен дә Богородское тип алмаштырҙылар. Оҙаҡламай Кадом балалары Смирка менән Бессон Ҡариҙел аръяғынан, Тәүеш ыуы тирә енән яңы ерҙәр алып, шунда күсте.

Шул изге булған өсөн дә ярлы халыҡ шуға ышыҡлана. Урман эсендәге ҡоҙоҡто изге тиҙәр, ыуы йөҙ сырхауға дауа тиҙәр.

Унда ен дә уҡмай, бүре лә теймәй. Ундағы кешене уҡ та, пуля ла алмай.

Бынан Себер ханы Күсемдең ейәндәре Тәүке менән Аблай ҙа үтә алмаған, аяҡтарын ер тотҡандан, ун көн буйы ҡамауға ҡалып, әсир булғандар. әйет яуындағы хәлде онотмайҙар, риүәйәт булып быуындан-быуынға килә: 1682 йылда әйет яуында башҡа тирә-яҡ ауылдар яндырыла, ә быға ут ҡапмай, имен ҡала, Өфөгә ябырылабыҙ тип килгән башҡорттар, ҡалмыҡтар шунда Ҡариҙел йылға ын кисәм ти әләр, ғәскәр, көршәк кеүек, икегә ярылған: башҡорто — бер яҡҡа, ҡалмығы бер яҡҡа киткән.

Ҡазан Мәрйәм ана ы шулай яҡлаған, тип ышаналар.

Баш күтәреүселәр, Святая Мария — Изге Ана беҙҙе лә карателдәрҙән яҡлар, тип шунда ыйынды, воевода ла, ис кем дә килергә ҡыймай.

Шунығ өҫтөнә бында — олоҫ үҙәге, йыл айын йәрминкә уҙғарыла.

Шунда йыйылдылар.

Губанов подполковник чины алып ҡайтты.

Богородскийҙа ғына түгел, башҡа урындарҙа ла барлыҡҡа килде ихтилал үҙәктәре.

Ҡыҙыл Ярҙа ла.

Дим буйы Нижегородта, Зубовола, Дыуанай башҡорттарында, Чесноковкала.

Өфө дворяндары утарҙарынан ҡайтты, ҡалаға бикләнде, мал-тыуарҙарын килтерҙеләр. Үҙ ауылдарына ҡасып-боҫоп бара. Унда ла боласылар ябырыла. Икмәктәрен, бесәндәрен, аттарын алалар, үҙҙәрен үлтерәләр. Шулай ҙа ҡоралды команда менән сығалар, йөрөп ҡайталар.

Губанов ҡыҫырға тырышты, ләкин көсө етмәне.

*(Дауамы бар.)*

---

[1]*Губанов Иван Васильевич — Өфө казактарының полусотнигы, б. к. полковнигы.*

## “ВАТАН ӨСӨН, СТАЛИН ӨСӨН, АЛҒА!”



*Атайым, Фәйруша Мөхәмәтша улы Хужин, Бөйөк Ватан һуғышында 1941 йылдың декабренән 1945 йылдың ғинуарына тиклем катнашкан. Вафат булыр алдынан, 1973 -1974 йылдарҙа ул төндәрен ултырып калын дәфтәргә шул дәһшәтле йылдар тураһында хәтирәләрен яҙҙы. Фашист илбаҫарҙарына каршы һуғышта сапер булып, йыш кына карҙа шыуышып, боҙло һыуҙар кисеп, атайым һаулығын нык какшаткайны. 62 йәшен дә тултыра алмай, 1975 йылдың ғинуарында ул якты донъянан китеп барҙы.*

*Түбәндә унын фронт йылдары хакындағы иҫтәлеген тәкдим итәм.*

1 июндә беҙҙең Табылды ауылында допризывниктар өсөн бер айлыҡ хәрби лагерь башланды. Мин, аҡ финдарға ҡаршы “Ҡышҡы кампания”ла ҡатнашҡан уғышсы булараҡ, бер взводҡа командир итеп тәғәйенләндем. Йәш егеттәрҙе хәрби өнәргә өйрәтеп йөрөгәндә Бөйөк Ватан уғышы башланып китте. Беҙ лагерҙы 1 июлгә тамамлап, үтелгән эштәр тура ында РайОСО-ға ( уңынан ул ДОСААФ тип аталып йөрөтөлдө – **Ф. Х.**) отчет бирергә бар ам, мине РайОСО ПВХО- ында ( ауа химик уғышына ҡаршы оборона) инструктор булып эшләргә тәҡдим иттеләр. Ризалыҡ бирергә уйым юҡ ине, әммә район Советы башҡарма комитеты әм хәрби комиссариат аша баҫым я ап, мәжбүр иттеләр.

Ғаилә Табылдыла ҡалды, район үҙәге Стәрлебаш ауылына эшкә бер яңғыҙым килдем. Штатта – барлығы өс кенә кеше. РайОСО рәйесе әм ике инструктор. Ойошма ВЛКСМ-дың район комитеты менән бер бинала урынлашып, беҙ шунын бер бүлмә ен биләйбеҙ. Минең бурыс – райондың әр колхозында әм район үҙәге ойошмаларында ПВХО түңәрәктәре ойошторооп, уларҙы етәксе кадрҙар менән тәьмин итеү, халыҡты хәрби ауа өжүменә ҡаршы торорға өйрәтеү. Бығаса күрелмәгән дә шәтле уғыш шуны талап итте. Беҙ башта инструкторҙар әҙерләү буйынса ун көнлөк курстар ойошторҙоҡ, уға колхоздарҙан 55 кеше йәлеп ителде. Ауыр булыуға ҡарамаҫтан, курстар уңышлы тамамланды. Күпселек сәғәттәрҙе үҙемә алып барырға тура килде, сөнки ПВХО буйынса районда белгестәр юҡ. Артабан белем алып сыҡҡан инструкторҙарҙы ҡулланма әҙәбиәт менән тәьмин итеү, урындарҙа практик эш ойоштороу бурысын да миңә йөкмәттеләр.

Илдең көнбайышында уғыш бара, миллионлап кеше әләк була, әр көн тиҫтәләгән ауыл әм ҡала дошман ҡулына эләгә. Стәрлебаш районынан да көн

айын бер нисә тиҫтә кеше Ватанды аҡларға ут эсенә оҙатыла. Мин колхоздарҙа ПВХО түңәрәктәре ойоштороуҙа үҙем өйрәткән инструкторҙарға ярҙамлашып йөрөйөм. Билдәле, әгәр ҙә дошман газ ҡуллана ҡал а, был да мө им.

Иптәштәр фронтта ҡан түгә, мин и ә район буйлап бер тегеләй, бер былай сабам. Таныштар осра а: “ ин әле лә мындамы ни?”– тип ғәрләндерә. Эш буйынса Өфөгә буй онғас, беҙгә фронтҡа ебәрелеүҙе тотҡарлап торған бронь бирелгәйне. Бер көн шулай ҙа уғышҡа ебәреүҙе орап хәрби комиссарға индем. “Ашыҡма, ин бында кәрәгерәк әле,”– тип кенә ҡуйҙы ул. Бер нисә тапҡыр телефондан да шылтыратып ҡараным, ләкин комиссар кире уға ла ҡуя.

5 сентябрҙә иртә менән миңә: “Бар, тиҙ генә военкоматҡа йүгер, комиссар ине көтә”,– тинеләр. Сығып йүгерҙем, барып инеүем булды, “Хужин, өйөнсө! иңә фронтҡа китергә” тигән үҙем өсөн генә шатлыҡлы булған хәбәр ишеттем. Ишетәкүрә, беләтороп үлемгә китеүҙе кемдең шатлыҡ тип әйтеүе мөмкин? Ә минең өсөн ул саҡта иптәштәрем алғы ыҙыҡта булып, Ватан азатлығы өсөн көрәшкән саҡта тылда йөрөү – бер ғәрлек. ау-сәләмәт кеше бит әле мин! Әлбиттә, ике ай эсендә ПВХО буйынса бик күп ойоштороу эштәре башҡарып өлгөрҙөм, ләкин...

Шул сәғәттә үк эшемде тапшырҙым. Табылдыға ҡайтып ғаилә менән хушлашырға ваҡыт та ҡалмағайны. Шулай ҙа ашығыс ҡына телефондан хәбәр бирҙем. Төш ауыуға Әхмәтша ағайым ҡатыным менән саҡ тел беләбашлаған ҡыҙым Гөлсирәне ат арба ына ултыртып килеп тә етте. Үкенескә ҡаршы, улар менән оҙаҡ өйләшеп ултырырға форсат бирелмәне, күрештек тә хушлаштыҡ тигәндәй.

Көндөҙгө сәғәт 4-тәр тирә ендә беҙ Стәрлетамаҡ ҡала ына табан юлға сыҡтыҡ. Оҙатыусы ла, доклад (үҙ ҡатындарыбыҙҙан башҡа) өйләүсе лә булманы. Командала барлығы ете генә кеше, әм бөтәбеҙ ҙә ошо район үҙәгендә эшләгән хеҙмәткәр. 6 сентябрҙә Өфөгә килеп, өлкә хәрби комиссариаты күр әтмә е буйынса шул уҡ көндө баш ҡаланан йыраҡ булмаған Чесноковка ауылына йәйәүләп килеп ҡундыҡ. Иртәгә ен беҙҙе взвод, отделениеларға бүлеп, колхоз клубына урынлаштырҙылар. Сентябрь төндәре алҡын булыуға ҡарамаҫтан, аҫҡа түшәргә лә, өҫкә ябынырға ла юҡ. Берәүҙәр – әкиәт, икенселәр – көләмәс, өсөнсөләр ғаилә е тура ында өйләп төн уҙғарҙыҡ. Иртәгә ен йылға буйына төшөп, ҡамыш-екәндән матрас кеүек нәмәләр үреп, аҫҡа алдыҡ. Әлегә үҙебеҙҙең кейемдә йөрөп ятабыҙ. Өҫкә ябынырға булма а ла, аҫ йомшаҡ булғас, әллә ни ҡыйынлығы юҡ. Дуға кеүек бөгәрләнеп ятып таң аттырабыҙ.

Мин взвод менән етәкселек итәм, сөнки офицерҙар етешмәй. Шулай ҙа арабыҙҙа бер генә рядовой ҙа юҡ. Бөтәбеҙ ҙә кесе командир: сержант, өлкән сержант йәки старшина. әр беребеҙ хәрби тәртипте, бурысты аңлағас, дәрестәр ҙә еңел бирелә. Хәрби әҙерлек үтеү менән бергә, колхозға борсаҡ уңышын йыйырға ла ярҙамлашабыҙ. Ике ҡуллап йолҡоп, икешәр көлтә ҡыҫтырып, эҫкерттәргә алабыҙ. Бынан тыш, ырҙын табағында ашлыҡ елгәреүҙә лә ҡатнашабыҙ. Көндәр шулай эш менән тиҙ генә үтә тора, тик төндәрҙе генә үткәреүе ауыр. Чесноковкала бер айға яҡын йәшәп, бер төндө көтөлмәгәндә ауылдан сығып та киттек. Клуб иҙәнендә беҙ ятып йөрөгән ҡамыш матрастар ғына туҙышып ятып ҡалды.

... Күҙгә төрт әң дә күренмәҫлек көҙгө ҡараңғы төндә ҡырсын түшәлгән юлдан атлайбыҙ. Ваҡ ҡына ямғыр ибәләй. Ямғырлы төнгә лә, башҡа ауырлыҡҡа ла риза, тик теге клубҡа ҡайтарма ындар ине, тип үҙ-ара өйләшәбеҙ. Хәлбүки, әр ҡайыбыҙ алда беҙҙе ауырыраҡ хәлдәр көтөүен бел ә лә. Бына шулай ашамай-эсмәй, йәйәүләп 60 саҡрым юл үтеп, Дим йылға ы буйындағы Шишмә ауылына килеп индек. Беҙ хеҙмәт итә е полк ошо Шишмә станция ында ойошторола икән. Мине бында саперҙар рота ына химинструктор итеп тәғәйенләнеләр. Ротала ике взвод, йәғни 80 кеше. Бөтәбеҙҙе лә колхоз клубына урынлаштырҙылар. Тағы ла аҫҡа,

был юлы арыш аламынан үреп, матрастар түшәнек. Көн дә мейескә яғалар, йылы. уғышҡа китеүселәрҙе мәктәпкә, буш торған өйҙәргә урынлаштыра торған булдылар. Хәрби күнекмәләр дауам итә, көндәр үтә тора. Колхозға эшкә лә барғылайбыҙ. Ә көнбайышта бик көслө алыштар бара, дошман аман беҙҙең ергә кереп килә. Йоҡо әм ял, билдәле, бик аҙ эләгә, улай ҙа көнөнә өс тапҡыр ашаталар. Тамаҡ яғы насар тип әйтеп булмай, ашты котелок менән кухнянан алабыҙ. Кем нисек, аяҡ өҫтө йәки сүкәйеп ултырып ашайбыҙ. Ямғырлы көндәрҙә генә алып ҡайтабыҙ. Октябрь бит, көндәр алҡын, ямғырлы.

14 октябрҙә өр-яңы хәрби кейем өләштеләр. Мин дә үҙ ғүмеремдә өсөнсө тапҡыр алдат шинеле кейҙем. Эйе, мин тағы ла алдат, өсөнсө тапҡыр алдат булып, бер ни тиклем хәрби әҙерлек үткәндән уң ҡулға ҡорал алып, тауар вагонына ултырып фронтҡа киттем. Вагондар шығырым тулы, тор аң – ятып, ят аң тороп булырлыҡ түгел. 7 ноябрҙе – Октябрь байрамын – вагонда ҡаршыланыҡ. Ҡаршыланыҡ тип, юлда ниндәй байрам бул ын. “Бөгөн байрам икән” тигән үҙҙәр менән генә иҫкә алдыҡ. Вагон ҡараңғы, май шәм менән генә яҡтыртыла, шунда ла көн айын өс сәғәт хәрби әҙерлек дәрестәре ойоштороla.

Бер нисә тәүлек үткәс, поезд Ярославль ҡала ына килтереп төшөрҙө. Фронт ыҙығы йыраҡ, әммә дошман бомбалары төшөп ҡыйратылған тимер юл полотнолары, йорт-ҡуралар күҙгә ташлана. Беҙҙе бында туҡтатып торманылар, ҡул башына винтовка менән противогаз, арҡаға тоҡсай аҫып, билгә подсумка (30 патрон ыйҙыра торған күн ауыт), бәләкәй көрәк тағып, башҡа тимер каска кейеп, тағы ла йәйәүләп походҡа сыҡтыҡ. Төнө буйы барабыҙ ҙа көндөҙ берәй ауылда ял итәбеҙ. әр өйгә 8 –10 алдат инә. Хужаның үҙ ғаилә е лә бар, ә тынғы юҡ. Шинелеңә бөркәнеп иҙәнгә тәгәрәй ең дә, йоҡоға тала ғына башла аң, торорға команда була. Тағы ла поход.

Өҫтә фуфайка, ырыған салбар, шинель, башта бүрек. Бөтә өҫ кейемдәрен, елкәгә аҫылған әйберҙәрҙе бергә бәйлә әң, уны ҡулбашҡа күтәреп алырлыҡ та түгел. Ауыр, ләкин алдат елкә е күтәрә. әр төндә 40 – 50 километр юл үтәбеҙ. Етмә ә, күҙгә төн ҡараңғы, ваҡыты менән алҡын елдәр ҙә иҫә. Әгәр ауылда булып, шундай бер төндә өйөңә ҡайтып кил әң, бына хәҙер ҡайтып етәм, ата-әсәм йәки ҡатын көтәлер, йылы аш ашармын да йылы юрған аҫтында йоҡлармын, тиер инең. Беҙҙе көнбайышта кем көтә? Мәкерле дошман, ут, ҡан, үлем.

Шунда ла меҫкен булғанымыҙ юҡ. Ял ваҡыттары төрлө күңелле үҙҙәр өйләп, йыр-бейеүҙәр менән үтә. Бөтәбеҙҙә лә бер теләк әм дәрт: тиҙерәк фронтҡа барып етеп дошманды тар-мар итеү, еңеү яулау. Күп ауылдарҙы артта ҡалдырып, күп ыуҙар кисеп, ете көн, ете төн үткәс, беҙҙең рота Ярославль өлкә енең Пошехонье-Володарский тигән бәләкәй генә ҡала ы янындағы Михайловка утарына туҡталды. Был ауылдың тирә-яғы – ҡуйы ҡарағай урманы, шуға ла был яҡ кешеләре өйҙө уҡ кеүек тигеҙ, эре ҡарағайҙарҙан бишәр-етешәр бүлмәле итеп ала. Беҙ торған хужаның да йорто биш бүлмәле булып, үҙҙәре өс кенә йән. Михайловкаға килгәс тормош иркенәйҙе, өй йылы, аҫҡа матрас түшәп, туйғансы тигәндәй йоҡлайбыҙ. Ашау-эсеү ҙә әйбәт кенә, әр аҙнала мунса инәбеҙ, шуға күрә өҫ-баш та таҙа. План буйынса хәрби күнекмәләр ҙә үткәрелә.

Тик рәхәтлек күп булмай, рәхәтлектә йәшәй торған саҡ та түгел. Ҡояшлы көндәрҙең бере ендә, 15 декабрҙә, иртә менән Михайловка ауылын артта ҡалдырып, алға, көнбайышҡа, юл алдыҡ. Көн шул тиклем ыуыҡ, төкөрөк ергә төшөп етмәй туңа. Ул көндө беҙ әллә ҡайҙа бара алманыҡ, полк штабы урынлашҡан бер ауылда туҡталдыҡ. Ҡараңғы төшөү менән тағы ҡуҙғалдыҡ. Ике төн юлда булып, ике көн ял итеп, 90 километр үткәндән уң Рыбинск ҡала ы янындағы бер эшселәр ҡасаба ында ике тәүлек торҙоҡ. Урынлашҡан өй бәләкәй, бер-беребеҙгә өйәлеп ултырып йоҡлайбыҙ.

Артабан беҙҙе көнбайышҡа тауар вагондарына ултыртып алып киттеләр. Кали-

нин өлкә енең Торжок ҡала ына етмәҫтән вагондарҙан төшөрөп, йәйәүләттеләр. Торжокка килеп ингәндә ҡараңғы төшкәйне инде. Ҡала күптән түгел генә дошмандан таҙартылған. Бер генә төҙөк йорт та, төҙөк урам да күрмәҫ ең, төҙөк булған урындар ҙа дошман тарафынан яндырылған. Шул уҡ төндө беҙ 40 саҡрым сама ы юл үтеп, Иванка тип аталған ҙур ғына ауылға килеп индек. Был ауыл да тик емереклектәрҙән, янған харабаларҙан ғына тора. Яҡында ғына снаряд ярылған, пулеметтан атҡан тауыштар ишетелә. ауаны бер туҡтау ыҙ ракеталар телгеләй. Үҙ-ара ғына “беҙгә лә шул урынға уғышҡа инергә сәғәтләп кенә ваҡыт ҡалды инде” тип өйләшәбеҙ. Барыбыҙҙың да күңелдәр көр, бер генә бойоҡ алдат та юҡ. Тик ҡор аҡ аҫты ғына бушыраҡ.

## Калинин өлкә е. Тәүге сирҡаныс

Шулай итеп, бер ауылдан икенсе енә (ауылдарҙың тик исеме генә, ә үҙҙәре ҡыйратылған, яндырылған), бер урмандан икенсе урманға фронт ҡырлап йөрөй торғас, 1941 йылдың 21 декабрендә – алланып иртәнге таң атҡан салт аяҙ ҡаты алҡын көндә беҙҙең ротаға ла уғышҡа инергә тура килде. Башта бер сәғәт сама ы беҙҙең артиллерия дошмандың төп позицияларын дөмбәҫләне. Саперҙар рота ының бер отделение ына етәкселек итеп, мин дә беренсе уҡсы батальонға килдем. Тәүҙә комбат хәрби бойороҡто аңлатты, ҡыҫҡаса күр әтмәләр бирҙе. өжүмгә күсеү тура ында күккә ҡыҙыл ракета сөйөлгәс, бөтәбеҙ ҙә атакаға киттек. Алда бер ҡалҡыулыҡта, Скворцово тигән ауылда дошман бик ныҡ урынлашҡан. Беҙ фашисты ҡыуып ебәреп, ауылды азат итергә тейешбеҙ.

Беҙ беренсе рота составында алдан барабыҙ, сөнки саперҙың эше шул. Беҙ аша сығырға тейешле асыҡ ялан тип-тигеҙ. Көн шул хәтле ыуыҡ, винтовка ҡулдарҙы өшөтә. Затворҙы асып ҡороу – үҙе бер ауыр мәшәҡәт. Шунда ла тырышабыҙ, алға йүгерәбеҙ, ятабыҙ, атабыҙ ҙа тағы ла алға йүгерәбеҙ. Дошман бер туҡтау ыҙ минометтан да, пулеметтан да ата. Беҙ өжүмгә күтәрелгәндә ап-аҡ булған ҡар ҡапҡара саңға әйләнде. Миналар бер алда, бер артта ярыла, зәғифләнеүселәр ҙә, үлеүселәр ҙә аҙ түгел. Арттан өҫтәмә көс килеп тора, алға ла арыу ғына барабыҙ.

Бер заман ауылға яҡынлаштыҡ. Хәҙер инде йүгереп түгел, шыуышып ҡына барырға тура килә. Беҙҙең дә ике иптәш яраланды, биш кенә кеше тороп ҡалдыҡ. Беҙҙең бәхеткә, дошман мина ла алмаған, сәнскеле тимер сыбыҡ та ҡормаған икән. Немецтар, бәлки, беҙҙең яфа сигеүҙән тантана итәлер, сөнки йылы блиндажда, траншеяла ятып ҡына аталар. Мин эстән генә, килер бер ваҡыт, еҙ әлеге аҡ ҡарҙы үҙ ҡанығыҙ менән ҡыҙартыр ығыҙ әле, тим. Ул шулай булды ла: дошман бөтә иҫән ҡалған йорттарға үрт ал а ла, үҙе сығып ҡаса алманы. Бәлки, берәмәрәм ҡасҡаны ла булғандыр. Беҙ бик күп фашисты дөмөктөрөп, ауылды азат иттек. Был беҙҙең тәүге хәрби сирҡаныс, тәүге еңеү ине. Ҡарарға имәнес, ҡайҙа ҡарама – үлек немец аунап ята. Өҫтәрендә – ҡатын-ҡыҙ, ирҙәр кейеме. Баштарында – шәл йәки яулыҡ, аяҡтарында – ҡатын-ҡыҙ быйма ы. Гитлер уғышты ҡышҡа ҡалдырмай тамамларға иҫәп тотҡан икән. уғышҡа килгәнгә тиклем гәзиттәрҙә, немецтарҙың ҡышҡы кейемдәре юҡ, улар беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарҙың өҫ-баш, аяҡ кейемдәрен талап алып кейә, тип яҙған хәбәрҙәрҙе уҡый инек, хәҙер үҙ күҙҙәребеҙ менән күрҙек.

Бөтә е 24 немец алдаты әсир алынды. Уларҙың өҫтәрендә лә ҡатындар кейеме ине, ләкин бары ында ла түгел. Әле декабрь, 35 – 40 градус алҡын, ә дошман алдаттарының башында – пилотка йәки каска ғына, өҫтәрендә и ә – ҡыҫҡа ғына еңле, тар итеп тегелгән мундир, йоҡа салбар, аяҡта – итек. 24 әсирҙең бары ын да сафта торғанда күрҙек, алҡындан дер-дер ҡалтырайҙар.

Беҙҙең тәүге өжүм, юғалтыуҙар, ауырлыҡтар менән бул а ла, уңышлы тамамланды: Скворцово ауылы азат ителде. Өс көн, өс төн дошманды эҙәрлекләй

барабыҙ, ул әр ауылға, әр ҡалҡыулыҡҡа теше-тырнағы менән йәбешә, ҡулынан ысҡындырмаҫҡа тырыша. Әйтер ең дә, үҙ иле, үҙ ере. Дошман нисек кенә ҡаршылыҡ күр әтмә ен, алға барыуҙы дауам иттек. Күп ауылдарҙы азат итеп, беҙҙең полк дүртенсе көндө аҙ ғына ваҡытҡа ялға сыҡты. Беҙ артҡа, ротабыҙға, ҡайттыҡ. Унда ҡалған иптәштәр беҙ күргәндәрҙе ораша. Бик йонсоп ҡайт аҡ та, бөтә баштан үткәндәрҙе иптәштәргә өйләйбеҙ. Улар инде бик ҡыҙыҡ ынып тыңлай, сөнки өжүмгә башлап кереү бит.

Әле бөтәбеҙҙең дә аяғында итек тә ботинка. Минең итек ҡунысына бер аҙ ҡар төшөп, уң аяҡтың үксә е, баш әм икенсе аяҡ бармаҡтары аҙыраҡ туңып алған икән. Аяҡ бик ыҙлағас, итекте сис әм, үксә менән бармаҡтар ҡара янып тора, әсетә, ыҙлай. Иптәштәр аяғымды араҡы менән ыуа башланы, үҙемә лә эсерҙеләр. Сохари менән сәй эсеп, урманда ҡыуышта ятып йоҡланыҡ. Минең ике алдаттың да аяҡ бармаҡтары өшөгән икән, санитарҙар рота ынан вазелин алып, ваҡытыбыҙ барынса үҙебеҙгә үҙебеҙ перевязка я ап, айҙар буйы аҡ ай- ыҙлана ут эсендә йөрөп, кеше рәтенә саҡ керҙек.

Был тәүге уғышта аяҡ-ҡул туңдырыусылар ҙа булғыланы. Стәрлебаш ауылынан Йомадилов тигән ағай ҙа беҙҙең менән уғышҡа ингәйне, аяҡтарын туңдырып, өжүмгә яраҡ ыҙ булып ҡайтҡан. Ә районданғы ҡай ы берәүҙәр, ул аяғын үҙе ейеп туңдырған, уғышҡа керергә ҡурҡҡан, тип нахаҡҡа рәнйеткәндәр.

Шулай итеп, фронтта 1941 йыл да үтеп китте. 1942 йыл башланған төндөң ал ыуланып атҡан таңында Ольховка ауылы өсөн өжүмгә индек. Ул бик ҡаты булды, ләкин дошман беҙҙе туҡтата алманы, емереп керҙек. уғышта яҡшы өлгө күр әткән өсөн мине әм тағы ла ике рядовойҙы КПСС ағзалығына кандидат итеп ҡабул иттеләр. Юғарынан бойороҡ буйынса полктарҙа сапер роталары бөтөрөлөп, сапер взводтары ғына ҡалдырып, штаттан артҡан командир, рядовойҙар батальон составына күсерелде. Мине шул взводта командир ярҙамсы ы итеп ҡалдырҙылар. Беҙҙең ротаның политругы Бирҙин да беренсе батальонға комиссар булып китте.

Калинин өлкә е ерҙәре урманлы, аҙлыҡлы, юлдары насар, шуға күрә күп ваҡыт юл, күпер йүнәтеп, полк етәкселәренә землянка соҡоп үтә. Ваҡыты менән тәүлектәр буйы ал ыҙ-ял ыҙ уҡ кеүек ҡарағайҙарҙы бысып, әр бүрәнәне ике-өс кеше яурынға алып юлға ташып түшәйбеҙ. Был эштәргә ваҡыт күбе енсә сәғәтен күр әтеп бирелә, сөнки хәрби ҡорал, аҙыҡ-түлек йәки алдаттарҙы ашығыс үткәрергә кәрәк. Шулай бүрәнә ташып яурын баштары боҙола (ҡамыт уҡҡан ат кеүек), арып хәлдән тайған саҡтар ҙа була. Кәрәк булғанда разведчиктар менән разведкаға, урыны менән өжүмгә лә барабыҙ. Арҡанда автомат менән бергә ҡулында көрәк, балта, бысҡы, кәйлә йәки сапер ҡайсы ы була, сөнки шул ҡоралдарҙан башҡа сапер бер генә хәрби бурысты ла үтәй алмай. Мин командир, тип кенә ҡушып ҡарап тороу юҡ, бөтәбеҙ ҙә бер тиң эшләйбеҙ.

Исеме хәтеремдә ҡалмаған бер ауылға дошман аңламағанда баҫып инергә, “тел” алырға, дошмандың аҙыҡ складын ҡулға төшөрөргә бойороҡ бирҙеләр. Бойороҡто үтәү өсөнсө уҡсы ротаға йөкмәтелеп, саперҙарҙан бер отделениела мин дә барам. Ауыл бер үҙәндә урынлашҡан, ике яғы – яланғас тау. Беҙ барған яҡ урман әм аҙлыҡ булып, унан бәләкәй генә йылға аға. Ҡар йомшаҡ, билдән тиерлек. Ауылды дошман сәнскеле тимер сыбыҡтар менән уратып алған.

Таң алдынан беҙ, ете сапер әм өс разведчик, бата-сума тимер сыбыҡтар янына килеп еттек. Ике сапер әм бер разведчик менән мин сәнскеле сымдарҙы ҡайсы менән ҡырҡып, пехота үтерлек юл асырға тырышабыҙ. Дүрт сапер беҙ асҡан юлдан алға үтеп, дошман ҡуйған миналарҙы ала. Ике разведчик, дошман иҙеп ҡалма ын тип, улар яғын күҙәтә. Немец бер туҡтау ыҙ күккә ракета сөйә, уларҙың яҡтылығы беҙҙең эргәгә лә төшкөләй. Эш ауыр әм ашығыс, ҡулдар ҡанай, ыҙлай,

үҙебеҙ тирләгәнбеҙ. Ҡар аҫты ыу икән, быйманың ҡунысына хәтле ҡар ыуы тулды. Беҙ барыбер бурысты үтәнек, юл асылды. Рота ауылға иҙҙермәҫтән бәреп инеп, бер нисә немецты тереләй ҡулға алды. Был алҡын ғинуар аҙаҡтарында булды. Был эпизодты мин тиҙ әм ҡыҫҡа ғына яҙҙым, ғәмәлдә ваҡиға тиҙ ҙә, еңел дә булманы.

Бер саҡ Жигулево тигән ауылда торабыҙ. Ашнаҡсы төшкө ашҡа тас май ғына макарон бешергән. Беҙ макарондарҙы бүлешеп, ашарға ғына ултырғайныҡ, бер емерек арай эсендә аҡта тороусыбыҙ “Немец!” тип ҡысҡырып ебәрҙе. Ни күҙебеҙ менән күрәбеҙ: дошман ауылға кереп килә. алдаттар ара ында паника ҡупты. Беҙҙең взвод командиры лейтенант Пискунов та ҡурҡаҡ булып сыҡты, артҡа ҡаса башланы. Беҙ ҙә унын артынан эйәрҙек. Ҡулдарыбыҙҙа эш ҡоралдары, миндә – арҡыры бысҡы. Беҙ ҡасып барған урын ҡола ялан, ҡар ҙа тәрән генә. Немец бер туҡтау ыҙ ата-ата килә, өҫтәүенә бер самолет килеп сыҡты ла беҙгә бомба ташлай, түбәндән осоп, пулеметтан иптерә башланы. Үлгәндәр, яраланғандар ятып ҡала, ә тереләре ҡаса бирә. Бында саперҙар ғына түгел, башҡа алдаттар ҙа йөҙләп булыр. Этләшә торғас, бер ваҡ ҡына ағаслы урманға керҙек. Унан 6 саҡрым сама ы барып, Мельница тигән ауылға килдек, беҙҙең полк штабы шунда урынлашҡан икән. Мине шунда уҡ штабҡа саҡырҙылар ҙа: “Өлкән сержант, хәҙер үк өс хәлле генә алдат алып Жигулево ауылына бар ҙа оло юлға миналар ҡуй!” – тинеләр. Был маневр, дошман танктары өжүм итә ҡал а, шуларға эләгеп шартла ын тигәнде аңлата. Тиҙ генә үҙебеҙҙең районды́ң Айҙарәле ауылынан Хәкимовты, Ямғырсынан Хәйбуллинды, Баҡалы районынан Хәкимовты алып, әр ҡай ыбыҙға икешәр мина тотоп, винтовканы арҡаға аҫып, юлға сыҡтыҡ.

Төн ҡараңғы, әсе ыуыҡ ел ҡаршыға иҫә, йәйәүле буран да епертә. Юл тын, ис кенә лә ыратып алға барып булмай. Карта буйынса күр әтелгән урынға етеп, бил ҡайышынан көрәктәрҙе алдыҡ та бөтә тәртибе буйынса миналарҙы алып сыҡтыҡ. Ә Жигулевола немецтар гармун тарта, ыҙғырып йырлай, геү киләләр. Әйләнеп ҡайтҡас, штабҡа инеп, бары ы ла еҙ ҡушҡанса үтәлде, тинем. Штаб начальнигының ярҙамсы ы әйтә: “Яҡшы, ләкин немецтар алып ҡуйма ын өсөн, ул миналарҙы ҡарауылларға кәрәк. Шул иптәштәреңде ал да хәҙер үк кире кит”. Мин әйтәм: “Есть! еҙҙең бойороҡ үтәләсәк”. Ҡалған иптәштәр бер арайҙа беҙ ҡайтыуға бәрәңге бешереп, тамаҡ туйҙырып торалар икән. Беҙ тиҙ генә сейле-бешле бәрәңгене кеҫәләргә алып, иптәштәр менән аубуллашып, тағы ла Жигулевоға табан киттек. Юл тын бул а ла, ашыға-ашыға атлайбыҙ. Тиҙерәк барып етергә кәрәк бит. Үҙебеҙ кеҫәләге бәрәңгене әрсемәй генә сәйнәйбеҙ. Бик тәмле булды, тик аҙыраҡ булып ҡалды.

Ауылға яҡынлашып, үҙебеҙ ҡуйған миналарҙан йыраҡ түгел урында ҡарҙы түңәрәкләтеп соҡоноҡ та, аҙерәк ышыҡ я ап, шунда әжәлме, изге эшме көтөп ятабыҙ. Бына таң да беленде. Дошман ирәкләп беҙҙең полк урынлашҡан ауылға снарядтар оҙата башланы. Күп тә үтмәй, өҫтөнә унарлаған алдат ултыртҡан ике танк та килеп сыҡты. Ләкин улар беҙ мина алған оло юлдан түгел, уның ике яғынан үтте. Беҙ ҡасып ултырған ергә 150 метр сама ы етмәйерәк ике е лә туҡтаны ла биноклдән бара ы юлдарын күҙәтергә тотондолар. Беҙҙең әр ҡай ыбыҙҙа берәр танкка ҡаршы, берәр ҡул граната ы бар. Шуларға запалдар ҡуйҙыҡ та уртаға алып, дүрт яҡтан күҙәтеү алып барабыҙ. Иптәштәргә әленән- әле ағыраҡ булыуҙы онотторға ярамауы тура ында иҫкәртәм. Башты ҡалҡытмай, ҡар өйөмөн тишеп, шунан ғына күҙәтәбеҙ. Урын үҙенә күрә алдан ҡулайлаштырылды. Ҡар өйөмөнөң тыш яғын шымартырға йәйәүле буран да ярҙам итте. Беҙ әҙерләгән гранаталар, әгәр дошман беҙгә ташлан а, берәре менән уларҙы “хөрмәтләү”, ҡалғаны менән үҙебеҙҙе юҡ итеү өсөн. Дошманға тереләй бирелмәҫкә.

Бәхеткә күрә, танктар бер саҡ алға китте. Улар йыраҡлашҡас, әле дошман пе-

хота ы юҡлыҡтан файҙаланып, ятҡан еребеҙҙән уң яҡта урынлашҡан ҡуйы урманға барырға кәңәш итәм. Минән өсәр метр артта ҡалып атлағыҙ, минең күр әтмәнән башҡа бер ни ҙә эшләмәгеҙ, әгәр йәрәхәтләнә ҡал ағыҙ, үҙегеҙҙе үҙегеҙ хәстәрләгеҙ, тип уңғы бойороҡто бирҙем дә шәп-шәп атлап алға киттем. Иптәштәрем дә минең арттан ҡалышмай килә. Аҡланда ҡар ҡалын, ис кенә лә ыратып алға китеп булмай. Шулай ҙа ҡара тиргә төшөп, имен генә урманға килеп керҙек. Хәл тамам бөткән, быуындар дер-дер ҡалтырай, хатта өйләшерлек тә хәл ҡалмаған. Урманда бер аҙ хәл алып, винтовка затворҙарын эшләтеп ҡарап, хәҙер ҡайҙа барырға икән, тип баш ватабыҙ. Алда, ҡара урманда,– дошман, ни ҡулда карта юҡ, ҡор аҡ аҫты ла ныҡ ҡына бушаған. Ә беҙгә нисек тә үҙебеҙ бойороҡ алған штабҡа барырға кәрәк.

Беҙҙе урап үткән ике танк беҙ килгән юлдан китеп, бер аҙҙан шул яҡта көслө атыш ҡупты. Был инде беҙ бойороҡ алып сыҡҡан ауылда уғыш барғанын аңлата ине. Беҙ ҙә самалап шул яҡҡа юл тоттоҡ. Ҡара урман эсенән ҡалын ҡар ярып барабыҙ. Мин – алдан, сөнки алдаттарға ышана алмайым, уларҙа әле разведка эшендә тәжрибә лә, хәрби сослоҡ әм иҙгерлек тә самалы йәки бөтөнләй юҡ. Ә фронтта бесәй кеүек үткер күҙле, алдан еҫ иҙеүсе әм әләтле булыу кәрәк.

Шулай килә ятҡанда, ваҡ ҡына ағастар үҫкән үҙәнгә килеп төш әк, ни күҙебеҙ менән күрәбеҙ: өҫтө-өҫтөнә өйөлгән мәйеттәр. Баҡ аң, был дошман алдаттары, беҙҙең алғы часты уратып алып ҡырырға ниәтләп, үҙҙәре ҡапҡанға эләккән икән. Ләкин беҙҙең часть ауылды ҡалдырырға мәжбүр булған. Артабан ни эшләргә? Иң насары: карта юҡ. Бында ҡалыу ҙа мөмкин түгел, ә үҙебеҙҙекеләр яғына сығыу өсөн 500 метр сама ы асыҡ ялан аша үтергә кәрәк. Сара ыҙҙың көнөнән был араны шыуышып үтеп, бер текә яр аҫтына килеп остоҡ. Ул йылға булып сыҡты. Тиргә батып ары аҡ та, ял итергә ваҡыт юҡ, үҙебеҙҙекеләргә ҡушылырға кәрәк. Арғы яҡтағы текә ярҙы көс-хәл менән менеп, бер аҙ атлағайныҡ, ул яҡтан маскхалаттар кейгән бер взвод сама ы саңғылы дошман алдаттары килеп сыҡты. Әлдә урман яҡын ине, уңғы көстө йыйып, шунда йүгерҙек. Ҡолас етке еҙ ағастарға етеү булды, дошман беҙҙең яҡҡа ҡарап ут асты. Әммә беҙгә зыян килтерә алманы, артыбыҙҙан да төшмәнеләр.

Урманда уҡмаҡ, юлдар күп, тимәк, беҙҙекеләр үткән. Шырпы ҡаптары, гәзит киҫәктәре лә шуны раҫлай. Хәҙер инде шатлыҡ эскә һыймай, арыған тән еңеләйеп, тамаҡ туйып, көс тә өҫтәлгән кеүек булды. Беҙ өс көн, ике төн ал ыҙ-ял ыҙ аяҡ өҫтө бит. Был арала йүнләп атыштар булманы, шуға күрә ҡайҙа дошман, ҡайҙа беҙҙең частар икәнлеген дә самаларлыҡ түгел. Шулай ҙа уҡмаҡ, юл буйлап атлай бирәбеҙ. Күп ара үтеп, эҙләнә- ораша торғас, өс тәүлек уҙғандан уң иптәштәребеҙ янына килеп юлыҡтыҡ. Улар бер ауылдың емерелеп бөткән арайында ҙур ҡаҙан аҫып, ит бешереп маташа ине. Иптәштәребеҙҙең бары ы ла иҫән- ау. Беҙ ни, ас кеше, ҡаҙандан йүнләп бешеп тә етмәгән берәр киҫәк ит алып ашаныҡ та, аҫҡа серек алам түшәп, йоҡларға яттыҡ. Әммә беҙгә серем итергә форсат бирмәнеләр. Немец кереп килә: самолеттан бомба ташлай, снарядын да ебәрә. Китте көслө атыш, ләкин дошман беҙҙе ауылдан бәреп сығара алманы, бик күп үлектәрен ҡалдырып, кире сигенде. Беҙҙең яҡтан да ҡорбандар күп ине. Бына иңә ял, бына иңә аш! уғыш шулай була шул инде, ә тере алдат түҙергә мәжбүр. Был ваҡиғалар 1942 йыл февраленең тәүге ун көнөндә булды.

Күҙ асҡы ыҙ буран да, сатлама аяҙ көн алҡыны ла, күҙгә төрт әң күренге еҙ ҡараңғы йәки салт аяҙ төн дә, ҡара урман, аҙлыҡ, шылтырап аҡҡан ыуҙар ҙа уғышсы өсөн кәртә була алмай. Бөтәбеҙҙең дә бурыс “Вперед за Родину, за Сталина!” лозунгы ы аҫтында алға барыуҙа. Беҙ уғышҡан 39-сы армияға Юғары командование ҡуйған бурыс дошмандың тылына үтеп инеп, Ржев ҡала ын уратып алыуҙан ғибәрәт ине. Беҙ ал-ял белмәй алға ынтылып, дошман фронтын 175 саҡрымда

өҙөп, эскә үткәйнек. Ошоноң менән беҙҙең алға барыу тамам булды, сөнки кеше көсө лә, ҡорал да самалы ҡалды. Тылдан өҫтәмә көс тә, ҡорал әм аҙыҡ-түлек тә бик аҙ килә башланы. Беҙгә ризыҡ килтерә торған юлдарҙы дошман йыш ҡына бомбаға тота. Шул арҡала тамам хәлдән тайып оборонала ултырабыҙ.

Беҙ уғыш алып барған фронтты “Калинин” йәки “Үҙәк” тип атап йөрөтәләр. Был яҡтарҙа урман да аҙлыҡ, землянка йәки траншея ҡаҙырмын тимә, ыу сыға ла тора. Төҙөк йорттар әм ауылдар бик ирәк осрай, сигенгән дошман ауылдарҙы тотошлай яндыра. Уларҙың исеме генә бар, йәшәүсе йәки йәшәргә рәт ҡалмаған.

Әле февраль аҙаҡтары. Көн ҡыҫҡа, төндәр оҙон. Беҙ төндәр буйы алғы ыҙыҡта ут нөктә е – траншея ҡаҙыйбыҙ йәки аҙлы урындарға ағас настил түшәйбеҙ. Быны өсөн уҡ кеүек ҡарағайҙар бысып ауҙарыла. Уларҙы яурындарға алып ташыйбыҙ. Көндөҙҙәрен ял иткән булабыҙ. Көндәр шулай бер-бер артлы үтә тора.

Март айҙары ине. Беҙгә өс көндә ике посылка килде. Уларҙы ҡаланан эшселәр ебәргән икән. Посылкаларҙа – пряник, печенье, кәнфит кеүек ашамлыҡтар. Туйғансы ашаныҡ. Тағы ла бер шатлыҡлы хәбәр алдыҡ: беҙҙең 361-се уҡсы дивизия батырҙарса уғышҡаны өсөн “21-се гвардия уҡсы дивизия ы” итеп үҙгәртелгән икән. Полк “64-се гвардия уҡсы полкы” тип исемләнә башланы. Беҙ инде “гвардиясылар” булып киттек. Эйе, хөкүмәт беҙҙең хеҙмәтте онотмай. Полк штабы Калинин өлкә енең Холминск ауылында урынлашҡайны, беҙ ҙә шунда бер йортта торған булабыҙ. Хужабикәнең ике бәләкәй генә улы ла бар. Ауыл алғы ыҙыҡтан өс саҡрымда ғына булыуға ҡарамаҫтан, бик ҡыйратылмаған, аҙ-маҙ халҡы ла бар. Ләкин мал-тыуар, ашамлыҡтары бөтөнләй юҡ. Аҙыҡ-түлек менән хәл ҡәҙәре беҙ бүлешә торғайныҡ.

 уңғы айҙарҙа ике яҡтан да атыш-фәлән юҡ. 31 мартта Холминскиға дошмандың 25 самолеты ябырылып, бомба ташлай башланы. Биш тулҡын килеп, ауылдың аҫтын-өҫкә әйләндерҙеләр. Тыныс халыҡ иҫән ҡалмағандыр, сөнки бер төҙөк өй ҙә юҡ, бары ы ла емерелде, янды. Оҙаҡ та үтмәй, немецтар ҙа күренде. Беҙ тәүге өжүмде кире ҡаға алдыҡ. Дошман күп юғалтыуҙар менән сигенде. Кискә табан өс танкка ышыҡланып тағы ла пехота килде. Беҙҙең дә көс самалы ине, шуға күрә сигенеү яғын ҡарарға тура килде. Ошо алышта үҙебеҙҙең район Ҡарағош ауылынан Д. Мөхәмәтйәнов, Ишембай районы Әрмет ауылынан М. Ҡунафин иптәштәр зәғифләнеп, тылға ебәрелде. Үлеп ҡалғандар ҙа байтаҡ ине.

 уғыш кәрәк-ярағын, аҙыҡ-түлекте полк складынан аттарға тейәп килтерә инек, ашатырға булмағас, был малдар ҙа расходҡа сығып бөттө. Хәҙер кәрәкле нәмәләрҙе, шул иҫәптән снаряд-патрондарҙы ла, 10 – 15 саҡрымдан үҙебеҙ күтәреп ташыйбыҙ. Юл бысраҡ, билғау аҫты бушаҡ. Апрелдең ундарында бул а кәрәк, Большая Малявина тигән ауылға өжүм итеп ҡарағайныҡ, өҙөмтә е насар булды. Немецтар ҙа беҙҙең кеүек ас икән, бер ғәнимәт тә эләктереп булманы.

Ҡар иреп бөттө, яландар йәшәрҙе, төрлө-төрлө матур сәскәләр ҙә күренә башланы. Бөгөн 5 майҙа урманда кәкүк саҡырҙы. Төндәр буйы, бигерәк тә иртә танда төрлө ҡоштар айрай. Бына шул саҡтарҙа тыуған яҡ, үткән ғүмер иҫкә төшә... Фронтта ваҡытлыса тынлыҡ урынлаш а ла, саперға тынғы юҡ. Траншеялар нығытабыҙ, миналар ҡуябыҙ, сәнскеле тимер сыбыҡтарҙан рогаткалар я ап ултыртабыҙ.

Шулай көндәр бер-бере е менән алмашына барғанда, 16 майҙа беҙҙе сәйәси бүлеккә партия билеты алырға саҡырҙылар. Ҡояшлы бик матур көн. 15 саҡрым сама ы йәйәү барып, Гончарово тигән ауылға килдек. Билеттарҙы беҙгә ашығыс рәүештә сәйәси бүлек начальнигы Кравец тапшырҙы. Бик ҙур шатлыҡ менән алдыҡ.

*Беҙ өжүмгә киттек Ватан өсөн,*
*Ҡаршы киттек утҡа, үлемгә.*
*Сөнки белдем: партияға инеү*

*Ул тик барыу ине өжүмгә.*

Был – шағир В. Маяковскийҙың шиғыры. Эйе, ул хаҡлы, беҙ инде ул өжүмгә кереүселәр. Кире ҡайтырға сыҡҡас, тынысланыбыраҡ, аҙыраҡ ял итеп ҡайтырбыҙ ти әк, бер самолет килеп сығып, бер нисә бомба ырғытып китте.

Июнь баштарында ашап-эсеү, уғыш кәрәк-яраҡтары менән тәьмин итеү бик ҡыҫылды. Беҙ дошман ҡамауында икән, бер саҡ ул ҡыҫымға ала башланы, ҡаршы торорлоҡ хәл юҡ. Аҡрынлап сигенергә тура килде. Ҡаса барабыҙ, ата барабыҙ. Тик ҡайҙа – белгән юҡ. Паника ҡупты, урман тулы алдат. Аҙыҡ та бөттө, уны алырға урын да ҡалманы. Патрондар ҙа бөтөп килә, әр кемдә берәр обойма (5 дана ) ғына ҡалды. Тағы ла берәр граната. (Беҙгә автомат бирелгәне юҡ әле, винтовка менән уғышабыҙ.) Винтовка ла шул сара ыҙҙың көнөнән генә йөрөтөлә инде. Ярай әле, арала ыбайлылар бар, уларҙың аттарын уйып, сейле-бешле килеш ашап бөтөрҙөк.

Төркөм-төркөм булып ҡара урман эсендә, аҙлыҡта йөрөгән булабыҙ. Немец көн-төн ата, бомбаға тота, шуға күрә кисен дә, көндөҙөн дә ут яғып булмай. Итте лә сейләй ашайбыҙ. Хәл көндән-көн насарая, аҡалдар ҙа етте, тәнде бет баҫты. Итек табандары аҡтарылып сыҡты, өҫ кейеме лә туҙа. Күбебеҙ яланбаш, сөнки пилоткалар ағас ботаҡтарына эләгеп тороп ҡалды. Бик ныҡ хәл еҙләндек, кемдәрҙер ятып ҡала, кемдәрҙер әкрен генә йөрөп ята. Таба ал аҡ, төрлө үлән, тәлмәрйен ашайбыҙ. Тәлмәрйен тигәс тә, ул баҙҙа йәшәгән йән эйә е түгел, аҙлыҡ тәлмәрйене. Унын арт боттары тас ит кенә. Нужа бесән ашата, тигәндәре шулдыр инде.

Шулай, әҙәми зат иҫән ҡалыр өсөн ниҙәр генә эшләмәй. Бер ваҡыт мин ҡаны ағып торған йылҡы итен күп итеп ашаным. Икенсе юлы бер кружка көнбағыш майы эстем. Аптыраш: ашҡаҙан да ауыртманы, эс тә китмәне. Кире енсә, күҙҙәр асылып, көн яҡтырып киткәндәй булды, хәл кереп ҡалды. Әгәр ҙә был ашамлыҡтарҙы ауылда ауыҙ ит әң, эсең китеүҙән алйыр инең, тим үҙ-үҙемә. Ә бит ыуҙы ла аҙлыҡта йыйылып ятҡанын, төрлө ҡорттар мыжғып торғанын эсәбеҙ. алдаттың эсендә тимер ҡасау ҙа ирер, моғайын.

Немец – аҡланда, ауылда, урыҫ – аҙлыҡта, урманда. Ғәрлек тә, тик нихәл итә ең, уғыш бит. Бер көн иртәнге ҡояш күтәрелә башлағас, таш юлдан йыраҡ түгел урында ял итергә туҡталдыҡ. Уратып аҡсылар ҡуйҙыҡ, мин дә винтовкамды бот ара ына ҡыҫтырып йоҡоға киткәнмен. Бер саҡ тауышҡа уянып кит әм, ни күҙем менән күрәм: беҙҙе немецтар баҫып алған. Тиҙ генә ҡалҡындым да, винтовканы тотоп, ҡасып барыусы иптәштәрем артынан төштөм. Бер немецтың ҡулы арҡама тейеп ҡалды: “Рус, сдавайсь!” – тип ҡысҡыра был.

Мин шул тиклем шәп йүгерҙем, үҙ ғүмеремдә былай ыпыртҡан юҡ ине. Бер аҙ барып, йыуан ҡарағай артына ышыҡланып ҡара ам, немецтар беҙҙең йоҡлап ятҡан алдаттарҙы барлай, беҙҙең яҡҡа автоматтан ата ине. Бер патронды йәлләмәй, өйкөлөшөп торған немецтарҙың урта ына тоҫҡап атып ебәрҙем. Берәй енә тейҙеме икән, күрмәнем.

Иҫән ҡалғандар бер урынға йыйылғас, унлап иптәштең юҡлығы асыҡланды. Элекке фронтовикмы, бер шағир яҙған юлдар иҫкә төшә:

*Алты тәүлек инде көн юҡ, төн юҡ,*
*Дошман ҡыҫырыҡлай өс яҡлап.*
*Серем иткәндә лә ята алдат*
*Ҡыҙған автоматын ҡосаҡлап.*

Ятҡанда ла, ашағанда ла, хатта бәҙрәфкә ингәндә лә винтовка ҡайышы менән муйынға эленгән килеш була, сөнки унан айырылып тороу ис кенә лә мөмкин түгел. уғышта ҡорал – инең дуҫың, аҡсың, ярҙамсың. Винтовкамды бот ара ына

ҡыҫтырып йоҡларға ятыуым әсирлектән ҡотҡарғандыр, тим. Әгәр ҙә уны эҙләй башла ам, ысынлап та “русь сдался” булыр ине. Бына хәрби ҡоралды ҡул осонда тотоу ни өсөн кәрәк!

Мин өҫтәрәк, төркөмдәргә бүленеп йөрөйбөҙ, тигәйнем. Был – хәрби тактика, сөнки бер төркөмдә йөҙҙән артыҡ кеше бул а, уңай ыҙ. Беҙҙең взвод командиры лейтенант Пискунов ҡайҙалыр юҡҡа сыҡҡас, 16 алдат башында мин тороп ҡалдым. Шулар менән әле был, әле теге төркөмгә барып ҡушылам. Үҙ часыбыҙҙан айырылып йөрөй торғас, оло ғына йәштәге урыҫ капитаны төркөмөнә килеп ҡушылдыҡ. Бик яҡшы кеше булып сыҡты ул, мине лә яратты. Башҡорттарҙың тарихын белә икән.

Ул саҡта иҫке хәрби форма булып, дәрәжәләр айырма ын күр әткән билдәләр – гимнастерка яға ында. Командирҙар ара ында ана шул билдәләрен алып ташлап, рядовой булып йөрөгән ҡурҡаҡтары ла булғыланы. Йөрөй торғас аҙайып та барабыҙ, кемдер ҡараңғы төндә ҡара урманда аҙашып ҡала, икенселәр хәлдән тайып ауа.

Ике айҙан ашыу буталып йөрөй торғас, партизандарға ҡушылдыҡ та, ауыр көрәш менән 1942 йылдың 17 июлендә кискә табан өжүмгә күсеп, таң алдынан үҙебеҙҙең яҡҡа сыға алдыҡ. 18 июлдә фронттың алғы ыҙығын үтеп, мең михнәттәр менән 10 саҡрым барып, бер бәләкәй генә йылға янында туҡтаныҡ. Бында беҙгә сохари, шәкәр, махорка, күлдәк-ыштан алып килгәндәр икән. Аҙыраҡ тамаҡ ялғап алғас, йыуынырға тип сисен әк, тәндең бер ау ере лә ҡалмаған, беттән таланып бөткән. Күлдәк-ыштандың эске яғы күренмәй ҙә, бет мыжғып тора. Был хәлгә нисек түҙгәнбеҙҙер, үҙе күрмәгән кеше ис ышанмаҫ. Йыуынып, таҙа кейем кейеп алғас тән шул тиклем еңеләйҙе, ҡанат бул а, осор ҙа китер инек.

Был кисте ошо йылға буйында үткәрҙек. Иртә менән юлға сыҡтыҡ та, көн айын 7–10 саҡрым атлап, Андриополь тигән станцияға килеп, бер урман ҡырына урынлаштыҡ. Ял итергә тура килмәне, төндә тревога буйынса уяттылар. Иртән ҡулға ҡорал алып, вагондарға тейәлеп фронтҡа китергә тейешбеҙ. “Солдат с фронта, опять на фронт” тигән үҙ шунан ҡалғандыр инде. Икенсе көндө алған әйберҙәрҙе тапшырып, төнөн эшелонға ултырып, көнсығышҡа йүнәлдек. Тыныс йоҡо күрмәгән алдатҡа вагонда туйғансы йоҡлау сабый саҡта сәңгелдәктәге йоҡо кеүек тойолдо. 6 августа беҙҙе поезд Загорск ҡала ына килтерҙе. Беҙҙән алда ҡамауҙан сыҡҡан иптәштәр, дивизия штабы ла ошонда урынлашҡан. Юғалған взвод комадиры Пискунов та бәпкәләрен юғалтҡан инә ҡаҙ кеүек йөрөп ята. Инде ул өлкән лейтенант булып киткән. Мин дә 16 алдаттың ике ен генә эйәртеп ҡайттым шул.

Бер айға яҡын ял итеп, өҫтәмә көс ҡабул иткәндән уң тағы ла урманға күстек. Ҡалала саҡта барыбыҙға ла гвардиясы значогы биргәйнеләр. Калинин өлкә енең бер ҡара урманында 40 тәүлек тирә е торғас, бөтә кәрәк-яраҡтарҙы алып, өс көндә 80 саҡрым йәйәүләгәндән уң бер урманда аҙна-ун көн хәрби әҙерлек үтеп, беҙ өжүмгә күсергә әҙер булдыҡ.

**Фәйруша ХУЖИН.**

*(Дауамы бар.)*

**Иҫтәлектәрҙе баҫырға**
**Мәхмүт ХУЖИН әҙерләне.**

## “РУХЫ КӨСЛӨ ХАЛЫҠ – ЕҢЕҮСЕ”

*Май айында совет халҡының немец илбаҫарҙарын тар-мар итеүенә 64 йыл тулды. Ярты быуат үтә лә, ул – халыҡ тарафынан мәңге онотолмаҫлыҡ ваҡиға. Сөнки был уғышта бөтә совет халҡы – бала-сағанан алып ҡарт-ҡороға тиклем – тик кеше генә еңә алырлыҡ ғазаптар, ауырлыҡтар кисерҙе. Уның ауырлыҡтары әле аман да кешеләрҙең күңелендә юйылып бөтмәгән. өйөклө улдарын, ҡәҙерле ирҙәрен, ҡайтып килмәҫме, тип өмөт итеүсе сал сәсле әсәләр әм ҡатындар аман да осрай әле. уғыш ваҡытында юғалған күп ата-әсәләр балаларын, балалар ата-әсәләрен, туған-ырыуҙарын әле бул а эҙләй әм ирәк бул а ла табышып та ҡуя.*

### Яңғырашлы оран

Фашист илбаҫарҙарының ис көтмәгәндә тыуған илебеҙгә баҫып инеүе халҡыбыҙҙа көслө нәфрәт тыуҙырҙы, халыҡ уларҙың оят ыҙлыҡтарын митингыларҙа, йыйылыштарҙа асыу менән өйләне.

Халыҡ яуға күтәрелде әм изге ерҙең әр бер аҙымын яҡлап уңғы тамсы ҡанына тиклем, ғүмерен аямай, дошманды тулы ынса тар-мар иткәнсе көрәшергә ант итте. уғыш тиҙ ваҡыт эсендә бөтә халыҡ хужалығын, мәҙәниәт әм сәнғәтен үҙгәртеп ҡороу талабын ҡуйҙы. Коммунистар партия ы илдең бөтә көсөн уғыш эшенә йәлеп итерлек мөмкинлектәрҙең бөтә ен дә эшләне, “Бөтә нәмә еңеү өсөн! Бөтә нәмә фронт өсөн!” тигән лозунгы ын күтәрҙе.

Сәнғәт хеҙмәткәрҙәре Ватан уғышы көндәрендә тарих алдындағы, халыҡ алдындағы яуаплылығын тулы ынса аңланы. Шуға күрә лә башҡорт композиторҙарының, артистарының, рәссамдарының күбе е фронтҡа китте. Ә инде тылда мәҙәниәт әм сәнғәт учреждениеларының эшмәкәрлеген совет халҡының батыр көрәше мәнфәғәттәренә буй ондорорға мәжбүр булды. Башҡортостандың театрҙары, филармония, халыҡ ижады йорто . б. иҫке репертуарҙарын яңыртыу, тамашасыла Ватанға ҡайнар өйөү, дошманға ҡарата тәрән асыу әм нәфрәт тәрбиәләй торған яңы спектаклдәр, композиторҙар яңы йырҙар, рәссамдар яңы картиналар тыуҙырыу эшенә тотондо.

Шулай итеп, Бөйөк Ватан уғышы Тыуған илебеҙ хужалығына ғына түгел, мәҙәни өлкәгә лә бик ҙур үҙгәрештәр индерҙе.

уғыштың беренсе көндәренән үк Башҡорт дәүләт академия драма театры алдына яңы бурыстар килеп баҫты. Театр коллективы эшен саҡырыу пункттарында, хәрби частарҙа, госпиталдәрҙә башлап ебәрҙе. уғыш йылдарында өс колхоз-совхоз театры – Учалы, Ҡыйғы, Борай әм Өфө йәш тамашасылар театрҙары ябылды.

уғыштың тәүге йылдарында театрҙың репертуарында, нигеҙҙә, рус классиктарының башҡортсаға тәржемә ителгән әҫәрҙәре төп урынды алып тора ине, мәҫәлән, М. Горькийҙың "Егор Булычев", А. Чеховтың "Апалы- еңлеле өсәү", А. Островскийҙың "Гроза", Н. Гоголдең "Ревизор" .б. пьесалар. Шуға күрә башҡорт яҙыусылары әм драматургтары яңы тема – уғыш тема ы өҫтөндә эшләй башланы. Тиҙҙән К. Мәргәндең "Бер семьяла", Р. Ниғмәтиҙең "Малай", Х. Ибра имовтың "Ватан өсөн", М. Буранғоловтың "Намыҫ" әм башҡа шуның кеүек яңы пьесалар нигеҙендә Башҡорт дәүләт академия драма театрының әм колхоз-совхоз театрҙарының яңы хәрби репертуары барлыҡҡа килде. Был пьесаларҙың төп тема ы – ватансылыҡ, Тыуған илгә мөхәббәт, дошманға ҡарата нәфрәт, үс ине.

1941 йылдың аҙаҡтарында Башҡорт дәүләт драма театры сәхнә ендә В. Виттиҙың уғыш ваҡытында әм уғыш тема ына яҙылған "Ауыр көндәр" тигән пьеса ы ҡуйылды. "Кешене йырткыс еңә алғаны юҡ әм ул бер ваҡытта ла булмаясаҡ. Кеше еңәсәк!" – дошман тылында батырҙарса хәрәкәт итеүсе партизандарҙың еңелмәҫлеген тасуирлаған әҫәрҙең төп мәғәнә е бына ошолай ине.

Ҡыҙыл Армияның немец-фашист ғәскәрҙәрен Мәскәү ҡала ы янында еңеүе башҡорт драматургтарын яңы, ә әмиәтлерәк әҫәрҙәр тыуҙырырға рухландырҙы. 1942 йылда Х. Ибра имовтың "Берҙәмлек" әм "Маҡтаулы ҡыҙҙар" исемле пьесалары сәхнәгә күтәрелде. Ә 1943 йылда театр Б. Бикбайҙың "Салауат Юлаев" әҫәрен тамашасыға күр әтте. Салауат ролен артист Рим Сыртланов башҡарҙы.

Тиҙҙән Б. Бикбайҙың башҡорт халҡының батыр үткәнен, йәғни 1812 йылғы Ватан уғышын үрәтләүсе "Ҡа ым түрә" пьеса ы сәхнәләштерелде. Төп ролде әләтле артист Арыҫлан Мөбәрәков уйнаны. Баязит Бикбай үҙенең пьесаларында дошманға ҡаршы көрәш ваҡытында халыҡтар ара ында тыуған әм нығынған дуҫлыҡты, ҡаҡшамаҫ берҙәмлекте тасуир итте.

Театр репертуарында Рәшит Ниғмәтиҙең Башҡортостанда граждандар уғышын үрәтләүсе "Ағиҙел ярында" исемле пьеса ы барлыҡҡа килде. Был пьесала беренсе башлап граждандар уғышы геройы Шә ит Хоҙайбирҙин образы художестволы формала үрәтләнде, полководецтар М.В. Фрунзе әм В.И. Чапаевтың батырлыҡтары данланды. С. Ҡудаштың шул уҡ йылдарҙа яҙылған "Мәжит Ғафури" исемле пьеса ы халыҡ шағирының граждандлыҡ позиция ы, ҡыйыулығы хаҡында өйләнә.

Ләкин был йылдарҙа халыҡтың үткәнен генә түгел, ә шул уғыш йылдарындағы тормошто, ысынбарлыҡты, немец фашистарына ҡаршы көрәште сағылдырыу бурысы ла ҡуйылды.

1944 йылда театр сәхнә енә фронт менән тылдың берҙәмлеген, колхоз ауылының уғыш ваҡытындағы тормошон, ҡатын-ҡыҙҙарҙың героик хеҙмәтен сағылдырған пьесалар ҙа яҙылды. Улар иҫәбенә Баязит Бикбайҙың "Тыуған ил саҡыра", А.Мөбәрәковтың "Бисәкәй" пьесаларын индерергә мөмкин.

1943 йылдың декабрь айында театр сәхнә ендә Л. Леоновтың “Ябырылыу” спектакленең премьера ы булды (режиссеры В.Ғәлимов).

Был кеше психология ын асыҡлаусы драма ине. Уның геройҙары – намыҫлы кешеләр. Мөхәббәт әм бурыс, шәхси өйкөмлөлөк әм йәмғиәткә, тормошҡа мөхәббәт, ғүмереңде Тыуған ил өсөн ҡорбан итеү – бына ошондай тойғолар менән йәшәй спектакль геройҙары. Актерҙар фашист окупанттарының халҡыбыҙға килтергән тәрән ғазаптарын, әммә кешеләрҙең рухи яҡтан ҡыйыулана барыу процесын үрәтләй. Төп герой Ф. Таланов ролен – А. Мөбәрәков, уның ҡатыны, доктор (Таланова Анна Николаевна) ролен – Р. Янбулатова, ә Ольга ролен З. Бикбулатова башҡарҙы.

“Улар был спектаклдә быҒаса күрелмәгән үтә көслө образдар тыуҙырҙы. Бигерәк тә “Тимер әбей” Анна Николаевна роле (Р. Янбулатова) уңышлы сыҡты (“Октябрь” жур. 1948, №10, 24-25 б.).

К. Мәргәндең кешелеклек идеалын, мәртәбә ен, уның иң тәрән эске сифаттарын үрәтләүсе “Минең ғаиләм” исемле пьеса ы сәхнәнән оҙаҡ төшмәне.

Р. Ниғмәти 1944 йылда “Урман шаулай” исемле пьеса ын яҙҙы. Ул унда дошман тылындағы партизандар уғышын, илдәге төрлө милләт халыҡтарының дуҫлығын тасуир итә. Украин крәҫтиәне Шульга, рус уҡытыусы ы Мария Федоровна башҡорт егете Мораҙымды фашистар ҡулына эләгеүҙән йәшереп алып ҡала әм яраларын төҙәлткәндән уң партизандар менән осрашырға ярҙам итә. Был спектакль ҡала театрҙары әм ауыл клубтары сәхнәләрендә барҙы.

1943-1944 йылдарҙа К. Мәргән әм В. Кедровтың “Яу” тигән героик-патриотик драма ы сәхнәләштерелде. Пьесала Сталинград ҡала ы өсөн барған уғыш күр әтелә. “Яу”– башҡорт әм рус драматургтарының ижади дуҫлығын күр әтеүсе әҫәр. Унда башҡорт халҡының Бөйөк Ватан уғышындағы ҡа арманлығы, бигерәк тә Башҡорт атлы дивизия ының данлы, Волга ярындағы ҡаланың әр бер кварталы, йорто, этажы өсөн барған уғышта ҡатнашыуы сағылдырыла. Фронт дуҫлығы, тыуған ергә мөхәббәт, дошманға нәфрәт пьесала геройҙарҙың шәхси кисерештәре, тойғолары аша үрелеп килә.

Был йылдарҙа Башҡорт драма театрының репертуары рус, сит ил классиктарының, шулай уҡ совет рус яҙыусыларының башҡорт теленә тәржемә ителгән әҫәрҙәре менән тулыланды: Н. Гоголдең “Өйләнеү”, В.Шекспирҙың “Отелло”, К. Треневтың “Любовь Яровая”, А. Грибоедовтың “Аҡыллылыҡ бәлә е” .б. 1943 йылда ҡуйылған А. Корнейчуктың “Фронт”, К. Симоновтың “Рус кешеләре” спектаклдәре тамашасылар өйөүен яуланы. Төп ролдәрҙе Р. Сыртланов (Горлов), Ғ. Ҡарамышев (Огнев әм Сафонов), Ғ. Шамуҡовтар (военфельдшер Глоби) башҡарҙы.

уғыш йылдарында 30-сы йылдарҙа яҙылған пьесалар популярлашты. С. Мифтаховтың “Балҡанда”, “ аҡмар”, “Дала ҡыҙы” пьесалары яңынан сәхнәгә сыҡты. З. Бикбулатова, Ә. Зөбәйеров, Б. Йосопова, Ғ. Ҡарамышев, Ғ. Мин ажев, А. Мөбәрәков, Ә. Садиҡова, Р. Сыртланов, Р. Янбулатова уғыш йылдарында театрҙың төп ижади көстәре булды.

Театр артистары гастролдәргә йөрөнө. уғыштың ауыр йылдарында ла улар иртә яҙҙан – колхозсыларҙың яҙғы сәсеүгә сығыу ваҡытынан алып ҡара көҙгә тиклем райондарҙан, колхоз, совхоз ауылдарынан ҡайтып килмәне. Мәҫәлән, 1943 йылдың тик йәйге гастролдәре ваҡытында ғына республиканың 98 ауылында 189 спектакль күр әтелеп, уларҙы 40 000 тамашасы ҡараны (“Ҡыҙыл Башҡортостан”, 1943). Ә инде 1944 йылдың ете айы эсендә артистар 170 ауылда 340 спектакль

күр әтеп, 60 500 тамашасы йыйҙы (“Ҡыҙыл Башҡортостан”, 1944). Артистар спектакль күр әтеп кенә ҡалманы, хеҙмәтсәндәр ара ында агитмасса эше лә алып барҙы. Улар, бигерәк тә ауыл халҡы өсөн, иң ҡәҙерле ҡунаҡ булып иҫәпләнде, сөнки радио булмаған, гәзиттәр бик уңлап килгән ауыл халҡына был тамашалар бик кәрәк ине. Улар әр спектаклде халыҡ-ара хәл, Ҡыҙыл Армияның уңыштары, уғыш барышы, халыҡ хужалығы, мәҙәни яңылыҡтар хаҡындағы өйләшеүҙәр, докладтар менән башлап ебәрер булды.

Театрҙар уғыш йылдарында яугирҙарға мәҙәни шефлыҡ күр әтте. Башҡортостан сәнғәте вәкилдәренән төҙөлгән фронт бригадалары составында улар ҙа бер нисә тапҡыр Башҡорт атлы дивизия ы алдаттарын, хәрәкәт итеүсе армияның башҡа частарын хеҙмәтләндерҙе.

Совет хөкүмәте күп кенә артистарҙы ошо ауыр йылдарҙа ордендар, миҙалдар менән бүләкләне. Мәҫәлән, йәш артист А. Мөбәрәков бик күп кенә спектаклдәрҙә төп ролдәрҙе башҡарҙы. Ул Н. Погодиндың “Мылтыҡлы кеше” пьеса ында В.И. Ленин образын, Б. Бикбай пьеса ы буйынса эшләнгән “Ағиҙел ярында” спектаклендә М.Ф. Фрунзе, С. Мифтаховтың “Ҡарлуғас” пьеса ында Шатморат, “Балҡанда”драма ында Фәсхи, В. Шекспирҙың “Отелло” трагедия ында Отелло ролдәрен тыуҙырҙы. Башҡорт театр сәнғәтен үҫтереүҙәге хеҙмәттәре өсөн ул 1944 йылда “Почет Билдә е” ордены әм “РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы” тигән исемде алыуға лайыҡ булды.

1945 йылдың июнь айында Башҡорт драма театры артистарының оло хеҙмәтен ба алап, артистар Р. Сыртлановҡа, Ғ. Туҡаевҡа, Х. Мансуровҡа “Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған артисы”, театрға нигеҙ алыусыларҙың бере е Ғ. Мин ажевҡа “РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы” исемдәре бирелде. Ошо юғары исемгә 1944 йылдың март айында, йәғни Башҡорт АССР-ның төҙөлөүенә 25 йыл тулыуҙы байрам иткәндә, Ә. Зөбәйеров, Б. Имашев, Б. Йосоповалар лайыҡ булды. Ә З. Бикбулатова менән В. Ғәлимовҡа “БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы” исеме бирелде (“Ҡыҙыл Башҡортостан”, 1944, март).

Башҡорт дәүләт филармония ы 1938 йылдың декабрь айында ойошторолоп, у-ғыштың тәүге көндәренән үк үҙенең эшен уға яраҡлаштырып үҙгәртеп ҡорҙо. Клубтарҙа, культура йорттарында, предприятиеларҙа, колхоздарҙа әм совхоздарҙа концерт биреүҙе киңәйтеп ебәрҙе. уғыш ваҡыты яңы талантлы башҡарыусылар талап итте. Артистарға уғыш алды йылдарына ҡарағанда өсләтә артығыраҡ эшләргә тура килде. Мәҫәлән, филармонияның художество коллективы уғышҡа тиклем йылына уртаса 54 концерт бир ә, уғыш ваҡытында йылына (мәҫәлән, 1943 йылда) 274-тән ашыу концерт күр әтте, ә 1941 йылда Башҡорт дәүләт филармония ы артистары 321 концерт, ә 1942 йылдың өс айы (июль, август, сентябрь) эсендә 572 концерт менән сығыш я аны (“Ҡыҙыл Башҡортостан”, 1942 йыл, 29 октябрь). Ошо йылдың июль айынан алып ноябргә тиклем республикабыҙҙың колхоз, совхоздарында 117 концерт биреп, 9 500 ум аҡса йыйҙы әм уны илдең Оборона фондына тапшырҙы (“Ҡыҙыл Башҡортостан”, 1942 йыл, 29 октябрь).

Филармония эшендә шағир, сәсән-йырсы Сәйет Исмәғилев, шағирҙар Б. Бикбай, Ғ. Әмири, рус композиторҙары А. Спадавеккиа әм Н. Пейко актив ҡатнашты.

Шағир Б. Бикбайҙың “Фашистарға үлем” шиғырын Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған артистка ы З. Бикбулатова тылда ла, фронтта ла бик ҙур уңыш менән башҡарҙы. Халыҡ сәсәне С. Исмәғилевтың “Еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ” тигән йыр-шиғыры, А. Спадавеккианың “Башҡорт ҡыҙыл армия ы”, С. Волковтың “Медсестра Гөлсара” исемле йырҙары халыҡ ара ында ҙур популярлыҡ яуланы.

уғыш йылдарында беҙҙең республикала Украинанан эвакуацияланып килгән яҙыусылар, композиторҙар йәшәне әм ижади эш алып барҙы. Уларҙың ижади хеҙмәттәрен дә беҙҙең артистар ихлас башҡарҙы, әм улар халыҡ тарафынан яратып ҡаршы алынды. Был халыҡтар ара ында мәҙәни бәйләнеште үҫтерҙе әм дуҫлыҡты артабан нығытты.

уғыш башында уҡ филармонияның составы киңәйтелде. Уның ижади коллективын башҡорт халыҡ бейеү ансамбле, эстрада әм миниатюра ансамбле, башҡорт, рус эстрада бригадалары, оперетта театры, тынлы оркестр, эстрада-цирк бригада ы, Одесса эстрада бригада ы тәшкил итте.

Фронтовиктар менән бер рәттән, бик ҙур ауырлыҡтар кисергән тыл кешеләренең – хеҙмәтсән халыҡтың рухын күтәрергә, дошманды еңеүгә ышаныс тыуҙырырға кәрәк ине, шуға күрә лә филармония коллективы үҙенең эшен халыҡ менән яҡынайтырға тырышты. Ошо маҡсат менән Стәрлетамаҡ ҡала ында филармонияның филиалы ойошторолоп, ул республиканың көньяҡ районДарын хеҙмәтләндерҙе. “Пушкалар гөр өлдәгәндә – муза өндәшмәй”,– тиҙәр. Ә фашистар беҙҙең илгә баҫып ингәс, сәнғәт хеҙмәткәрҙәре, шулай итеп, көрәшеүсе халыҡ сафына баҫты.

## Артистар китә уғышҡа

уғышҡа өйрәнеү үтеүсе кавалеристар алдында филармония, Башҡорт дәүләт академия драма театры, Опера әм балет театры артистары сиратлашып сығыш я ап торҙо. 1942 йылдың апрелендә фронтҡа киткән саҡтарында Дим станция ында ҙур концерт менән оҙатып ҡалдылар. Дивизия командиры полковник М. Шайморатов дивизия исеменән артистарға рәхмәттәрен әйтеп, былай тине: “ еҙ сәнғәт эшселәре – халыҡ рухының инженерҙары. Беҙ, кавалеристар, еҙҙең менән аубуллашмайбыҙ, тиҙерәк яңынан осрашҡанға тиклем, беҙ еҙҙе фронтта көтәбеҙ, әм беҙ ис кисекмәҫтән, ис үҙ еҙ осрашырға тейешбеҙ”.

Беҙҙең артистар Башҡорт атлы дивизия ы уғышсылары янына тиҙ арала барып та етте. 1943 йылдың өс айы эсендә улар фронтта 93 концерт (шуларҙың 23-ө фронттың алғы ыҙығында) бирҙе. Ошо ваҡыт эсендә 43 000 уғышсы уларҙың сығыштарын ҡараны, артистар хәрби частарҙа үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәге ойоштороуҙа ла ярҙам итте.

Яу йылдарында республиканың күренекле артистарынан 12 фронт бригада ы төҙөлдө, шуларҙың 9-ы филармония артистары тарафынан ойошторолдо: 5 башҡорт, 3 рус бригада ы әм халыҡ бейеүҙәре ансамбле. Ошо бригадалар 1944 йылдың ғинуарынан июнь айына тиклем 1627 концерт биреп, 268800 тамашасыны хеҙмәтләндерҙе. Улар республиканың ҡала, район, ауылдарында ғына йөрөп ҡалмай, фронтта ла, илебеҙҙең күрше өлкәләрендә лә, республикаларында ла сығыш я аны.

Ф. Ғәскәров етәкселегендәге башҡорт халыҡ бейеү ансамбле фронтта Башҡорт атлы дивизия ында булды әм унда уғыш шарттарында боецтарҙан бейеү коллективы ойошторҙо. Ансамбль был йылдарҙа Себерҙә лә, Байкал аръяғында ла, Урта Азияла ла, Волга буйҙарында, Донбаста әм Кузбаста ла булды. 1941–1942 йылдарҙа бейеү ансамбле әләтле йәштәр менән тулыландырыла: З. Исмәғилев, С. Шумков, М. Иҙрисов, М. Шәмсетдинов, Р. Хажиева, Ә. Фәхретдинов, Е. Варламовалар эшкә килде. Был йылдарҙа яңы бейеүҙәр алынды, бигерәк тә “Бүләк”, “Гөлнәзирә”, “Дуҫлыҡ”, “Башҡорт уғышсы ы бейеүе”, “Гвардеецтар” .б. коллективтың яңы репертуарын тәшкил итте. Репертуарға башҡорт бейеүҙәре

менән бер рәттән рус, үзбәк, мари, сыуаш .б. халыҡтарҙың бейеүҙәре лә индерелде. 1944 йылда Башҡорт АССР-ы төҙөлөүгә 25 йыл тулыу тантана ында ансамбль яңы программа төҙөп, СССР халыҡтарының 18 төрлө бейеүен күр әтте.

Бейеү ансамбленә ҡуша композитор Т. Кәримов етәкселегендәге баянистар трио ы ойошторолдо. Ауыр яралы яугирҙарҙы хеҙмәтләндереү өсөн күренекле солистар составында махсус квартет ойошторолоп, ул да үҙ бурысын намыҫ менән үтәне.

1941 йылдың аҙаҡтарында Башҡорт дәүләт филармония ы ҡаршы ында әҙәбимузыкаль лекторий ойошторолдо. Хеҙмәтсәндәргә әҙәбиәт әм сәнғәт буйынса белем биреү, ватансылыҡ тәрбиәләү, бөйөк рус композиторҙарының ижады әм тормошо менән таныштырыу, Башҡортостандың музыка культура ының үҫешен күр әтеү — әҙәби-музыкаль лекторийҙарҙың төп маҡсаты ошолар ине. Концерт-лекцияларҙа музыка буйынса тәнҡитселәр, композиторҙар, рәссамдар, республика театрҙарының артистары ҡатнашты. Был лекцияларҙа “Сәнғәт образдарында патриотизм идеялары”, “Культураға ҡаршы фашизм”, “Бөйөк Ватан уғышы көндәрендә музыка”, “Фашизм тарафынан тыйылған композиторҙар”, “Совет композиторҙары”, “Совет композиторҙары әм яҙыусылары ижадында Ҡыҙыл Армия” .б. киң таралған темалар ине. Уларҙы үткәреү өсөн мәктәптәрҙән, госпиталдәрҙән, хәрби частарҙан, республикабыҙҙың районларынан бер нисә айға алдан уҡ ораүҙар килеп торор булды. Лекторҙар әм артистарға ҡай ы бер саҡтарҙа көнөнә бер нисә урында сығыш я арға тура килде.

## “Илемде күргәндәй булдым...”

1942 йылдың аҙағында Башҡорт дәүләт филармония ында 4 башҡорт милли эстрада бригада ы төҙөлөп, халыҡҡа эстетик тәрбиә биреүҙә ҙур уңыш ҡаҙанды.

СССР-ҙың Сәнғәт эштәре буйынса комитеты “1943 йылдың 1 Май байрамын фронтовиктарға концерт биреү менән ҡаршылау ҡарары”н сығарҙы. Ошо ҡарарға ярашлы, филармония 8 бригада төҙөп, фронтҡа оҙатты.

Был бригадаларҙың эше бик ауыр шарттарҙа барҙы: артистарға урманда, палаткаларҙа, йөк машина ы кузовтарында, алдаттар тарафынан тиҙ генә төҙөлгән сәхнәлә, ҡай ы ваҡыт дошман окоптарына бик яҡын урындарҙа, бомбалар шартлауы аҫтында, пуляларҙың баш осонан ыҙғырып осҡан сағында уйнарға тура килде. Йыш ҡына концерттар туҡталып ҡала торған булды, сөнки алдаттарға концертты ташлап уғышҡа инергә тура килә ине, ләкин уғыш тынғас та концерт дауам ителә ине.

алдаттар бигерәк тә артист Ғ. Хәбибуллин бригада ының эшен оҡшатты. Уларҙың хәрәкәт итеүсе армия частарындағы 112 концертын 50 000 кеше ҡараны. Был бригаданың сығышынан уң лейтенант М. Зәйнетдинов “Тыуған ил патриоты” тигән гәзиттә ошолай тип яҙып сыҡты: “Күптән инде башҡорт музыка ын ишеткәнем юҡ ине. Р. Саубанованың йырлауын тыңланым, З. Бәхтейәрованың бейеүен күрҙем әм тыуған яғымдың иркен далалары, ашҡынып аҡҡан саф ыулы йылғалары, йәшел урмандары әм бейек, мө абәт, ғорур тауҙары күҙ алдыма килеп баҫты” (“Ҡыҙыл Башҡортостан”, 1944).

Башҡорт дәүләт филармония ы фронтовиктарҙың балалары өсөн дә күп кенә эштәр эшләне. Улар өсөн төрлө саралар уҡыусыларҙың каникул ваҡыттарында уҙғарыла торған булды. Бында ошондай андарҙы иҫкә төшөрөү ҙә етә: 1943 йылдың август айынан алып ноябргә тиклем балалар өсөн 42 сара ойоштороло. Был өлкәлә етәксе е атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре М.Н. Елгаштина булған Республика ҡурсаҡ театры ҙур эш башҡарҙы. Республикала был театр булмаған бер генә

район да ҡалмағандыр.

Филармония шулай уҡ республиканың ҡала, район мәҙәни йорттарының, колхоз, совхоз, завод-фабрикаларҙың художестволы үҙешмәкәр түңәрәктәренең эшенә ярҙам итеү йәки уларҙы ойоштороу буйынса ла ҙур эш башҡарҙы. 1942 йылда ғына ла 850 үҙешмәкәр түңәрәк ойошторолдо. Был түңәрәктәрҙә ҡатнашыусылар мөмкин булған бөтә урындарҙа ла халыҡ алдында сығыш я аны. 1942 йылда ғына ла 1419 концерт ҡуйып, 150 000 ум аҡса тупланы әм Оборона фондына тапшырҙы ("Ҡыҙыл Башҡортостан", 1943). Үҙешмәкәр түңәрәктәрҙең эшен артабан яҡшыртыу маҡсатында 1943 йылдың декабрь айынан башлап 1944 йылдың мартына тиклем республика смотры уҙғарылды. Унда 2197 коллектив ҡатнашты.

Халыҡ йырсы ы, шағир, сәсән Йәрми Сәйетенең дә (С. Исмәғилев) уғыш йылдарындағы хеҙмәте ҙур ба аға лайыҡ. Ул да бәйеттәре, йырҙары менән халыҡтың күңелен күтәреп, уларҙы йәшәүгә ил амландырҙы, үҙе генә лә ауылдарҙа 500-ҙән ашыу концерт бирҙе, егермеләгән район гәзиттәрендә шиғырҙарын, бәйеттәрен баҫтырҙы, радионан унлаған сығыш я аны.

Үрҙә әйтелеп киткәнсә, уғыш йылдарында колхоз-совхоз театрҙарының ҡай ы берҙәре ябылды, ә ҡалған Баймаҡ, Ауырғазы театрҙары ауыл хеҙмәтсәндәрен хеҙмәтләндереүҙә ал-ял белмәне. Улар сығыштарын район үҙәге клубтарынан тышҡа – колхоз клубтарына, баҫыу стандарына, фермаларға күсерҙе.

Башҡорт дәүләт опера әм балет театры ла, уғыш алдынан ғына төҙөлөүенә ҡарамаҫтан, үҙен ҙур мәҙәни көс итеп танытты. Республиканың атҡаҙанған артистары Ғ. Хәбибуллин, Х. Ғәлимов, Б. Вәлиева, З. Илбаева кеүек талантлы солистар үҫеп етте. Был театр ҙа эшмәкәрлеген уғыш талаптарына яраҡлаштырҙы, яңы әҫәрҙәр менән байытты, А. Спадавеккиа әм Х. Заимовтың "Аҡбуҙат", Н. Пейконың "Ай ылыу" операларын, "Евгений Онегин", "Травиата", "Аршин Мал-Алан", "Корневиль ҡыңғырауҙары" кеүек классик әҫәрҙәрҙе, Л. Степановтың "Сыңрау торна" балетын репертуарына индерҙе. Театрҙың солистары, башҡа артистар менән бер рәттән, фронт бригадаларында ҡатнашты әм бер нисә тапҡыр фронтта булды.

Шулай итеп, Башҡортостан артистары әр сығышы менән немец фашизмына ҡаршы изге көрәш алып барыусы халыҡты рухи яҡтан ҡоралландырҙы.

1943 йыл Бөйөк Ватан уғышында бөйөк ынылыш йылы булды. Волга буйындағы ҡаты уғыштарҙа Ҡыҙыл Армия немец-фашист илбаҫарҙарын еңеп сыҡҡандан уң, уларҙы илдән ҡыҫырыҡлау осоро башланды. Совет халҡы алдына кисекмәҫтән эшләй торған яңы ҙур бурыс килеп баҫты – дошмандан азат ителгән райондарҙа халыҡ хужалығын әм мәҙәниәтте тергеҙеү. 1943 йылдың 21 августа СССР-ҙың Сәнғәт эштәре комитеты ҡарары булды: "Немец оккупанттарынан азат ителгән райондарҙа сәнғәтте аяҡҡа баҫтырыуға ярҙам фонды ойоштороу." Был ҡарарға Куйбышев ҡала ы сәнғәт хеҙмәткәрҙәре яуап менән сыҡты, уларҙы беҙҙең Башҡортостандың сәнғәт вәкилдәре бер тауыштан хупланы. Емерек ҡала, ауылдарҙы, тимер юлдарын, завод-фабрикаларҙы яңынан аяҡҡа баҫтырыу өсөн генә лә күпме аҡса талап ителде. Бының өсөн өҫләтә артыҡ эшләргә кәрәк булды. Шуға күрә лә артистар тарафынан пландан тыш күп кенә концерттар, спектаклдәр ҡуйылды. Өс ай эсендә, йәғни 1943 йылдың октябренән алып 1 ғинуарға тиклем, Башҡортостан артистары 370-тән ашыу пландан тыш концерт күр әтеп, 120 млн. ум аҡса йыйҙы әм Оборона фондына тапшырҙы ("Ҡыҙыл Башҡортостан", 1944).

## *Музыка әм буяуҙар телендә*

Бөйөк Ватан уғышы йылдарында башҡорт композиторҙары әм рәссамдары ла фашист баҫҡынсыларын еңеүгә ҙур өлөш индерҙе.

Башҡортостан композиторҙары, совет халҡының фронттағы әм тылдағы батырлыҡтарын сағылдырған яңы йырҙар ижад итеп, йыр репертуарын артабан тулыландырыу өҫтөндә эшләне. Башҡорт опера әм балет театры ошо ауыр йылдарҙа барлыҡҡа килде. Был Башҡортостан мәҙәниәте үҫешендә ҙур ваҡиға булды. Композиторҙар А. Спадавеккиа менән Х. Заимов "Аҡбуҙат" опера ын, Н. Пейко "Ай ылыу" опера ын яҙҙылар, композитор Л. Степанов "Сыңрау торна" балетын ижад итте. Композиторҙар яугир йырҙары яҙыу өҫтөндә айырыуса энтузиазм менән эшләне. Улар "Ҡыҙыл Армияға башҡорт композиторҙарынан", "Башҡорт атлы дивизия ы өсөн оборона йырҙары" исемле 70-тән ашыу йырҙы туплаған ике йыйынтыҡ баҫтырып сығарҙы.

Йәш композиторҙар Х. Әхмәтов, Х. Заимов, З. Исмәғилев, Р. Мортазин .б. үҙҙәренең беренсе симфоник әм камерный концерт өсөн әҫәрҙәрен ошо йылдарҙа ижад итте. Әйткәндәй, башҡорт милли йырҙарын яҙыуға композитор Х. Ибра имов күп көс алды. Уның йырҙары халыҡ йөрәгенә үтеп инерлек, тәрән йөкмәткеле булды. Композиторҙың "Тыуған илде бирмәбеҙ", "Ҡайғырма, өйөклөм" .б. йырҙары халыҡ тарафынан яратып йырланды.

Башҡорт атлы дивизия ы алдаттары өсөн нота әм үҙҙәре менән бергә башҡорт телендә оборона йырҙарынан 24 битлек листовкалар баҫып сығарылды. Унда Х. Заимовтың әм А. Спадавеккианың "Ҡуҙғал, Урал!", З. Исмәғилевтың "Башҡорт батырҙары", М. Вәлиевтың "Мәскәүҙе аҡла!", Чемберджиҙың "Башҡорт атлы ы" .б. йырҙар тупланғайны.

1942 йылдың йәйендә композиторҙар башҡорт әм рус телдәрендә батырлыҡ, лирик әм шаян йырҙарҙан 40-тан ашыу йырҙы эсенә алған "Фронтҡа бүләк" исемендәге йыйынтыҡ әҙерләне.

112-се Башҡорт атлы дивизия ы республика халҡының ғорурлығы булып аналды, әм композиторҙар уға арнап күп кенә йырҙар ижад итте. З. Исмәғилевтың "Та ир Кусимов", "Байғужа Сәйетғәлин" әм башҡа йырҙары ла ошонда ингәйне.

1943 йылдың майында композиторҙар Х. Әхмәтов менән Р. Мортазиндың ижадына арналған кисә үткәрелде, әм унда уларҙың яңы симфоник әҫәрҙәре башҡарылды. Х. Әхмәтовтың "Изге уғыш", "Летчиктар маршы", "Башҡорт дивизия ы маршы", "Батырға бүләк", "Кәкүк", "Ҡуңыр буға"йырҙарын, Р. Мортазиндың " андуғас", "Яҙ", "Хушлашыу", "Ватан тура ында йыр" тигән әҫәрҙәрен тамашасы йылы ҡабул итте. Р. Мортазиндың патриотик рух, ҙур күңел күтәренкелеге менән яҙылған "Башҡортостандың 25 йыллығы" маршы ла халыҡ тарафынан хуплап ҡаршыланды.

Башҡортостан сәнғәте эшмәкәрлегенең үҫеүенә Мәскәү консерватория ы әм Ленинград хореография училище ы күп көс алды. 1944 йылда композитор З. Исмәғилев Мәскәү дәүләт консерватория ына уҡырға инде, уҡыу дәүеренде күп кенә көйҙәр яҙҙы: шағир Ҡ. Даян шиғырына "Котелок", Р. Ниғмәти шиғырына "Генерал Шайморатов", "Батырға дан", Н. Иҙелбай шиғырына "Ел, ерәнем!" ана шундайҙарҙан. Был йырҙарҙың бөтә ендә лә яугир башҡорттарҙың батырлығы әм ихтыяр көсө данлана.

Композитор Х. Әхмәтов та уғышты Мәскәү дәүләт консерватория ы студенты булып ҡаршылай. Ләкин дошман баш ҡалабыҙ Мәскәүгә яҡынлаша башлағас, ҡулына ҡорал тотоп Тыуған илде аҡлар өсөн яуға ҡушыла. Ул еңеү көнөн тылда ҡаршылай, сөнки ҡаты ауырыу арҡа ында Башҡортостанға кире ҡайтырға мәжбүр була. Бында ла ижад итеүҙән туҡтамай. Башҡортостан Композиторҙар со-

юзы рәйесе вазифа ын башҡарыу менән бер рәттән, башҡорт халыҡ йырҙары йыйынтығын баҫмаға әҙерләй. Уҡыуын уғыштан уң дауам итә әм уңышлы тамамлай.

Композитор Р. Мортазин да уғыштың тәүге көндәренән үк фронтҡа китә, Мәскәү янындағы уғыштарҙа ҡаты яраланып, Өфөгә ҡайтырға мәжбүр була, ижади эшен Өфөлә дауам иттерә. Ул тынлы оркестр өсөн марштар, вокаль әҫәрҙәре яҙҙы. Беренсе башлап ижад ителгән башҡорт романстары халыҡ ара ында киң популярлыҡ менән файҙаланды. Уның “Яҙ”, “Йырла минең ҡаршымда”, “Тыуған ил” романстарын анап китергә мөмкин.

Композитор Т. Кәримов күп кенә патриотик йырҙар, таҡмаҡтар ижад итте. Халыҡ ара ында киң таралған “Зимагорҙар”, “Әйҙә, еңгә, бейеп ҡал”, “Урал тәнә”, “Генерал Белов” йырҙарын билдәләп үтергә кәрәк. Яуҙа еңелмәгән, арыҫландай көслө, бөркөттәй етеҙ батыр егет образын тыуҙырған “Гөлсирәнең өйгәне” тигән йыры халыҡтың иң яратҡан йырҙарының бере енә әйләнде.

Шулай итеп, немец илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә Ҡыҙыл Армияның героик еңеүҙәре менән рухланған композиторҙар йөкмәтке е әм музыкаль эшләнеше яғынан оҡланғыс әҫәрҙәрендә Тыуған илгә ҡайнар өйөү, халыҡтар дуҫлығы, халыҡта еңеүгә ышаныс, ҡыйыулыҡ темаларын данлап дошманды еңеүгә ҙур өлөш индерҙе.

Композиторҙарыбыҙ менән бер рәттән рәссамдарыбыҙ ҙа ижади эҙләнеүҙәр өҫтөндә булды. Уларҙың уғыш йылдарындағы төп тема ы Ҡыҙыл Армияның батырҙарса көрәше, халыҡ патриотизмы, фронт менән тылдың берҙәмлеге ине. Күп кенә рәссамдар уғыштың беренсе көндәренән үк фронтҡа китте. Әммә ҡәләмдәрен ҡулдарынан төшөрмәне: плакаттар, листовкалар яҙҙы, стена гәзиттәре, фронт гәзиттәре сығарҙы.

Граждандар уғышы ваҡытында революция тема ына яҙылған “Сатира тәҙрә е РОСТА” плакаттары ҙур ә әмиәткә эйә булғайны. әм ошо традиция Бөйөк Ватан уғышы осоронда ла дауам ителде. “Башхудожник” ширҡәте “ТАСС тәҙрә е “ тигән агитация плакаты сығарҙы. Был плакаттар сатирик планда фашизмды, Гитлер армия ының еңелмәҫлеге тура ындағы легенданы фашланы. уғыш йылдарындағы плакаттарҙың төп тема ы – Тыуған ил өсөн йәнен бирергә лә әҙер яугир образы. Плакаттарҙы ҡоймаларҙа ла, йорт стеналарында ла, магазин витриналарында ла, вокзалдарҙа ла – ҡуйырға мөмкин булған бөтә ерҙә лә осратырға мөмкин ине.

Был ауыр көндәрҙә әр рәссам, скульптор ҡай ы ерҙә генә йәшәмә ен әм эшләмә ен – фронттамы ул, тылдамы – ҡылҡәләмен ҡулынан төшөрмәне. А. Тюлькин “Танк десанты”, Ҡ. Дәүләткилдиев “Фронтҡа оҙатыу”, И. Урядов “Разведкаға”, А. Лежнев “Башҡорт атлы дивизия ының Воронеж янындағы уғышы” тигән әҫәрҙәр ижад итте. Башҡорт атлы дивизия ын ойоштороу әм яугирҙарҙы уғышҡа өйрәтеү алып барған осорҙа рәссамдар документаль зарисовкалар, командирҙарҙың, алдаттарҙың портреттары өҫтөндә эшләне. Рәссам С. Георгиевская ошо ваҡытта полк командиры Т. Кусимовтың портретын яҙҙы.

Яҡташыбыҙ, Советтар Союзы Геройы Александр Матросовтың (Шакирйән Мөхәмәтйәнов) батырлығы күп кенә рәссам әм скульпторҙарҙы ижадҡа иламландырҙы. уғыш ваҡытында Өфөлә йәшәүсе Ленинград рәссамы Шац уның портретын яҙҙы. Өфө скульпторы В. Морозова бюсын эшләне.

Башҡортостан Рәссамдары союзының эш формалары ла уғыш талаптарына ярашлы үҙгәрҙе. Союз идара ы тарафынан рәссамдарҙан бригадалар ойошторолоп, колхоз-совхоз ауылдарына, завод-фабрикаларға ебәрелде. Улар унда ҙур

агитмасса эше алып барҙы, стена гәзиттәре сығарҙы, маҡтау кенәгәләре эшләне, хеҙмәт алдынғыларының портреттарын яҙҙы.

Рәссамдарҙың ижади оҫталығы Өфө ҡала ында үткәрелгән күргәҙмәләрҙә сағылыш тапты.

1944 йылдың 7 ғинуарында “Тыуған ил өсөн” тигән девиз аҫтында агитация-оборона күргәҙмә е асылды. Уның стендтарына Бөйөк Ватан уғышы фронттарындағы әм тылдағы батырлыҡтарҙы күр әткән плакаттар, карикатуралар, скульпторҙарҙың эштәре ҡуйылды. Күрмәҙмәлә Ҡ. Дәүләткилдиев, И. Урядов, С. Тавасиев, Г. Георгиев, А. Храмов, А. Тюлькин, А. Усманов ҡатнашты.

1944 йылдың февралендә Өфөләге Художниктар союзы йортонда Ленинград рәссамы Лавровтың ижадына арналған күргәҙмә асылды. Уның үрәттәре ара ында “Урманда Петр I-гә әйкәл”, “Петропавловск крепосын аҡлаусы ауа шарҙары”, “Ленинградтың Ҡышҡы арайҙан күренеше” әм башҡа шундай халыҡ тарафынан яратып ҡаралған әҫәрҙәр булды. Ул Башҡортостанда “Ватан уғышы геройҙарына” әм “30 башҡорт батырына” исемле әйкәлдәр эшләне.

Халыҡтарҙа дошманға нәфрәт, Тыуған илгә өйөү, дошманды еңеүгә ышаныс тәрбиәләгән үрәттәр яҙыусылар ара ында йәш рәссам Р. Ишбулатов та бар ине. Уның бигерәк тә “Катюша”, “Өфө Еңеү көнө иртә ен ҡаршылай”, “Башҡорт дивизия ы рейдта” тигән картиналары халыҡ тарафынан йылы ҡабул ителде. Бындайҙар иҫәбенә Фәтҡуллиндың “Иптәшем ҡәбере янында”, В. Андреевтың “Партизандан орау алыу”, Огородовтың “Госпиталдә концерт”, “Утлы позицияла”, Ғүмәровтың “Неманды кисеү”, “Азат Манчжурияла” картиналарын да индереп була.

Рәссам И. Урядов 1937 йылда башлаған “Ҡыҙыл Яр ауылы янында Чапаев дивизия ының Ағиҙелде кисеп сығыуы” исемле хеҙмәтен тамамланы. Был картина күп кенә күргәҙмәләрҙә ҡатнашты, шул уҡ ваҡытта Мәскәүҙә, илебеҙҙең башҡа ҡалаларында үткәрелгән күргәҙмәләр ҙә халыҡтың иғтибарын үҙенә йәлеп итте.

Рәссам М. Арыҫланов “Салауат Юлаев” үрәтен, А. Лежнев “Ленин Өфөлә” полотно ын яҙып бөтөрҙө. Скульптор С. Тавасиев хәҙер бөтә башҡорт халҡының ғорурлығы булған әм ылыу Ағиҙелдең текә ярында баҫып торған Салауат Юлаев әйкәленең проектын эшләп, Мәскәүгә оҙатты. Скульптор Якимов башҡорт халҡының тормошон сағылдырған темаларға статуэткалар ижад итте.

Башҡортостан хөкүмәте рәссам әм скульпторҙарҙың ижадын юғары ба аланы. Башҡорт АССР-ы Юғары Советы Президиумы А. Тюлькинға, А. Лежневҡа, И. Урядовҡа” Башҡорт АССР-ның атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре” тигән маҡтаулы исем бирҙе, И. Урядов Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән дә бүләкләнде.

Башҡорт сәнғәте уғыштың беренсе көндәренән үк халыҡтың азатлыҡ көрәшендә ҡеүәтле рухи ҡорал булды. уғыш башҡорт сәнғәтенең ҙур тәрбиәүи йоғонто он, юғары сәнғәти кимәлен раҫланы.

Фашизм менән көрәштә кешелекле идеология еңеп сыҡты. Бында башҡорт сәнғәтенең өлөшө ба алап бөткө өҙ. “Халыҡтың рухи көсө нығыраҡ әм күберәк булған яҡ әр ваҡыт еңеп сыға, – тип яҙҙы яҙыусы А. Толстой. – Сөнки халыҡтың әхлаҡ категориялары был уғышта ла иң ә әмиәтле роль уйнаны”.

**Клара ӘСФӘНДИӘРОВА,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

# ИЖАД ОФОКТАРЫ

– Минең улым консерваторияла уҡыр әле ул, – Сәләх ағай, бәләкәй Римдең арҡа ынан ҡағып, ана шулай тип хыялланыр була. Ә үҙенең теләге – улын артист итеп күреү. Артислыҡҡа консерваторияла уҡыталар, тип уйлаған, күрә ең.

Миәкә районының Боғҙан ауылында тыуып үҫкән Рим Зыязетдинов ысынлап та яҙмышын театр сәнғәтенә бағышлай. Мәктәпте тамамлағас, ул Өфө сәнғәт училище ының театр бүлегенә уҡырға инә. Данлыҡлы Илшат Йомағолов, Хәмит Яруллин, Лек Вәлиев, Вәзих Сәйфуллин, Тамара Хоҙайбирҙина, Фәрдүнә Ҡасимовалар өйрәтә уны актерлыҡ өнәренең серҙәренә. Училищенан уң Рим Зыязетдинов Салауат башҡорт драма театрында эшләй башлай, режиссеры Вәзих Сәйфуллин булған Салауат театрының иң данлыҡлы сағы була был.

Сәнғәттәге юл бер ваҡытта ла тигеҙ әм шыма булмай. Рим дә тәү осор үҙенә яраҡлы ролдәр ала алмай төшөнкөлөккә бирелә яҙып ҡуя, әммә тиҙҙән Н. Островскийҙың пьеса ы буйынса ҡуйылған спектаклдә уға Павка Корчагинды – төп ролде ижад итергә насип була. Романтик рухлы, иленә, яҡты киләсәк хаҡындағы идеалдарға тоғро Павка Корчагин 70-се йылдарҙағы йәштәр өсөн ысын мәғәнә ендә кумирға әүерелә. Рим Зыязетдиновтың Корчагины бик күп төрлө сүрәттәргә инеүсе образ сифатында ынландырыла. Ул берсә импульсив холоҡло, берсә аҡыл эйә е кеүек сабыр, берсә революция идеалдарына бирелгәнлек арҡа - ында үҙен-үҙе аямай алыштарҙа ҡатнашыуы сәбәпле сәләмәтлеге, нервылары ҡаҡшаған ҡыҙыу ҡанлы фанатик – Рим Зыязетдиновтың актерлыҡ өнәренең киң диапозонлы мөмкинлектәрен тулы ынса асып алған роль ине был.

Ә инде армия хеҙмәтенән ҡайтҡас, Рим Сәләх улы Салауат башҡорт драма театрының төп көстәренең бере енә әүерелде. Етмештән ашыу ролдәр башҡарырға өлгөрҙө артист Салауат театрында. Фәрит Богдановтың “Иртәнге томан” пьеса- ы буйынса ҡуйылған спектаклдә ул Кинйә ролен уйнағайны. Театр тәнҡитселәре, республиканың өс сәхнә ендә ҡуйылған был спектаклдең иң уңышлы төп геройы Рим Зыязетдиновтыҡы булды, тигән ығымтаға килде. Флорид Бүләковтың “Яран гөл” спектаклендәге Раил, Нәжиб Асанбаевтың “Миләш-Миләүшә” ендәге Мөхтәр, Х. Ибра имовтың “Башмағым”ындағы Хәйрүш, М. Буранғоловтың “Шәүрәкәй”ендәге Вәли, Ж.-Б. Мольерҙың “ аран”ындағы Лафлеш, М. Кәримдең “Салауат”ындағы Федулов әм башҡа ролдәре менән актер Башҡортостан тамашасыларының мөхәббәтен яуланы. “Яран гөл”дәге Раил образы, мәҫәлән, төп роль дә түгел. Әммә ата нигеҙенән, әсәй менән рухи берҙәмлек бәйләнешенән айырылған ир тыуған йорттоң бына-бына ыуынырға торған етди ысынбарлығын аңғарып етә алмаҫлыҡ манҡортҡа әүрелгән. Ишара, ым, башлыса паузалар, хәрәкәт динамика ы аша еткерә беҙгә Р. Зыязетдинов үҙ геройының характерын.

Рим Зыязетдинов – күп яҡлы актер. Ул телә ә ниндәй жанр эсендә лә йөҙөп йөрөп эшләй. Трагедия, драма, комедия бул ынмы, барыбер драматургия материа-


Рим Зыязетдинов


Гөлшат Зыязетдинова

лының туҡыма ын, уның эске ағымдарын нескә тоя, ентекле әм аҡсыл, ижади бирелгәнлек менән еткерә белә үҙ ниәтен сәхнә оҫта ы. Рус, сит ил классика ы бул ынмы, башҡорт милли драматургия ымы — Рим Зыязетдинов уларҙың әммә ен дә берҙәй бирелгәнлек менән, күңеле әм зи ене аша үткәреүгә әләтле.

“Шәүрәкәй” спектаклендәге Вәли образы ла төп герой түгел, әммә актер өсөн ҙур, бәләкәй роль тигән төшөнсә ят. Шәүрә киленде ҡулға төшөрөргә, уны йәрәшелгән иренән айыртып алырға яҫҡыныусы Вәли әллә нисә сүрәткә инә. Рим Зыязетдинов берсә “герой любовник”, берсә хәйләкәр, берсә көлкөлө итеп ынландыра үҙ персонажын әм тамашасының иғтибар үҙәгенән айырылмай. Актерҙың пластика ын, психологик логикаға йүнәлтелгән образ үҫешен, хатта ки композицион ҡоролош хәрәкәтен тоҫмаллау алымдарын оҡланып күҙәтергә генә ҡала.

Актер өнәре талант менән генә сикләнмәй. Актер сәхнәгә теге йәки был геройҙың булып ятҡан хәл-ваҡиғаға ла, тормошҡа ла мөнәсәбәтен алып сыға. Тимәк, тәбиғи әләттән тыш, шәхес булыуың да зарур. Рим Зыязетдинов тормошҡа ла әүҙем мөнәсәбәтле, әр нәмәгә үҙ ҡарашы, үҙ фекере булған кеше ул. Күп уҡый. Коллективтың көнкүреш тормошонда ла уның үҙ урыны бар. Бына нисә йылдар инде театрҙың художество советы ағза ы. Совет ултырышында ул үҙен тура үҙе, талапсан тәнҡитсе әм кәңәшсе булараҡ танытты. Театрҙың өлкән быуын актерҙары ла, йәш артистар ҙа уға хөрмәт менән ҡарай.

Рим Баянов, Әнүәр Нурмөхәмәтов, Вәзих Сәйфуллин, Наилә Байкова, Гөлдәр Ильясова кеүек режиссерҙар менән ижадташ булды актер әм театр йәмәғәтселеге, тәнҡитселәр, тамашасылар өйөүе уны Башҡортостандың халыҡ артисы тигән дәрәжәгә күтәрҙе.

Сәхнәгә тоғролоҡ, туған коллективын ғаилә еләй күреп хөрмәт итеү — Рим Зыязетдиновтың күркәм сифаттарына ошоларын да өҫтәргә кәрәктер. Нәҡ ана шул бирелгәнлек уға тормош иптәшен айлауҙа ла булышлыҡ иткәндер. Атаҡлы Салауат театры артистары Ибра им ағай менән Зәкиә апай Әхмәровтарҙың ғаилә е менән туғанлашырға насип була уға. Гөлшат Әхмәрова-Зыязетдинованы ла бөгөн, Салауат башҡорт драма театрының төп көстәренең бере е, тип икеләнмәй әйтергә була.

Башҡортостандың халыҡ артистка ы Гөлшат Зыязетдинова Салауат драма театрына Өфө сәнғәт институтының театр факультетын тамамлағандан уң, 1973 йылда, килә әм бөгөнгәсә ана шул сәхнәгә тоғролоҡ аҡлай. Ошо йылдар эсендә актрисаға етмештән ашыу сәхнә образдары ижад итеү насип була. Ҡатын-ҡыҙ яҙмышы, әсә образы — актрисаның күп анлы ролдәренең даирә е ана шундай. Әйтәйек, Гарсия Лорканың “Ҡанлы туй” әҫәре буйынса ҡуйылған спектаклдә ул фажиғәле яҙмышлы Әсә образын ынландыр а, Р.Батулланың “Кисер мине, әсәй” драма ында еңелсәрәк холоҡло Дилфүзәне уйнай; Х. Ибра имовтың “Башмағым” музыкаль комедия ында халыҡсан, йор үҙле, хәйләкәр ҙә, аҡыллы ла Сәрбиҙе,

Кәбир Аҡбашевтың “Йәшлегем тирәктәре” драма ында Бөйөк Ватан уғышы осоронда әм уғыштан унғы йылдарҙа йәшәгән драматик яҙмышлы, әммә тормошҡа өмөт, оптимизм менән ҡараған Фәриханы, Мостай Кәримдең “Салауат” трагедия ындағы тәкәббер, үҙ үҙле хакимә Екатерина II образын ижад итеп Гөлшат ханым актерлыҡ әләтенең күп яҡлы, кисерештәр даирә енең тәрән булыуын иҫбатланы.

“Ҡанлы туй”ҙағы Әсә образын Гөлшат Зыязетдинова айырым бер диҡҡәт әм эске тетрәнеү менән уйнаған кеүек. Йәшәү әм үлем, әсәлек бурысы, нәфрәт, ыҙландырғыс рәнйеш – бына ниндәй сифаттар аша формалаштыра актриса Әсә образын. Спектаклдең тәүге минуттарынан алып аҙағынаса ул жанр талап иткән көсөргәнеште, серлелекте аҡлай, үҫтерә бара.

уғышҡа, ҡоралға, ҡан ҡойошҡа ҡаршы нәфрәте менән тамашасы күңелен яулай-яулай барып, уны тотошлайы менән фекерҙәшенә әйләндерә. Ул – көрәшсе. Әммә фажиғәгә кәртә ҡуя алмай. Спектакль аҙағында Леонардо ла, унын кәләше лә әләк була. Әсәнең ыҙланыуҙары тотош ғаләмде солғап алғандай...

Гөлшат Зыязетдинованың, артистар бала ы булыуына ҡарамаҫтан, сәхнәгә юлы туранан-тура булмай. Эйе, әр бер артист бала ы кеүек, унын да бала сағы сәхнә артында, гастролдәрҙә үтә, әлбиттә, әммә мәктәпте тамамлағандан уң хеҙмәт юлын “Салауатнефтехим” заводында крансы булып башлап ебәрә. Егерме ике йәшендә Өфө сәнғәт институтының яңы асылған театр факультетына уҡырға инә. Ғабдулла Ғиләжев, Фәрдүнә Ҡасимова, Гөлли Мөбәрәкова уҡыта уны ла. Был курс уңынан башҡорт театр сәнғәтенең йондоҙҙары буласаҡ Олег Ханов, Суфия Ҡорбанғәлиева, Рәфил Нәбиуллин, Анфиса Ханова, Таңсулпан Бабичева, Әхтәм Әбушахманов кеүек таланттар төркөмө була.

Тәү осор Гөлшат ханым персонаждар актриса ы ынауын да үтә. Әммә тора-бара уға төп ролдәр, киң диапазонлы образдар ижад итеү юлы ла асыла, әм егәрле актриса башкөлләй эшкә сума.

Салауат драма театры сәхнә ендә Гөлшат Ибра им ҡыҙы башҡарған алтмыштан ашыу роль ара ында эреләре лә, ваҡтары ла етерлек, кәмиткә ти еңме, трагедияға ти еңме – әммә төр жанрҙағы ролдәргә әләтле актриса. Унын башҡарыуындағы Тәңкәбикә (Мостай Кәрим, “Ай тотолған төндә”), Екатерина II (Мостай Кәрим, “Салауат”) образдары актрисаның эске мөмкинлектәренең киңлеген, фекер, уй, хис-тойғоларының тәрәнлеген йәнә бер иҫбатланы.

Артистар династия ы. Эйе, был ғаиләнең артислыҡ династия ы 150 йылдан ашып китә. Ибра им Әхмәров ағай артист, театр ойошторолоуҙың тәүге йылдарынан алып ғүмеренең уңына тиклем алыштырғы ыҙ директоры булды, ә инде беренселәрҙән булып “Башҡортостандың атҡаҙанған артистка ы” исеменә лайыҡ булған Зәкиә апай Әхмәрованың башҡорт театр сәнғәтенә хеҙмәте 50 йылдан да ашыуыраҡ. Дөрөҫ, Зыязетдиновтарҙың балалары – Яҙгөл менән Илнур башҡа өнәр айлағандар.

“Бөтә е лә уңлап килде минә... хыялымда йөрөткән образдар ҙа, халыҡ өйөүе лә...“ – тип әйтеп ҡуйғайны Гөлшат Зыязетдинова бер интервью ында. Әммә көтә белгәндәр ниәтенә ирешә ул. Башҡортостандың халыҡ артистка ы Гөлшат Ибраим ҡыҙы ла бөгөн – хеҙмәте менән хөрмәт ҡаҙанған шәхес.

Гөлшат менән Рим Зыязетдиновтар ыҙ башҡорт театр сәнғәтен күҙ алдына килтереү ҙә ҡыйын. Ә офоҡ артында йәнә лә офоҡ бар. Күңеле матурлыҡҡа көйләнгәндәрҙе саҡырып тора ул.

**Тамара ҒӘНИЕВА.**

## ТАУҘАР ҘА УНЫ АҒЫНА

Арыҫлан Мөбәрәков музейы актерҙың тыуған төйәге — Белорет районы Асы ауылында күркәм йортта урынлашҡан. Хөкүмәт ҡарарына ярашлы, ул 1994 йылдың 14 декабрендә асыла. Музейҙы ойоштороуҙа Башҡортостан Республика ы Мәҙәниәт министрлығы  әм Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры, актерҙың ҡыҙы, СССР-ҙың халыҡ артистка ы Гөлли Мөбәрәкова, оҙаҡ йылдар уҡытыусы, мәктәп директоры булып эшләгән Мөҙәрис Түләбаев, ауыл хакимиәте, уҡытыусылар фиҙакәрлек күр этә. Тәүҙә музей 30 квадрат метрлы бер бүлмәлә генә бул а, хәҙер ул — 100 квадрат метр майҙанлы йортта. Музейҙың экспозициялары, экспонаттары бер нисә бүлеккә урынлаштырылған. Этнографик мөйөштә XIX быуат башҡорт ауылы, урмансылар йәшәгән төбәкте сағылдырған ҡомартҡылар, документтар, көнкүреш әйберҙәре бул а, актерҙың бала сағы, үҫмер йылдарына бағышланған бүлектә ауыл тарихы, ата-әсә е, туған-тыумасалары тура ындағы материалдар урын алған. Музейҙың иң ҙур өлөшө данлыҡлы актер, режиссер, драматург тормошона бағышланған.

Был йортта төрлө йылдарҙа Республикабыҙ Президенты Мортаза Рәхимов, бөйөк рәссам, СССР-ҙың Художество академия ы ағза-корреспонденты, СССР-ҙың халыҡ рәссамы Әхмәт Лотфуллин булған. Халыҡ яҙыусылары Ғайса Хөсәйенов, Нәжиб Асанбаев, халыҡ шағиры Мостай Кәрим, күренекле прозаиктар Рәшит Солтангәрәев, Сабир Шәрипов, актерҙар, рәссамдар, яҙыусылар килгән.  әр  кем тәүҙә музей алдындағы мө абәт  әйкәл янына бара, сәскәләр  ала. Арҙаҡлы скульптор, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, БАССР-ҙың халыҡ рәссамы, Салауат Юлаев исемендәге республика дәүләт премия ы лауреаты Тамара Нечаева эшләгән бронза  әйкәлдә Арыҫлан Мөбәрәковтың ысын йөҙө, тормошҡа  әм ижадҡа ҡарашы сағылған. Шулай уҡ был  ынландырылған образға режиссер, драматург, сәхнә оҫта ы сифаттары ла  алынған.

Йорт тыштан да, эстән дә ыҡсым. Музейҙағы экспонаттарҙы, экспозицияларҙы иғтибар менән ҡарап сыҡҡас, Арыҫлан Мөбәрәковтың бөйөк актер, күренекле театр режиссеры, үҙенсәлекле башҡорт драматургы  әм мирбанлы етәксе булғанлығын аңлай ың.

Арыҫлан Мөбәрәков (Арыҫлан Мөбәрәк улы Ҡотләхмәтов) 1908 йылдың 15 декабрендә Өфө губерна ы Златоуст өйәҙе (хәҙер Башҡортостандың Белорет районы) Асы ауылында донъяға килгән. Музейҙағы шәжәрәнән шуны беләбеҙ: Ҡотләхмәттең улы Мөбәрәк; Мөбәрәктең ҡатыны Факи а; балалары: Сәбилә,  әмиҙә, Ғүмәр, Арыҫлан. Арыҫланға биш йәш тулғас — әсә е, ун бер йәш тирә ендә ата ы вафат була. Үк еҙ етем ҡалған Арыҫланды Сермән балалар приютына тапшыралар. Бында йәшәгән осорҙа уның

ижади эшкә, бигерәк тә актерлыҡҡа әләте асыла, әм 1927 йыл Арыҫлан Мөбәрәков Өфөгә килеп, сәнғәт техникумына — башҡорт милли профессиональ театрына нигеҙ алыусы Вәлиулла Мортазин-Иманский класына уҡырға инә. Мө абәт ынлы, саф башҡорт характерлы егетте, актер өнәрен үҙләштерә башлау менән, Башҡорт дәүләт драма театрына эшкә саҡыралар. Ул 1928 йылда уҡ Фәткелҡадир Сөләймәновтың (Әбделҡадир Инан) "Аҡшан батыр" трагедия ында, Мөхәмәтша Буранғоловтың "Башҡорт туйы" мелодрама ында төп ролдәрҙә сығыш я ай.

Сәнғәт техникумын тамамлағас, Арыҫлан Мөбәрәков ике йыл тирә е Баймаҡ район-ара күсмә театрында эшләй. Уның нигеҙендә Сибай дәүләт башҡорт драма театры ойошторола. 1934 йылда Башҡорт дәүләт драма театрына актер итеп эшкә алына. Ул төрлө йылдарҙа шулай уҡ театрҙың художество етәксе е, баш режиссеры, директоры вазифаларын башҡара.

Актер ижад иткән сәхнә геройҙарының байтағы — классик әҫәрҙәрҙәге реалистик йүнәлештәге образдар. Улар ара ында иң уңышлылары әм тамашасыларҙың күңел түрендә мәңгелек урын алғандары: Салауат Юлаев (Вәлиулла Мортазин-Иманскийҙың "Салауат", Баязит Бикбай әм Ғәлимов Сәләмдең "Салауат Юлаев", Баязит Бикбайҙың "Салауат Юлаев" пьесалары, Степан Злобиндың сценарийы буйынса режиссер Яков Протазанов төшөргән "Салауат Юлаев" кинофильмы), Юлай Аҙналин (Мостай Кәримдең "Салауат" пьеса ы), Ҡа ым түрә (Баязит Бикбайҙың "Ҡа ым түрә йәки 1812 йыл" трагедия ы), Ҡарағол (Дауыт Юлтыйҙың "Ҡарағол" трагедия ы), Шә ит Хоҙайбирҙин (Рәшит Нигмәтиҙең "Ағиҙел буйында" пьеса ы), комдив Шайморатов (Ибра им Абдуллин әм Шакир Насировтың "Шайморатов генерал" трагедия ы), Рыҫҡол бей (Мостай Кәримдең "Ай тотолған төндө" трагедия ы), Борис Годунов (Александр Пушкиндың шул уҡ исемдәге трагедия ы), Войницкий (Антон Чеховтың "Ваня ағай" пьеса ы), Отелло (Вильям Шекспирҙың шул уҡ исемдәге трагедия ы), Олег Кошевой (Александр Фадеевтың "Йәш гвардия" романы буйынса эшләнгән сәхнә әҫәре) .б.

Арыҫлан Мөбәрәков — өс пьеса авторы: " үнмәҫ йөрәктәр", "Бисәкәй", "Икенсе йәшлек". "Бисәкәй" драма ы 1942 йылда яҙылған. Ул Бөйөк Ватан уғышы мәлендә тылдағы кешеләрҙең фиҙакәр хеҙмәте тура ында. Реалистик пландағы, актуаль темаға яҙылған был әҫәр 100 биттән, 5 шаршауҙан тора. Пьеса 1943 йылда Башҡорт академия драма театрында сәхнәләштерелә әм тамашасыға тыл хеҙмәтенең мө имлеген аңлата. "Бисәкәй" драма ын ул 1957 йылда Сибай башҡорт дәүләт драма театрында ла ҡуя.

Башҡорт академия драма театрында Ғабдулла Әхмәтшиндың Мөбәрәков режиссерлығында "Тальян гармун" музыкаль комедия ы тамашасыларҙы ғәжәпләндергән юғары сәнғәт күренеше була. Ундағы йырҙарҙы, бейеүҙәрҙе Башҡортостандың ауыл-ҡалаларының әр ерендә: кафе-рестderандарҙа, туйҙарҙа, байрамдарҙа, ҡунаҡ йыйған әр йортта башҡаралар. Спектакль и ә театрҙа 20 йылдан ашыу аншлаг менән бара. Баязит Бикбайҙың "Ҡарлуғас", Мирхәйҙәр Фәйзиҙең "Аҫылйәр", Назар Нәжмиҙең "Яҙғы йыр", Мостай Кәримдең "Яңғыҙ ҡайын" пьесаларын да ул сәхнәләштерә, әм был спектаклдәр тамашасы өйөүен яулай.

Бөйөк актерға Башҡортостандың (1935) әм Рәсәйҙең (1944) атҡаҙанған

артисы, Рәсәй Федерация ының (1949) әм СССР-ҙың (1955) халыҡ артисы тигән юғары исемдәр бирелә. Ул “Почет Билдә е” (1944), Ленин (1949), Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ (1955) ордендары менән бүләкләнә. Егерме йылға яҡын Башҡортостан Юғары Советы депутаты була. Салауат Юлаев исемендәге республика дәүләт премия ы лауреаты (үлгәндән уң — 1980 йыл).

Асы музейында ошо юғары бүләктәр тура ында тулы мәғлүмәтле стендтар эшләнгән, Маҡтау грамоталарының, ордендарҙың күсермәләре ҡуйылған. Отелло ролен уйнағанда кейгән костюмы, гастролдәрҙә йөрөткән күн сумаҙаны, төрлө фотолары бар.

Бында шулай уҡ Арыҫлан Мөбәрәковтың ҡатыны, күренекле актриса, шағирә әм драматург Рәғиҙә Янбулатова тура ында ла материалдар күп. Ҡәҙерле ҡомарткыларҙың бере е — йәшел ҡашлы көмөш йөҙөк. Уның тарихы былай. 1935 йылда Рәғиҙә Янбулатова Өфө сәнғәт техникумының атаҡлы Булат Имашев класын тамамлап, Башҡорт академия драма театрына эшкә килгәс, Мөхәмәтша Буранғоловтың “Башҡорт туйы” спектаклен ҡуйған мәлдә Арыҫлан Мөбәрәков, яйын тура килтереп, ҡыҙҙың йөҙөгөн алдырып ала ла үҙенең сәтәкәй бармағына кейҙереп ҡуя.

Икенсе көндө репетицияла егет кеше, йылмайып, Рәғиҙәгә ҡарай ҙа сәтәкәй бармағындағы йөҙөгөн үбеп ала. Шунан улар дуҫлашып китәләр әм өйләнешәләр. Йәшел ҡашлы йөҙөк янына Рәғиҙә Янбулатованың бына ошо шиғыры ла яҙып ҡуйылған:

*Йәшел ҡашлы йөҙөккәйем,*
*индә минең йәшлеккәйем.*
*Ҡулымдан алдырып бер саҡ*
*Алды ине аҫыл бер зат.*
*Ул зат ине омғол бер егет,*
*Үҙе йөҙөк ҡашы кеүек...*
*Әнсә* бармағына кейеп,*
*Ул йөҙөктө наҙлап үпте.*
*Миңә ҡарап йылмайҙы әм*
*Йөрәгемә осҡон ипте.*
*“Ҡараҡ” егет йөҙөгөмдө*
*Ләкин кире ҡайтарманы.*
*Өҫтәүенә, йөрәгемде,*
*Күңелемде ул яуланы.*
*Алтын, бриллиант та түгел,*
*Ябай ғына көмөш йөҙөк.*
*Ләкин йөҙөктөң ҡашында*
*Йәшерен серҙәр ята кеүек.*
*Миңә ҡал а, ул аман да*
*Йәмле яҙҙың ал таңында*
*Тыуған тәүге мөхәббәттең*
*Серҙәрен бит аҡлай кеүек...*
*Йәшел ҡашлы йөҙөк...*
*Миңә бик ҡәҙерле йөҙөк!*



*Арыҫлан Мөбәрәковҡа Белорет районы Асы ауылында ҡуйылған бюст.*

Музейҙың байтаҡ өлөшө Арыҫлан

*Әнсә – (диал.) сәтәкәй бармаҡ.

Мөбәрәков менән Рәғиҙә Янбулатованың ҡыҙы, Башҡортостандың әм Рәсәй Федерация ының атҡаҙанған, Рәсәй Федерация ының әм СССР-ҙың халыҡ артистка ы Гөлли Мөбәрәковаға бағышланған. Ата-әсә е менән төшкән фотоларҙан тыш, төрлө спектаклдәрҙән күренештәр, сәхнә кейемдәре, көнкүреш әйберҙәре бар.

Бөйөк актер, режиссер әм драматургтың музейында булған әр кем, сәнғәт ә елдәренең тормошо әм ижады менән танышыуынан хисләнеп, тәьҫораттарын, уй-фекерҙәрен альбом-китапҡа яҙып ҡуя ла, Рәғиҙә Янбулатованың өйөклө ире Арыҫлан Мөбәрәковҡа бағышланған шиғырын ҡат-ҡат уҡый-уҡый, яй ғына атлап урамға сыға... Башын күтәреп, Асы ауылын уратып алған тауға ҡарай, ә тауҙар, гүйә, данлы улын ағынып, бөрсөк-бөрсөк йәштәрен ағыҙа кеүек...

Рәғиҙә ЯНБУЛАТОВА

Арыҫлан Мөбәрәковҡа

*Төштәремә инә ең йыш*
*Йә йылмайып,йә моң оулы.*
*Ҡарашың утә ағышлы —*
*ағыныуҙар менән тулы.*
*Имеш, тимен, йәш сағыбыҙ.*
*Йөрәктә өйөү бары.*
*Дошмандарҙың арабыҙға*
*Әле инмәгән сағы.*
*Шатморат, Ҡарлуғас булып*
*Уйнайбыҙ сәхнәләрҙә...*
*Сәхнә бер саҡ әүерелә*
*Киң ялан-сәхрәләргә...*
*Төштәремә инә ең йыш,*
*Эйә ең баштарыңды.*
*Күҙҙәремә ҡарай ың да*
*Әйтә ең: "Ташланыңмы?"*
*ин бит мине ташлап киттең*
*Мәңге ҡайтмаҫ ерҙәргә.*
*Күңелемде яраланың,*
*алдың ғазап-сирҙәргә.*
*Исемеңде телгә алып*
*Ҡорор инде тәҡәтем.*
*Төштәремә инә ең йыш —*
*Мәңгелек мөхәббәтем!*

Эйе, Арыҫлан Мөбәрәков, ысын-ысындан башҡорт халҡының мәңгелек мөхәббәте ул!.. Тауҙар ҙа, кешеләр ҙә уны ағына…

**Фәнис ЯНЫШЕВ.**

***

Республика йортонда Президентыбыҙ М.Ғ. Рәхимов Рәсәй Яҙыусылар союзы идара ы рәйестәше, шағир, драматург К.В. Скворцовҡа Башҡортостан Республика ы ның Почет грамота ын тапшырҙы әм билдәле әҙәбиәтсенең Башҡортостан — Силәбе өлкә е мөнәсәбәттәрен үҫтереүгә ҙур өлөш индереүен билдәләне.

***

Өфөлә беренсе тапҡыр "Урал әм Волга буйында Исламдың мәғрифәтселек традициялары: Беренсе Фәхретдинов уҡыуҙары" Бөтә Рәсәй ғилми-ғәмәли конференция ы уҙҙы. Конференция билдәле мәғрифәтсе Ризаитдин Фәхретдиновтың тыуыуына 150 йыл тулыуға арналды. Рәсәй өсөн дә, Урал әм Волга буйы төбәктәре өсөн дә ә әмиәтле был сарала Рәсәйҙәге мосолман мәғрифәтселегенең әм мәғарифының тарихы әм хәҙерге торошо барланды, Ризаитдин Фәхретдиновтың мираҫын мәңгеләштереү менән бәйле проблемалар күтәрелде.

***

“Ил ам шишмәләре” Бәләбәйҙә ун икенсе тапҡыр уҙғарылды. Быйылғы ында Бәләбәй район әм ҡала муниципаль биләмә е башлығы Ю. Мурмилов, Башҡортостан Республика ының Премьер-министры урынбаҫары, мәҙәниәт әм милли сәйәсәт министры И. Илешев ҡатнашты.

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе урынбаҫары, С. Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты Ҡ. Аралбаев, С. Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаттары Х. Назар, И. Кинйәбулатов, БДУ профессоры, яҙыусы Т. Килмөхәмәтов, шағирҙар Р. Сабит, А. Хөсәйенов, С. Чураева, “Шоңҡар” журналының баш мөхәррире А. Юлдашбаев, Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошма ынан З. Йәнбирҙина, Сибай яҙыусылар ойошма ы етәксе е Х. Тапаҡов, прозаик Ф. Аҡбулатоваларҙың килеүе байрамға йәм өҫтәне.

Башҡорт, татар, сыуаш лицейҙарында, Приют ауылында әҙәби-музыкаль кисәләр үтте. Педагогия колледжындағы осрашыу Фәтих Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыуға бағышланғайны. Унда фронтовик-шағирҙың ҡыҙы Л. Кәримова, Татарстандың билдәле ҡәләм оҫта ы, яҡташыбыҙ Р. Вәлиев, “Ағиҙел” журналының бүлек мөхәррире, Ф. Кәрим исемендәге премия лауреаты Т. Ғәниева менән Р. Хәкимйән сығыш я аны.

Шағир Әсхәл Әхмәт-Хужаға гала-концертта Ф. Кәрим исемендәге премия, төрлө номинацияларҙа еңеүсе тип табылған шағирҙарға бүләктәр тапшырылды. Гран-приға и ә Учалы егете Фәнил Бүләков лайыҡ булды.

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзы ойошторолоуға 75 йыл тулыу айҡанлы республикабыҙҙа Башҡорт әҙәбиәте көндәре башланды. Тәүге байрам Ҡалтасы районында уҙҙы. Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе урынбаҫары шағир Ҡәҙим Аралбай етәкселегендәге төркөмдө – Ирек Кинйәбулатов, Рәшит Низамов, Рәмил Йәнбәк, Рәдиф Тимершин, Хисмәт Юлдашев – район хакимиәте башлығы Р. Ғ. Нуретдинов ҡабул итте. Артабан әҙиптәр район үҙәкләштерелгән китапхана ында халыҡ менән осрашты, тыуған яҡты өйрәнеү музейы менән танышты.

Ҡыҙыл Түбә ауылындағы 1-се әм 3-сө мәктәптәрҙәге, башҡорт әм татар милли үҙәгендәге әҙәби кисәләр ҙә ихлас, фә емле, юғары кимәлдә булды. Яҙыусылар Ҡалтасы район үҙәгендәге мәҙәниәт йортонда матур байрам уҙғарҙы, был төбәктә башҡорт телен өйрәнеүгә, әҙәбиәт әм мәҙәниәтен үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленеүен билдәләне.

***

“Сибайский рабочий”, “Атайсал” гәзиттәре ҡалаға Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев киләсәген иғлан иткәс, уны күрергә теләүселәрҙең иҫәбе- аны булманы.

“Йәштәр үҙәге”ндә осрашыуға әҙип

менән бергә уның тормош иптәше Фәриҙә Яҡуп ҡыҙы әм БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Эльвира Юнысова, ҡала хакимиәтенән Илгиз Хәйруллин, Гөлназ Аҡназарова килде. Ғ. Бикташев бында Рауил Төхфәт улы үҙҙәренә Ә. Бикташева яҙған “Бәпембә” йырын башҡарҙы. Залда Р. Бикбаев ижады буйынса викторина ла ойоштороолдо.

А. Мөбәрәков исемендәге башҡорт драма театрында халыҡ актерҙар башҡарыуында “Халҡыма хат” поэма ын тыңланы. Юбилярҙы ҙурлап Сибай ҡала ы ҡала округы хакимиәте башлығы Ф.Ф. Айҙарбәков, Хәйбулла районы район хакимиәте башлығы Р. А. Бикбов, Баймаҡ районы район хакимиәте башлығы урынбаҫары Ә. . Байсурин, Әбйәлил районы район хакимиәте башлығы урынбаҫары Ф.С. Сәғитов .б. телмәр тотто. ауыҡтырыу үҙәгендә ҡунаҡтарҙы Р. Бикбаевтың шиғырҙарын тасуири өйләп ҡаршы алдылар. Артабан күренекле шәхестең юлдары Сибай институтына боролдо. Осрашыу уңында шағир ораyҙарға яуап бирҙе, йәштәр менән фотоға төштө.

***

Филармонияның Бәләкәй залында күренекле прозаик, дәүләт эшмәкәре Ғәлим Хисамовтың 60 йәшенә арналған кисә уҙҙы. Сараның тәүге өлөшө әңгәмә (Ғ. Хисамов – Ә. Үтәбай) юҫығында уҙ а, икенсе өлөшөн ҡотлауҙар әм концерт биҙәне. БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Р. Т. Бикбаев әҙипкә республикабыҙ етәкселеге, Яҙыусылар союзы идара ы исеменән адрестар тапшырҙы. Юбилярҙы гәзит-журналдар мөхәррирҙәре, нәшриәттәр директорҙары, эшҡыуарҙар, яҡташтары – көйөргәҙеләр ҙә ихлас ҡотланы.

***

Башҡортостан Яҙыусылар союзында шағир Зөфәр Вәлиткә (Зөфәр Зәки улы Вәлитов) алтмыш йәш тулыу уңайынан әҙәби кисә уҙҙы. Юбилярҙы ҡәләмдәш дуҫтары, бергә эшләгән иптәштәре тәбрикләне, юбиляр шағир йыйылыусыларға яңы әҫәрҙәрен уҡыны.

***

Мәжит Ғафуриҙың Өфөләге мемориаль йорт-музейында Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, рәссам Абдулла Абдулатиповтың ижади эштәренән торған үҙенсәлекле күргәҙмә эшләй башланы. Ул Башҡортостан Яҙыусылар союзының 75 йыллығына арнала. Бында яҙыусылар ойошма ының тәүге етәкселәре, үткән быуаттың утыҙынсы йылдарында репрессияланып атылған Афзал Та иров, Булат Ишемғол, Ғабдулла Амантай, унан уң килгән быуын әҙиптәре Зәйнәб Биишева, Яҡуп Ҡолмой, Динис Исламов, Ә ли Хисам әм әҙәбиәттең хәҙерге вәкилдәре Таңсулпан Ғарипова, Наил Ғәйетбай, Гөлфиә Юнысоваларҙың ижади портреттары, Башҡортостандың төрлө төбәген сағылдырған пейзаждар, яҙыусыларҙың китаптары әм башҡа ҡомартҡылар ҡуйылған.

Күргәҙмәне асыу тантана ында Башҡортостан Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе урынбаҫары Ҡәҙим Аралбай, Республика Рәссамдар союзы идара ы рәйесе урынбаҫары Йәлил Сөләймәнов, М.В.Нестеров исемендәге Республика художество музейы директоры Фәйзрахман Исмәғилев, Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Риф Абдуллин, Башҡорт дәүләт аграр университеты профессоры Хәсән Әхмәров, Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты доценты Миңлевасиҡ Абдуллин, "Башҡортостан уҡытыусы ы" журналының баш мөхәррире Салауат Кәримов, Төхфәт Йәнәбиҙең яҡын туғаны Гөлсөм Лоҡманова әм башҡалар ҡатнашты.

***

Фажиғәле вафатына 90 йыл тулыу айҡанлы, Шәйехзада Бабичтың йәнтөйәге Әсәндә ҡәҙер әм хәтер кисә е үтте.

Яҙыусылар союзы идара ы рәйесе урынбаҫары Ҡ. Аралбаев, шағир И. Кинйәбулатов, « әнәк» журналының баш мөхәррире М. Сәлимов, Ш. Бабич исемендәге йәштәр премия ы лауреаты Т. Дәүләтбирҙина, тыуымышы ошо ауылдан йырсы Р. Динәхмәтовты дүртөйләләр ихлас ҡаршыланы.

әйкәлгә сәскәләр алыу, шағир музейын ҡарау... Волейбол турниры ла шағир иҫтәлегенә арналғайны. Кисәлә ауыл хакимиәте башлығы Т. Нәбиев бөйөк яҡташы тура ында рухланып өйлә ә, әҙиптәр ҙә Бабич шиғриәтенең бөйөклөгө хаҡында әйтте, ә әүәҫкәрҙәр ил амлы концерт күр әтте.

***

Шишмә районы мәҙәниәт йортонда яҡташтары, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премия ы лауреаты, фронтовик-шағир Муса Ғәлиҙең тормошона әм ижадына арналған күсмә күргәҙмә асылды. Башҡортостан

Милли әҙәбиәт музейы тарафынан әҙерләнгән был күргәҙмә күренекле шағирҙың тормошон әм ижадын төрлө яҡлап яҡтыртҡан бай экспонаттары менән ә әмиәтле. Бында шағирҙың шәхси әйберҙәре, байтаҡ ҡулъяҙмаларының төп нөсхәләре, китаптары, фотолары ҡуйылған.

Күргәҙмәне асыуға Өфөнән шағирҙың замандаш ҡәләмдәштәре Ҡәҙим Аралбай, Ирек Кинйәбулатов, Башҡортостан Милли әҙәбиәт музейының генераль директоры Гөлдәр Моратова, Муса Ғәлиҙең ҡатыны Рәйлә Ғәлиева килде.

Күргәҙмәне асҡанда Ҡ. Аралбай менән И. Кинйәбулатов остаздары хаҡында иҫтәлектәре әм уға арналған шиғырҙары менән сығыш я аны. Райондың әүәҫкәр артистары М. Ғәли шиғырҙарына яҙылған йырҙар башҡарҙы, концерт ойошторҙо. Был сараның Бөйөк Еңеү көнө алдынан уҙғарылыуы айырыуса ә әмиәтле ваҡиға булды.

***

Баш ҡаланың М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт муниципаль лицейында (директоры – Ш. Хәбибрахманов) башҡорт теле әм әҙәбиәте уҡытыусы ы Г. Ғәзизуллина “Әҙәбиәт әм матбуғат” тигән дәрес ойошторҙо. Унда «Ағиҙел» журналынан баш мөхәррир урынбаҫары Р. Йәнбәков, яуаплы сәркәтип Г. Ҡотоева әм бүлек мөдире С. Шәрипов сығыш я аны, балалар и ә уларҙың әҫәрҙәрен ятлап-сәхнәләштереп күр әтте, орауҙарына яуаптар алды.

***

Яҙыусы, ғалим Роберт Байымов менән "Ағиҙел" журналының баш мөхәррире Әмир Әминев БДУ-ның Сибай институты студенттары, уҡытыусылары менән осрашты. үҙ, нигеҙҙә, ошо йылдың ғинуар, февраль айҙарында журналда донъя күргән "Каруан килә Бағдадтан" романы хаҡында барҙы. Студенттар әҫәр хаҡында өйләне, бәхәс ҡорҙо, авторға орауҙар бирҙе, сәхнәләштерҙе. Иркен фекер алышыу төҫөн алған был диалог ике яҡ өсөн дә файҙалы булды.

Ошондай уҡ әҙәби осрашыу ҡаланың үҙәк китапхана ында ла үтте. "Йәшлек" гәзитенең Р. Солтангәрәев исемендәге хикәйәләр конкурсы еңеүселәре өсөн "Ағиҙел" журналы махсус бүләген вәғәҙәләгәйне. Әмир Әминев редакция приздарын Рүзидә Үтәшева менән Рәмилә Торомтаеваға тапшырҙы. Ғөмүмән, был осрашыуҙа бөгөнгө әҙәбиәт, атап әйткәндә, йәштәр проза ы тура ында, журналда сыҡҡан әҫәрҙәр, әҙиптәрҙең үҙ ижады хаҡында ҡыҙыҡлы үҙ булды. Әҙәбиәт өйөүселәр, журнал уҡыусылар менән ошондай осрашыу йәнә лә Баймаҡ ҡала-район үҙәкләштерелгән китапхана ында ла уҙғарылды.

***

Силәбе өлкә енән сығып башҡорт мәҙәниәтенә әм фәненә тос өлөш индергән шәхестәр бик күп. Шулар ара ынан башҡорт халҡы өсөн янып-көйөп йәшәгән атаҡлы философ-ғалим Дамир Жәүәт улы Вәлиевты ла телгә алыу зарур: уның исемшәрифе донъяның "иң-иң" йөҙ философы исемлегенә индерелгән. Д. Вәлиев иҫтәлегенә Арғаяш районында ғилми-ғәмәли конференция булып үтте. Унда Силәбе әм Өфө ҡунаҡтары, башлыса ғалимдың уҡыусылары – бөгөнгө ғалимдар, шулай уҡ ҡәрҙәштәре сығыш я аны. Д. Вәлиев исемендәге Яңы Соболевка мәктәбе музейын ҡарағандан уң, улар данлы яҡташтары ҡәберенә зыярат ҡылды, Арғаяш ҡасаба ы-ның 1-се мәктәбендә ойошторолған конференцияла ҡатнашты.

***

Рәмзилә Хисаметдиноваға 60 йәш тулған булыр ине... Арабыҙҙан 46 ғына йәшендә киткән шағирә талантлы мираҫ ҡалдырҙы. Учалы яҙыусылар ойошма ы уның иҫтәлегенә арнап саралар уҙғарып тора. Уҡытыусы Р. Кәлимова әҙерләгән осрашыуҙа шағир-сәсән Мәүлит Ямалетдин ҡурайын тотоп сыҡ а, уны ҡәләмдәше Ф. Хәсәнов баяны менән алмаштырҙы, Ә. Әбүзәрова, Ә. Пирғәлина ағышлы хәтирәләргә бирелде. Киләсәктә районның Сәфәр мәктәбендә шағирәнең музейын ойоштороу тура ында фекер ҡуҙғатылды.

***

Өфөлә милли мәғарифты әм милли мәҙәниәтте яҡлау буйынса митинг ойошторолдо. Унда ораторҙар «Мәғариф тура ында» Федераль закондың яңы редакция ы РФ Конституция ына ҡаршы килеүенә риза ыҙлыҡ белдерҙе.